МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН
БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ ПЕДАГОГИЧЕСКИЙ
УНИВЕРСИТЕТ им.М.АКМУЛЛЫ
ЦЕНТР РАЗВИТИЯ ОДАРЁННОСТИ ШКОЛЬНИКОВ
ФАКУЛЬТЕТ БАШКИРСКОЙ ФИЛОЛОГИИ
КАФЕДРА БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА И МЕТОДИКИ ЕГО
ПРЕПОДАВАНИЯ

# ТЫУҒАН ЯҠ: ТОПОНИМДАР ҺӘМ ҺӨЙЛӘҮ ТЕЛЕ

Диалектология һәм ономастика буйынса һәләтле уҡыусыларҙың
III Республика ғилми-ғәмәли конференция материалдары

23 март 2017 йыл

**3-сө** йыйынтыҡ

# РОДНОЙ КРАЙ: ТОПОНИМЫ И РАЗГОВОРНЫЙ ЯЗЫК

Материалы III Республиканской научно-практической
конференции одарённых школьников
по диалектологии и ономастике

23 марта 2017 г.

Сборник № **3**

**Өфө 2017 Уфа**

**УДК 811.512.141**
**ББК 81.2Баш**
**Т93**

*Печатается при поддержке Благотворительного фонда «УРАЛ»*

**Редакционная коллегия**

**Усманова Минсылу Губайтовна** — доктор филологических наук, профессор БГПУ им.М.Акмуллы (ответственный редактор);
**Балапанова Лилия Салаватовна** — кандидат филологических наук, преподаватель кафедры башкирского языка и методики его преподавания БГПУ им.М.Акмуллы.

**Родной край: топонимы и разговорный язык:** материалы III Республиканской научно-практической конференции одаренных школьников по диалектологии и ономастике 23 марта 2017 г. Уфа: Мир печати, 2017. — 164 с.

В сборнике представлены материалы III Республиканской научно-практической конференции одаренных школьников по диалектологии и ономастике, прошедшей 23 марта в Башкирском государственном педагогическом университете им.М.Акмуллы на факультете башкирской филологии. Работы посвящены вопросам башкирской диалектологии и ономастики: рассматриваются некоторые особенности лексики говоров башкирского языка, фонетическое варьирование слов; содержатся исследования по ономастике.

Сборник рекомендуется школьникам, студентам, аспирантам, учителям башкирского языка и литературы, истории, культуры Башкортостана, а также всем, кто интересуется краеведением, проблемами диалектологии и ономастики.

ISBN 978-5-9613-0496-1

© Коллектив авторов, 2017
© КП РБ Изд-во «Мир печати», 2017

## БАШ ҺҮҘ

### Хөрмәтле уҡыусылар, фәнни етәкселәр!

Был йыйынтыҡҡа М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның “Дистанцион мәктәп академияһы ”Успех” тарафынан диалектология һәм ономастика буйынса үткәрелгән конкурста һәм III Республика ғилми-ғәмәли конференцияһында (23 март 2017 йыл) ҡатнашҡан һәләтле уҡыусыларҙың материалдары тупланды. Уларҙың төп нөсхәһе һаҡланды,  әммә бер аҙ ҡыҫҡартып бирелде.

Ин беренсе, тормоштан артта ҡалырға тырышмаған, яңылыҡтар менән ҡыҙыҡһынып, сайттарға инеп ҡарап, беҙҙең иғлан иткән проектты табып, унда ҡатнашырға йөрьәт иткән уҡыусыларға һәм уларҙы етәкләгән уҡытыусыларға ҙур рәхмәт.

Шуны ла әйтәбеҙ: эш һөҙөмтәһе һәйбәт килеп сыҡты. Уҡыусыларҙың Өфө һынлы Өфөгә конференцияға килеп, тыуған яғының ер-һыу атамалары, һөйләше тураһында ҙур ғорурлыҡ менән тулҡынлана-тулҡынлана, тырыша-тырыша һөйләүҙәрен күреү иҫ киткес ғәжәп бер мәлдәрҙең береһе ине.

Ысынлап та, һәр бер уҡыусының телендә яңғырағанса, ер-һыу атамаларын да, ерле һөйләш үҙенсәлектәрен сағылдырған һүҙҙәрҙе лә йыйып ҡалырға кәрәк: беренсенән, уларҙың ҡайһы берҙәре тарихи факттарҙы дәлилләүҙә төплө материал булып тора; икенсенән,  уларҙың күбеһе, үкенескә ҡаршы, онотолоп, телдән төшөп ҡала бара. Күп атамалар үҙгәртелә, яңы исем менән йөрөй башлай. Беҙгә ошо атамаларҙың бөтәһен дә (яңыларын һәм иҫкеләрен,   мәҫәлән, элек булып та, хәҙер юҡҡа сыҡҡан ер-һыу атамаларын — *һөрөлгән сабынлыҡ, ҡырҡылған ағаслыҡ, ҡороған йылға, күл, шишмәләр, бөткән ауыл* исемдәрен һ.б.; элек тотонолоп, хәҙер булмаған предмет исемдәрен; айырым төбәктә генә осраған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, фразеологик берәмектәрҙе) бик ентекләп йыйырға кәрәк. Тик уларҙың барыһын да халыҡ нисек әйтә, шул көйө, үҙгәртмәй, боҙмай, ерле һөйләш телендә яҙыу мотлаҡ. Шунда ғына уларҙың фәнгә әһәмиәте ҙур була, сөнки улар һеҙҙең тыуған яҡ тураһында өнһөҙ һөйләгән фактик материал — дәлил. Шуға күрә уҡыусылар йыйған материал йыйынтыҡта үҙгәртелмәй, ерле һөйләш телендә бирелә.

Ҡәҙерле уҡыусылар, һеҙ конкурста ҡатнашып, үҙегеҙҙең ауылығыҙ тураһында бик күп мәғлүмәт йыйған белгес булып киттегеҙ һәм ошо йыйынтыҡ аша башҡаларҙы ла үҙегеҙҙең яҡ менән таныштыра алдығыҙ.

Тыуған яҡты өйрәнеүҙе артабан да дауам итегеҙ. Был бик кәрәк һәм мауыҡтырғыс эш. Һеҙгә уңыштар теләйбеҙ. Ошо проектта тағы ла ҡатнашығыҙ! Беҙ һеҙҙе ихлас көтәбеҙ.

Проект еткәсеһе: филология фәндәре докторы,
М. Аҡмулла исемендәге БДПУ профессоры
М.Ғ. Усманова

**Атауллина Лилиә Флюр ҡыҙы**
Фәнни етәксеһе: **Ғәниева Райза Рәфил ҡыҙы**

## БЕЛОРЕТ РАЙОНЫ ЙӨЙӘК АУЫЛЫНЫҢ ТОПОНИМДАРЫ

Һәр кемдең тыуған ере берәү генә була. Йылдар үтеп, ғүмер уҙып, илдәр гиҙеп күпме генә йөрөмәһен, кеше йәнтөйәге хаҡында хәтирәне күңеленең иң түрендә һаҡлай, кендек ҡаны аҡҡан, тәүләп тәпәй баҫҡан тупрағын һәр саҡ һағына, шунда ашҡына. Ундағы һәр аҡлан, шишмә, тау әйтеп биргеһеҙ ҡәҙерле, сөнки ул бала саҡтың ғәзиз мәлдәре, донъялағы иң яҡын кешеләре — ата-әсәһе, олатай-өләсәләре, туғандары, дуҫтары хаҡында иҫтәлектәр менән бәйләнгән. Сит кеше ҡолағына ят булған атамалар шул төбәктә тыуып үҫкәндәр өсөн шул ҡәҙәр ғәзиз. Ошо атамаларҙа әллә нисәмә быуаттар элек ошонда йәшәгән кешеләр хаҡында хәтирәләр, тыуған ерен дошмандарҙан һаҡлап йәнен аямаған ҡаһармандар, халыҡ тарихындағы фәһемле ваҡиғалар, мәрәкә кешеләр, көлкөлө хәлдәр хаҡында иҫтәлектәр һаҡлана. Әммә ваҡыт үтеү, заманалар үҙгәреү менән халыҡ хәтеренән ҡайһы берҙәре аҡрынлап юйыла бара. Ни тиклем үкенесле булмаһын, бақыйлыҡҡа күскән һәр быуын үҙе менән баһалап бөткөһөҙ рухи хазиналарҙың күпмелер өлөшөн мәңгелеккә алып китә. Шуға күрә ер-һыу атамаларын, уларға ҡағылған тарихтарҙы, легендаларҙы ваҡытында теркәп алып ҡалыу, уларҙы киләсәк быуындарға еткереү — изге бурысыбыҙ.

### Йөйәк ауылы тарихынан

Йөйәк ауылын йән яҡлы таулар уратып алған. Ауылтың уртаһынан Инйәр йылғаһы аға. Әүәле кеше йәшәргә һыу буған урыннар һайлаған. *Йөйәк* ауылының атамаһы ла шул йылға исеменән алынҡан.



Риүәйәт буйынса, ауылға Ҡолман тархантың улларының береһе нигеҙ һала.

Йылға исеме “*Йөй*” тигән һүҙҙән барлыҡҡа килгән. Сөнкей, йылға яҙ көнө ярларынан сығып, ярҙы ашап, икенсе ерҙән аға, ә элекке аҡкан ерентә үлән баҫып бөтөп “йөй”ләр ҡалдыра. Ауыл янындағы Аҡтау башынан йылға тамағына таван ҡараһаң, яланнар шунтай йөйләр менән сыварланҡан.

Йөйәк *һөйәктән* барлыҡҡа килгән, йылғаға ҡорбан итеп салған малдың һөйәген ташлағандар тип тә әйтәләр.

Ауылдашыбыҙ, шағирә Гүзәл апай Ситдыҡова монгол телендә “*зөөг*” һүҙе — “һыуыҡ” тигәнде аңлата, ә “з” менән “й” ул телдә аралашып килә. Бәлки, Зөйәк — Йөйәк “һыуыҡ йылға” булырға мөмкиндер, тип фаразлай.

Ауыл халҡы башлыса тәүге вариантты дөрөҫө тип иҫәпләй. Ә бына, ауылыбыҙҙың билдәле тарихсыһы Ринат Гәрәй улы Шәйбәков үҙенең “Тыуған төйәк тарихы” тигән китабында “Йөйәк”тең “Зөйәк”кә әүерелеүе тураһында былай ти:” Был руссаға тәржемәнең кире башҡортсаға калькаланыуынан килеп сыҡҡандыр. XVIII-XIX быуатта рус документтарында ауыл *Зюяково* тип яҙыла, төркисәнән руссаға был тәржемәлә *Юяково* тигән варианты ла бар. Тимәк, ауыл исеме руссаға *Юяково-Зюяково* тип ауҙарылған, һуңғараҡ урыҫ теленә лә яраҡлаштырылып, *Зуяковоға* әйләнгән. Йылға исеменән алынғас, ауыл исеме уға *“-ово*” ҡойроғо тағылырға тейеш түгел, ул *Зуяк* ҡына булырға тейеш. Крайҙы өйрәнгән М.Ф. Чурко (30-сы йылдарҙа репрессиялана) яҙмаларында ауыл тик *Зуяк* формаһында яҙыла. Ауылдың ике төрлө аталып йөрөтөлөүе совет власы урынлашҡас барлыҡҡа килгән. Оло быуын кешеләре генә *Йөйәк* формаһын ҡулланған.”

Хәҙерге ваҡытта *Йөйәк* тигән атама телдә лә, яҙмала ла ныҡлап үҙ урынын алды. Матбуғат баҫмаларында *Йөйәк* ауылы тип яҙалар, мәктәптә дәфтәр тыштарында ла *Йөйәк мәктәбе* тип исемләйбеҙ.



Шулай итеп, ауыл элек *Йөйәк* йылғаһы буйында урынлашҡан булһа, (хәҙер ул урында сабынлыҡтар *Иҫке ауыл* исеме менән йөрөтөлә) әлеге урында нигеҙ һалыныуы 1833 йылға ҡайтып ҡала. 1833 йылда Ырымбур генерал-губернаторы утарҙарҙа йәшәүҙе тыйғас, бер нисә урында утар булып ултырған *туғанаш араһы* халҡы (улар ауылдың төп халҡын тәшкил иткән) бер урынға йыйылырға мәжбүр була. Инйәр йылғаһы буйына күсенеп төпләнгәндәр. Бына шул турала тағы ла бер риүәйәт-легенданы Ринат Гәрәй улы 1906 йылғы Әбсәләмов Мәхмүт бабайҙан 1983 йылда яҙып алған һәм үҙенең хеҙмәтендә сағылдыра. “Элек ауыл бы ерҙә бумаған.Түвәнке ауылта Һивәт исемле ҡарт йәшәгән. Иҫкауылта, у мәсетле төвауыл буған, ҡаған халыҡ йәшәгән. Шунан Һивәт ҡарт Түвәнке ауылтан Инйәр вуйына күсеп ултырған та ҡаған халыҡты ла Инйәр вуйына күсерергә һорап прашение яҙған. Аҙаҡ Иҫкауылтағы халыҡты ла быурынҡа күсергәннәр. Һивәт ауылтың байы вуған, уның нәҫелен *Һивәтисләр* тип йөртәләр.

**Һибәт араһы.** 1925 йылғы Солтанов Әхмәҙғәле бабай *Һибәт араһы* тураһында Ринат Гәрәй улына былай тип һөйләгән:

“Йөйәк ауылының әлеге урынына башлап *Һивәт ҡарт* килеп утырған. Уға тиклем һалыҡ *Йөйәк йылғаһы* буйынта төрлө утарҙа йәшәгән. *Үрғышлау*, *Арағышлау* исемнәре шунан ҡаған. Йәйен *Арҡайортта* йәйләгәннәр, көҙөн Көҙгөйортта ҡышлауға ҡайтыр алтынан булғаннар. Күп кеше утарларҙа ғына малын ҡараған (*Шәмей, Әлевай, Аҙнавай, Сәлим, Килтегол утарлары* исемнәре шунан ҡаған). Һуңҡараҡ *Иҫкауыл* тигән ерҙә йәшәгәннәр. Шунан *Һивәт* исемне ҡарт бик байып киткән, уның ҡырҡ ваш һауын һыйыры,

тукһан туғыҙ ваш бейәһе буған. Үҙенең энеләре, тыуған-тыумасалары менән Йөйәк йылғаһы вуйлап түвәңкәрәк күсеп утырған, у урын әле *Түвәңкауыл* тип йөртөлә. Аҙаҡ Һивәт быурынты ла ташлап китеп, Инйәр йылғаһының уң ярына, әле *Таш төвө* тип йөртөлгән ергә килеп утырған. Элек ауыл урыны тотош ҡарағайлыҡ вуған, Инйәр тар, тәрән вуған. Ҡарағайларҙы йыҡһаң, осо икенсе ярға варып ятыр буған. Әле генә у яр ашалывөттө, Инйәр һайыҡты, ағаслар ҡырҡылывөткәс ней.

Һивәт ҡарт, яңҡыҙыма ылау савыу ҡыйын тип, ҡаған һалыҡты ла Инйәр вуйына күсереүләрен һораған. Ауылға үрәтник килеп, һалыҡты әлеге урынҡа күсергәннәр. Солтанҡәле олатай аҙаҡ *Ғәптүккә*, *Ҡарағай яры* тигән ерҙең ташын аҡтарып, арва менән үтерлек юл һаған. Ҡолвай исемле олатайҙан *Ҡолвай кылыһы* тигән ер тороп ҡаған. Һивәттән ҡалған нәҫелте "*һивәтисләр*" тейләр (*Хужиннар, Әбәйҙуллиннар, Сәғәҙәтовлар, Солтановлар*). Солтановларҙы тағы ла " *һуна*" тип тә йөртәләр. Бер олатайывыҙ бик оҫта ҡурайсы буған, өзләүгә лә оҫта буған. Ҡайы берәүләр өзләүен "һуна үрҙәк кеүек пышҡылтап тик утыра" тигән тә, уға "*һуна*" ҡушаматы йәвешкән тә ҡуйған."

**Изгеләр зыяраты.** Оло ялан тигән урынта *Изгеләр зыяраты* (*Яҡшылар зыяраты* тип тә йөрөтәләр) бар. Унда бөтә Ҡатай еренән күренекле кешеләрҙе килтереп ҡуйғаннар. Тик унта ҡәбер ташлары ла башҡа билтәләр ҙә беленеп бармай, серлелеге менән айырыла был урын. Риүәйәт бында ҡасантыр бик күренекле кешене ҡуйғаннар, аҙаҡтан уның янына Ҡатай иленән кемте «яҡшылар» иҫәвенә интергәннәр — шуларҙы килтереп ҡуйғаннар.

**Ҡаратау.** *Ҡаратау* айырылып тора. Ылыҫлы ағастар күп булғас ул алыҫтан ҡарайып күренә. Киске эңерҙә был тау бигерәк ҡап-ҡара булып тора. Бында көртмәле күп була, халыҡ өй күтәреүгә мүген ала.

**Ырыҫҡол тауы (Ырыҫҡол бейеге).** Салауат Юлаев көрәштәше *Ырыҫҡолто* дошманнар ҡамап тотам тигәнтә ҡаянан аты менән *Туғанаш ятыуына* һикереп (ул ҡая Ғәбдүк ауылынан аҫтараҡ, уны тимер юл тоннеле тишеп үтә) ҡаса, Инйәр буйлап килеп *Манажы тамағынан* әле *Ырыҫҡол бейеге* тип йөрөтөлгән тауға менеп *Бирйән һыртынан* юл яҙҙырған.

**Байлар ҡунған.** Өфө-Биләрит юлынта Ҡолмас менән Йөйәк араһынта "*Байлар ҡунҡан*" тигән ер бар. Шул исемтә йылға ла бар. Уның исеме Инйәр заводы хужаһы Дервиз менән бәйле. Ул Инйәр заводын һалтырған, ғәйләһе Германияла йәшәгән. Бер уаҡыт уларҙың та заводты күргеләре килгән. Ҡатыны, улы, ҡыҙлары, хеҙмәтселәре, һалдатлары менән килгән саҡта Инйәргә етә алмайынса шул ерҙә ҡуна ҡалырға туры килгән. Шуның өсөн тә ул ергә "*Байлар ҡунҡан*" тигән исем биргәннәр. *(1927 йылғы Солтанбәков Зыяитдин Имаметдин улы риүәйәтте яҙып ҡултамғаһы менән Ринат Гәрәй улына бирә).*

**Башэлгән.** Гражданнар һуғышы уаҡытынта була был хәл. Мәҙинә әвейем һөйләй торғайны. "Беҙҙең өсөн аҡлар әйвәт булты, ә ҡыҙыллар насар бултылар. Ошо тирәләге ауылларҙағы активислар бергә йыйылып баралар ҙа ҡыҙылларҙы үлтереп башларын таяҡҡа элеп ҡуялар. "Был трассаға сыҡҡан

ерҙә була. Әле лә анта тыныс түгел. Ҡуна ҡалып бесән савырға ҡаған кешеләр йоҡлай алмай.

**Бәҙоҡ йылғаһы**. Йылға буйынта *Бәҙегөтдинде* граждандар һуғышынан һуң кәзә урлаған, тип атып киткәннәр һәм шунта күмелгән. Йылғаның атамаһы был кешенең исеменән ҡыҫҡартылып алынҡан.

**Һыуыҡйылға.** Ауылтан алты саҡырым ерҙә, Аҡтау урамы яҡлап, трассаға сыҡҡан юлта, *Олоялан* бесәнлеге эргәһентә *Һыуыкйылға* ағып ята. Һыуы унның ныҡ һалҡын.

**Сәкәшле йылғаһы.** Өфө – Биләрит юлы буйлап, *Сәкәшле йылғаһы* аға, ул боролоп ауылға инә. Сәкәшле йылғаһы башынта *Лаптев яланнары* бар. Лаптев урман промышленнигы буған. Башҡортлар унның менән ерләрен бирмәҫ өсөн сәкәләшеп (сәкәшеп) алғаннар. Йылғаның атамаһы шунан барлыҡҡа килгәнтер ҙә, бәлки.

**Бирйән.** Инйәрҙең уң яҡ ярынан китһәң, *Бирйән һыртынан Бирйән йылғаһы* килеп сыға. Бирйән *бир* тигән ҡылымдан һәм *йән* һүҙләренән барлыҡҡа килгән атама. *Бирйән һыртынта Һынташ* тигән ҡая бар. Ололар һөйләүенсә, ул борон заманнарҙа башҡортларҙың тавыныу урыны булған. Күрәһең, унның төвөнтә ҡорван салғаннарҙыр. Шул һынҡа салынҡан ҡорбантың йәнен биргәнтән килеп сыҡҡантыр *Бирйән* атамаһы. Һуңкараҡ унның башынта тәңкәләр ҡалтырып китер булғаннар. Ҡорбан салыуҙы алмаштырғантыр бынынһы...

**Бирйән шаршыһы** иң ҡаты, иң ҡурҡынысы. Яҙ көнө турислар батҡылай. Биләрит районынта әллә нисә урынта ташйылға бар. Беҙҙең тирәлә лә бар улар. Шуларҙың береһе *Бирйән* эргәһентә.





**Манажы йылғаһы.** Манажы йылғаһы ауылға өс саҡырым. Салауат Юлаев көрәштәше Ырыҫҡолто дошманнар ҡамап тотам тигәнтә, ҡаянан аты менән *Туғанаш ятыуына* һикереп ( ул ҡая Ғәбдүк ауылынан аҫтараҡ, уны

тимер юл тоннеле тишеп үтә) ҡаса, Инйәр буйлап килеп *Манажы тамағынан* әле *Ырыҫкол тамағы* тип йөрөтөлгән тауға менеп, *Бирйән һыртынан* юл яҙҙырған. Манажы буйынта элек иген (арпа) сәскәннәр. ”*Мән*” һүҙе ризыҡ тигәнте аңлата. Халыҡты туйҙырғанҡа әйтелгәнтер инте.

**Һилеғорғо.** Ҡаратау төвөнтә Инйәргә *Һилегорго йылгаһы* ҡоя. Һилеғорғо йылғаһы “*һил*”, “*һиле*”, “*горго*” һүҙҙәренән барлыҡҡа килгән. *Һил* – тыныс (урынҡа ҡарата), *горго* – йылға тигәнде аңлата. Йылға үҙәне, ысынлап та, тыныс, керер урыны тар, ҡыҫыҡ булһа ла, эстәрәк тотош бер ғәскәр кереп йәшеренерлек ерләре бар. Борон заманнар өсөн был бик мөһим булған. Ә йылға башынан тиҙ генә төрлө яҡларға барып етерлек юллар саты (*Береш башы, Елмерҙәк һырты* һ.б.) Йылға тамағынта бәләкәй генә шарлауыҡ бар. Халыҡ уны яратып *Гөрләүек* тип йөрөтә. Был урын һәм *Ҡыҙылъяр* (бейек, ҡыҙыл мәтеле, ҡыҙғылт ташлы Инйәр яры) туристарҙы иң йәлеп иткән урын.



*Һилегоргоноң* һыуы бик һалҡын. Унта һыу инеүселәр ҙә бар. Һыуына төшһәң, һыуыҡлығы һиҙелмәй ҙә, үҙеңде хатта мунсалағы һымаҡ хис итәң, тейләр. Төрлө ауырыуларҙан, фалиж һуҡҡанта ла файҙалы тип, был йылға эргәһенә махсус дауаланыр өсөн килеүселәр ҙә бар.

*Һилегорго* менән бәйле мажаралы хәлләр ҙә килеп сыға. Бына шуларҙың береһе:

Бер ваҡыт *Һилегорго* ятыуынта йылым менән балыҡ һөҙәләр икән. Йылым һөҙгән саҡта иң оҫталары сумып ташҡа эләккән йылымты ысҡынтырып евәрергә тейеш. Сафа бабай Исмәғилев та шулар араһынта икән. Бына бер ваҡыт Сафа быуайҙың аяғына йылым эләккән тә, был килеп сыға ла яңынан юғала икән. Бер ҡалҡҡанда “Ҡарап торо...”, тип әйтеп өлгөргән, йылымты һөйрәгәс был яңынан төпкә китә икән. Башҡалар, был

ҡарап тороғоҙ, мин нисек сумам, тип әйтә тип уйлағаннарҙыр инте, көлә лә ҡуя икән. Аҙаҡҡыһынта: "Ҡарап тороп..." (ҡарап тороп батыраһығыҙ, тиергә уйлай бит инте) тип ҡысҡыра алған. Шунан ҡына быныӊ йылымҡа эләккәнен аӊлап ысҡынтырып алғаннар.

**Ҡанбикә шишмәһе.** Инйәр йылғаһыныӊ уӊ ярынта, ауылдыӊ түвән осонта *Ҡанбикә шишмәһе* бар. Инйәр урамы халҡы таҙа һыуҙы шул шишмәнән алып эсә. Салауатовлар нәҫеленән булған Кәрим тигән ҡарттыӊ ҡатыны *Ҡанышбикә* исемле булған. Бик матур йөрөргә, биҙәнергә-төҙәнергә яратҡан ул (әле лә көҙгө алдында биҙәнеп оҙағыраҡ ултырған ҡыҙҙарын "Ҡанышбикә", тип шелтәләгән инәйләр осрай), көйәнтәләрен алып, гел ошо шишмәгә һыуға йөрөгән. Был шишмәне шул ҡатынтыӊ исеменән *Ҡанышбикә шишмәһе* тип йөрөткәннәр, яйлап халыҡ телентә "*-ыш*" ялғауы төшөп ҡалып, *Ҡанбикә шишмәһе* тип атала башлаған.

**Оҙонуй шишмәһе.** Ауылтыӊ урта тирәһентә *Оҙонуй урамы* бар (хәҙер ул ике урамҡа бүленеп, *Салауат Юлаев урамы* һәм *Еӊеүҙеӊ илле йыллығы урамы* тип йөрөтөлә). *Оҙонуй йылғаһы* буйынта урынлашҡан ул. *Оҙонуй йылғаһы* оҙон уйһыулыҡтан ике тау араһынан(уй – үҙәк тигәнде аӊлата) ағып килә. Ауылға етәрәк тау төвөнән шишмә ағып сыға. *Оҙонуй йылғаһына* ағып төшкән был шишмәне лә халыҡ *Оҙонуй шишмәһе* тип йөрөтә.

**Аралар**: туғанаштар, мәнтәйҙәр, буғашайҙар, бүкештәр, һибәтистәр.

**Йылғалар**: Инйәр, Йөйәк, Бирйән, Манажы, Һилеғорғо, Сәкәшле, Һыуыҡйылға, Ҡаранйылға, Бәҙоҡ, Сәкәшле, Ҡунйылға, Ҡылыҡйылҡа.

**Шишмәләр**: Ҡанбикә, Оҙонуй, Ташлыйылға

**Яландар**: Тиҙәктүккән, Балыҡҡаҡлаған, Соӊҡоруй, Ҡоҙашман, Түбәнкеауыл, Манажы.

**Сабынлыҡ, бесәнлек исемдәре:** Шәкрәмбәт, Бейембәт, Аллаһыяр, Ишәт, Артышйылға, Шалҡан, Сатлыҡ, Ҡужалы, Көҙгө йорт, Балғаҡлаған, Түш , Суҡ ҡарағай, Күперле, Ҡаршылма, Ҡайынтүш, Ғәле бесәнлеге, Әлебай, Арағышлау, Үргеғышлау, Ҡоҙғоноя, Ҡалтуй, Башэлгән.

**Тау исемдәре**: Аҡтау, Ҡаратау, Өкөтау, Сутый, Ҡаршылма, Ырыҫҡол, Бирйән

**Һырттар**: Елмерҙәк, Аҡбеләк, Асыу, Ҡымыҙлыҡ һырты, Боланатҡан

**Ҡаялар**: Һынташ, Таш төбө

**Юлдар**: Күс юлы

**Информанттар**

1. Шәйбәков Ринат Гәрәй улы, уҡытыусы (иӊ төп информант).
2. Шаһисолтанов Фәнил Миӊлеғәли улы, пенсионер
3. Ноғоманов Илгиз Нафиҡ улы, уҡытыусы
4. Салауатов Шәүкәт Ғариф улы, ауыл хакимиәте башлығы
5. Вәлиев Фәрит Сәхәү улы, пенсионер

**Ҡулланылған әҙәбиәт:**

1. Шәйбәков Р.Г. Тыуған төйәк тарихы. Белорет матбуғат йорто, 1998.

2. Диалектология һәм ономастика буйынса һәләтле уҡыусыларҙың Республика ғилми-ғәмәли конференция материалдары, Өфө-2015.
3. http://ba.wikipedia.org/

**Батталов Айбулат Илгиз улы**
Фәнни етәксеһе: **Батталова Таңһылыу Зиннәт ҡыҙы**

## БӘНДӘБИКӘ КӘШӘНӘҺЕ

**Бәндәбикә кәшәнәһе** — башҡорт мәҙәниәтенең XV-XVI быуат ҡомартҡыһы, *Бәндәбикәнең ҡәбере* өҫтөнә ҡуйылған ҡоролма. *Бәндәбикә* IX быуатта хәҙерге Күгәрсен районы Мәксүт ауылында һәм шул тирәләрҙәге ырыу-аралар менән етәкселек иткән. Ырыуын әйҙәп, бәлә-ҡазаларҙан һаҡлап торған үтә лә аҡыллы, үҙ халҡының берҙәмлеген яҡлаусыһы ғына түгел, кәңәшсеһе лә булып, «Ерәнсә сәсән» легендаһында исеме бөгөнгө көндәргәсә һаҡланып ҡалған шәхес. Ул үҙ заманында әүлиә исеменә лайыҡ булып, тарих биттәрендә быуаттар буйына һаҡлана.

### Бәндәбикә тураһында

Риүәйәт буйынса, *Бәндәбикә* бик зирәк, аҡыллы ҡатын булған. Ҡаҙаҡтар менән үҙ-ара һуғышты бөтөрөүгә ҙур көс һалған. 1966 йылда археолог Нияз Мәжитов етәкселегендәге археологтар, Мәксүт ауылына килеп, ауыл ҡарттарының рөхсәте менән ике йәй кешәнәне ҡаҙалар. Иң һуңында, 1967 йылда, әүлиә-инәйҙең һөлдәһенә етәләр һәм кешәнәне тергеҙәбеҙ, һөлдәне яңынан ерләтәбеҙ, тип, уның һөйәктәрен алып китәләр. Үҙгәртеп ҡороу осоро башланғас, был эш туҡталып ҡала.

Бәндәбикә әбей Мәксүт ауылы ерендә, Эйеккә һул яҡтан ҡойған Бәндәбикә йылғаһы буйында йәшәгән. Ул заманда йылғаның һыуы мул, балығы күп булған, йылға буйы ҡуйы ағаслыҡ менән ҡапланған.

Ҡалҡыулыҡта *Бәндәбикә ҡорғаны* бар. Ул тирмә өй һымаҡ итеп кирбестән эшләнгән. Бәндәбикәнең ҡыш йәшәй торған өйө — ыҙмаһы булған.

*Бәндәбикә* үҙенән бик күп йәшкә кесе *Ерәнсә сәсәнгә* кейәүгә сыҡҡан. Уны үҙ өйөнә алып ҡайтҡан. Үҙе ле бик абруйлы, һынсыл, батыр, тәүәккәл ҡатын булған. Ил аҙаматтары һәр саҡ уның кәңәшен тотҡандар, уны хөрмәт итер булғандар. Берҙән-бер ваҡыт *Бәндәбикә* әбей ауырыҡһына башлай. Ә Ерәнсә сәсәндең тап ир ҡорона тулған сағы. Һәр яуҙан еңеп ҡайтыуы арҡаһында, күңеле лә үҫә бара бының. Бәндәбикә ауырыҡһынып киткәс, ир айырыуса йүгәнһеҙләнә. Егеттәрен йыя ла: "Ҡаҙаҡтар беҙҙең илгә барымта менән күп килделәр. Йәгеҙ әле, егеттәр, бер ҡыҙыҡ булһын, беҙ ҙа уларҙың йәйләүҙәренә барымта яһап ҡайтайыҡ" — тип әйтә.

Егеттәрҙең ҡайһылары икеләнеберәк ҡалған, ә бәғзеләре:

— “Ҡурҡаҡ кеше беҙ түгел”, — тип, Ерәнсә сәсәндең һүҙен ҡеүәтләгәндәр. Һүҙҙе төйнәгәс, Ерәнсә сәсән, ҡатыны янына ҡайтып, үҙ фекерен әйткән икән, Бәндәбикә уға ҡаршы төшкән.

— Һин үҙ илеңдә батыр исемен яуланың. Батырлыҡ янына аҡыл да кәрәк. «Ил һаҡлаған — ирәйеп йәшәгән, ил баҫҡан — Иҙелгә таянған», — тиҙәр. Ә һин хәҙер, ахмаҡланып, йәштәрҙе насар эшкә ҡотортҡанһың. Ил баҫыу беҙҙең ғөрөфкә һыймай. Исем һатмағыҙ, «Теймәҫте хоҙай һөймәҫ», тигәндәр. Насар уйҙан кире ҡайтығыҙ! — тип өгөтләгән, ти, ул хәл өҫтөндә ятҡан көйө. Халыҡ та уның һүҙен ҡеүәтләгән, ти. Бәндәбикәнең ауырыуы тағы көсәйгән. Ул, туғандарын йыйып:

— Хәлем насар, шәбәйә алмам. Әгәр үлеп-нитеп китһәм, өйөмә индереп һалығыҙ ҙа ишек-тәҙрәләрен күмегеҙ. Өйөм минең ҡәберем булһын, — тип васыят әйткән, ти.

Бәндәбикә оҙаҡ та тормай үлгән. Ҡарттар уны, васыяты буйынса, үҙ өйөндә ерләгәндәр. Ә Ерәнсә сәсән егеттәре менән ҡамауҙа ҡалған, күптәре үлгән. Ҡаҙаҡтың ил һаҡсылары уларҙы хөкөм майҙанына килтергәндәр. Унда аҡһаҡалдар йыйылған булған. Әсирҙәр баштарын түбән эйеп торалар икән. Улар янына бер ҡаҙаҡ батыры килеп баҫҡан. Шул ерҙә Ерәнсә сәсән, *Бәндәбикәнең* әйткәндәрен хәтерләп, бик ныҡ үкенгән, ти.

Аҡһаҡалдар:

— Батырҙар көрәшергә тейеш. Әгәр улар еңһә, был илбаҫарҙарҙы азат итергә. Әгәр ҡаҙаҡ батыры еңһә, яу менән килгән батырҙың йөрәгенә бысаҡ ҡаҙап үлтерергә, ҡалғандарын ҡайтарырға. Был мажараны улар ҡайтып ил ҡарттарына һөйләрҙәр, — тип, хөкөм сығарғандар. Ҡаҙаҡ батыры Ерәнсә сәсәнде йығып, күкрәгенә ултырған да йөрәгенә ҡаҙарға әҙерләнгән генә икән, Ерәнсә сәсән ҡысҡырып көлөп ебәргән.

— Туҡта! Үлтермәй тор! Ниңә көлә, һорашайыҡ! — тип ҡысҡырғандар, ти, аҡһаҡалдар. Ерәнсә сәсән аяғүрә баҫҡан да:

— Минең ҡатыным Бәндәбикә миңә... — тип әйтеүе була, аҡһаҡалдар:

— Бәндәбикә!.. Беләбеҙ Бәндәбикәне! Хуш! Һөйлә! — тиҙәр ҙә бер-беренә ҡарап ҡуялар. — Әллә һин уның ире Ерәнсә сәсәнме?

— Эйе, мин — Ерәнсә сәсән. Бәндәбикә беҙҙе ил баҫыуҙан ҡырҡа тыйҙы. «Ил һаҡлау — ҙурлыҡ, ил баҫыу — хурлыҡ», тине. Мин уның һүҙен тотманым. Егеттәрем менән барымтаға киттем. Уның әйтеүе дөрөҫ булды, хурлыҡҡа ҡалдыҡ. Шуға үҙемдән көләм, — тигән Ерәнсә сәсән.

— Бәндәбикәне әүлиә тип ишетә, инек, ысынлап та, әүлиә икән. Ҡатының хөрмәтенә барығыҙҙы ла азат итәбеҙ, — тигәндәр ҡаҙаҡ аҡһаҡалдары.

Былар йонсоп илдәренә ҡайтыуҙары була, улдары үлеп ҡалған кешеләр Ерәнсә сәсәнгә ташланалар:

— Ҡайҙа беҙҙең улдарыбыҙ? — тиҙәр. — Һүҙ тыңламай ни ҡырҙың? Ил тыңламай хур булдың!

Ерәнсә сәсән ҡайғыға ҡала, хурлығынан түҙә алмай атына менеп, көнсығышҡа ҡарай сабып китә лә, *Кәңшәт тауына* барып менә. Шунан ҡырла буйлап йән-фарман елеп килә һәм тау битләүендәге ҡаянан һыбай

көйө һикерә. Шунда аты ла, үҙе лә һәләк була. Ерәнсә сәсән убаһы ағаслы Үрген йылғаһының уң яғынан, Наҙый йылғаһының Үргенгә ҡойған еренә яҡын, йылғаны уң яҡлап, Ҡоро Урсай уяҙына барған юлдың өҫ яғында, тәпәш кенә һырт өҫтөндә ерләнгән. Уның тирә-яғы һөрөлгән. Ҡәбер өҫтөндә оҙон таш ултыра.

**Археологик ҡаҙылмалар тарихы буйлап**

Үҙҙәренең ерҙәренә бик йылы мөнәсәбәт менән ҡараған урындағы халыҡ *Бәндәбикә ҡәберендә* башланған ҡаҙыныу эштәренә бик ҙур борсолоу менән ҡарай. Әммә, археологтар халыҡҡа былай тип аңлата:

— Беҙҙең маҡсат — был тарихи һәйкәлде киләһе быуындарға һаҡлап ҡалдырыу.

Нияз Мәжитов әйтеүенсә, Бәндәбикәнең тышҡы ҡиәфәтен тергеҙеп, уның ниндәйерәк ҡатын-ҡыҙ булыуын халыҡҡа күрһәтеү ине. 1968 йылда Бәндәбикәнең һөйәк-һөлдәләре МДУ эргәһендә эшләп килгән антропология институтында, ошо өлкәлә эшләгән алдынғы белгес М.С.Акимоваға ебәрелә. Ул Көньяҡ Уралда антропологик тикшеренеүҙәр алып барған, Советтар Союзы дәүерендә кеше һөйәктәренән уның тышҡы ҡиәфәтен тергеҙеү методикаһын ҡулланған берҙән-бер белгес була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 1969 йылда Акимова вафат була һәм эш туҡталып ҡала. Күҙҙаллауыбыҙса, Бәндәбикәнең һөйәк-һөлдәләре бөгөн дә институт фондтарында һаҡланырға тейеш. Был факт Мәҡсүт ауылы халҡын бик борсой. Урындағы ҡарттар әйтеүенсә, Бәндәбикәнең ҡәберен ҡаҙып алып киткәндән һуң юғары көстәр был яҡтарға мәрхәмәтһеҙлек күрһәтә. Асыҡ ҡәберҙе ҡалдырыу — ҙур гөнаһ, мотлаҡ Бәндәбикәнең һөйәк-һөлдәләрен тыуған тупрағына ҡайтарырға кәрәк, шул ваҡытта уның йәне тынысланыр, ә халыҡҡа именлек әйләнеп ҡайтыр, — тиҙәр аҡһаҡалдар.

**Ауылдаштар һөйләүенән**

1. Азаматов Ишмөхәмәт Хәсән улы Туембәт ауылында тыуған, Мораҡ ауылында көн күрә, әле хаҡлы ялда. Уның һөйләүенән:

1965 йылдың сентябрь айы. Минең Мәҡсүт урта мәктәбендә директор урынбаҫары булып эшләгән сағым. Мәктәпкә Өфөнән ҡунаҡтар килеп төштө. Улар араһында сығышы буйынса Үрге Һаҙ ауылынан булған, Өфө баш архитекторының урынбаҫары Рәшит Сәлихов та бар ине. Миңә ҡунаҡтарҙы ауыл халҡына фатирға урынлаштырырға ҡушылды. Күп тә үтмәй ҡаҙыу эштәре башланды. Ваҡыт етмәү сәбәпле, уларҙың эшен күҙәтеү мөмкинлеге булманы. Эш тамамланғас, мине һәм бер-нисә ауылдашты саҡырттылар. Бәндәбикәнең ҡәбере кәшәнәнең икенсе бүлмәнең иҙән аҫтында ине. Һөйәк-һөлдәләрҙе археологтар махсус тоҡҡа һалып, Ленинградҡа ебәрҙеләр.

2. Күренекле яҙыусы Зәйнәб Биишеваның бер туғаны Ғибәҙулла Абдулла улы Биишевтың «Слава труду» (24.09.2005) гәзитендәге ”мәҡәләһе.

**Бәндәбикә кәшәнәһенең перспективаһы.** Күгәрсен районы Мәҡсүт ауылындағы *Бәндәбикә кәшәнәһе* районда ғына түгел, ә бөтә Башҡортостан

өсөн билдәле урын. Әле иһә башҡорт эпосына ингән *Бәндәбикәнең* исеме районда ғына билдәле. Мин ауыл халҡынан Бәндәбикә тураһында белгәндәрен һорашып сыҡтым. 40 кешенең 21-е кәшәнә тураһында яҡшы белә, 14-е был мәғлүмәт тураһында бер аҙ ишетеп белә, 5-е иһә кәшәнә тураһында бөтөнләй белмәй булып сыға. Күреүебеҙсә, яҡташтарыма кәшәнә тарихы ныҡлы билдәле, тип әйтеп булмай.

Үрҙә әйтеп үтелгән мәғлүмәтте мин интернет селтәренән алдым. Бәндәбикә кәшәнәһе менән күптәр ҡыҙыҡһына, ләкин ҡайҙа урынлашҡанын ғына белмәй.

Беҙҙең бурыс: тарихи-мәҙәни һәйкәлде Башҡортостанда ғына түгел, у унан ситтә лә белдереү. Был маҡсатта түбәндәге мәсьәләләрҙе күтәреү мөһим:

1. Бәндәбикәнең һөйәк-һөлдәләрен ҡайтарыу;
2. Кәшәнәлә төҙөлөш эштәрен тамамлау;
3. Тарихи-мәҙәни һәйкәлдең перспектив планын төҙөү, юл һалдырыу, туристик маршрут асыу.

Мин карта төҙөнөм, ә унда Бәндәбикә кәшәнәһенән Ерәнсә сәсән ҡәберенә тиклем маршрут һалдым. Маршрут буйынса Күгәрсен районы Мәксүт ауылынан Еректе аша Ейәнсура районы Үрген ауылына тура ғына барып сығып була. Ошо ике тарихи һәйкәлде тоташтырып, туристик маршрут — тыуған яҡты өйрәнеү маршрутын һалыуҙы бөгөнгө көндә бик актуаль булыр, тигән фекерҙәмен.

**Ҡулланылған әҙәбиәт**


1. Башҡорт халыҡ ижады, ll том.
2. Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия.
3. Бәндәбикә менән Ерәнсә сәсән // “Киске Өфө” гәзите.1.08.11.
4. Зонова Т. Возвращайся домой, Бэндэбике Уфа: Китап, 2012.



**Боҫҡонова Юлиә Венер ҡыҙы**
Фәнни етәксеһе: **Ғәлләмова Фирҙәүес Йосоп ҡыҙы**


## ЙЫЛАЙЫР РАЙОНЫ МАТРАЙ АУЫЛЫНЫҢ УРАМ ИСЕМДӘРЕ

Тарихтан мәғлүм булыуынса, һәр халыҡтың, дәүләттең үҫеше, алға барышы билдәле бер кимәлдә арҙаҡлы шәхестәргә лә бәйле. Башҡорт халҡының тарихын алһаҡ, ундай миҫалдар бихисап — *Ҡараһаҡал, Көҫәп батыр, Салауат Юлаев, Зәки Вәлиди, Шәйехзада Бабич* һ. б.

Хәҙерге Йылайыр районы еренән үҫеп сығып, үҙ төбәгендә генә түгел, ә бөтә Башҡортостан күләмендә заманының оло шәхесе булып танылған ир-азаматтар ҙа әҙ түгел. Бигерәк тә Башҡортостанға Автономия өсөн көрәштә бик күп ир-егеттәребеҙ ҡорбан булған йәки тарихи шәхескә әйләнгән. Шулар араһынан яҡташтарыбыҙ *Ылсынов Әхмәт, Шәмситдин Яҡшыгилдин, Заһит*

*Ҡаҙнабаев* — барыһы ла граждандар һуғышы геройҙары, оҫта ойоштороусылар, танылған эшмәкәрҙәр, ә икәүһе — *Шәмситдин Яҡшыгилдин* менән *Заһит Ҡаҙнабаев* — Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалерҙары. Һәм, әлбиттә, геройҙарыбыҙҙың исемдәрен мәңгеләштерер өсөн уларҙың исемдәре урамдарға бирелгән. Мәҫәлән, Быҙаулыҡ йылғаһы буйында урынлашҡан матур урамдарҙың береһенә *Заһит Ҡаҙнабаев* исеме бирелгән. Кем булған һуң *Заһит Ҡаҙнабаев*, ни өсөн уны беҙ хөрмәт итәбеҙ?

Дәүләтселекте яулап алыуҙа башҡорт халҡының арҙаклы улы Муса Мортазин тарафынан төҙөлгән башҡорт ғәскәре ҙур роль уйнай. Уның составында Урал аръяғы төбәгендә күп кенә ир-егеттәр хеҙмәт итә. Улар, ҙур батырлыктар күрһәтеп, иректе һәм дәүләтселекте ҡорал менән яулап алыусылар була. Бына ошо мортазинсыларҙын береһе, граждандар һуғышы батыры *Заһит Ҡаҙнабаев* була ла инде.

Совет власының киләсәгенә ышанып, тоғро хеҙмәт иткәне өсөн халыҡ уны «коммун Заһит» тип атаған. Кем булған һуң ул *Заһит Ҡаҙнабаев*? Уның биографияһы, яу һәм тормош юлы, эшмәкәрлеге әлегәсә тулы баһаланмай килде. Тик «Атайсал», «Сибайский рабочий», «Ауыл уттары» гәзиттәренең биттәрендә Рамаҙан Үтәғоловтың, Фуат Сөләймәновтың, Хәлфетдин Килдеғоловтың мәкәләләре 1990 йыл аҙаҡтарында донъя күрҙе. Был, әлбиттә, һәйбәт, бында күп кенә билдәһеҙ булған мәғлүмәттәр килтерелә.

*Заһит Ҡаҙнабаев* Балапан ауылында 1897 йылда тыуған. Һигеҙ йәшендә үк ата-әсәһенән үкһеҙ етем ҡалғас, атаһының ҡустыһы Ҡаҙнабаев Мозафар ҡулында үҫә, байҙарға ялланып, көнлөктә эшләп тамаҡ туйҙыра. 1913 йылда, эш эҙләп, ауылдан сығып китә.

Шул сығып китеүҙән ул, тәүҙә Кабанов приискаларында эшләй, шунда алдынғы рухлы эшселәр менән танышып, революцион эшкә ҡушылып китә, һуңынан граждандар һуғышыныңһәм аҡ интервенцияға ҡаршы көрәштең утлы юлдарын үтеп, 1922 йылда ғына түшенә орден таҡҡан ысын ҡыҙылармеец, 25 йәшлек ир-егет булып тыуған ауылы Балапанға ҡайтып төшә. Ҡайта ла ауылда Совет власын ойоштороу, крәҫтиән хужалыҡтарын тергеҙеү эшенә сума...

1922-1924 йылдарҙа Заһит Ҡаҙнабаев Сәлим ауыл Советы рәйесе, һуңынан - ерҙе бергәләп эшкәртеү ширҡәте «ТОЗ» рәйесе була.

1925-1927 йылдарҙа Баймаҡ милиция бүлегендә өлкән милиционер булып эшләй, Сибай руднигының участка милиционеры була.

1927 йылдың урталарында уны Башгортрест системаһына хужалыҡ — административ эшкә күсереләр. Баймаҡ баҡыр иретеү заводының ат паркы мөдире итеп тәғәйенләйҙәр. Автомашиналар ул саҡта әҙ була, шунлыҡтан бөтә йөктәр ат менән ташыла. Заһит Ҡаҙнабаев баҡыр иретеү заводына килеү менән яғыулыҡ һәм сеймал менән тәьмин итеү күпкә яҡшыра.

- Ҡаҙнабаев армия өсөн аттар үҫтерер өсөн ойошторолған 46-сы йылҡысылыҡ заводын булдырыуҙа ҡатнаша.
- уны яуаплы эшкә Баймаҡ район Советы башҡармакомитеты рәйесе итеп үрләтәләр. Йылайыр кантонын бөтөрөп, уны райондарға бүлгеләгәндән һуң район яңы ғына төҙөлә башлай, шуға күрә мәшәкәттәр, ауырлыҡтар

байтаҡ була. Шул осорҙа уҡ районды беренсе булып ойошторған Ю.Ҡунаҡбаевты Өфөлә төҙөлөп ятҡан 1 Май исемендәге шырпы заводына директор итеп күсерәләр. Һәм район Советы башҡарма комитеты аппаратын туплау, колхоздарҙы ойоштороу, заводтарҙы реконструкциялау һ.б. мәсьәләләрҙе хәл итеү Заһит Ҡаҙнабаев елкәһенә төшә. Әйтергә кәрәк, Баймаҡ районының ныҡлы социаль-иҡтисади базаһы нәҡ шул йылдарҙа төҙөлә .

1932-1933 йылдарҙа Заһит Ҡаҙнабаев Ленинградта (хәҙерге Санкт-Петербург ҡалаһы) милиция курстарында уҡый. Курсанттар араһында етеҙлеге һәм сослоғо менән айырылып тора. Атыу буйынса бер ярышта утлы ҡорал менән бүләкләнә. Курстарҙы тамамлағандан һуң уны Ейәнсура районына милиция начальнигы итеп ебәрәләр. 1934 йылда ул тағы ла Баймаҡ районында административ-хужалыҡ эштәрендә эшләй.

Халыҡ араһында ҙур абруй ҡаҙанған, Совет власының көсөнә һәм ғәҙеллегенә ышанған, социаль яҡтан әүҙем гражданин була Заһит Ҡаҙнабаев. Ә власть уны «халыҡ дошманы» тип иғлан итә.

1942 йылдың 21 февралендә Заһит Ҡаҙнабаевты Совет власына ҡаршы милли һәм контрреволюцион эшмәкәрлектә ғәйепләп, ҡулға алалар, партиянан сығаралар. Уның тураһында 1961 йылда ғына артабанғы яҙмышы асыҡлана. БАССР-ҙың МООП рәсми хәбәр итеүенсә, «Хөкөм ителеүсе Заһит Ҡаҙнабаев 1942 йылдың 7 октябрендә 10 йылға иркенән мәхрүм ителгән. Свердловск өлкәһенең тотҡонлоҡ урындарында ултырған. 1942 йылдың 27 майында вафат булған». БАССР-ҙың Юғары суды ҡарарына ярашлы, 1960 йылдың 18 февралендә реабилитацияланған. Әлеге көндә данлы яҡташыбыҙҙың тыуған ауылы Балапанда мемориаль таҡтаташ асылды, мәктәп һәм Матрай ауылында бер урам уның исемен йөрөтә.

Заһит Ҡаҙнабаев үҙ ваҡытының улы, көслө, һәләтле кеше булған. Уның кеүек кешеләр онотолорға тейеш түгел.

**Шәйехзада Бабич урамы**. Ул урам, әле генә төҙөлә башлағанда, «оторванка» тип йөрөтөлә ине, йәғни Матрай ауылынан ситтә, йәки «оторванный» урам тигән мәғәнә лә әйтелгән дә инде. Хәҙер ул урамда йылдан йыл яңы йорттар ҡалҡып сыға һәм Шәйехзада Бабич исемен йөрөтә, тик шулай ҙа халыҡ уны «оторванка» тип һөйләй.

«Йәһәннәмдәр аша уҙмайынса ожмах табырмын тип ышанма», — тигән шағир үҙе лә ысынбарлыҡта йәһәннәм һынауҙарын байтаҡ татый. Шуларҙың иң аянысылыһы, иң фажиғәлеһе беҙҙең Йылайыр ерендә була. Ғүмеренең һары таңында ғына Бабич нәҡ беҙҙең Йылайыр ауылында йыртҡыстарса язалап үлтерелә.

Шул осорҙағы ваҡиғалар тураһында мин «Ауылым шәхестәре» исемле ғилми-эҙләнеү эше менән шөғөлләнгән дә тап булдым. Ыласынов Әхмәт исемле олатайҙың тормош юлын өйрәнгәндә уның ейәнсәре миңә түбәндәгеләрҙе һөйләне: «1918–1919 йылдарҙа ҡартатайым Зәки Вәлиди, Шәйехзада Бабичтар менән бергә уларҙың сәркәтибе булып та йөрөгән, хатта Шәйехзада Бабичты ҡулға алған да, ул да шунда була. «Темәстән Ҡыҙыл Мәсеткә (Мораҡ) редакцияны күсереп алып китеп бара инек, Юлдыбай

ауылының хәҙерге зыяраты эргәһендәге тауҙы менеп барғанда, беҙҙе атлы ҡыҙылдар тотоп алдылар. Йылайырға алып барып бикләп ҡуйҙылар һәм язалай башланылар: ҡулды артҡа шаҡарып бәйләп, башты еп менән уратып бәйләгәс, араһына таяҡ ҡыҫтырып борҙолар. Мейе түбә ҡапҡасынан сығырҙай булып, күҙ ҙур итеп асылып, һытылып китерҙәй хәлдә, тел оҙон булып килеп сығыр ине. (*Шунан бирле мәрхүм булғансы уның ҡулы һыҙлай, башы ауырый, йыш ҡына башын ҡосаҡлап ултырыр булған*).

Ҡарауылда торған бер башҡорт егете үҙебеҙҙең яҡтыҡы ине. «Иртәгә һеҙҙе хөкөм итәләр, мин ишек таҡтаһының бер ҡаҙауын һурыңҡырап ҡуям, шунан төндә ҡасығыҙ», — тине. Шәйехзада Бабич: «Юҡ, мин ҡасмайым, улар бит ҡыҙылдар, бер нәмә лә эшләтмәҫтәр», — тип ҡасмай тороп ҡалды, ә мин ҡасып, Йылайыр урманына йәшерендем. Иртәгеһенә Шәйехзада Бабичты нисек язалағандарын ҡарап торҙом. Атҡа нимәлер тағып, Бабичты бер-нисә урам буйлап һөйрәп йөрөттөләр. Шулай язалағас, аяҡ-ҡулдарын ботарлап, бер соҡорға ташлап күмделәр». Үҙен эҙәрлекләй башлағас, ҡаҙаҡ далаларына ҡасып китеп, унда уҡытыусы булып эшләй. Аҙаҡ ҡартатайым миңә шул урамдарҙы, бикле ултырған төрмә бинаһын, Бабичты күмгән урынды күрһәтте», — тип һөйләгәйне.

Социалистик Хеҙмәт Геройы **Ғиниәт Ғәлиәкбәр улы Насыровтың** бала сағы ауыр Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытына тура килә. Радио Тыуған илебеҙгә дошмандың илбаҫарҙарса һөжүм итеүе тураһындағы ҡот осҡос хәбәрҙе килтергәндә, ул IV класты ғына тамамларға өлгөрә. Атаһы фронтҡа китә. 12 йәшлек Ғиниәткә мәктәпте ҡалдырырға һәм колхоз эшенә барырға тура килә.

Яҙғы сәсеүҙә ер тырмата, йәйен күбә тарттыра, уңышты урып йыйған осорҙа уны лабогрейкаға ултырталар, а ҡышын өс үгеҙ менән 30 километр аралыҡтан Баймаҡ баҡыр иретеү заводы өсөн утын ташый. 13 йәшлек малайҙы һабан артына ҡуялар - оҫта һабансы булып китә.

Бына шулай ауырлыктарҙа һәм хеҙмәттә сынығып үҫә Ғиниәт һуғыш йылдарында.

Һуғыштан инвалид булып ҡайтҡан атаһы хужалык эштәрен дә уға ышанып тапшыра. Мәктәп тураһында оноторға тура килә.

1946 йылда Карл Маркс исемендәге колхоз идараһы 17 йәшлек *Ғиниәт Насыровҡа* иген культуралары үҫтереү буйынса комсомолец-йәштәр звеноһына етәкселек итеүҙе тапшыра. Звеноға 113 гектар ер беркетәләр. Звено ағзалары ерҙе үҙҙәре һөрәләр, үҙҙәре орлоҡ таҙарталар, сәсәләр, сәсеүлекте тәрбиәләйҙәр. Йәш игенселәрҙең тырыш хеҙмәте юҡҡа сыҡмай. 1947 йылдың көҙөндә звено арыштан иң юғары уңыш — гектарынан 30,7 центнер иген ала. Бойҙайҙың гектарынан 9,5 центнер уңыш алына.

СССР Верховный Советы Президиумы 1948 йылда йәш комсомолец звено етәксеһенә юғары унынштары өсөн Ленин ордены тапшырылып, Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә. Шулай итеп 18 йәшендә генә ул ошо юғары исемгә лайыҡ була.

Звено унан һуңғы йылда ла юғары уңыш үҫтерә. Һәләтле игенсене баҫыусылар әҙерләгән бер йыллыҡ курсҡа уҡырға ебәрәләр. Һуңынан

*Насыров* Стәрлетамаҡ ауыл хужалығы мәктәбен тамамлай. Күп йылдар буйына тыуған колхозында агроном булып эшләй. Артабан ғүмеренең һуңғы көнөнә тиклем «Башҡорт» игенселек совхозының орлоҡсо-агрономы. Тик 51 йәшендә генә ауырып мәрхүм була.

Коммунист *Ғиниәт Ғәлиәкбәр* улы Насыров Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән юғары исемде күп йылдар намыҫ менән йөрөтә. Ауылда уға таҡтаташ асылған һәм үҙе йәшәгән урамға уның исеме бирелгән.

Тағы ла беҙҙә халыҡ араһында «аппендицит» тип йөрөтөлгән ике генә өйҙән торған урам бар. Әлбиттә, был урамдың ысын исеме Салауат Юлаев, тик ул ике өй, был урамдан өҫкө яҡҡа айырылып ултырған, шуға күрә был урам шулай тип йөрөтөлә тип аңлатты миңә Мәғзирә исемле апай.

*Шайморатов, Бакса, Октябрь, Быҙаулыҡ, Йәштәр* исемле урамдар ҙа бар.

**Мәғлүмәт биреүселәр**

- Хөсәйенова Таң Заһит ҡыҙы, 82 йәш, пенсионер.
- Фәйзуллина Нурия Минлеғәле ҡыҙы, 53 йәш, уҡытыусы.
- Мелкоедова Рәйсә Ғиниәт ҡыҙы, 66 йәш, ветеран-уҡытыусы.
- Байгилдин Илсур Марат улы, 14 йәш, уҡыусы.
- Мортаев Фәрит Ҡоҙабай улы, 61 йәш, «Ауыл уттары» гәзите мөхәррир ярҙамсыһы.

**Ҡулланылған әҙәбиәт**


- «Ауыл уттары» гәзите.
- «Йәшлек» гәзите.
- Топографик карта – интернет-ресурс.



**Вайсеева Карина**
**Фәнни етәксеһе**: Галлямова Валида Вадутовна


## ИЛЕШ РАЙОНЫ БАҘЫТАМАҠ АУЫЛЫНЫҢ МИКРОТОПОНИМДАРЫ

Һәр ауылдың үҙ тарихы, үҙ атамалары бар. Халыҡ ауылдың ҡойо-шишмәһенә йылға-күленә, соҡор-баҫыуҙарына, урман-болондарына бик матур исемдәр биргән.

Вак шишмәләрҙән ҙур йылғалар барлыҡҡа килә, кескенә ауылдар тарихынан оло тарихыбыҙ — тыуған илебеҙ, Ватаныбыҙ тарихы тыуа. Кем булыуыңды белеү өсөн тыуған ягыңды тарихи яҡтан ғына өйрәнеү етмәй, ә географик яҡтан өйрәнеү ҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Шул маҡсатты иҫтә тотоп, мин үҙ ауылым тирәһендәге шишмә, кисеүҙәр, күл һәм урман-ҡайынлыҡтарҙың аталыу тарихтарын бик ҡыҙыҡһынып өйрәндем. Беҙҙең Баҙытамаҡ ауыл советы территорияһына барлығы 10 ауыл инә. Уның тәбиғәте шишмәләргә бик бай: барлығы диҫтәнән артыҡ. Ата-бабаларыбыҙ

уларға элек-электән бик матур исемдәр биргән: *Рауил шишмәһе, Хәсән шишмәһе, Оло шишмә, Рәшит шишмәһе, Баллы шишмә.* Мин ике шишмәнең аталыу тарихын өйрәндем. “Үткәнен белмәгәндең — киләсәге юҡ”, — ти халыҡ. Тимәк, беҙ ауылдың үткән тарихы менән ҡыҙыҡһынабыҙ икән, киләсәгебеҙҙә мәғнәле булыр. Шуға күрә, һис шикһеҙ, ауылдың тарихын, топонимдарын белеү кәрәк.

**Рәшит шишмәһе.** Был шишмә Баҙытамаҡ ауылының төньяҡ-көнбатышындағы тау аҫтынан инешкә селтерәп аға. Ғүмер буйы шишмәне *Ноғоманов Рәшит ағай* ҡарап-тәрбиәләп торған: һыуға төшөүселәргә һуҡмаҡ яһаған, улағын ҡараған. Бабай үҙе иҫән түгел инде. Изге күңелле булғанға, уның исеме халыҡ телендә һаман йәшәй.

**Хәсән шишмәһе.** Әлеге шишмә Йондоҙ ауылынан йыраҡ түгел. Уны *Хәсән* исемле кеше асҡан. *Хәсән* бай була. Ул бик ныҡ эш ярата. Үҙенең тегермәне, һыуырғысы ла була. Тегермәнгә бик йыш барып йөрөй. Берваҡыт эҫе йәй көндө эшенән ҡайтып килгәндә, тамағы бик ныҡ кибә. Атын бер ҡайын төбөнә бәйләп, шишмә сыҡҡан урынды ҙзләй. Уны таба, бик яҡшылап ҡаҙый, таҙарта, төбөнә ҡомташ һала. Икенсе барғанында ағастан силәк яһай, шуны шишмәгә ултырта, һыу аҡһын өсөн улаҡ та эшләп тә ҡуя. Тегермәнгә барғанда ла, ҡайтҡанда ла шул шишмәгә туҡтап китә торған була. Етешмәгән яҡтарын эшләп, уның янына ағас та ултырта. Шул йылдарҙан бирле Хәсән шишмәһе кешеләргә хеҙмәт итә. *”Хәсән шишмәһе,” “Хәсән тауы”, “Хәсән тегермәне”* тигән һүҙҙәр әле лә бик телләп әйтелә.

— Еләккә ҡая барҙың?

— “*Хәсән шишмәһе”* буйына барып йыйҙым, *“Хәсән тауына*” мендем, — тиҙәр.

**Ҡыҙҡыуаҡ күле.** Был төбәк Иван Грозный осоронан ук билдәле. Имеш, көсләп суҡындырыу ваҡытында шундағы күлдә ете ҡыҙ христиан динен ҡабул итмәйенсә батып үлә. Шуға күрә күлгә *Ҡыҙҡыуаҡ* тигән исем бирелә.

**Именлек күле.** Был күл тарихҡа Граждандар һуғышы йылдарын хәтерләтеп ҡереп ҡалған. Ҡанҡойоштар ваҡытында бер нисә кеше ауыҙҙарына ҡурай ҡабып ҡасып иҫән ҡала. Шуға уны имен (иҫән) ҡалдыҡ, — тип *Именлек куле* тип атайҙар.

Йылғалары һәм болондары, кисеүҙәре, быуалары, әрәмәләре, яҡтылыҡтары менән маҡтаулы беҙҙең ауылдар. Бик боронғо замандарҙа беҙҙең баҫыу-ҡырҙарҙа һәм урмандар тирәһендә йылғалар, ә болондарҙа төрлө урындар бар. Һәр бер урындың күңелгә ятыш үҙ атамаһы бар. Ул атамалар быуындан-быуынға күсә барған: *Айыу әрәмәһе, Ҡайын түбә, Арабы, Муҡлеҡыуаҡ баҫыуы, Бейек елән* (болонлоҡ,) *Ҡамышлыҡул, Фазулла тау башы, Саҡмаҡ тау башы, Ҡалатау башы, Селиванский урманы, Арҡылы юл, Карпа бабай өйәнкеләре, Үләт баҙы, Суй-әтәс яткылығы* һ.б.

**Айыу әрәмәһе.** Баҙы ярына таба ҡуйы әрәмәлек булғанлыҡтан, халык телендә *Айыу әрәмәһе* тип йөрөтөлгән урын бар. Өлкәндәр һөйләүе буйынса, унда йыртҡыс хайуандар ҙа осраған. Әрәмәләк Баҙы йылғаһының арғы яғындағы ҡыуаҡлыҡтар, күлдәр менән тоташып, Баҙытамаҡ ауылы яҡлап,

*Ҡайын түбә* тип исемләнгән ҡалҡыулыҡҡа барып тоташҡан. Унын буйында *Бейек елән болонлоғо, Мулла ҡыуағы, Ҡала тау башы, Селиванский урманы* бар.

*Селиванский* элекке заманда алпауыт була, Ленинградта йәшәй, был урындарҙа ерҙәре була. Урманды унын исеме менән йөрөтәләр. Бөгөнгө көндә *Йондоҙ урманы* булараҡ билдәле.

**Ҡалатау башы.** Был урын Йондоҙ ауылы янында. Унда археологтар Йондоҙҡаласығы тапҡан. Ҡаласыҡ, ҡалатау — нығытмалы тау тигәнде аңлата.Ул боронғо яу өсөн эшләнгән ҡоролма булған.

**Арабы.** Баҙы йылғаһы Ағиҙелгә ҡойған урында ярымутрау булып урнашҡан ерҙе *Арабы* тип йөрөтәләр. Граждандар һуғышы ваҡытында унда аҡтар, ә *Айыу әрәмәһендә* ҡызылдар урынлашҡан. Әлеге ваҡытта ошо урындарҙа һуғыш ҡоралдары табылыуы билдәле. Хәҙерге ваҡытта *Арабы* Илеш районының һаҡланған урындарының береһе булып һанала.

**Суй- Әтәсятҡылығы.** Әтәс ауылынан түбәнерәк Ағиҙел йылғаһы тирәһендә һоро балсыҡлы сланецтан торған ярҙа төрлө үлсәмдәге балыҡ һөлдәләренең эҙҙәре табылған. Уларҙың төрөнә кергәнен, Каспий һәм Ҡара диңгеҙҙәге сельдларға оҡшағаны билдәләй. Ә һөлдә эҙҙәрен һаҡлаған яр киҫешенә *Суй-Әтәс ятҡылығы* тигән атама бирелә. Был ятҡылыҡ хаҡында беренсе тапҡыр 1887 йылда ғалим — филолог Ф.И.Чернышев иҫкә ала. Ә академик А.С.Берг был урында элек диңгеҙ булғанын иҫбатлай. *Суй-Әтәс ятҡылығы* бөгөнгө көндә тәбиғәт һәйкәле булып һанала.

**Баҙытамаҡ ауылы.** Баҙы йылғаһының тамағына ултырғанға ауылға шундай исем бирелгән.

**Кисеү** – йылға аша сыға торған ер, *Ғәбдерәүи, Мәҙи кисеүҙәре* бар. Яҙғы ташҡын ваҡытында *Ғәбдерәүи* тигән кеше йылға аша сыҡҡанда аты менән бергә йылғала батып үлә. Шунан был урынды унын исеме менән атайҙар.

Йылға, соҡор һәм болондарың аталыу тарихын өйрәнеп, мин түбәндәге һөҙөмтәгә килдем: топонимик атамалар беҙгә боронғо әбей-бабаларыбыҙҙың тормош-көнкүреше, һөнәрҙәре, ғөрөф-ғәҙәттәре, тарихы, теле, төбәктең тәбиғәте, географик үҙенсәлектәре, ауыл халҡының этник составы, кәсебе турында мөһим мәғлүмәт бирәләр. Һәр бер ерле атама — үҙенең килеп сығышы, барлыҡҡа килеү мәғнәһе менән сал тарих хәбәрсеһе икән.

**Топонимдарҙы төркөмдәргә бүлеү**

1. Иң күбе кеше исемдәренә нигеҙләнгән микротопонимдар: *Рауил шишмәһе, Рәшит шишмәһе, Хәсән шишмәһе, Селиванский урманы, Карпа бабай өйәнкеләре.*

2. Ҡушаматҡа нигеҙләнгән микротопонимдар: *Ғәбдерәүи кисеүе.*

3. Үҫемлектәр менән бәйле атама: *Киндер күле, Ҡыҙкыуаҡ күле.*

4. Охшату-чагыштыру аша исемләнгәне: *Баллы чишмә, Олы чишмә, Арабы*

5. Хайуан исеме менән бәйле атамалар: *Айыу әрәмәһе, Карп быуаһы.*

6. Урынлашҡан урынына бәйле атамалар: *Калатау башы, Баҙытамаҡ ауылы.*

7. Ниндәйҙер ваҡиғаға бәйле атамалар: *Иминлек күле, Суй-Әтәс ятҡылығы.*

Шулай итеп, топонимик атамаларҙың аталыу тарихын тикшереү — тыуған яҡтың тарихын өйрәнеү тигән һүҙ. Ә тыуған яҡты төрлө яҡтан өйрәнеп, беҙ үҙебеҙҙең тамырҙарыбыҙҙы беләбеҙ.

**Файҙаланылғн әҙәбиәт**

1. Ғарипова Ф. Ауылдарҙы һөйәм йәнем-тәнем белән. Казан: Тат. кит. нәшр., 1994.

2. Зарипов Р.С. Үткәндәр эҙенән// Мәғәриф. 1998. №7.

3. Саттаров Г.Ф. Атамалар дөньяһына сәйәхәт. Казан: Тат. кит. нәшр., 1992.

4. Саттаров Г.Ф. Тыуған ерем, тыуған ауылым // Мәғәриф, 1996. №11.

5. Солтанова Р.Ф. Көн йәне. Туймазы, 2005.

**Ғарифуллина Наҙгөл**

Фәнни етәксеһе: **Сәйәхова Сәиҙә Ғәбдинур ҡыҙы**

## БӨРЙӘН РАЙОНЫ МӘҺӘҘЕЙ АУЫЛЫ ТАРИХЫ, ТОПОНИМДАРЫ

Ауылым халҡы Түңгәүерҙәр ырыуынан. Атаҡлы ғалимыбыҙ, башҡорттарҙың тәүге тарихсыларынан булған Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың: “Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ: беренсеһе — үҙеңдең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды белеү; икенсеһе – йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө — хандар тураһында риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү” тигән.

Түңгәүер (йәки *Тәңгәүер, Дүңгәүер*) башҡорт халҡының бик боронғо һәм төп ырыуҙарының береһе. Тарихи сығанаҡтарҙан сығып әйткәндә, *Үҫәргән, Түңгәүер, Бөрйән ырыуҙары* Көньяҡ Уралда беҙҙең эраның VII быуатында уҡ билдәле булған.

*Түңгәүер /Таңғауыр/* ырыуы шәжәрәлә уларҙың башбабаһы итеп яҙылған Ҡаңғырат — *Ҡаңғы-ир-ат* (йәғни Ҡаңғы ырыуының ир аты, халҡы) тигән һүҙ ул; был иһә Түңгәүер ырыуының, Ҡыпсаҡ ырыуы һымаҡ уҡ, туп-тура – *Ҡаңғынан*, ә *Ҡаңғы* үҙе, өҫтәрәк күреүебеҙсә, Үҫәргәндән тармаҡланып сыҡҡан ырыуҙар икәнен иҫбатлай. *Түңгәүерҙең* (йәки *Дүңгәүерҙең*) туп-тура Ҡаңғы аша Үҫәргән дауамы икәнен ул ырыу исемен мифик Ата бүрегә бәйле булыуы ла дөрөҫләй.

Башҡорт халҡының төп ырыуҙарының береһен тәшкил иткән Түңгәүер ҡәбиләһенең барлыҡҡа килеү тарихы боронғо Бөйөк Төрки Ҡағанатында (төркиҙәрҙең дәүләте, беҙҙең эраның VI-VIII б.б.) билдәле булған Тонгра ырыуына ла барып тоташа.

Боронғо риүәйәттәрҙә һөйләүенсә, түңгәүер башҡорттары үҙҙәренең килеп сығыу тамырҙарын боронғо төрки донъяһының оло дәүләте — Тәрки Ҡағанат ҡағаны (ханы) Күлтәгин менән дә бәйләйҙәр. Күлтәген VII быуат аҙағы VIII быуат баштарында Икенсе Төрки ҡағанатының ҡағаны булып торған. Орхон-Йәнәсәй йылғалары буйында Күлтәгин ҡаған хөрмәтенә ҡуйылған “бәңгү”(мәңге) ташта табылған. Н.М.Ядринцев (1842-1894) — Себерҙе өйрәнеүсе күренекле ғалим, боронғо төрки Орхон-Йәнәсәй ташъяҙмаларын асҡан кеше. Шулай итеп, Күлтәгин реаль тарихи шәхес булған.

Түңгәүерҙәрҙең килеп сығыуында ҡуңғрат ырыуының этник компонентының ҡыҫылышы ла бар. Шәжәрә буйынса, Түңгәүер бей Ҡуңғрат бейҙең улы тип күрһәтелә. Ҡуңғрат бейҙең ырыуы Сыңғыҙхан империяһы ваҡытында өҫтөнлөклө ырыуҙан һанала, ул Сыңғыҙхан династияһының барлыҡҡа килеүендә һәм нығыныуында билдәле бер роль уйнай. Сыңғыҙхандың ҡатыны, уның улдарының әсәһе Ҡуңғрат бейҙең ҡыҙы Бүртә була. Тимәк, Сыңғыҙхан династияһының хандары Түңгәүер бейгә туған булып сыға. Легендалар һәм архив документтары буйынса, түңгәүерҙәр борон бөрйәндәргә һәм әйлеләргә туғанлыҡ ептәре менән бәйле булған.

Түңгәүер этнонимы (ырыу исеме) тарих таңында төрки һәм монгол ҡәбиләләренең бер ерҙәрәк йәшәгәнең дә күрһәтә. Мәҫәлән, монголдар араһында ла тангор, тангур атамалы ырыуҙар булыуы фәнгә билдәле. Ҡайһы бер түңгәүер риүәйәттәрендә уларҙың ата-бабалары итеп, Ҡуңғырат хандың улы Дингәүер күрһәтелә. Шулай итеп, боронғо Түңгәүер ырыуы, боронғо төркиҙәр донъяһынанда көн күреп, төрки ҡәбилә һаналған.

Түңгәүер ырыуының да бик боронғо замандарҙа ҡабул ителгән атрибуттары бар. Түңгәүерҙәрҙең ырыу ағасы — ерек, ҡошо — һайыҫҡан, тамғаһы — ярым ай, ораны — “Ҡуңғырат” булһа ла, ара-аймаҡтарҙың да үҙ тамғалары булған. Улар башҡорт ырыуҙары араһында беренселәрҙән булып ислам динен ҡабул итә.

«Күҫәк бей» башҡорт эпосында түңгәүерҙәрҙең ырыу башлығы Тимерҡотло бей Башҡорт ханлығын һаҡлап алып ҡалыу өсөн ике ҡәбилә араһында сыҡҡан ыҙғышты тыныс юл менән хәл итеүҙе яҡлап сыға. Боронғо риүәйәттәрҙә түңгәүерҙең тәү йәшәгән ере итеп төрлө урындар күрһәтелә: Урман-Түңгәүерҙәр үҙҙәрен бик борон Һырдаръя буйында йәшәгәнбеҙ тип иҫәпләй; шулай уҡ Алтай тауҙарын, Иртыш йылғаһы буйын ҡасандыр бик борон түңгәүерҙәр йәшәп киткән ер тип һанағандар.

Бөрйән, тамъян һәм үҫәргәндәр менән бер рәттән, Түңгәүер ырыуы ла «башҡорт» этнонимын тәү башлап йөрөтөүсе ҡәбилә. Улар бик ҙур ер биләмәләренә эйә була: көньяҡ һәм көнсығыш сиктәре Урал йылғаһының аръяғына, Арал диңгеҙе буйына тиклем, төньяҡ сиктәре Ағиҙел йылғаһы буйлап боронғо Башҡорт (Өфө) ҡалаһына ҡәҙәр барып еткән, көнбайышта Ыҡ йылғаһынан алып хәҙерге Башҡортостандың көнбайыш һәм Татарстандың көнсығыш территорияларына тиклем һуҙылған булған.

Түңгәүер ырыуы IX быуатта данлыҡлы Мәсем хан тарафынан берләштерелгән боронғо ун ике оло башҡорт ырыуы араһында телгә алына.

Түңгәүерҙәр, башҡа башҡорт ырыуҙары кеүек, оҙон һәм ҡатмарлы юл үткән: сама менән беҙҙең эраның VII-VIII быуаттарында Бөгөлмә-Бәләбәй ҡалҡыулығында төпләнгән һәм IX быуатта Мәсем хан төҙөгән Башҡорт дәүләте составына ингән. XIII быуаттың беренсе яртыһында татар-монголдар ҡыҫым түҙә алмайынса түңгәүерҙәр Көньяҡ Урал алдына, ә һуңыраҡ бөгөнгө йәшәгән урындарына күсенә.

XVIII быуат аҙағында XIX быуат башында ялан түңгәүерҙәр 9-сы Башҡорт кантонына, Ырымбур губернаһының Ырымбур өйәҙенең Түңгәүер олоҫона инә. Ә урман түңгәүерҙәр 6-сы Башҡорт кантонына, Ырымбур губернаһының Верхнеурал өйәҙенең Түңгәүер олоҫона (Аҫҡар, Мәһәҙи ауылдары ла) ҡарай.

Түңгәүерҙәр араһынан сыҡҡан XIX быуат ғалимы, бер нисә хеҙмәт авторы, әүлиә, мөршид, Башҡортостанда ғына түгел, Урта Азия һәм Ҡаҙағстанға даны таралған Ғатаулла ишан Әбделмәликовтың даны беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән.

Түңгәүер ырыуы ла башҡа башҡорт ҡәбиләләре һымаҡ ырыу төркөмдәренә бүленгән булған. Көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда түңгәүерҙәр Урман-Түңгәүер һәм Ялан-Түңгәүер кеүек ике ҙур ырыуға бүленеүе билдәле. 1762 йылда рус ғалимы П.И.Рычков та был турала мәғлүмәттәр теркәп ҡалдырған. Был ике төркөм шулай уҡ бәләкәйерәк төркөмдәргә бүленгән. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында был бүлем ара тип йөрөтөлгән.

Беҙҙең Бөрйән, Йылыйыр ерендә йәшәүсе түңгәүерҙәр Урман (йәки көньяҡ)-Түңгәүер ырыуына ҡарай. Улар бүре, күк мейе, суҡмар аяҡ, төрөй, теләнсе, юрмый, бур, ҡамғаҡ, ҡалмаҡ, тәзе, тырма һ.б. исемле араларға бүленгән. Мәһәҙи ауылы аралары: ҡалаҡбаш, сәрмә, үгеҙ, муҙый, сыйҡым, суҡмар, ҡалмаҡ, буҙыҡ. Аҫҡар ауылы аралары: аптрактар, упайлылар, сыуаштар, түмәйҙәр. Ауыл урамдарын да аралар менән әйтәләр.

Хәҙер улар Башҡортостандың 57 ауылында көн күрә. Шул иҫәптән, Йылайыр районының — 17, Хәйбулла районының — 15, Күгәрсен, Белорет, Баймаҡ райондарында, Бөрйән районының Мәһәҙи, Аҫҡар ауылдарында йәшәйҙәр.

Башҡорт ССР-ы Үҙәк Дәүләт Архивында һаҡланған мәғлүмәттәр буйынса 1923 йылда 1-се һәм 2-се Түңгәүер волостарында 11 мең 497 башҡорт йәшәгән. Башҡортостан хөкүмәтенең 1930 йылдың 20 августындағы ҡарары буйынса административ бүленеү тәртибе үҙгәртелә. Быға тиклем 8 кантон һәм 110 волость урына 48 район төҙөлә. Ә Түңгәүер атамаһы бөтә Башҡортостан буйынса юҡҡа сығарыла. Ул тик халыҡ хәтерендә һәм ҡайһы бер ауыл исемдәрендә генә ҡала.

**Һуғыштары**

Билдәле булыуынса, монгол-татар яуына ҡәҙәр башҡорт ырыуҙары бер дәүләткә берләшкән булыуҙары, үҙ хандары һәм күп һанлы ҡала-ҡәлғәләре булыуы мәғлүм. Әммә татар-монгол баҫҡынсыларының тәүге һөжүмен үҙенә алып, уларға ҡаршы 14 йыл буйы һуғышҡандан һуң башҡорттар еңелә. Был

ҡанлы көрәш ваҡытында уларҙың күп һанлы ҡалалары емерелә, халҡы ҡырыла, бөлгөнлөккә төшә.

Ә инде Алтын Урҙа дәүләте тарҡалғас, башҡорт ҡәбиләләре яңынан берләшеү процесен башлайҙар – Үҫәргән, Түңгәүер, Бөрйән, Тамъян, Ҡыпсаҡ ырыуҙары XV быуат аҙағында бик көслө союз төҙөүгә ирешәләр. Был берләшмәне Башҡорт дәүләте тип ҡарау ҙа яңылыш булмаҫ. Сөнки башҡорт халҡының “Күҫәк бей” эпосында был ҡәбиләләр башында бейҙәр тороуы, ә улар барыһы ла ханға буйһоноуы тураһында һөйләнелә. Улар шулай уҡ төрлө мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн йыйынға йыйыла торған булғандар.

Бөтә башҡорт ырыуҙары кеүек түңгәүерҙәр ҙә, Рус дәүләтенә ҡушылғас, хәрби хеҙмәттә һәм Рәсәй һуғыштарында ҡатнаша башлай. XVI-XVII быуаттарҙа Ливон һуғышында, Ҡырым походында, XVII быуат башында поляк һәм швед интервенттарына ҡаршы һуғыштарҙа, Кузьма Минин һәм Дмитрий Пожарский ополчениеларында, XVII быуат аҙағында Петр I-нең Швед һәм Азов походтарында, Пруссияға ҡаршы ете йыллыҡ һуғышта, XVIII быуат аҙағында Рәсәйҙең Швед компанияһына ҡаршы һуғыштарында әүҙем ҡатнаша. Бик күп түңгәүерҙәр һуғыштарҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн тархан исемен алған.

Мәһәҙи түңгәүерен дә граждандар һуғышы ауылды урап үтмәй, яндырыла ла, яңынан тергеҙелә лә.

### Түңгәүер башҡорттары Наполеон францияһына ҡаршы һуғышта

Верхнеурал өйәҙенең Ҡарағай-Ҡыпсаҡ, Түңгәүер, Тамъян ырыуы башҡорттары ингән 6-сы кантонында 14-15-се полктар төҙөлә. 14-се башҡорт полкы (командиры майор Селезнев) (ЦГИА РБ ф. 2, оп. 1, д. д. 2181, 4020,14633) 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡандан һуң Лейпциг, Дрезденды, Гамбург, Эрфурт, Веймар, Франкфурт һ. б. ҡалаларын французларҙан таҙартып, оҙон һәм еңеүле юл үтеп Парижға барып инә. Был 1814 йылдың 19 мартында була. Дәһшәтле алыштарҙа 14-се башҡорт полктары ҡаһарманлыҡтары айырыуса маҡтауға лайыҡ була. Ватан һуғышының бөтә этаптарында үрнәк булырлыҡ ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, Наполеонды Рәсәйҙән һәм Көнсығыш Европа илдәренән ҡыуып, Парижды алып, еңеү менән ҡайтҡан һалдаттар араһында Аҫҡар ауылынан: 1. Итбай Елекбаев, 2. Илсеғол Юлдашбаев, 3. Нәҙерғол Зыянбирҙин, 4. Аҫылғужа Мәскәүов, 5. Ғәҙелша Ҡазакбаев, 6. Имәнбай Батыршин. (Һуңғы өсәүһе Белорет районындағы Исмаҡай ауылын нигеҙләйҙәр).

Мәһәҙи егеттәре Әбүталип Сырлыбаев, Ишмырҙа Яулыбаев, Әбделғариф Әхмәров һәм Юлбирҙе Бөркөтов та була. “Парижды алған өсөн 19 март 1814 йыл” һәм “1812 йыл” исемле көмөш миҙалдар менән бүләкләнгәндәр. Шуныһы билдәле: 14-се полк составының 80 проценты яу яланында ятып ҡала, 99 кеше һәм 223 ат ҡына кире әйләнеп ҡайта. Мәһәҙей егете Баязит Ҡунаҡкужин илдең Көньяҡ-Көнбайыш сиген һаҡлай, Бессарабияла хеҙмәт итә.

## Түңгәүер ерендәге кәсептәр һәм боронғо ҡомартҡылар

Бөрйән, ҡарағай-Ҡыпсаҡ һәм Түңгәүер волостары башҡорттары үҙҙәренең община ерҙәрен һаҡлап ҡалыу маҡсатында XVIII быуат аҙағында элекке утарҙарҙы ауылдарға әүерелдерә башлай. Ауылдар янында ла күпләп йәйләү, яҙлау, көҙләү урындары һәм утарҙар карта ла күренмәү сәбәпле Мәһәҙи ауылы статусы тарихта һуң күрһәтелә. Биләгән территорияларының урман зонаһын үҙләштерә. Ауылда тик башҡорттар ғына йәшәй, малсылыҡ менән шөғөлләнә, тик ул да бөләү осорон кисерә. Игенселек өсөн уңайлы ер ҙә, климатта булмай. Шуға күрә был волостарҙа йәшәүселәр күбеһенсә ағас эше, күмер яндырыу, дегет ҡайнатыу, аусылыҡ, умартасылыҡ менән көн күрә. Ҡомартҡылар иҫәбенә: ауыл боронғораҡ, Мәһәҙи зыяратында 1405 йылғы ҡәбер ташы табылыуы күп миҫалға дәлил. Мәһәҙиҙәр ауыл йыйыны уҙғарып үҙ ауылының тарихын өйрәнәләр, шәжәрәләрен яҙалар. Тыуған яҡты өйрәнеүсебеҙ Ишбаева Фәнүзә Рәжәп ҡыҙының “Исемендә, Мәһәҙи, ил тарихы” (Таң гәзите, №51, 1999 й. 29 апрель) мәҡәләһе донъя күрҙе.

## Мәһәҙей Түңгәүере тарихынан

Мәһәҙи ауылы район үҙәгенән Иҫке Собханғолдан 44 саҡрым, Байназар ауыл советынан 15 саҡрым, Белорет тимер юлына 104 саҡрым.

Ағиҙелдең ҡушылдығы Мәмбәтһыпы йылғасығы буйында хозур тәбиғәт ҡосағында ултырған, бишенсе ревизия алдынан 1795 йыл, Мәһәҙи ауылы үҫеп сыға. Тәүҙә кем килеп ултырғанлығы хаҡында мәғлүмәт юҡ. Ә бына уның улы Әхмәр Мәһәҙиев һәм ейәнсәре Рәхмәтулла, Әбделнасыр Әхмәровтар билдәле. Улы 1834 йылда 83 йәштә була. Ауыл 7 өйҙән (45 кеше) башлана.

1859 йылда — 7 йортта (37 ир–ат һәм 36 ҡатын-ҡыҙ), 95 ат, 58 һыйыр, 30 һарыҡ һәм кәзә тура килгән. 24 бот арыш һәм 232 бот яҙғы культуралар сәселгән.

1920 йылда 71 йортта (365 кеше) өй иҫәпләнә. 1921-1922 йот йылдарында халыҡ ныҡ ҡырыла. 1999 йыл 92 йортта 300 яҡын кеше йәшәй, 2002 йылда — 335, 2009 йылда — 348 кеше иҫәпләнә.

1859 йылғы рәүиздән алынған исем-шәрифтәр: Теляубай Ғәбитов (46 йәш) ҡатыны Гөлзабиға Әбделғафарова (32 йәш). Теляубайҙың улы Саҙретдин (2 йәш). Бер туған ағалары Тислебай (28 йәш) ҡатыны Фәзилә Әбделгарина (27 йәш) ҡыҙҙары Хәбирә (7 йәш), Ғәлиәскәр (26 йәш) ҡатыны Гөлбикә Кинйәбаева (20 йәш), уларҙың улы Азамат (2 йәш), ҡыҙҙары Ғәшйә (яңы тыуған) Ғәбитовтар 1-се йортта йәшәгәндәр.

Аҡъегет Әхтәмов 1842 йыл 83 йәшендә үлгән улы Йәнъегет (48 йәш) 2-се ҡатыны Гөлғәбиҙә Мөхәмәтйәрова (48 йәш) ҡыҙҙары Бәҙрениса (21 йәш), Вәғиҙә (19 йәш), Мөхипъямал (7 йәш), улдары Ҡорбанғәле (21 йәш) ҡатыны Алмабикә Алтулина (18 йәш), ҡыҙы Фәхерниса (яңы тыуған), Мөхәмәтғәле 1859 йыл 1 йәштә үлгән, Аҡъегеттың улдары Байъегет (32 йәш) ҡатыны Гөлбикә Әбделхәлилова (27 йәш), Ғизәттулла (21 йәш) ҡатыны Гөлфирүзә Рәхмәтуллина (19 йәш) 2-се йортта йәшәйҙәр.

Әбделғариф Әхтәмов (83 йәш) улы Әбделвәли (52 йәш) ҡатыны Абдуллова (22 йәш) ҡыҙы Ғәрифә (3 йәш), икенсе улы Сәхъйәр(27 йәш) ҡатыны Гөлғәбиҙә Нурмөхәмәтова (22 йәш) 3-сө йортта йәшәйҙәр. Уларҙан Ғарифуллиндар таралғандар. Әбделғәзиз Әбделғафаров (48 йәш) ҡатыны Бәҙрениса Йәнтүрина (42 йәш) улдары Әбделғәни (9 йәш), Мөхәмәтғәле (7 йәш), ҡыҙҙары Сәхипъямал (5 йәш), бер туған ағайҙары Әбдрәхим (43 йәш), Вәлиша (33 йәш) ҡатыны Мөхипямал Ҡужаәхмәтова (18 йәш), Сайъяр (27 йәш), Әбделзаһир (14 йәштә үлгән) 4-се йортто тәшкил иткәндәр. 4-се йортта Мөхәмәтрәхим Мөхәмәтйәров (33 йәш), ағаһы Рахманғол Рөстәмов (48 йәштә - 1853 йыл үлгән), ағаһы Мөхәмәтйән Рөстәмов (58 йәш) ҡатыны Рәйхана Исмәғилова (49 йәш) улы Собханғол Мөхәмәтйәров (26 йәш), Иманғол (22 йәш), Хәйбулла (14 йәш) Мөхәмәтйәновтар нәҫеле тарала.

5-се йортта Рахманғолдың тәүге ҡатынынан улдары Сибай (30 йәш) ҡатыны Хәйрениса Сәйетбаталова (17 йәш), Дәүләтбай (17 йәш), Теляубай (13 йәш). Мөхәмәтшәриф Рахманғоловтың ҡатыны Латифа Шаһиморатова (25 йәш). (Рахманғоловтар тарала).

6-сы йортта Зыянғужа Аҡназаров (61 йәш) ҡатыны Сәхибә Мөхәмәтйәнова (50 йәш) улдары Мөхәмәтзариф (29 йәш) ҡатыны Гөлбикә Абдуллина ( 20 йәш), Мөхәмәтҡужа (21 йәш), Зыянғужа Аҡназаров бер туғандары Ғәлиәкбәр Аҡназаров (56 йәш) 1-се ҡатыны Сәғилә Ирәмәнова (32 йәш), 2-се ҡатыны Гөләйша Мәхмүтова (55 йәш).

7-се йортта Йыһанша Мәүлетшин (46 йәш) ҡатыны Зифа Шурсылдина (35 йәш) улдары Зыянғол (1854 йыл 26 йәштә үлгән), Ғоморҙаҡ (7 йәш). Ошо, 1859 йылғы Ырымбур губернаһынын Верхнеурал өйәҙенең 6 башҡорт кантонының 9 йортона ҡараған Мәһәҙи ауылының рәүиз мәғлүмәттәренә ҡарап, һеҙ ата - бабаларығыҙҙың ата – олатайҙарын белһәгеҙ, мотлаҡ үҙ шәжәрәгеҙҙе килтереп сығарырһығыҙ.

1859 йылда Мәһәҙи ауылында 37 ир-ат һәм 36 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Шул уҡ осорҙа Сәйетбатал Әбделнасыровтар ғаиләһе өҫтәлгән. Насыровтар нәҫеле. (Семен Баянов тарафынан төҙөлгән, ҡултамға). Старшина үрәтник Н. Ғәбделсәлимов. (Ҡултамға)

R.S Һылтанмалар: 1. Түңгәүер ( статьялар йыйынтығы) Өфө, “Китап”, В.М.Бәҙретдинов 2007 й. 2. Рәүиз әкиәттәре 1859 й. Өфө, ЦГИА Ф-И-138, оп.2, д.758, 566, 760, 261.

## Ауылдың барлыҡҡа килеүе тарихынан

Мәһәҙей ауылына тәү башлап 1795 йылда нигеҙ һалына. Ауыл буласаҡ ергә тәүҙә Әбделмәмбәт исемле кеше килеп сыға,үҙенә ятып торорлоҡ бер толоҡ(урын) яһап алған да , йылға янында ғүмер кисергән.Шул ваҡыттарҙа йот йылында тифтан ҡырыла халыҡ,үкһеҙ етем ҡалған бала-саға ауылдар буйлап хәйерселәп йөрөгән. Бының янына бер таҙ ғына малай килеп сығып, бергәләп йәшәй башлайҙар.Бер мәл был егеткә һалдат хеҙмәтенә китергә ваҡыт етә. Орскийгә күренә бара был.Уның ҡайҙан булыуын һорашалар.”Тамъян-Катайский кантон,Түңгәүерский волость” тип яҙҙыра,үҙе бында кире ҡайтмай.Әбделмәмбәттең улы Әхмәр Мәһәҙиев нигеҙ һалғандыр

тигән фарыздар бар.Халыҡ ҡайҙа ғыны төпләнеп һәм уға нигеҙ һалмаһын, йылға һәм ауыл исемен ташламаған.

Ололар һөйләүенсә Мәһәҙи ауылы Ағиҙел ҡушылдығы Мәмбәт буйында урынлашҡан.Әлеге көндә был ҡушылдыҡты башҡорттар- Ылаҡты,урыҫтар — Ашкарка тип йөрөткәндәр.Ауыл ошо Мәмбәт(Ылаҡты, Ашкарка) йылғаһының үр яғында урынлашҡан булған. Ерҙәре матур,киң була башҡорттарҙың.

Сухов фамилиялы урыҫ башҡорттарҙан үгеҙ тиреһендәй генә ер һорай. “Әҙ генә һорай бит” тип ризалаша башҡорттар.

Сухов иң ҙур үгеҙҙе ҙуйҙыра,тиреһен киреп, ҡайыш итеп иләтә.Ҡайышты еп нәҙеклек кенә итеп телгелә һәмдүрт яҡлап һуҙып һала. Әбйәлил районы Субан ауылы һәм Мәһәҙи ауылы ерҙәре, Ҡайнөй (Яуымбайҙың элекке нигеҙе) ерҙәре шулай итеп Суховка һатыла. Ошолай мәкер-хәйләгә алданған башҡорт йорт-илен ташлап, икенсе урынға сергә мәжбүр була. Мәмбәт йылғаһы башы Сухов ключкә (йылға башына) әйләнә. Бынан аҙаҡ әллә күпме башҡорт ерҙәре тартып алынған. Мәҫәлән:

“1760 йылда Евдоким Демидов 90 мең һумға Үрге һәм Түбәнге Әүжән — Петровск заводтарын һатып ала.1769 йылда Ҡағы йылғаһында плотина төҙөй һәм Ҡағы заводында суйын иретә башлай.”

“1773 йылда Е.И Лепехин етәкселегендәге крәҫтиәндәр һуғышы алдынан ғына Ҡотҡор заводы сафҡа инә.Ылаҡты йылғаһы буйында Ашҡар приискыһы төҙөлөп ,унда һибелмә алтын сығарыла башлай”.

Ошолай итеп башҡорттарҙың уңайлы ерҙәрен урыҫ байҙары баҫып ала уларҙы ҡыҫырыҡлай башлай.

Беҙҙең Мәһәҙи ауылының өс урыны билдәле. *Мәсетбар, Күҙгәнәк яланында* һәм *Сухов Ключ* тирәһендә (Хәҙер *Ҡағы фермаһы* йәйләүе).

*Үрге* һәм *Түбәнге Әүжән, Ҡағы, Ҡотҡор, Үҙән* заводчиктары һәм байҙары тарафынан Түңгәүер һәм Ҡайнөй ауылдары туҙҙырылып, яндырылып бөткән.

“1912-1914 йылдар булды, — тип иҫләй ололар, — урыҫтар нык ыҙалата башланы. Бер мәл өс инженер, завод һалыу өсөн урын эҙләп, ауылға килеп сығалар, ҡурҡыта башлайҙар. Ауыл халҡы был өсәүҙе баҙға төшөрөп бикләп ҡуя ла, үҙҙәре өс көн эсендә ауылдан күсенеп бөтәләр. Мәсетте аттың ҡолаҡ бауына тағып, һөйрәтеп, Әбйәлил районының Ярлыҡап ауылына бер төн эсендә күсереп ҡуялар.”

Ауылды һуңғы тапҡыр 1918 йылдың йәйендә күпселек халыҡтың Саптарат йәйләүендә йәйләгән сағында ағалы-кустылы Каширинсылар тарафынан таланыуы һәм яндырылыуы аяныслы була. Ауыл ул ваҡытта Ҡамышаҡта нигеҙләнгән булған.Бола ҡупҡас халыҡ барлы-юҡлы ҡаралтыһының тейәрен тейәп, йөкмәрен-йөкмәп күрше-тирәләге туғандарына ҡаса. Ялыҡап,Баймаҡ, Урал йәйләүҙәренә, Нәби ауылының иместәр туғайына төшәләр.

Ғарифуллин Тайып, нык аурыу сәбәпле, үлһәм тыуған төйәгемдә үләм тип, утын өсөн эшләгән ышығында ятып ҡала. Бер-ике көн үткәс, ҡыҙылдар килә лә һорай “Ни өсөн яңғыҙың ғына ятып ҡалдың?” — тип.

“Ерҙе, ауылды һаҡлап ятам, моғайын, кире ҡайтыусылар булыр ул” — ти. Шунан уға ошо ерҙәрҙең хужаһы тигән кеүегерәк мисәтле ҡағыҙ ҡалдырып китәләр.

Ул ҡағыҙҙы ҡатыны Мәрзиә Бөрйәнгә райсоветҡа ҡалдырып китә. Ни өсөнмө?

*Күркәтауға* ағас ҡырҡырға Таип олатайҙың ҡыҙы Мөниәне лә ебәрәләр. Ул унан ҡайтып килгәндә, ныҡ һыуыҡ үткәрә һәм ауырый, бара алмай. Шулай булһа ла уны көн һайын кире *Күркәтауға* ҡыуалар. Шул ваҡытта районға эшкә килгән Дашкин һыуға батып үлгәс, уны эҙләргә һәр ауылдан кеше йәлеп итәләр. Мәһәҙи ауылынан өс кеше: Ғөбәйҙуллин Ағзам, Яҡшыбаева Хөснә, Мөниә урынына әсәһе Мәрзиә китә. Ҡарт тип Ағзам менән Мәрзиәне ҡайтаралар. Хөснә ҡала. Мәрзиә шунда документты райсоветҡа индереп бирә. Хәҙерге ауыл урынында дәүләт иҫәбенә дүрт йорт һалалар. Унда Хәсәнов Мансур, Сәйәхова Факиһа, Насыров Хисаметдин, Ғәрифуллин Тайып ғаиләләре йәшәй башлай. Оҫталар Таип һәм Хисаметдин олатайҙар артабан үҙҙәре өй йүнәтеп инә.

1921-1922 йылдағы йоттан бик күп халыҡ ҡырыла.

1929 йылда ауылда ширҡәт(кооперация) ойошторола.

1930 йылда ширҡәт “Урал” колхозына ҡарай (Ҡыпсаҡ, Һарағы, Мәһәҙи, Ҡолғана, Байғаҙы, Яуымбай).

1933 йылда һәр ауылда колхоз төҙөлә. Мәһәҙиҙә Иҫәнсурин исемендәге колхоз була. Иҫәнсурин репрессияға эләгә, үлтерелә. Тәүге председателдәрҙең береһе Мораҡ яғынан килгән Сарыбаев була.

1933-1953 йылға тиклем Октябрь колхозы була. Председателдәре; Ирбулатов Н., Бәшәров Ә., Суфиянов С., Насыров И.

1953-1957 йылдарҙа колхоз Буденный исемен йөрөтә.

1957-2005 йылға тиклем “Ағиҙел” колхозы составында була.

2005 йылда колхоз бөтөрөлә.

*Ауыл кешеләре түңгәүер ырыуына ҡарай.*

Ырыуыбыҙ - Түңгәүер
Ҡошобоҙ - һайыҫҡан
Тамғабыҙ - Ярым ай
оранфбыҙ - ярымай
Йылғабыҙ - Мәмбәтһыпы.
Ағасыбыҙ - ерек,
Тауыбыҙ - Элгеләү.

| Ырыу | Аралар | Фамилиялар | Мәғәнәһе |
|---|---|---|---|
| Түңгәүер | Ҡалаҡбаштар | Маликов, Гәрифуллин, Латыпов, Ишемов, Яҡшыбаев. | 1) ҡалаҡбаш-яҫы, үткер уҡ башағы;<br>2) юнып эшләнгән ағас ҡалаҡ,<br>Ағас ороһонан һауыт һаба юнышһәм башҡаса оҫталыҡ иткәндәр |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | Үгеҙҙәр | Мөхәмәтйәнов, Ғүмәров, Ирбулатов | Үгеҙ-һыйыр малының иркәге. Бик ҡарышҡыр, яй, ығыш, көслө хайуан. |
| | Сәрмәләр | Хәсәнов,Нәҙершин,Дәүләтшиндар | Сәрмә тиренән тегелгән йәки ҡабыҡ, сей йүкәнән үреп яһалған юл тоҡсайы. |
| | Суҡмар | Дәминевтар | Суҡмар-йоморо башлы күҫәк. Һуғышырға яратыусылар,бола кешеләре. |
| | Боҙоҡ | Мөхәмәтғәлиндар | Боҙоҡлоҡтары, яманлыҡтары арҡаһында шулай атала. |
| | Ҡалмаҡ | Насыровтар | а) ҡалмыҡтарҙан килеп сыҡҡандар,<br>б) был арала бер бөртөк ир бала ҡала һәм ошонан күбәйеп китәләр. |
| | Муҙый | Шаһимарҙановтар | Муҙый — йоғошло аурыу тараткан бөжәктәр. Берәй төрлө йоғошло аурыу менән аурығандары өсөн алған исем булырға тейеш. |
| | Моҙғай | Сәйәховтар, Ғөбәйҙуллиндар | Айырған ҡортто ябып тороу өсөн ҡабыҡтан эшләнгән һауыт. |
| Тамьян | эшкинә | Тахаутдиновтар | |

## Ер-һыу атамалары

**Элгеләү тауы.**

**1-се вариант**

Был исем граждандар һуғышы ваҡытында барлыҡҡа килгән атама. Әүәл-әүәлдән төрлө яуҙыҡтар Мәһәҙей ауылы халҡының да теңкәһен ҡороткан. Ҡаҙаҡ баҫҡынсылары ла, урыҫ байҙары ла, хатта граждандар

һуғышы осоронда аҡтары ла, ҡыҙылдары ла ауылды йыш ҡына талап, мал-тыуарын ҡыуып, кейем-һалым, кәсеп-шөғөл ҡорамалдарын, барлы-юҡлы ҡәҙерле, затлы әйберҙәрен, аҙыҡ-түлеген, йортта һәм хужалыҡта ҡулланылған йыһаздарын, биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәрен ҡурҡытып, йә булмаһа талап алып китә торған булғандар. Бола ваҡыты булғанға, халыҡ бик ныҡ яфа сиккән. Хатта ауылды яндырыуға тиклем барып еткән. Ауыл халҡы һаҡланыу, нәмәләрен һаҡлап алып ҡалыу әмәлен тапҡан. Улар төйнәр нәмәләрен төйөнсөктәргә төйнәп, тау башына, унының ҡараңғы үҙәктәренә алып барып йәшергәндәр. Ергә һалһаң, дым тарта, ҡош-ҡорт, сысҡан-фәлән тейә, тип ҡайһыларын ағас ботаҡтарына мендереп элгеләгәндәр. Ауылды яндырыр һәм талар алдынан һәр кем үҙенең кәрәк-яраҡ әйберҙәрен ошо тауға мендереп, ағастарға элеп йәшергәндәр. "*Элеү*" һүҙенән ошо тауҙың атамаһы барлыҡҡа килгән. Ошо ваҡиғаларҙан һуң был тауҙы *Элгеләү тауы* тип атап йөрөтә башлағандар. *Элгеләү* — Мәһәҙей тирәһендәге иң олпат тауҙарҙың береһе.

Әлеге көндә Өфө ҡалаһында йәшәгән Ейәнсура районынан сыҡҡан шағир Мәһәҙей кейәүе Мәхмүт Уразаев *Элгеләүгә* арнап шиғыр ҙа яҙған.

**Элгеләү**

Түбәләре ҡалай юғары,
Тауға баҫҡан шул *Элгеләү*.
Дәртле ирҙәрҙең шул йолаһы –
Бейектәргә менеп көй көйләү.
Бейектәрҙә таш та ҡанатлы,
Ай бейек тә үр шул *Элгеләү*.
Йәнгенәңә өҫтәр нур, яҡты
Бейектәргә менеп көй көйләү.
Көй көйләйем әле, көй ҡалыр,
Бер хәтерләр, бәлки, *Элгеләү*.
Үҙе бер ғүмерҙер, бер дандыр
Бейектәргә менеп көй көйләү. (Мәхмүт Һибәт-Уразаев)

## 2-се вариант

30-сы йылдарҙа геологтар төрлө урындарҙа ҡаҙылма байлыҡтар эҙләп йөрөгәндәр. Соҡорҙар ҡаҙғандар һәм ундағы матдәләрҙең составын тикшергәндәр. Шул ваҡытта тау теҙмәләренең иң бейек түбәләренә өс терәүле бағаналар ултыртып киткәндәр. Ул бағаналар ориентир ролен үтәгәндәр. Тарихтан билдәле булыуынса, боронғо Грецияла һәм башҡа илдәрҙә яр буйҙарында караптар ориентир алыу өсөн порттарға бейек маяҡтар төҙөгәндәр. Уларҙың өҫтөндә төндә ут янып торған. Шуға күрә был *Элгеләү* тауы түбәһен *Маяк* тип йөрөтә башлағандар.

Яңы ғына барлыҡҡа килгән Совет дәүләтенә, күтәрелеп китеү өсөн ҡаҙылма байлыҡтар кәрәк булған.

Беҙҙең Мәһәҙей ауылынан да XX быуаттың икенсе яртыһында Шәғәлин Шаһымгәрәй тигән кеше геолог булып йөрөгән.

**3-сө вариант**

*Элгеләү* тауының түбәһенә менеп, тирә-яҡты ҡараһаң, уның һырты ырғаҡҡа, элгескә оҡшап та ҡуя. Ә унын түбәһен аҫтан ҡарағанда, осло ғына элгес кеүек ҡая текәләнә, бейегәйә. Бәлки, ошо һыртының ырғаҡ кеүек бөгөлөп тороуы йәки түбәһенең ҡапыл текәләнеүе *Элгеләү* атамаһын биреүгә сәбәп булғандыр ҙа (Фараз итеүсе Баязит Ғәбдинур улы Сәйәхов, географ, 1963 йылғы.)

**Мәмбәтһыпы йылғаһы.** Мәмбәт исемле бер егет һунарсы булған. Бер көн һунарҙа оҙаҡ йөрөп, арып, хәл алырға туҡтаған, ергә ятып торған. Шулай ята торғас, ҡолағына шишмә шылтырап аҡҡан тауыш ишетелгән. Тора ла шул тауыш сыҡҡан тирәне ентекләберәк ҡарана, ҡуйы үләндәр араһында бәләкәй генә шишмә башыны тап була. Тирә йүнде таҙарта, шишмәгә артабан юл бирә. Шишмә егет ҡаҙған урындан тағы ла урғылып сығып, артып китә. Элек бәләкәй йылғаларҙы *Һыпы* тип йөрөткәндәр. *Мәмбәт һыпыһы* тип аталған *Мәмбәтһыпы* йылғаһы әлеге көндә Мәһәҙи ауылы һыулаған йылға, биш-алты тирәһе саҡрым оҙонлоғо, *Бешәке йылғаһына* ҡоя.

**Әптерәш яланы.** 1918 йылдың йәйендә Блюхер рейды ваҡытында Каширинсылар отряды, ҡыҙыл сепрәктәр тағып, Мәһәҙейҙең *Саптарат йәйләүенә* килеп сығалар. Маликов Суфиян ҡарттың өйөр айғырын егеп, арбаына затлы кәрәк-яраҡты тейәп, ауыл яғына юл тоталар. Күптә үтмәй улар киткән яҡтан ҡара төтөн күтәрелә. Ауыл яна. Ауылға килеп сыҡҡан юламан “Һеҙҙекеләр Саптараттың был яғында, таланып, аптырашта ултыралар” — тигән. Унда ла аптыраш, бында ла аптыраш. Шунан теге яланды *Аптыраш* тип йөрөтә башлайҙар, ҡалын һуҙынҡылар нәҙеккә әйләнеп, *Әптерәш* булып китә. Хәҙер ялан *Әптерәш яланы* атамалы.

**Башарт тауы.** Борон-борондан башҡорттар һунарсылыҡ, малсылыҡ һәм төрлө кәсептәр менән шөғөлләнгән.Ул дәүерҙә йәшәгән кешеләр йылҡыны күпләп көткән. Ҡышын аттары, тай-тулаҡтары ҡар һай ерҙәрҙә тауҙарҙа тибендә йөрөгән. Яҙ етеү менән Ҡыпсаҡ башҡорттары йәйләүҙәргә күсенгән.Ҡыпсаҡ малайҙары бәләкәйҙән уҡ атҡан, үҫеп буй еткәс, алғыр һунарсы булғандар. Ҡышҡы осорҙо алдан хәстәрләп, күп кенә һунарсылар ит, аҙыҡ-түлек мул итеп туплау өсөн, йыш ҡына ауылдар, йәйләүҙәрҙе ҡалдырып, бер нисә көнгә кейек ауларға алыҫ *Ҡырака артына* һунарға сыҡҡандар. Ә бала-саға, ҡарттар ауылдарҙа ҡалған булған.

Шулай бер мәлде был яҡтарға ҡырғыҙ һыбайлылары килеп, ауылдарҙы талап, яндырып, һылыу-һылыу ҡыҙҙарҙы урлап, көтөү-көтөү малдарын ҡыуып алып китәләр. Табыштан ҡайтҡан ҡыпсаҡтар яндырылған, таланған ауылдарҙы күреп хайран ҡала. Урланған мал-тыуар, һылыуҙарҙы юҡһынып, шул көндән асыу, үс-нәфрәт тотҡан ҡыпсаҡтар ҡарымтаға әҙерләнгән. Был ваҡиға Һарғая ауылының түбән яғында булып үтә. Үҙән буйында ҡыпсаҡтар, *Шыртуғайҙа* һәм *Балайылғала* яуымбайҙар урынлаша.

Был көндө таң менән ҡырғыҙ ҡаҙаҡтарының атаманы һамаҡтай-һамаҡтай, ҡулына суҡмар урынына йылҡы малының елек һөйәген тотоп, үҙенең һыбайлыларын дәртләндерә-дәртләндерә алдан елгән тиҙәр. Әллә

ҡайҙан һамаҡлап килгән ҡырғыҙ атаманың иртәнге тынлыҡты бүлеп яңғыраған зәһәр тауышын ишетеп ҡалған ҡыпсаҡ батыры төҙәп, тегенең ҡаҡ маңлайына уҡ атып ебәрә. Уҡ маңлайға тейеп, соңҡа һөйәгенән үтә сығып китә. Ошо ерҙә тиңһеҙ алыш башлана. Ҡыпсаҡ, Яуымбай кешеләре баҫҡынсы ҡырғыҙ ҡаҙаҡтарының байтағын ҡырып һала, иҫән ҡалғандарын ҡулға алалар. Ә теге атамандың, шулай уҡ башҡа баҫҡынсыларҙың киҫелгән баштарын алып, иҫән ҡалған һыбайлыларының ҡанъяғаларына бәйләп "Был яҡтарға яуыз уй менән килгәндәрҙе ошо яҙмыш көтәсәк" — тип ҡайтарып ебәргәндәр. Бынан һуң да әле баҫҡынсылар төпкөлдәге ауылдарға аңғармаҫтан килеп китәләр. Әммә ҡыпсаҡтар менән Яуымбайҙарҙың берҙәмлеге баҫҡынсыларҙы киң урманлы был төбәккә башҡаса аяҡ баҫмаҫлыҡ итә. Ҡырғыҙ ҡаҙаҡҡтарының барымтаға йөрөүе ана шулай туҡтатыла.

Ошо ваҡиғанан һуң ҡырғыҙ һәм ҡыпсаҡтар айҡашҡан тау, йәғни баш тартып киткән тауҙы *Башарт*, йәки *Башарт тауы*, унын иңенән сыҡҡан йылғаны *Башарт йылғаһы* тип йөрөтәләр.

**Ирек котоғо.** Был хәл һуғыштан һуң булған. Заманалар ауыр. Аслыҡ яланғаслыҡ. Халыҡ "трудодень"гә эшләгән ваҡыт. Эш нормаһын үтәһәң — аҙыҡ була, үтәмәй икәнһең — һорама. Ауылдың ҡатын-ҡыҙҙарына бигерәк тә ауыр килгән. Сөнки ир-егеттәрҙең күбеһе һуғыштан әйләнеп ҡайтмаған, ҡул көсө етешмәй. Шулай бер ваҡыт эш өҫтөндә Хөснә өләсәй ауырып китә һәм ир бала донъяға килә. Эргәлә генә ҡотоҡ. Тыуғас та шул ҡотоҡ һыуы менән баланы йыуалар. Балаға *Ирек* тип исем ҡушалар. Ә ҡотоғон "*Ирек ҡотоғо*" тип йөрөтә башлағандар.

**Ишмөхәмәт күпере.** Элек был яланды урталай бүлеп, урғылып ағып ятҡан йылға булған. Ауыл халҡы шул йылға аша бесәнгә йөрөгән, утын ташыған. Күп ваҡыттарҙа унан аша сығып китә алмай ыҙалаған. Ауылдаштар араһынан *Ишмөхәмәт* исемле бер ир-егет был йылға аша матур күпер һалырға булған. Матур күпер һалынған. Ә халыҡ ул күперҙән рәхәтләнеп йөрөй башлаған, Ишмөхәмәткә рәхмәттәр әйткән. Шунан башлап күпере – *Ишмөхәмәт күпере*, ә яланды "*Ишмөхәмәт яланы*" тип йөрөтә башлағандар. Хәҙер күпер юҡ, йылғаһы бик бәләкәй булып ҡалған.

**Арҡа буйҙары.** Беҙҙең ата-бабаларҙан ҡалған һүҙ тарихы ҡомартҡыға бәрәбәр. Боронғолар емеш-еләк йыйыу, һунарсылыҡ итеү өсөн күсенеп йөрөгәндәр. Хәлһеҙҙәрҙе йөкмәп алып төшкәндәр. Был күренеш *"арҡалап йөрөтөү"* тип аталған. Хәҙерҙә ололар һөйләшеүендә шундай һүҙбәйләнештәр осрай. Мәҫәлән "*Атаһына арҡалана", "Атаһына арҡалана", "Туғандарына арҡалана"*. Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһе кешенең ышаныслы таянысы, терәге, туғандары булыуын һүрәтләй. Ә беҙ ауылдың көнбайыш өлөшөндәге тау һырттарын *Арҡа буйҙары* тип йөрөтәбеҙ. Халыҡ был ерҙәрҙә аслыҡ мәлендә төрлө үләндәре менән туҡланған. Йылыһырға утынын ташыған. Ҡыҫҡаһы, ошо тау буйҙарының байлығына таянып, арҡаланып көн күргән.

**Иҫкүлек (иҫке зыярат).** Элек Мәһәҙи ауылының зыяраты ауылдың көнбайышында тау башы яланының арғы осонда булған. Бер башҡорт

муллаһын байлығы — уты менән бергә ерләйҙәр. Күпмелер ваҡыттан һуң Мәһәҙизәрҙең береһе үлгәс, уны ерләргә алып баралар. Барһалар, ни күрһендәр, зыяраттағы ҡәберҙәр аҡтарылып ташланған була. Ауыл ирҙәре һөйләшеп, бөгөнгө төндә зыяратты ҡарауылларға булалар. Төндә ҡәбер аҡтарырға тип килгән урыҫтарҙы тоталар. Бик ҡаты алышалар. Мәһәҙизәр зыяратты ауыл эргәһендәге хәҙерге урынына күсерәләр. Йәштәр был урынды *Иҫкезыярат* тип атай, ололар телендә ул *Иҫкүлектәр* тип йөрөтөлә.

**Игәнәшкә.** Әүжән урыҫы Игнатьев башҡорттарҙан арендаға ер алып , уны кәртәләп, балаган төҙөп, һарыҡ үрсетеп ятҡан урынды “*Игнатьев*” һүҙен башҡортлаштырып, ауыл халҡы *Игәнәшкә* тип атай.

**Бейеш һуҡмағы.** Бейеш ҡараҡ тураһында үҙенә күрә бер тарих бар. Бейеш гел урыҫтарҙың иң шәп аттарын урлап йөрөгән. Урыҫтар уны гел баҫтырған, эҙләгән. Бейештең бер уңышһыҙ “һунарынан“ һуң, урыҫтар уның эҙенә төшкән. Ул кәмәгә ултырып ҡасырға мәжбүр була, урыҫтар ҡыуа төшә. Бейештең кәмәһен *Кәкретуғай* буйында урыҫтар ҡыуып етә яҙып киләләр икән. Бейеш кәмәһен йөкләп, ҡая аша тураға менгәндә киткән. Урыҫтар урап барырға мәжбүр була. Улар биш саҡрым юл үткәнсе, Бейештең эҙҙәре лә һыуынған була.

**Мәскәй түбәһе.** Был ерҙә элек-электән бик хәүефле урын тиҙәр. Сөнки был ерҙә үтә алмаҫлыҡ шырлыҡ урман булған, урмандарында ниндәй генә йән эйәләре йөрөмәгән; шүрәле, албаҫты, мәскәй. Кистәрен һәр саҡ был мәскәй ҡалҡып сыҡҡан. Ауыл халҡы ул ерҙәрҙә яңғыҙ ярым йөрөргә ҡурҡҡан, сөнки урманға сыҡҡан һәр кешегә күренмәйенсә ҡалмаған. Шуға күрә лә был ерҙе “*Мәскәй түбәһе*” тип йөрөткәндәр.

**Күҙгәнәк яланы.** Элек ауылдар бәләкәй-бәләкәй булып төрлө ерҙә ултырған. Ҡаҡы менән Мәһәҙей ауылы араһында ла күп булған. Әүжән, Ҡағы рустары ауылдарҙы талап, яндырып йөрөгәндәр. Хәҙерге күҙгәнәк яланында ла элек ауыл булған. Рустар ауылды үртәп, ҡапҡаларҙы, индектәрҙән һайғауҙарҙы алып ҡасҡандар. Шулай ҙа бер бөртөк кенә индек бағанаһы тороп ҡалған. Элек индек бағанаһын *күҙгәнәк* тип йөрөткәндәр. Шунан бирле яланды “*Күҙгәнәк*” *яланы* тип йөрөткәндәр. Хәҙер унда иген баҫыуы, иген үҫтерәләр.

**Алтымөйөш яланы.** Элек Мәһәҙей менән Ҡағы араһында ауылдар булған. Хәҙерге *Алтымөйөш яланында* бер ауыл булған, халыҡ йәшәгән. Ундағы халыҡты рустар бик ыҙалатҡан. Малдарын талап киткән. Халыҡ ҡаршы торған. Шулай бер көндө урыҫтар был ауылдың ерҙәрен баҫып алыу өсөн һөжүм иткәндәр. Уларҙың малдарын алып, ауылдарын яндырғандар. Халыҡ урман төпкөлдәренә ҡасҡан. Ундағы өйҙәрҙән алты мөйөшлө өй генә ултырып ҡалған. Шунан башлап был тирәне “*Алтымөйөш*” *яланы* тип йөрөткәндәр.

**Рәхим соҡоро.** Был хәл 1964 йылдың апрель айында була. Бер килкем 1951 йылғы малайҙар 4 синыфты тамамлап барғанда (*Насыров Рәхим, Хасанов Султан, Мөхәмәтйәнов Юлай, Ишбулатов Фәрит*) ауылдың көнъяғына ҡараған *Элгеләү* итәгендә, бульдозер юл эшләү өсөн ҡаҙған соҡор эргәһендә һыу сәсрәтеп уйнап йөрөп ятҡанда, аңғармаҫтан *Насыров Рәхим*

шул соҡорға төшөп китә. Ул бер һыу аҫтын сумып, бер ҡалҡып сығып торғанын күргәс, малайҙар ҡаушап ҡала, улар араһында *Хасанов Солтан* барыһынан да алда нимә булғанын аңлап өлгөрөп, тиҙ генә таяҡ һуҙа. Рәхим, шул таяҡҡа тотоноп сығып, ошо бәләнән ҡотолоп ҡала. Күл төбөндә уның һыңар кирзауай итеге ултырып ҡала, тап ошо ваҡиғанан һуң халыҡ был соҡорҙо "*Рәхим соҡоро*" тип атай башлай.

**Һалдат оҙатҡан ер.** Ауылдың көнъяғында ятҡан *Элгеләү һыртына* ҡараған ерҙе, ауыл халҡы *Һалдат оҙатған ер* тип атап йөрөтә. Сөнки әрме сафтарына алынған егеттәрҙе, ауыл халҡы 60, 70, 80 йылдарҙа шул ергә барып оҙата торған булған. Хәҙерге ваҡытта әрмегә ҡараш үҙгәргәнгәме, әллә оло юлдың ауылды урап үткәнгәме, был ергә хәҙер бик үк сығып оҙатып ҡалмайҙар. Шулай ҙа ҙур байрамдар был ер ауыл йәштәренең яратҡан урыны булып тора.

**Ғәлләмов Нурислам**
Фәнни етәксеһе: **Гарипова Шәүрә Исрафил ҡыҙы**

## БЕЛОРЕТ РАЙОНЫ АСЫ АУЫЛЫ — БЕҘҘЕҢ ҒОРУРЛЫҠ

Ауылым — минең ғорурлығым. Уның тәбиғәте лә, кешеләре лә бик матур. Асы ауылы тарихҡа ла бай ер. Был ерҙә борон-борондан бик егәрле, тырыш, уңған халыҡ йәшәгән һәм йәшәй. Уның үткәнен дә, бөгөнгөһөн дә ҙур ғорурлыҡ менән телгә алырлыҡ.

Мин ауылымдың үткән тарихы менән күптән түгел генә ҡыҙыҡһына башланым һәм уны ныҡлап өйрәнергә булдым. Сөнки ул минең ата-бабайҙарым, олатайҙарымдың тормош юлы. Беҙ уларҙы белеп үҫергә тейешбеҙ. Тарихҡа минең ҡыҙыҡһыныуым уҡыу дәрестәрендә тарихҡа ҡағылышлы хикәйәләрҙе уҡығандан һуң тыуҙы. ҙур теләк менән был эшкә тотондом уҡытыусым Шәүрә Исрафил ыҙы Гарипова ярҙамында. Тәүҙә ауылда эшләп килгән тирә-яҡты өйрәнеү музейына барып материалдар менән таныштыҡ, оло кешеләр, ауылдың аҡһаҡалдары, ағинәйҙәре менән осраштыҡ, гәзит материалдарына ла күҙ һалдыҡ. Һәм мин күп нәмәләр тураһында белдем, ишеттем. Маҡсатым — ауылымдың үткәнен яҡшылап өйрәнеп киләһе быуынға еткереү, һаҡлап алып ҡалыу.

Ауылыбыҙ элек-электән йүкә балы менән дан тотҡан. Данлыҡлы солоҡсоларыбыҙ ҙа, умартасыларыбыҙ ҙа булған. Мәҫәлән, *Ғарипов Фәттәхетдин, Ғирфанов Мөхәмәтдин, Йосопв Ғәлиәкбәр, Иҡсанов Мөхәмәтсафа, Хәйризаманов Шаһимәрҙән, Ғайсин Бәҙәлитдин* бабайҙарҙың оҫталығы тирә-яҡ ауылдарға ла киң билдәле булған. Улар ишле ғаиләләрен ҡарау өсөн ошо файҙалы ла һәм төшөмлө лә кәсеп менән шөғөлләнгәндәр. Хәҙер уларҙың ҡайһы берҙәренең улдары ла, ейәндәре лә бал ҡорто тота, аҫырай, килемле табыш ала. Һәм тирә-яҡтан күпләп килеп һатып алалар. Шулай уҡ ауылда күпләп мал аҫырап, уларҙы һатып аҡса эшләүселәр, сауҙа итеүселәр ҙә байтаҡ булған. Мәҫәлән, *Ғәббәсов Зыятдин* бабай Ҡытау-Иван

баҙарына барып мал һатыр булған. Ә Әбдрәшитов Зариф бабай үҙе лавка асып, ауылдаштарына кәрәк-яраҡ һатҡан, аҙыҡ-түлек килтерткән. Уның бөгөнгө көндә лә таштан һалынған лавкаһы һаҡланып ҡалған һәм бер тарихи ҡомартҡы булып ултыра. Үҙәктән ситтә йәшәһәләр ҙә, ауыл халҡы бер ваҡытта ла ҡул ҡаушырып ултырмаған. Үҙ йүнен ҡалай ҙа күрергә тырышҡан. Шуға күрә лә ауылда хәлле генә йәшәгән кешеләр бик күп булған.

Ауыл халҡының төп эше — урман ҡырҡыу булған. Ауылыбыҙ тирә-яҡтан өҫкә ауып барырҙай ҡалын ҡарурман менән уратып алынған булған. Бөгөнгө көндә урманыбыҙ бик һирәк ҡалған, әлбиттә. Сөнки элек ағас бик күпләп ҡырҡылған, ситкә оҙатылған. Һал ағыҙғандар, һалабаш һалғандар. Был эш гел генә яҡшы бармаған, зыян да күп күргәндәр һал ағыҙған мәлдә, һалдар таралып китеп. Фәжиғәле осраҡтар ҙа ҡабатланып торған, әммә кешеләр бирешмәгән, өйрәнгән эштәрен ташламағандар. Сөнки балаларҙы ҡарар  кәрәк, илебеҙгә лә ағас күп талап ителгән, бигерәк тә һуғыштан һуң. Һуғыш ваҡытында беҙҙең яҡтың урманы ла ҙур файҙа килтергән. Ҡайын ағасы суйын иретеү заводы өсөн күпләп ҡырҡыла, күмер кәрәк була. Шулай уҡ ҡайын ағасының таҡтаһынан фанера эшләгәндәр, ә фанера самолеттар эшләү өсөн ҡулланылған. Урман ҡырҡыусылар араһында беҙҙең ауылдаштарыбыҙ ғорурлығы “алтын балтасылар”ҙа булған йәки икенсе стахановсылар. Улар эштәрен норманан тыш арттырып үтәгәндәр. Бына улар – *Мөкөйөв Ғәлиәскәр, Сәмсетдинов Йосоп* бабайҙарҙы ҙур ғорурлыҡ менән иҫкә алалар ауылдаштар. Шулай уҡ Инйәр леспромхозында тырышып эшләгән данлыҡлы урмансылар – *Нурмөхәмәтов Аллабирҙе, Саҙретдинов Исламетдин, Ҡаһарманов Хәсән, Ғарипов Мөхәмәтйән, Дәүләтбаев Хәмит, Мөхәмәт һәм Салауат Күсәрбаевтар, Шәрипов Әбделғәни, Насипов Фәрит, Аҙнабаев Алтынбай, Фәсхетдинов Сәләхетдин*, уларҙың улдарын, ейәндәрен һәм башҡа бик күптәрҙең ғаиләләрен  маҡтап телгә алалар асылар.

Ауылыбыҙ уртаһынан йылға ағып ята. Ауыл халҡы ошо һыуҙы эсә, ҡуллана. Был йылға *Тоҙ йылғаһы* тип атала. Уның атамаһы тәменә ҡарап бирелгән. Сөнки Инйәр йылғаһына ҡойған ерендә уның тәме тоҙлораҡ. Уға был тәмде *Асы шишмәләре* бирә. Ошоға бәйле йылғаны *Тоҙ йылғаһы* тип атайҙар. Был йылғаның башы ауылдан 10 саҡрым алыҫта башлана һәм уға ундан ашыу шишмә, йылғалар ҡушыла. Йылға башланған ерҙе *Тоҙ башы*, *Тоҙ тамағы* тип йөрөтәләр. Уның башланған урынында ла, ҡушылдыҡтарында ла тоҙ тәме юҡ. Тоҙға ҡытлыҡ замандарҙа тоҙ ҡайнатып алғандар, һатҡандар ҙа.

Өләсәйем һөйләүе буйынса, 1922 йылда ошо тоҙ һыуы ағып сығып ятҡан тау аҫтынан ыңғырашҡан, уһылдаған тауыштар сыҡты. Тоҙ һыуының хужаһы һыуҙы бисмиллаһыҙ алғандары өсөн үҙенең ризаһыҙлығын белдерҙе, тип аңлатты өләсәйем, тине Миңлеғәле бабай. Өләсәйем 103 йәшендә үлеп ҡалды, тине.

Ауылыбыҙ халҡы бөтә ил кисергә иң оло бәлә — Бөйөк Ватан һуғышын ил менән бергә күтәрә. Ҡулына ҡорал тоторҙай 100–ҙән ашыу ауылдашыбыҙ яуға китә һәм шуларҙың тик яртыһы ғына тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта ала. Өләсәйҙәр бөтә булған ауырлыҡтарҙы үҙ елкәләрендә

күтәреп донъя көтә, балаларын үҫтерергә тырыша. Бирешмәйҙәр, балаларын матур итеп тәрбиәләп, уҡытып кеше итәләр, хөкүмәткә лә эшләйҙәр. Мәҫәлән, ирҙәре һуғышта ятып ҡалған инәй-өләсәйҙәр *Абзалова Мәрзиә — биш бала, Абзалова Ҡорбанбикә, Ғарипова Хәтифә, Ғәлләмова Сажиҙә, Шаһивәлиева Көмөшбикә, Фәсхетдинова Ғәлимә, Мөхәмәткилдина Сания — дүртәр, Сөнәғәтова Мәхмүзә, Мөхәмәткилдина Бибиямал — өсәр, Дәүләткилдина Ғәзизә, Хәҙиәтова Фәрхениса, Харрасова Мәхүбъямал, Абзалова Фәтиха* — икешәр баланы яңғыҙ үҫтерәләр.

*Асы ауылы* тәүҙә *Иген тауында* урынлашҡан булған. Яңы тыуған балалар үлеп тик торған һәм ауыл халҡы түбәнгә, әле йәшәгән урынға, аҫҡа төшөп туғайға күсеп ултырғандар. Унда зыярат булған, урыны әле лә беленеп ята. Ауылыбыҙ элек бик бәләкәй генә булған. Һалабаш йәки ҡабыҡ башлы тәпәш кенә ер иҙәнле, 4 – 4,5 м булған өйҙәрҙә йәшәгән кешеләр.

“1922 йылдарҙа аслыҡ ваҡытында ауылда приют булған йәтим ҡалған балалар өсөн Хутор ерендә. Аслыҡтан, шулай уҡ холера, тиф ауырыуынан балалар бик күп үлгәндәр. Зыярат битләүе балалар ҡәберлектәре менән тулған булған. Ерләп өлгөрә алмағандар,” — тип һөйләне Әүзәр Таипов бабай.

Коллективизация осоронда кемдәрҙер килеп *Иген тауында* һыйырҙар, ә *Иҫке ҡышлау яланында* аттар бикләп колхоз ойоштороорға маташҡандар. Ләкин аттары ҡасып сығып китеп “Колхоз килеп сыҡмай,” тип ҡайтып киткәндәр. Шунан һуң ныҡлап һал эшенә тотонғандар, тип аңлатты шулай уҡ Әүзәр бабай.

“1924 йылда ауылда больница һәм мәктәп һалына. Шул йылда ауылда наҙанлыҡты бөтөрөү маҡсатында ликбез асыла. 1926 йылда ул башланғыс мәктәпкә әйләнә. Тәүге башланғыс класс уҡытыусылары Ғүмәров Ғ., Хәйерова Г., Ислам Гатин була. Һуңынан 1939–40 йылда тулы булмаған 8 йыллыҡ мәктәп, ә 1959-62 йылдарҙа 8 йыллыҡ һәм 1967 -68 уҡыу йылы башынан урта мәктәпкә әүерелә. 1968 йылда тәүге сығарылыш 10 класс бөтөп сыға.

1927–28 йыл беренсе пионер ойошмаһы төҙөлә, беренсе пионер вожатый Хәйерова Г. апай була, ә беренсе пионерҙар Йосопов Ә., Таипов И., Түләбаев М. һ.б. була.

1928 йылда комсомол ойошмаһы ойошторола, беренсе комсорг Мәжитов С. һайлана, ә тәүге комсомолецтар Йосопов Х., Абзалов Б., Шәрипов Г. һ.б. була.

1930 йыл йәки 1933 йылмы икән мәсет манараһын емереп клуб итәләр, манараның айы ысҡынып осоп китә, күпме эҙләһәләр ҙә таба алмайҙар уны. Мәсет манараһын емергән кешеләрҙең береһе лә һуғыштан кире әйләнеп ҡайтмай, халыҡ уларҙы хоҙай язалаған тип бара.

1938 йылдарҙа беҙҙең ауылға, илдә репрессия башланғас, Латвия яғынан бер-нисә ғаилә ҡасып килеп, *Хутор яланына* төпләнеп, шунда йәшәй башлайҙар. Шуларҙың береһе Рейхман Анст Фрицевич:” Өс ай арба менән юлда булдыҡ,” — тип һөйләне тине *Иксанов Миңлеғәле Фәйзрахман* улы, ишеткән-күргәндәрен иҫкә төшөрөп. Уның исемен еңелләштереп *Антон*

*Федорович* тип йөрөткәндәр. Бөтәһе 11 йорт йәшәгәндәр латыштар. Бик тырыш халыҡ булғандар. Һәр береһе күпләп мал аҫыраған, ҡорт тотҡан. Ауыл халҡы менән тыныс, дуҫ, татыу, аралашып йәшәгәндәр. Башҡорт ерендә йәшәһәләр ҙә үҙ ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын һаҡлап йәшәгәндәр, балаларына ла бында тыуһа ла латыш исемдәре ҡуштылар, тиҙәр ололар. Нарсеева Зоя Васильевна тигән апай уҡытыусы булған, ауылда балалар уҡытҡан. Вера әбей оҙаҡ йылдар сельсоветта секретарь булып эшләгән. Улар барыһы ла мәрхүм инде. Балалары төрлө яҡтарға күсеп китәләр. Тыуып үҫкән ерҙәрен һағынып, һуңғы йылдарҙа балалары ауылға, Хуторға, килеп китәләр

1954 йылда ауылда тәүге кино күрһәтелә. Киномеханик булып Таипов Әүзәр бабай эшләй. “Бәләбәйҙә уҡып ҡайттым. Свет юҡ. Двигатель менән күрһәтәбеҙ киноны. Кинотаҫмаларҙы 25 км алыҫ ятҡан Инйәр ауылынан йәйәүләп барып һал менән ағып төшөп алып ҡайта инек, һуңынан арба менән йөрөп ташый башланыҡ. 49 йыл эшләнем был эштә. Нисәнселер йылда кино күрһәтеү буйынса беренсе урын алдыҡ,” — тине ул ғорурланып.

“1959-60 йылдарҙа тимер юлы төҙөү өсөн үлсәп, трасса ҡағып киткәндәр. Тимер юлы, Инйәр йылғаһын аша сыҡмай уратып үтеп, тау битләүҙәренән үтергә тейеш була. Был эш бер нисә йылға туҡтап тора, тик 1975 йылдарҙа Ҡарлыман–Белорет–Магнит тимер юлы төҙөлә башлай һәм планы ла үҙгәртелеп, Инйәр йылғаһы аша ҙур күпер һалынып, ауыл ситенән үтеп китә. Күп кенә өйҙәрҙе икенсе урынға күсерергә тура килә.

1958–59йылдарҙа Асы һыуын алыр өсөн ағас торбалар эшләгәндәр, ыҫмалалы таҡталарҙан. насос менән һыуын һурҙыртҡандар. Ләкин был барып сыҡмай, яңынан суйын торбалар килтереп һалалар, будка ултырталар. Таҡталарын мәктәпкә ташып алдыҡ, хеҙмәт дәресендә ҡулландыҡ.

1965 йылда мәктәпкә свет үткәрҙеләр. Яҡупов Ғәләүетдин ағай моторист булды, ул тракторист ине. 1970 йылдарҙа Ямаштынан леспромхоз беҙҙең ауылға күскәс, ауылда свет яна башланы, шулай уҡ двигатель ярҙамында. Унда ла тик ярты ауылға ғына ине. Төнгө сәғәт 11-ҙә өс тапҡыр сигнал бирә лә һүндерә торған инеләр. Тик 1976 йылдар тирәһендә генә электр уты үтте, уныһы ла ауылдың яртыһында ғына янды,” — тип иҫенә төшөрҙө үткәндәрҙе *Гарипов Буранбай Мәхмут* улы.

Ауылда герман һуғышына тиклем бер кеше лә тәмәке тартмаған. *Әхмәтов Мөхәрләм*, уны “*Бохар Мөхәрләм*” тип йөрөткәндәр, беренсе тәмәке тартҡан кеше булған. Ул Герман һуғышынан өйрәнеп ҡайтҡан.

Ауылым тарихы, ер-һыу атамалары уның көнкүрешенә, үҙенең башынан үткәненә, күргәненә кисергәненә бәйле. Бик күп тарихи ваҡиғалар онотолған, күбеһен онотҡандар, атай-олатайҙарҙан белешеп ҡалынмаған. Шулай ҙа белгәндәр бар әле, уларҙан һорашып, яҙып ҡалырға кәрәк. Беҙ үҙебеҙҙең үткәнебеҙҙе белергә, һаҡларға бурыслыбыҙ, онторға тейеш түгелбеҙ. Йыяһы материалдар бик күп әле, был эшемде мин артабан да киләсәктә дауам итермен.

**Ер – һыу атамалары:**

**Мәләкүрҙең** икенсе варианты “Мен дә күр” тигәндән алынған тип тә әйтәләр.

**Шәһәрләк** йәки **Шәһәрлек**. Бөтә барған юл ауылдан 30 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан исемһеҙ яланға барып сыҡҡан. Борон шул яҡтан Ҡытауға, Катавҡа инде, эш эҙләп заводҡа киткәндәр, йәнәһе лә шәһәргә (ҡалаға) баралар. Икенсе варианты, яландар иркен матур, ҙур сабынлыҡтар, “Бына ҡайҙа ул шәһәр!”тигәндәр, йәки зәһәр, матур ерҙәр тигән аңлатмаһы ла бар.

**Юрмаш яланы** — юл башы, ошо Шәһәрлеккә барып сыға. Тағы ла, унда йылға ағып ята, юрмалап ағып ятҡан йылға. Ике вариантта.

**Сысҡан туғайы** — ҡасандыр унда кешеләр, *сысҡан аралары* йәшәгән. Йәшәргә урын етмәгәс, яңы урын эҙләп, Ғәбдүк яғына күсеп киткәндәр. Әле лә уларҙы *сысҡандар* тип йөрөтәләр.

**Ҡыйғас яланы** — ҡыҙыл балығы күп икән йылғаһында, иң ауыры 20 кг тартҡан.

**Өс ҡат тауы** — өс ҡаттан тора. **Берғат** — беренсе ҡаты.

**Ослo тау** — тауҙың бер мөйөшө ослайып сығып тоған, һуңынан шул ерҙә мрамор табып сығара башлайҙар ҙа, йәһәт кенә сығарыуҙан туҡтап, ташлап ҡуялар.

**Ялпы** — “*ялпыс”, “ялпыҡ””ялпылдаҡ*”, тау итәге, күлдәк итәгенә оҡшап тора. Икенсе вариантта, ҡаҙаҡ теленән “*жалпы”, “жал*” тигән һүҙҙән килеп сыҡҡан. Сөнки ошо урында ҡасандыр күсенеп йөрөгән ҡаҙаҡтар йәшәп киткәндәр, ял (жал) иткәндәр.

**Шишмә тамағы** — шишмә ағып сыға.

**Ҡушҡайын** — ҡуш ҡайын үҫеп ултырған.

**Бикәш тамағы**, **Бикәш буйы** — бик йәш ҡыҙыҡай үлгән шул урында йәки йәш кенә ҡыҙҙы урлағандар. **Бикәс** варианты ла булыуы мөмкин.

**Сирайкин яланы** — *Сирайкин* тигән кеше исеменә бәйле.

**Түңәрәк аласыҡ** — икенсе варианты *Алсынбай*, *Исламетдин бабайҙарҙың* сабынлығы булған. Шул урында, ағастан түңәрәкләп, аласыҡ кеүек нәмә эшләп ҡуйғандар.

**Әпхәлип шаршыһы** — шул кеше гел генә ошо урында балыҡ ҡармаҡлаған.

**Алағуян** — ала ҡуян һүҙенән.

**Ҡондоҙ ояһы** — Инйәр йылғаһының бер ҡая таш төбөндә ҡондоҙ күп булған.

**Күбә таш** — күбәгә оҡшап торған урын, йылға ташҡас, вертолет менән боҙ шартлатҡанда юҡҡа сыға. Шунан аҫтараҡ “*Степан йәки Стапан араһы*” — *Степан* тигән кеше бесән сапҡан.

**Мәйсәр ятыуы** — *Мәйсәр* исемле кеше һыуға батып үлгән. Шул урында пристань булған, һал башлап ағыҙып алып киткәндәр.

**Тәрән кисеү**, **Һай кисеү** — йылға кисеүҙәре.

**Әсәнде** — *Әсенде* йәки *Әфәнде* булыуы мөмкин.

**Һәүән тамағы** — Машай яланының өҫ яғында ағып ятҡан шишмә, *Һәүән* исемле кеше исеменә бәйле.

**Ҡускан буйы** — икенсе варианты “*Күскән*“, йәйләүгә шунан күсенгәндәр, тигән фараз бар.

**Тоғосторған** — ҙур яландар, кемдеңдер тоғо осоп киткән йәки осоп ҡалған, тиһәләр, икенсе кеше аңлатыуы буйынса, ул ерҙә *Тоғос* исемле кеше йәшәгән, тип әйтелә. Шул яланға яҡын ғына **Кеҙәле** исемле ялан бар. Ул урынға көҙ еткәс йәйләүҙән һуң көҙләргә төшкәндәр, йәки көҙҙө шунда үткәргәндәр, малдарын ашатҡандар ҡышҡа тиклем. Тағы бер аңлатмаһы, ул яланға икенсе кешеләрҙе индермәгәндәр, йәнәһе бикле (йоҙаҡлы), *кеҙә* эленгән.

**Һарыоя** — шул ерҙә һары төҫтә сая, йыртҡыс ҡош йәшәгән, ояһы булған тип аңлаталар.

**Абзал ҡылы** — йылға, әле лә ағып ята, Инйәр йылғаһына барып ҡушыла. Бигерәк тә аяҙ көндө ер аҫтынан бәреп сығып урғылып аға.

**Белешмәләр, аңлатмалар алынды** (таянып яҙылды):
Абзалов Марат Йомабай улы, пенсионер, 69 йәш, тарих уҡытыусыһы.
Иҡсанов Миңлеғәле Фәйзрахман улы, енсионер, 76 йәш.
Таипов Әүзәрбабай, 84 йәш.
Гарипов Буранбай Мәхмут улы, 69 йәш.
Закирова Тәғзимә Әүхәҙи ҡыҙы, 68 йәш.
Садретдинов Насретдин Исламетдинович, 79 йәш.

**Дауытова Гөлиә Ирек ҡыҙы**
Фәнни етәксеһе: **Раянова Алһыу Ураз ҡыҙы**

## АУЫРҒАЗЫ РАЙОНЫ ТҮРҪӘГӘҘЕ АУЫЛЫ ХАЛҠЫНЫҢ ЙӘНЛЕ ҺӨЙЛӘҮ ТЕЛЕ

Ауырғазы районы — күп милләтле төбәк. Халыҡтарҙың төрлөлөгө мәҙәниәтебеҙҙе байыта, байрамдарға үҙенсәлекле биҙәк өҫтәй. Уларҙың бер-береһе менән аралашыуы һөҙөмтәһендә телдәр оҡшашлығы барлыҡҡа килә. Таштамаҡ ауыл биләмәһе өс ауылды берләштерә. Беҙҙең *Түрҫәгәҙе ауылында* башҡорттар, *Усманда* — татарҙар, *Таштамаҡта* сыуаштар йәшәй. Улар бер-береһенең телендә иркен һөйләшә, бигерәк тә оло быуын кешеләре.

Ғилми эшемдең төп темаһы — Түрҫәгәҙе халҡының йәнле һөйләү теле һәм уны өйрәнеүҙең әһәмиәте.

Башҡорт теленең диалекттарын һәм һөйләштәрен өйрәнеүҙең тел тарихы өсөн әһәмиәте ғәйәт ҙур. Сөнки башҡорт теле бик оҙайлы тарихи үҫеш юлы үткән тел. Бер территорияла күрше булып, малсылыҡ, игенселек менән тығыҙ аралашып йәшәү бер-береһенең теленә йоғонто яһаған. Телдәге уртаҡлыҡтар ваҡыт үтеү менән нығынған.

Быуаттар дауамында телдәрҙең бер-береһенә әүҙем йоғонтоһо һөҙөмтәһендә сыуаш, мари, удмурт һәм башҡа телдәрҙәге дөйөм һыҙаттар

башҡорт һөйләштәрендә эҙ ҡалдыра. Шуға күрә телдең тарихи үҫешен тикшерергә географик факттарға ла иғтибар итеү әһәмиәтле.

Башҡорт һөйләштәре географик йәһәттән бик киң таралған. Алда әйтеп үтеүем буйынса, беҙ сыуаштар менән киң аралашып йәшәйбеҙ. Шуға күрә лә ғилми эшемә ҡушымта рәүештә, сыуаш һәм башҡорт телендә өндәрҙең һәм һүҙҙәрҙең фонетик оҡшашлағын өйрәнеүгә бер аҙ туҡталып үтеүҙе кәрәкле тип һанайым.

Ғилми хеҙмәттең төп маҡсаты — көнъяҡ диалектҡа ҡараған Түрҫәгәҙе һөйләшенең фонетик, морфологик, лексик үҙенсәлектәрен өйрәнеү

– һөйләштәге лексик үҙенсәлектәрҙе әҙәби телгә мөнәсәбәттә ҡарау,
– һөйләштәге үҙенсәлекле диалект күренештәрен анализлау.

Хеҙмәттең ғилми яңылығы шунда: был тикшеренеү эше Түрҫәгәҙе буйы башҡорттарының һөйләү теленә ҡараған диалект һүҙҙәренә баҫым яһау.

Түрҫәгәҙе буйында йәшәгән халыҡ йәшәү дәүерендә, телдә үҙҙәре ҡулланған һүҙҙәрен әкеренләп йәнһеҙ тәбиғәт, ер-һыу, тәбиғәт торошо, йәнле тәбиғәт, үлән, үҫемлек, ҡош-ҡорт, йәнлек һәм башҡаларға күсергән.

*песән* — бесән — сено;
*ысҡылыҡ* — икота — осҡолоҡ;
*маңалай* — маңлай — лоб;
*күсмәкүс* — божья коровка;
*терҫәк* — терһәк — локоть;
*ҫыу йатыуы* — һыу ятыуы — глубокое место в реке;
*инәй* — әҙ. әсәй — мать;
*аламаҡ* — әҙ. алама — плохой;
*атна* — әҙ. аҙна — неделя;
*ҫаҙ песәне* — һаҙ бесәне;
*ҫике* — һике;
*балдырған* — әҙ. т. балтырған — борщевик;
*арҡа ҫабағы* — әҙ. умыртҡалыҡ.

Һөйләштәге ҡайһы бер диалектизмдар халыҡтың тәңрегә табынған заманынан уҡ ҡалған. Шулай ҙа быуаттар төпкөлөнән килгән был заттарға ышаныуҙар әле лә йәшәй.

*Тащ ҫалыу* — әҙ. т. ноҡот ташы, *Әвейгә таш ҫалдыра барҙым, әйверемне кем урлағанын белергә.*

*Өй эйәҫе* — домовой. Ғөмүмән, һәр нәмәнең эйәһе бар, тип ышанған беҙҙең халыҡ.

*Ҡот ҡойоу*_— ҡурҡып сирләгәндә ҡурғаш иретеп һыуға һалып ҡарау. Ниндәй һын төшһә, шунан ҡурҡҡан тип имләнә, доға уҡыла.

Ер эшенән һуң арыған, ергә ятып тәгәрәп “*Йер, көсөмнө бир, көсөмнө бир, көсөмнө бир”* — тип һорайҙар.

Бала тәрбиәләгәндә тәүфиҡлылыҡ билдәһе әйтелә:

*Аяғыңды ҫелкеп ултырма, шайтан эйәләй.*

*Ҫыңар айаҡ ашама — айағың имгәнер*. Не ешь стоя по одной ноге — к увечью.

*Үкçәңне çөйрәп атлама* — йүнçеҙ кеше була. Не шаркай подошвой, неряшливо.

*Үксә тәүләй тишелçә* — йүнһеҙ. Если первым в носке дырявится пятка — неряшливость һ.б.

Түрçәгәҙе һөйләшендә төрлө һынамыштар, һамаҡлауҙар ҙа бар. Мәçәлән, тәүге тапҡыр аҙыҡ тәмләгәндә "*Иçке ауыҙ, яңы аш, ауырыу-сырхау миннән ҡас",* — тип ауыҙға алалар.

Мәҡәлдәр, әйтемдәр, фразеологизмдар ҡулланыла.

*Кем тапҡан, шул ҡараçын.* — Дети должны воспитываться родителями.

*Уттан ҡалмай, бурҙан ҡала.* — От огня ничего не остается, от вора остается.

*Бәхетлленең ҡунағы бергә.* — У счастливого гости приходят вместе.

*Çалпы яҡҡа çалам ҡыçтырыу.* — Использовать слабые стороны человека.

Үҙенең формалашыуында беҙҙең һөйләш оҙайлы ваҡыт күршеләш сыуаштар менән аралашып йәшәү сәбәпле, тормош-көнкүреш лексикаһының уртаҡлыҡтары күп.

- Сыуаш телендә 37 хәреф, уларҙың 33-ө башҡорт теленә ҡараһа, 4 хәреф (ă, ĕ, ÿ, ç) үҙенсәлекле сыуаш өндәрен белдерә.

Башҡорт телендә 42 хәреф. Ул рус алфавитының бөтә 33 хәрефен һәм башҡорт теленә хас 9 өндө күрһәтеүсе хәрефтәрҙе үҙ эсенә ала (**ө, ү, ә, ғ, ҙ, ҡ, һ, ң, ҫ**). Хатта үҙенсәлекле сыуаш өнө [**е**] әйтелеше буйынса башҡорт теленә хас [**ө**] өнөнә яҡын. *Емĕт* – өмөт, *тĕтĕн* – төтөн, *тĕрлĕ* – төрлө.

- Башҡорт һәм сыуаш телдәрендәге баçымлы һәм баçымһыҙ һуҙынҡылар бер төрлөрәк яңғырай. Ҡағиҙә булараҡ, ике телдә лә һүҙ баçымы (әгәр ҙә һүҙҙә **ă, ĕ** өндәре булмаһа) артҡы ижеккә төшә. Ялғауҙар өçтәгән һайын ижек артҡа күçә бара:

*Урман — урмандар — урмандарҙа;*

*Ача — ачасем — ачасемпе.*

Айырым осраҡтарҙа башҡорт телендә лә, сыуаш телендә лә баçым беренсе ижеккә лә, урталағы ижеккә лә төшә. Был бигерәк тә рус теленән һәм рус теле аша үҙләштерелгән һүҙҙәргә ҡағыла. Был һүҙҙәрҙә баçым төп телдәге урынын юғалтмай.

- Сыуаш теле башҡорт теленән айырмалы үҙенсәлектәргә эйә. Мәçәлән, сыуаш телендәге **р** хәрефе булған күп һүҙҙәр башҡорт телендә **ҙ** хәрефе менән алмашына: *пăр* – боҙ, *тăххăр* – туғыҙ, *хĕр* – ҡыҙ, *хĕрлĕ* – ҡыҙыл, *урай* – иҙән, *тăвар* – тоҙ, *кĕр* – күҙ, *çĕр* – йөҙ.

- Сыуаш телендәге **в** башҡорт һүҙҙәрендә **у** йәки **ү** менән алмашына: *вăкăр* – үгеҙ, *вăрман* – урман, *вăтăр* – утыҙ, *вăл* – ул, *вăхăт* – ваҡыт, *вакă* – ваҡ.

- Сыуаш телендә һүҙҙәрҙә **с** хәрефе булһа, башҡорт телендә **һ** хәрефе тора: *сĕт* – һөт, *сарă* – һары, *сенĕк* – һәнәк, *супăнь* – һабын, *сухан* – һуған, *суҡмаҡ* – һуҡмаҡ, *салма* – һалма, *сурăх* – һарыҡ.

- **Ч - с** менән алмаштырыла: *чир* – сир, *чәй* – сәй, *чёп* – себеш, *начар* – насар, *мунча* – мунса.

Шулай итеп, Түрҫәгәҙе буйы башҡорттарының һөйләү телен күҙәтеү, өйрәнеү, тикшеренеүҙәр алып барыу был һөйләштең районыбыҙҙағы башҡа ауыл һөйләштәренән бер ни тиклем айырыла тигән фекер белдерергә мөмкинлек бирҙе.

Ауылыбыҙҙың һөйләшендәге **ç** өнө әҙәби телдән дә һәм башҡа һөйләштәрҙән дә ҡырҡа айырыла.

- күплек ялғауҙарының фонетик варианттары – **лар, - ләр; - нар, - нәр**: таңнар, маллар.
- зат алмаштарының эйәлек, сығанаҡ килештә үҙгәреше диалект форма тыуҙыра: эйәлек килеш: беҙең, çеҙең, сығанаҡ килеш: миннән, çиннән, аннан.

Алдағы көндәрҙә лә мин ғилми хеҙмәтем өçтөндә эшемде дауам итергә уйлайым.

Түрçәгәҙе буйы халҡының һөйләше, шулай уҡ сыуаш һәм башҡорт телендә һүҙҙәрҙең оҡшашлығын тикшереүгә лә ҡыҙыҡһыныуым бар.

**Информанттар исемлеге:**

1. Раянова Минегөл Ғәлим ҡыҙы, 86 йәш (тыл һәм хеҙмәт ветераны)
2. Дауытов Нәфиҡ Нух улы, 80 йәш (шәхси архив материалдарынан)
3. Привалова Алевтина Ивановна, 54 йәш

**Ишмөхәмәтов Ғаян**
Фәнни етәксеһе: **Ҡылысова Гөлсәсәк Салауат ҡыҙы**

## БӨРЙӘН РАЙОНЫ ҒӘЛИӘКБӘР АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

Белем һәм тәрбиә биреү өлкәһендә йәш быуында үҙ иленә, теленә, еренә, әҙәбиәтенә һәм мәҙәниәтенә, халҡына һөйөү тәрбиәләү мәсьәләһе бик кәрәкле һәм көнүҙәк. Шулар араһында тыуған төйәккә ҡарата кесе йәштән үк изге тойғолар үçтереү, тыуған ергә, үҙ тупрағыңа еректереү ҙә иң мөһимдәренең береһелер. «Тыуған төйәккә булған һөйөү балаларға үҙе донъяға килгән йорттан, тымыҡ ҡына ағып яткан йылғанан, төрлө уйындар ҡорған, сихри серле ваҡиғаларға бәйле урындарҙан башлана. Ул үҙ ауылыңа, ҡалаңа, тыуған төбәккә, икһеҙ-сикһеҙ киңлектәргә бай һәм һәр кемгә яҡын беҙҙең һөйөклө Тыуған илгә булған һөйөүгә үçешә», — тип яҙған К.Г. Паустовский. Тимәк, белем һәм тәрбиә мәсьәләһе лә үҙ яғыңды белеү, өйрәнеүҙән башлана.

Минең тыуған яғым *Бөрйәнде* Башҡортостандың йөҙөк ҡашы, тиҙәр. Ысынлап та, ожмахҡа тиң донъяның ғәжәп мөйөшө бит ул беҙҙең яҡтар. Тәбиғәте хозур, кейек-януарға бай, күҙ ҡамашырлыҡ мең төрлө сәскә-үләнгә күмелгән сәхрә ерҙәргә бай, ҡанбабаларыбыҙ йәндәренән артыҡ күреп һөйгән

изге еребеҙ. Уҡлы ҡаяларға, түбәһенә ҡараһаң, кәпәсең төшөп китерлек бейек тауҙарға, тау-ҡаяны тишеп аҡкан йылғаларына ҡарап күңел һөйөнә.

Минең тыуған ауылым — *Ғәлиәкбәр*. Ул да, сал Бөрйәнем һымаҡ, үткән замандарҙың, шанлы йылдарҙың сатҡыларын, халыҡ тормошон үҙенең күп һанлы риүәйәттәрендә һаҡлаған, ә атай-олатайҙарҙың ҡаһарманлығын, күҙ ҡараһындай ҡәҙерләп, быуындан-быуынға, телдән-телгә тапшырған.

Ауылым тирәһендәге ер-һыу атамаларын өйрәнеү, быуындан-быуынға тапшырыу борондан килә. Олатайым *Ғәлиев Сабир Ғәле* улынан әсәйем *Сания Сабир* ҡыҙы яҙып алып ҡалған яҙмаларҙы уҡыным һәм миндә ер-һыу атамаларының килеп сығыу тарихын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уянды. Оло быуын кешеләренән һорашып, эҙләнеү эшен башлап ебәрҙем.

**Ғәлиәкбәр — ауыл исеме**

Нөгөш йылғаһы буйына бынан 280 йылдар элек самаһы Темәс ауылынан, бер боланан һуң, *Монаш* исемле кеше күсеп килеп донъя көтә башлай. Мал көтә, ҡортсолоҡ менән шөғөлләнә. Утарға башҡа яҡташтары ла күсеп ултыра һәм шунлыҡтан ҙурая. Хәлле кешеләләр ҙә арта. Ауылға исем биреү кәрәклеге килеп тыуғас, һәр байҙын үҙ исемен ҡалдырғыһы килгән, үҙ-ара талаш башланған. *Монаш* тәүҙә, күсеп килеүсе буларак, өҫтөн сыҡҡан. Ул, русса яҡшы уҡый-яҙа белгән Ғәлиәкбәр исемле егетте эйәртеп, өйәҙ үҙәге Орскиға китә. Монаш, түрәләрҙе ризалатып, ауылға үҙенен исемен бирҙертергә килешә һәм ҡағыҙ тултырыуҙы *Ғәлиәкбәргә* ҡуша. *Ғәлиәкбәр* байҙың тома наҙанлығын үҙ мәнфәғәтенә файҙалана: танытмаға үҙ исемен яҙа. Ошонан алып өс быуатҡа яҡын ауылыбыҙ *Ғәлиәкбәр* исемен йөрөтә.

**Үтәбикә ҡаяһы.** Бер бабайҙың *Үтәбикә* исемле ҡыҙы булған. Ауылдың байы уны һоратырға теләгән. Ҡыҙҙың ата-әсәләре риза булған. Улар ярлылыҡта ғына көн иткән. Ҡартайған көнөбөҙҙә, исмаһам, рәхәтләнеп йәшәп ҡалайыҡ, тип уйлағандар. Ләкин *Үтәбикә* риза булмаған. Ул, никах көнө килеп еткәс, сығып ҡаса һәм матур бер ҡая күреп ҡала. Шул саҡ бай эҙләп килә һәм уны күреп ҡала. *Үтәбикә*, етеп килгән байҙы күргәс, Нөгөш буйындағы был ҡаяға йәһәт кенә менә лә йылғаға ташлана. Шунан алып был ҡаяны *Үтәбикә ҡаяһы* тип йөрөтәләр.

**Ғәйниә ҡотоғо — шишмә.** Оҙонлоғо 5 метр самаһы. Ул яҙ көнө ҡар ирей башлау менән сыға, *Уҫағай йылғаһына* ҡоя. 20 көн тирәһе аға һәм ер һурығыу менән ҡорой. Нөгөш йылғаһы яҙ көнө бысрана, һыу эсерлек булмай. Ауылда һуғыштан алдағы осорҙа колонкалар булмаған. Ғәйниә исемле инәй һыу һарҡып ағып ятҡан урындан соҡой һәм, бысраҡтан, таштарҙан таҙартып, ошо шишмәгә юл аса. Һыу һыуһынды ҡандырырлыҡ сатнама һыуыҡ булған шишмәгә халыҡ яҙ көнө *Йәншишмәгә* йөрөгән кеүек ағыла. Уға *Ғәйниә ҡотоғо* тип исем бирәләр.

**Арыҡтай — ялан исеме.** Бер бай ҡышҡылыҡҡа малдарына аҙыҡ әҙерләр өсөн ауыл кешеләрен бесән сабыу өмәһенә саҡыра. Ул осорҙа өмәләр, һимеҙ йылҡы ҡуйып, ҡаҙылыҡ тултырып, майлы һурпа менән һыйлап, ҡурай уйнап, уйын көлкө менән барған. Өмәселәр ҙә шундай хыял менән байҙың ҙур яландарын тиҙ арала сабып ташлағандар. Арып-талып

ҡаҙан аҫҡан ергә килһәләр, ни күрәләр:ҡаҙанда ябыҡ йылҡы ите ҡайнай, ҡаҙылыҡ та юҡ, ти. Йәндәре көйгән өмәселәр был яланға, байға үс итеп, *Арыҡтай* тип исем биргән.

**Ҡалыу — тау теҙмәһе.** Бер сибәр ҡыҙҙы көсләп үҙе яратмаған егеткә кейәүгә биргәндәр. Һөйгән егете, төндә килеп, ҡыҙҙы арғымаҡҡа ултыртып, алып ҡасҡан. Уларҙың артынан ҡыҙҙың ире ҡыуа сыҡҡан. Ҡасып барыусыларҙың аты бик шәп булған. Бер оҙон тауҙы улар, елдәй елеп, артылып та киткән, ә ҡыуа килеүсенең аты тиҙ арыған һәм тәгәрәп йән биргән. Шул ерҙә егет: «Ошолор инде минең кәләшемдән ҡалыуым", — тип илап ебәргән. Шунан бирле был тау *Ҡалыу* тип йөрөтөлә.

**София ташы.** Ямаш ауылынан *София* исемле ҡыҙ *Оло Кәбәскә* кейәүгә сыға. Уның ике ҡәйнәһе, бер ҡайныһы була. *Софияны* ҡәйнәләре һыйҙырмай. Бер ваҡыт ул һыуға бара ла, көйәнтәһе менән биҙрәһен ултыртып, Ямашҡа ҡаса. София, Бәккән еренә еткәс, тояҡ тауышын ишетеп, артына боролоп ҡарай, ә кейәүе ат менән баҫтырып килгән була. Ул яр буйына йүгереп төшә һәм таш ҡыуышына инеп ята, кейәүе һиҙмәйенсә үтеп китә.

Кейәүе ҡайныһының йортона барып етеүе була, София ла ҡайтып төшә. Ҡайнылары кейәүен туҡмарға булалар, ләкин кейәүҙәре бер йылға буйлап ҡасып ҡайтып китә. Шул ваҡыттан алып был йылғаны *Кейәү ҡасҡан* йылға, София йәшенеп ятҡан ташты *София ташы* тип йөрөтә башлағандар.

**Ҡырғыҙ айыры — уба, ҡалҡыулыҡ.** Ғәлиәкбәрҙең көньяғында бер ҡурған бар. Борон ҡыпсаҡ ырыуы менән ҡырғыҙ ырыуы, ошо тирәлә туҡталып, тирмә ҡороп, төпләнеп алғандар ҙа мал үрсетеп йәшәй башлағандар. Улар үҙ-ара дошман йәшәгәндәр. Бер ваҡыт ике ырыу араһында һуғыш сыҡҡан. Ҡыпсаҡ ырыуы көслөрәк булып ҡырғыҙҙарҙы ҡырып һалған. Ҡырғыҙҙарҙы күмеү өсөн ер кәрәк булған, ләкин ер – ҡыпсаҡтарҙыҡы. Улар ер бирмәгән.

Ҡырғыҙҙар, тупраҡты мәркегә һалып, алыҫтан дөйә менән ташып, яҡташтарын ерләп ҡайтып киткәндәр. Ул урын әле лә бар. Сәфәр утарына киткәндә, юлдың һул яғынан ҙур ғына ҡалҡыулыҡ булып күренеп тора.

**Мөзәй — тау исеме.** Бер ҡарт *Мөзәй* исемле әбейе менән Ғәлиәкбәрҙән Ямашҡа атлы ҡунаҡҡа барған. Өс көн атлы ҡунаҡ булғас, ике атта ҡайтырға сыҡҡандар. Бейек тауҙы төшкәндә, *Мөзәй әбейҙең* аты нимәнәндер өркөп алып ҡасҡан. Текә тауҙы төшөп етәрәк шәп барған сана, ағасҡа бәрелеп, селпәрәмә килгән һәм Мөзәй үлгән. Бабай бик илаған. Халыҡ телендә был текә тау *Мөзәй* тип йөрөтөлә башлаған.

*Ауыл эргәһендә халыҡ кәсептәренә, шөғөлөнә бәйле ер-һыу атамалары байтаҡ.*

**Паравай — тау бите.** Элек сана табаны, көйәнтә, дуға бөгөр өсөн ҡулайлама яһағандар. Ерҙе соҡоп, утты һыу ҡайнарлыҡ итеп яҡҡандар. Юғары температураға тиклем йылытып, ағасты бөгөлөрлөк хәлгә килгәнсе шунда тотҡандар. Бөтә халыҡ ошо тау битенә килгән. Шунан бирле халыҡ телендә *Паравай (парауай)* тип йөрөтөлә.

**Күсояһы — тау.** Ауылға ингәндә бейек тау төшәһең. Ауылдаштар ҡортсолоҡ, солоҡсолоҡ менән элек-электән шөғөлләнгән. Бер кешенең көслө ҡорт күсе, сығып китеп, ошо тауҙағы ағасты һырыған. Хужаһы айырған күстең артынан йүгереп барған, ләкин күс ағас ҡыуышына инеп оя ҡорған. Хужа, солоҡ ҡортон йыл да тәрбиәләп, солоҡ балы алған. Шунан бирле тау *Күсоя* тип йөрөтөлә.

**Аҡбалсыҡ — йылға исеме.** Халыҡ мейес ағартыу, өй нигеҙен аҡлау өсөн тәбиғәттән аҡ балсыҡ алған. Ауылдан 2 км өҫтә матур йылға аға. Уның башланған урынынан алыҫ түгел аҡбалсыҡ соҡоро бар. Күп кешеләр, организмдарына витамин етмәһә, ошо таҙа аҡбалсыҡты ашайҙар. Йылғаны *Аҡбалсыҡ йылғаһы* тип тип атағандар. Уның башы кәртәләп алынған, ауылдаштарым тәрбиәләп, тәртипкә килтереп торалар.

**Балсыҡ соҡоро.** Мейес, нигеҙ һалыу өсөн, төҙөлөш материалы өсөн ауылда балсыҡ ныҡ ҡулланыла. Ауылдан алыҫ түгел халыҡ һәйбәт балсыҡ ала. Электән алғас, тәрән соҡор барлыҡҡа килгән. Шуға ла ошо соҡор эргәһе *Балсыҡ соҡоро* тип йөрөтөлә.

**Ҡушаматтар:**

Ҡушамат – ғүмерлек, бер ваҡытта ла юҡҡа сыҡмай торған төшөнсә. Кешенең исеме, фамилияһы, атаһының исеме бөтә документтарҙа яҙыла, ә ҡушамат кешегә йәбешкән һәм яҙылмай ғына ғүмер буйы оҙатып йөрөй. Кешенең бер һәм бер нисә ҡушаматы булырға мөмкин. Беҙҙең ауылда ла ҡушаматһыҙ кеше бик һирәк. Уларҙы килеп сығышы буйынса бер нисә төргә бүлергә була.

1. *Исемдәрҙән килеп сыҡҡан.*

Илһам — Илтый
Бибинур — Бипый
Әминә — Әмтей
Вәсилә — Вәстей
Исламғол — Ислый
Иштуған — Иштуҡ
Хәмдиә — Хәмдүш

2. *Кешенең тышҡы ҡиәфәтенә, кәүҙәһенә бәйле ҡушаматтар.*

Мыйыҡ Ишмырҙа
Макарон Рауил
Быстыҡ Рауил
Тайыш Ғәйшә
Һуйыр күкәйе Рәсимә
Копченый Әсҡәт
Покемон Динар

3. *Характеры, кәүҙәһе менән йәнлектәргә оҡшатып ҡушылған ҡушаматтар.*

Ҡуян Нәҙир
Бүре Әнүәр
Йылан Әсмә
Аждаһа Мәрйәм
Һыйыр Кәримә
Сысҡан Руслан

4. *Фамилияларҙы ҡыҫҡартыу арҡаһында килеп сыҡҡан ҡушаматтар.*

Бикиш Ишбулды
Ишмух Әлиә
Муха Айнур
Үтәғол Илнур
Аҡбаш Альбина

5. *Кешенең төҫөнән килем сыҡҡан ҡушаматтар.*

Ала Ғәйшә

Ҡара сорнай Самат
Аҡбаш Әғзәм
Туҫтаҡ бит Кәрим
Билмән ауыҙ Ғәҙел

6. *Кешенең милләтенә һәм ниндәйҙер милләткә оҡшауына бәйле ҡушаматтар.*

| | |
|---|---|
| Мари Рита | Әрмән Рамаҙан |
| Татар Фәүзиә | Сыуаш Ильяс |
| Грузин Рамаҙан | |

7. *Кешенең дәрәжәһенә, һөнәренә бәйле ҡушаматтар.*

| | |
|---|---|
| Директор Фатима | Силсәүит Руслан |
| Мулла Самат | Почта Әнисә |
| Абыстай Рәзилә | Заповедник Рамаҙан |
| Тире Илшат | Айыусы Мөхәммәт |

Ҡушамат кешегә ғүмерлеккә тиерлек тағыла. Уны үсегеп тә, һуғышып та, илап та юйып булмай. Унда кешенең холоҡ-фиғеле, тормошо, шөғөлө сағыла ла инде.

Шулай итеп, ер-һыуыбыҙҙың тарихы менән ҡыҙыҡһынған, белгән һәр йәш кеше уны яратырға, үҙ итергә, хөрмәтләргә өйрәнә. Шул ваҡытта ғына ул тыуған ерен яҡлай, һаҡлай, ҡурсалай ала.

Тыуған яҡты халыҡ алтын бишеккә тиңләй. Эт — туйған ерендә, ир — тыуған илендә тигән мәҡәлдә иһә һәр кеше өсөн тыуған ер изгеләрҙән-изге төшөнсә икәненә баҫым яһала. Тыуған ер төшөнсәһен, уға һөйөү тойғолары тәрбиәләүҙе беҙ бала саҡтан иҫкә алырға һәм тормошҡа ашырырға тейешбеҙ.

**Мәғлүмәт биреүселәр:**

1. Олатайым Ғәлиев Сабир Ғәле улы;
2. Әсәйем Ишмөхәмәтова Сания Сабир ҡыҙы.

**Йомағолова Рәлиә, Ғәбдрәшитова Айһылыу**
Фәнни етәксеһе: **Ғәлина Тәзкирә Нәҙир ҡыҙы**

## ӘҘӘБИ ТЕЛ МЕНӘН ЯҢЫ ЯУЫШ АУЫЛЫ ХАЛҠЫ ҺӨЙЛӘШЕ АРАҺЫНДАҒЫ ҠАЙҺЫ БЕР АЙЫРМАЛАР

Башҡорт теленең диалекттарын һәм һөйләштәрен өйрәнеүҙең тел тарихы өсөн әһәмиәте ҙур. Башҡортостан буйынса һәр ауылдан бер уҡыусы үҙ ауылы һөйләшен өйрәнеп, тикшеренеү үткәрһә, өйрәнелгәндәргә өҫтәлеп, ҙур ғилми байлыҡ тупланыр ине. Был эшебеҙ — башҡорт теленең тарихы йыйынтығына беҙҙең бәләкәй генә өлөшөбөҙ.

Башҡорт теле һәм уның диалекттары Н.Ғ.Ишбулатов, Т.Ғ.Баишев, Ж.Ғ.Кейекбаев, Ә.Ә.Юлдашев, Н.Х.Мәҡсүтова,

С.Ф.Миржанова, Х.Ғ.Йосопов, М.Г.Усманова тарафынан ентекле өйрәнелгән.

## Яңы Яуыш ауылы һөйләшенең фонетик үҙенсәлектәре

Тикшереүҙе ауыл һөйләшенә хас ***фонетик үҙенсәлектәрҙән*** *башлайбыҙ:*

а) һуҙынҡылар буйынса:

— ауылда, башҡа һөйләштәрҙән айырмалы рәүештә, кеше исемдәрендә нәҙек һуҙынҡыларҙы ҡалын һуҙынҡылар менән әйтеү *ныҡ күҙәтелә: Фаузия (Фәүзиә), Расим (Рәсим), Разифа (Рәзифә),* Файзулла (Фәйзулла);

— **у,ү** өндәре күп осраҡта дифтонгылаштырып әйтелә: *һыуған (һуған), теүгел (түгел), теүәңәрәк(түңәрәк);*

— ҡайһы бер һүҙҙәрҙә **өй** дифтонгы **ү** өнөнә күсә: *үрҙәк (өйрәк), үрәнеү (өйрәнеү);*

— һүҙҙәрҙә әҙәби телдәге иренләшкән өн-хәрефтәр урынына иренләшмәгән өн-хәрефтәр ҡулланыу осраҡтары бар, йәғни ирен гармонияһы боҙола: *торыуы (тороуы), йөрөйбеҙ (йөрөйбөҙ), көлде (көлдө), кетеү (көтөү), килеп тереп (килеп тороп), тырыптыр (тороп тор);*

— киреһенсә, ҡайһы бер һүҙҙәрҙәге иренләшмәүсе өндәр һөйләштә йыш ҡына иренләшеп килә: *төйәү (тейәү), йөгөрөү (йүгереү)*;

— нәҙек әйтелгән төп ҡылымдарҙан һуң алыу ҡылымы нәҙегәйә: *күрәлмәйем (күрә алмайым), түҙәлмәйем (түҙә алмайым);*

— әҙәби телдәге **ы** өн-хәрефе урынына **о** һуҙынҡыһын, йәки киреһенсә, **а** урынына **ы, и** яҙыу һәм әйтеү: *балыҡтарҙы һынарға (һанарға) булдыҡ, ундый (ундай), шундый (шундай), сиҡ ҡына (саҡ ҡына);*

— һуҙынҡылар буйынса тағы ошондай үҙенсәлектәр күҙәтелә:

*ҡыяғыҙ (ҡағыҙ)*
*эндәшеү (өндәшеү)*
*баллар (балалар)*
*аңа (уға)*
*алар (улар)*

б) тартынҡылар буйынса:

— **й** тартынҡыһы төшөп ҡала: *боҙай (бойҙай), өрөлтөү (өйөрөлтөү), өрәнеү (өйрәнеү), һөрәү (һөйрәү);*

— ҡайһы бер һүҙҙәрҙә **һ, л, р, ҙ** өн-хәрефтәрен төшөрөп ҡалдырыу күренештәре таралған: *күрәт (күрһәт), ҡайыныһы (ҡайһыныһы), кигән (килгән), киһә (килһә), буһа (булһа), китер (килтер), барыға гәрәк (барырға кәрәк);*

— күп кенә һүҙҙәрҙә әҙәби телдәге **т** өн-хәрефе урынына д тартынҡыһын әйтәләр: *дән (тән), дирән (тәрән), дауар (тауар), дулҡын (тулҡын);*

— **д, с** тартынҡылары урынына **һ, ҫ** өн-хәрефтәрен әйтеү осраҡтары ла бар: *баһырыу (баҫрау), иҫем (исем), Уҫман (Усман), аҡҫау (аҡһау), турҫайыу (турһайыу);*

— әҙәби телендәге **ҫ** өнө **т** тартынҡыһына күсә, әлбиттә, был дөйөм күренеш түгел, бер нисә һүҙҙә генә: *батҡыс (баҫҡыс)*;

— әҙәби телдәге **х, с, ҙ** тартынҡылары ҡайһы бер һүҙҙәрҙә **һ** өнөнә күсә*: Һәким (Хәким), һабыр (сабыр), һәғәт (сәғәт)*;

— ҡайһы бер һүҙҙәрҙең башында әҙәби телдәге **с** өнө урынына **т** тартынҡыһы килеүе мөмкин: *тысҡан (сысҡан).*

**Һөйләштең морфологик үҙенсәлектәре**:

— әҙәби телдәге –**ты** (-те, -то, -тө), -**лы** ( -ле, -ло,-лө) ялғауҙары урынына –**ды**, -**ны** һәм уларҙың фонетик варианттары ҡулланыла: *йыуынды һыу (йыуынты һыу), һөрөндө ер (һөрөнтө ер), һүренде еп (һүренте еп), йүнне әйбер (йүнле әйбер);*

— баланың үҙенән оло яҡын туғанына булған оҡшашлығы –**с** ялғауы менән аңлатыла: *атас (тас атаһы),инәс (тас инәһе) , олатас (тас олатаһы);*

—хәл-ҡылымдың юҡлыҡ формаһында –**са, -сә** ялғауы алдындағы –**ын, -ен** ялғауы төшөп ҡала: *уҡымайса (уҡымайынса), килмәйсә (килмәйенсә), бармайса (бармайынса);*

— ситләтелгән бойороҡ һөйкәлешен белдереүсе ҡылым формаларында -**ға** ялғауын төшөрөп ҡалдыралар: *барыр кәрәк (барырға кәрәк), күрер кәрәк (күрергә кәрәк), уҡыр кәрәк (уҡырға кәрәк);*

— ҡайһы бер ярҙамсы ҡылымдарҙан алда килгән *алып* ҡылымының –**ып** ялғауын ҡыҫҡартып әйтеү күренештәре осрай: *апҡайтты (алып ҡайтты), апарыу (алып барыу), әпкитте (алып китте), әпир (алып бир), әптөш (алып төш);*

— төбәү килештә килеүсе берлектәге зат һәм күрһәтеү алмаштарына әҙәби телдәге **-ға, -ҥә** ялғауҙары урынына –**ныға, -ңа**, -**неңә** күрһәткестәрен ҡушып әйтеү һәм яҙыу күҙәтелә: *аңа – уңа (уға), мыңа-мыныңа (быға);*

— ваҡыт рәүештәренә әҙәби телдәге -**ғы, -ге** ялғауҙары урынына **-ңғы, -ңге** күрһәткестәрен ҡушып әйтеү һәм яҙыу осраҡтары бар: *кисәңге (кисәге), баяңғы (баяғы), әлеңге (әлеге);*

— ҡайһы бер ҡылымдарҙы әҙәби телдәге -**һың** ялғауы урынына **-ң** ҡушымсаһы менән әйтеү күҙәтелә: *бараңмы (бараһыңмы), китәң (китәһең);*

— һорау алмаштарынан *нәҫтә, нейәҫтә, нейәҫтәкәй* ҡулланыла.

**Лексик үҙенсәлектәре**:

*һыйлым (дуҫтың ҡатыны),*
*ҡапсыҡ (тоҡ),*
*баҡрас (ижау, сүмес төрө),*
*әней (әсәй),*
*әтей (атай),*
*ҡартнәй, нәнәй (өләсәй),*
*ут аласыҡ (йәйге аш өйө),*
*апа ( ҡатын-ҡыҙ уҡытыусы),*
*абый (ир-ат уҡытыусы),*
*малахай (бүрек),*
*кәзәнке (соландағы бүлмә),*
*сепей (бәпкә),*
*безәү (быҙау),*
*үрҙәк (өйрәк),*
*һәғәттә килеп етте (тиҙ генә ваҡыт эсендә килеп етте),*
*ҡар эрей (ҡар ирей),*
*эрзинкә (резина калуш, үзбәк калушы),*
*йәймә (майҙа бешкән сөсө икмәк),*
*туғаным (үҙенән бәләкәй ҡыҙ һәм малайҙарға өндәшеү),*
*абзый (ағай),*
*күстей (күстәнәс),*
*йылайырка, душагрейка (телогрейка) һ.б.*

## Ауылым тарихы һәм уның эргәһендәге ер-һыу атамалары
## Яңы Яуыш ауылы тарихы

Ауылдашыбыҙ Кәмилә инәй Ишҡолова һөйләп ҡалдырыуынса, ҡасандыр Юрматы ырыуы халҡы, малдары менән йәшәргә урын эҙләп, Стәрле яғынан көньяҡҡа табан юл тотҡандар. Стәрле эргәһендәге Помряскино ауылына яҡынлашҡас, Яуыш ҡарт (иң оло һәм хөрмәтле кеше) ергә ятып тыңлаған да былай тигән:

— Бында ҡасан да булһа ҡыңғырау тауышы яңғыраясаҡ. Был урындан китәйек. Улар тағы ла алға киткәндәр һәм Федоровка ауылы эргәһендә туҡтағандар. Араһында татар ҙа, башҡорт та булған. Татарҙар кенәз *Яуыш ауылы* булып, ә башҡорттар уларҙан алыҫ түгел ерҙә *Өйәләмә ауылы* булып урынлашҡандар. Хәҙер инде ике ауыл барлыҡҡа килгән. Яуыш Өйәләмәлә ҡалған, башҡорттарҙың ҡайһылары үҙҙәре айырым йәшәү өсөн урын эҙләп юлдарын дауам иткәндәр һәм Ашҡаҙар буйына килеп ултырғандар. Шулай итеп, *Яңы Яуыш* ауылына нигеҙ һалынған. *Өйәләмә* һәм *Яңы Яуыш* халҡы бәйләнештәрен өҙмәгәндәр, бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөшкәндәр. Яуыш ҡарт та йыш ҡына *Яңы Яуыш* ауылының ҡунағы булған. Бер ҡунаҡҡа килгәндә, *Яуыш* ҡартҡа тыу бейәнең тубыҡ һөйәген һалмаға урап һоғондорғандар. Ул йотоп ебәргән. Һыйлаусыларҙың береһе уға ҡарап торған да: “Яуыш бабай, тыу бейәнең тубығын йоттоң, белмәнеңме әллә?” — тип һораған. “Әйтәм бер

нәмә тамаҡҡа тейеп ҡалды,” — тип яуаплаған Яуыш ҡарт. Шунан ҡалған да инде беҙҙең Яуыш ауылын “ *убыр Яуыш*” тип атап йөрөтөү.

**Әүлиә тауы.** Ауыл аша бер мосолман мосафиры һыбай үтеп барған. Яҙмыштарҙан уҙмыш юҡ, тиҙәр бит, ауыл эргәһендә баҡыйлыҡҡа күскән. Уның кем икәнен белмәһәләр ҙә, ауыл халҡы аты, ҡылысы менән бергә тау башына ҡәҙерләп ерләгән. Исеме билдәле булмағас, ул тылсымлы кеше булғандыр, тип уйлағандар һәм был тауҙы *Әүлиә тауы* тип йөрөтә башлағандар. Ауылдашыбыҙ 112-се Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы яугиры Маликов Ғәбиҙулла бабай Бөйөк Ватан һуғышына киткән саҡта: “Һуғыштан иҫән-һау әйләнеп ҡайтһам, Әүлиәнең ҡәберен уратыр инем,” — тип нәҙер әйткән. Ысынлап та, ул һуғыштан иҫән-һау ҡайтҡан. Ғәбиҙулла бабай Раҡия инәй менән ғаилә ҡороп, ике ул үҫтергән. Ул донъя мәшәҡәттәренә сумып, нәҙер әйтеүен онотҡан. Аяғы һыҙлай башлаған, врачтар сәбәбен белмәгәндәр. Бер күрәҙәсе әбей уға: “Улым, әйтеү әйтмәгәйнеңме? Нәҙер әйтеп, шуны үтәмәгәнһең бит, аяғың шуға һыҙлай”, — тигән. Ғәбиҙулла бабай әйткәнен иҫенә төшөрөп, *Әүлиә ҡәберен* ағас ҡойма менән уратҡан һәм аяғы ла һыҙлауҙан туҡтаған. Мосафир, ысынлап та, ябай ғына кеше булмаған, тигән һығымтаға килә ауылдаштарым.

Әлеге ваҡытта ла ауылдаштарыбыҙ аңында, *Әүлиә тауы* ниндәйҙер мөғжизәгә эйә, тигән уй-тойғо йәшәй. Ул беҙҙе бөтә бәлә-казанан ҡурсалаған кеүек, ваҡытында тиф ауырыуы менән сирләүселәр ҙә һирәк булған. (Әүлиә тауы хаҡында Закир бабай Юлғотлин һөйләп яҙҙырҙы).

**Шәмси быуаһы.** Сәлимйәнова Гөлсирә инәй һөйләүенсә, әле беҙ йәшәгән ауыл эргәһендә бик матур, ыҡсым ғына “*атруп*” (Отруб — отрубленный) утары — урамы булған. Был хаҡта тарихсы Шамил Наил улы Иҫәнғоловтың “История деревни Ново-Яушево (XVIII-начало XX вв.)” хеҙмәтендә былай яҙылған:

*Столыпинская аграрная реформа внесла новые коррективы в общественную жизнь деревни. В годы проведения реформы некоторые члены общины решили выйти из неё. Одни остались жить в деревне, сведя свои чересполосицы воедино. Выход из общины они отметили основанием новой улицы -Отруба. Знаменитая в наше время улица появилась в промежутке между 1907 и 1917 гг. Нашлись и те, которые выбрали другую форму выхода из общины. Неподалеку от деревни Бикзяновы основали хутор, известный как Бикзяновский.*

Революцияға тиклем Яуыш ауылынан *Тәхәүетдин Дәүләтбаев, Абдулла Ишҡолов, Шәмсетдин Дәүләтбаевтар* шул төбәккә айырылып сығып нигеҙ ҡорған. Ауыл эргәһенән ҡуйы сейәлек, таллыҡ, хуш еҫле болонтуғайҙар башланып киткән. Ашҡаҙар йылғаһы йыраҡ, шунлыҡтан ҡош- ҡорт, мал-тыуар, бала-саға һыу юҡлыҡтан интегә. Шәмсетдин бабай Бикйәнов быуа быуырға керешә. Уйлаған эшен тормошҡа ашыра: быуала өйрәк-ҡаҙҙар сумып, ҡойоноп, кинәнеп йөҙәләр, мал-тыуар рәхәтләнеп һыу эсә, ҡыҙҙар-малайҙар һыу инә, һыу һибешә, өлкәндәр тиҙәк баҫа. Ҡыҙҙар эҫе көндәрҙә һыу буйынан ҡайтҡанда Шәмсетдин бабайға инеп рәхмәт әйтеп сығалар. Ауыл халҡы был быуаны Шәмсетдин бабай хөрмәтенә Шәмси быуаһы тип

атай. Оҙаҡ йылдар *Шәмси быуаһы* халыҡҡа хеҙмәт итә. Тормош дауам итә, һәр төрлө үҙгәрештәр була: хәҙер *Шәмси быуаһы* юҡ, уның өҫтөнән һөтсөлөк фермаһына юл үтә. Шулай ҙа Шәмсетдин бабайҙың изге эше онотолмай.

**Кинйәбикә соҡоро.** *Кинйәбикә соҡоро* тураһында Нурулла бабай Рафиҡов ошолай тип һөйләне: "Әүәле кешеләр йәйҙең йәмле көнөндә йәйләүгә күсеп йөрөгәндәр һәм татыу ғаилә булып йәшәгәндәр.

Бер ваҡыт Кинйәбикә әбей, атын егеп, арбаһына айран-ҡатыҡ тулы мискәләр тейәп, йәйләүгә киткән һәм соҡорға ауған. Ҡатығы йәйелеп түгелгән. Шунан башлап был соҡорҙо *Кинйәбикә соҡоро* тип атағандар. Әлеге ваҡытта шул соҡорҙа хуш еҫле бесән, эре еләктәр үҫә, уның эргәһендә иген баҫыуы."

**Әндрей кисеүе.** Элек Ашҡаҙар йылғаһы аръяғында "Пугачев" совхозының умарталығы булған. Унда, Бала Сытырман ауылынан ат менән йөрөп, *Андрей Масютин* эшләгән. Йомарт, аҡыллы, эшсән бабай булған ул. Шундай булғаны өсөн уның янына ололар ҙа, бала-сағалар ҙа йыш йөрөгән. Килеүселәрҙе бал ашатып, сәй эсереп, һыйлап сығарған. Берйылды яҙғылыҡ аты Ашҡаҙар йылғаһында бата, уны ҡотҡарам тип, Андрей бабай ҙа һәләк була. Ауыл халҡы бик ныҡ ҡайғырған һәм кисеүҙе *Әндрей кисеүе* тип атай башлағандар. Шулай итеп, әлеге ваҡытта ла *Әндрей кисеүе* тип йөрөтөлгән был урын йомарт, аҡыллы һәм егәрле ҡортсо Андрей Масютин хөрмәтенә бағышланған икән.

Ауылдың, уны уратып алған ер-һыуҙың һәм уларҙың атамаларының һәр береһенең үҙ тарихы, легендаһы бар. Был атамалар, күбеһенсә, кеше яҙмышы менән бәйле, ә ул кешеләрҙең барыһы ла ҡасандыр ауылымда йәшәгән йәки булып киткән.

## Ауылыбыҙҙа уйналған йырлы-бейеүле халыҡ уйындары
## Үрҙәккәйем сумаһың, сумаһың да сығаһың уйыны

Рауза инәй Хәбибуллина һөйләүенсә, "*Үрҙәккәйем сумаһың, сумаһың да сығаһың уйыны"н* ауылыбыҙ ололары йәш саҡтарында ошолай уйнағандар.

Уйнаусылар ике ҡатлы түңәрәккә баҫалар ҙа :

Үрҙәккәйем сумаһың,<br>
Сумаһың да сығаһың.<br>
Элек батрак илай ине,

Хәҙер кулак илаһын, тип һамаҡлайҙар һәм "Үрҙәккәйем сумаһың"-тигән мәлдә, тышҡы түңәрәктәгеләр ҡулдарын ысҡындырмай ғына эске түңәрәктәгеләрҙең ҡул аҫтынан инәләр, йәғни "сумалар", "Сумаһың да сығаһың", — тигәндә, кире сығып, һамаҡтың ҡалған ике юлын әйтеп бөтөрөп ҡуялар һәм "Әлләриә — гөлләриә, әлләреү — гөлләриә, әлләриә — гөлләриә, әлләреү — гөлләриә" көйөнә ике түңәрәк ике яҡҡа бейеп китә. Уйын шул рәүешле артабан дауам итә.

Үрҙәккәйем сумаһың,<br>
Сумаһың да сығаһың.

Бала саҡта уйна ла көл
Үкенескә ҡалмаһын.

Үрҙәккәйем сумаһың,
Сумаһың да сығаһың.
Үткән рәхәт көндәремде
Иҫемә төшөрәһең.

Үрҙәккәйем сумаһың,
Сумаһың да сығаһың.
Иҙәндәре һелкенһен дә
Йөрәктәре елкенһен.

Үрҙәккәйем сумаһың,
Сумаһың да сығаһың.
Был уйындар тамамланһын,

Икенсеһе башланһын, кеүек һамаҡтар әйтелә. Һамаҡтар уйын барышында һүҙгә маһир уйынсылар тарафынан уйлап сығарып әйтелергә лә мөмкин .

**Рат-тии-ри-рай-рай уйыны**

Был уйынды ауылдашыбыҙ Фәйрүзә инәй Ғүмәрова өйрәтте. Унын әйтеүенсә, уйынды “Таҡмаҡ әйтешеп, ҡара-ҡаршы бейеү “ тип тә атарға мөмкин. Рат-тии-ри-рай-рай таҡмаҡтарына бейегәнлектән, уйынға ошо исемде бирҙек, ти инәй.

Егеттәр һәм ҡыҙҙар теҙелеп, ҡара -ҡаршы баҫалар. Тәүге таҡмаҡ урында торған килеш кенә әйтелә:

Быйыл йәйҙе ураҡ урҙым
Арыш күләгәһендә.
Рат-тии-ри-рай-рай,
Арыш күләгәһендә.

Икенсе таҡмаҡта ҡыҙҙар егеттәргә ҡаршы бейеп киләләр ҙә таҡмаҡтың икенсе өлөшөндә кире боролоп китәләр.

Ялкауҙарҙың исеме булмаҫ
Маҡтау кенәгәһендә.
Рат-тии-ри-рай-рай,
Маҡтау кенәгәһендә.

Өсөнсө таҡмаҡта егеттәр ҡыҙҙарға ҡаршы бейеп килеп боролоп китәләр.

Моңаяһың, зарланаһың
Выговор алдыңмы әллә?
Рат-тии-ри-рай-рай,
Выговор алдыңмы әллә?

Артабанғыһында барыһы ла ҡулдарын ишкәк ишкәндәге кеүек хәрәкәтләндереп, бейеп алға килеп, бер таҡтаға теҙелеп торалар.

Баҫыуҙарҙа т(ы)ракторҙар

Гөрләтеп һөрә һабан.
Рат-тии-ри-рай-рай,
Гөрләтеп һөрә һабан.
Ҡулға – ҡул тотоношоп алға киләләр.
Беҙ барабыҙ күмәкләшеп
Коммунизмға табан.
Рат-тии-ри-рай-рай,
Коммунизмға табан.
Егеттәр урында, ҡыҙҙар алғараҡ сығып бейеп таҡмаҡлайҙар .
Йәй көнөндә эй күңелле
Беҙҙең колхоз ҡырҙары.
Рат-тии-ри-рай-рай,
Беҙҙең колхоз ҡырҙары.
Ҡыҙҙар урында, ә егеттәр бесән сапҡан хәрәкәт яһап, алға сығып таҡмаҡлайҙар (ҡуш.13).
Шул ҡырҙарҙа янып эшләй
Егеттәре, ҡыҙҙары.
Рат-тии-ри-рай-рай,
Егеттәре, ҡыҙҙары.
Ҡулға – ҡул тотоношоп, артҡа китәләр ҙә таҡмаҡтың икенсе өлөшөндә алға киләләр.
Киң ҡырҙарҙы яңғырата
Ударниктың йырҙары.
Рат-тии-ри-рай-рай,
Ударниктың йырҙары.
Ошо таҡмаҡ менән уйын тамамлана.

**Круг уйыны йәки Әлләриҙә рәҙиә**

Круг уйынын башланғыс кластар уҡытыусыһы *Ғәфүрә Насретдин ҡыҙы Хәбибуллина* өйрәтә. Инәй иҫән саҡта, мәктәп директоры *Ишморат Фәйзулла улы Маликов*, уйын барышын һөйләтеп, таҡмаҡтарын йырлатып, кеҫә телефонға яҙҙырып алып ҡалған. Бер таҡмаҡ *Миневафа инәй Маликованан* яҙып алынды.

Уйындағылар бөтәһе лә ҡулға-ҡул тотоношоп, атлап ҡына түңәрәк буйынса өйөрөлөп йөрөй. Уртала бер көтөүсе. Әгәр ҙә круг ҙур булһа, көтөүселәр икәү булырға ла мөмкин. Ситтә йөрөгәндәр таҡмаҡ әйтә. Уға урталағылар ҙа ҡушылырға мөмкин, әлбиттә. Таҡмаҡ барышында көтөүсе үҙенә пар һайлап йөрөй. Таҡмаҡ тамамланыу менән, "Әлләриҙә рәҙиә, әлләриҙә рәҙиә, әлләриҙә рәҙиә, әлләриҙә рәҙиә" тиррәтләүенә бейеп китәләр, көтөүсе һайлаған пары менән круг эсендә бейей. Артабан тәүге көтөүсе түңәрәккә баҫа, икенсеһе уртала ҡала . Уйын шулай арығансы дауам итә. Был уйынды уйнағанда, бейеү көйөнә йырлана. Ҡыҫҡа, өс юллы таҡмаҡтар әйтелә:

Ҡыярҙар тараталар.
Таҡмаҡ әйтергә белмәйҙәр,
Бейергә яраталар.

Әлләриҙә рәҙиә,
Әлләриҙә рәҙиә,
Әлләриҙә рәҙиә,
Әлләриҙә рәҙиә.

Быуалар ҡара ҡайыш.
Үҙ-үҙҙәрен әллә кемгә
Ҡуялар понимаешь.
*Ҡушымта.*

Ҡайыш быу билдәреңә.
Ҡайыш быуһаң билдәреңә,
Ҡайтырһың илдәреңә.
*Ҡушымта.*

Синкаламаныңмы ни?
Мин теләгән теләктәрҙе
Һин теләмәнеңме ни?
*Ҡушымта.*

Һибелә елдәрҙә генә.
Йәшәүе күңелле була
Тыуған илдәрҙә генә.
*Ҡушымта.*

Иҙелдәре, күлдәре.
Мин матурға матур кәрәк
Тимәнең бит элгәре.
*Ҡушымта.*

Аҡ күлдәк кейгәнегеҙ.
Ыскажите, пажалыста,
Кем һеҙҙең һөйгәнегеҙ?
*Ҡушымта.*

Үҫә ат ҡуҙғалағы.
Төртмә йырҙар йырламаһаң,
Йөрәгең ҡуҙғаламы?
*Ҡушымта.*

Уйындарҙы өйрәнеү барышында ауылға ғына хас, үҙенсәлекле, ят уйындар, таҡмаҡтар, әйтешмәк- һамаҡтар барлығына инандыҡ, бары тик ваҡыт табып, күңел һалып өйрәнергә генә кәрәк, һуң булыуы бар.

### Әҙәби тел менән Яңы Яуыш ауылы һөйләшенең сағыштырма һүҙлеге

А

Абзый — ағай.
Абый — ир уҡытыусыға өндәшеү һүҙе.
Апа — ҡатын-ҡыҙ уҡытыусыға өндәшеү һүҙе
Аҫалы балаҫ — һырланған балаҫ.

Б

Баҡрас — ижау, сүмес.

Безәү— быҙау.
Бейана — ҡәйнә.
Бейата — ҡайны.
Бер гилке — байтаҡ ваҡыт.
Бер гөйө — ғәҙәттәгесә, бер сама.
Бөтөргөс — юйма
Бәжеү— йәшелсәнең йылыға кибеүе, һурығыуы.
Бәпкә үлән — йорт үләне.

К

Кетеү — көтөү.
Күстей — күстәнәс.
Күмәләк — күбәләк

Ҡ

Ҡойо — ҡоҙоҡ.
Ҡуныу — йоҡлау (беҙҙә ҡуна — беҙҙә йоҡлай).

Л

Луҡыш — һимеҙ кеше.

М

Малахай — бүрек.
Матса — өрлөк.

Н

Нәҫтә, нәҫтәкәй —— нимә.

О

Оло ғара — ҙур.

С

Сеүәтә — аш һала торған ҙур һауыт.
Сүрәкә — уйын исеме.
Сәпсек – турғай.
Сепей – бәпкә, себеш.

Т

Тәҫләү — әйберҙе бөкләп һалыу.
Ташбаҡа — гөбөргәйел.

У

Ут аласыҡ- йәйге аш өйө.

Ү

Үрҙәк — өйрәк.

Һ

Һыуытам — кәрәген бирәм (әрләйем).

Һ

Һалауар — (һалауыр) — аңра, әрпеш, тиҙ онотоусан мәғәнәһендә.

Ш

Шаңғыу — иҫәңгерәп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә.

Э

Эрзинкә — резина калуш, үзбәк калушы.

Я

Яҡа — яға.

Ялансаяҡ — ялан аяҡ.

Шулай итеп, Яңы Яуыш ауылы башҡорттарының теле әҙәби телгә яҡын булһа ла, улар араһындағы фонетик, лексик һәм морфологик айырымлыҡтар байтаҡ. Федоровка районында йәшәүсе башҡорттарҙың йәнле һөйләү теле Көньяҡ диалекттың Дим һөйләшенә ҡарай. Яңы Яуыш ауылы башҡорттары теленең Эйек-Һаҡмар һөйләшенә тартым һыҙаттары күберәк.

Ғ. Хөсәйенов әйткәнсә, «әсә һөтө менән ҡаныбыҙға һеңгән әсә телебеҙ — донъяны таныткан, кешеләр менән аралыштырған, белем, ғилем биргән ғәзиз телебеҙ»ҙе белеү, үҙенсәлектәрен өйрәнеү бик мөһим эш.

**Ҡулланылған әҙәбиәт**


1. “Үрҙәккәйем сумаһың, сумаһың да сығаһың”, “Круг”, “Рат-тии-ри-рай-рай” уйындары Федоровка районы Яңы Яуыш ауылында йәшәүсе Рауза Хәбибуллина, Фәйрүзә Ғүмәрова һәм Ғәфүрә Хәбибуллина, Миневафа Маликоваларҙан яҙып алынды.
2. Яңы Яуыш ауылы тарихы Ишҡолова Камила инәйҙән яҙып алынған.
3. Кинйәбикә соҡоро тураһында Нурулла бабай Рафиҡов һөйләп яҙҙырҙы.
4. Шәмси быуаһы тураһында Сәлимйәнова Гөлсирә инәйҙән яҙып алынды.
5. Әүлиә тауы хаҡында Закир бабай Юлғотлин һөйләп яҙҙырҙы.
6. Н.Х.Ишбулатов. Башҡорт теле һәм уның диалекттары, Өфө, «Китап», 2000.
7. Р.Ғ.Аҙнағолов. «Ерле һөйләш шарттарында башҡорт теленә өйрәтеү методикаһы», Өфө,»Китап», 2006.



**Кинйәғолова Сәлимә Фәнил ҡыҙы**

Фәнни етәксеһе: **Әминева Лилиә Искәндәр ҡыҙы**


## ИСЕМЕҢ НИ ҺӨЙЛӘЙ?

Исемдәр ... Исемдәр... Улар бик күп һәм төрлө. Аңлатҡан мәғәнәһе, яңғырашы, яҙылышы, әйтелеше һәм төҙөлөшө буйынса бер-береһенән бик ныҡ айырыла улар.

Ә һеҙҙең исемегеҙ кем, хөрмәтле уҡыусылар — конференцияла ҡатнашыусылар?

Уны һеҙгә кем ҡушҡан? Шул турала һорашҡанығыҙ бармы?

Ни өсөн тап ошо исемде ҡушҡандар, ә икенсене түгел?

Ә һеҙ исемегеҙҙең нимә аңлатҡанын беләһегеҙме?

Шулай итеп, исемле булыуҙың тарихын, уның мәғәнәһен кемдер белә, кемдер белмәй. Әйҙәгеҙ исем тураһында һөйләшеп алайыҡ.

Тел ғилемендә яңғыҙлыҡ исемдәрҙе өйрәнә торған фән бар. Ул *ономастиканың* бер тармағы — *антропонимика*. Ул кеше исемдәрен, фамилияһын, ҡушаматын, псевдонимын өйрәнә.

Мин проект эшендә үҙем уҡыған Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыларынан опрос үткәреп, уларҙың исемдәрен тикшереүҙе, шул иҫәптән, үҙемдең исем тураһында ла һөйләүҙе, маҡсат итеп ҡуйҙым.

Таныш булайыҡ. Минең исемем — *Сәлимә*. Был исемде миңә өләсәйем һайлаған, атайым менән әсәйем риза булғандар. Ысынлап та матур исем, ул миңә бик тә оҡшай. Бәләкәйерәк саҡта мин исемем менән ҡыҙыҡһына башланым да әсәйемдән һораным:

— Әсәй, ниңә миңә *Сәлимә* тип ҡуштығыҙ? Кем ҡушты?

Әсәйҙең эше күп ине, аңлатып торманы, миңә өләсәйҙән һорарға ҡушты. Ә өләсәйемдең яуабы ошолай булды:

— Беренсенән, был исемдең мәғәнәһе бик матур. *Сәлимә* исеме башҡорттарға ғәрәп теленән килеп ингән, мәғәнәһе — сәләмәт, иҫән-һау; пак; ғәҙел.

Икенсенән, беҙҙең параллель класта (*өләсәйем 1-се һанлы интернат-мәктәптә уҡыған — С.К.*)Ейәнсура районынан килгән *Сәлимә* исемле матур, бик тә тырыш бер ҡыҙ уҡый ине. Әйткәндәй, ул мединститутты һәйбәт тамамланы, медицина фәндәре кандидаты булып китте, Башҡортостанда билдәле шәхес, кешелекле, ярҙамсыл, ғәҙел аҫыл бер зат — *Сәлимә Әхмәт ҡыҙы Түлебаева*. Бына ул да сәбәпсе булды.

Өсөнсөнән, бар кешене хайран ҡалдырған, иҫ китмәле моңло башҡорт халыҡ йыры “*Сәлимә*” бар. Йырҙағы *Сәлимә* лә шул тиклем матур ҡыҙ була. Һөйгән егете уға бағышлап йыр сығарып йырлаған тип, йырҙың һүҙҙәрен дә әйтте:

Ирәндекәй тауы бигерәк бейек,
Тора-тора-мендем дә башына.
Кемдәр генә ғашиҡ ай булманы,
*Сәлимәкәй,* ҡара ла ҡашыңа.

*Сәлимәкәй* һыуға барған саҡта,
Елдәр һыйпап һөйә башыынан.
*Сәлимәкәй* төндә йоҡлағанда,
Ай көнләшә ҡыйғас ҡашынан.

Минең ҡыҙым да шулай матур, һау-сәләмәт булһын тип, ҡыҙым һиңә *Сәлимә* исемен һайланым, тине. Күңеле таҙа, һау, мәрхәмәтле кеше генә матур була, ҡыҙым, тип тә өҫтәне өләсәйем.

Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡып йөрөгән **205** уҡыусынан опрос үткәрҙек.

Исемдәрен һорап яҙҙырҙыҡ та, уларҙың исемдәрен кем ҡушҡанын (йәғни кем һайлағанын), ни өсөн шул исемде һайлағанын һәм үҙҙәренең исемдәренең нимә аңлатҡанын беләләрме икәнен һораштыҡ. Ҡыҙыҡ ҡына картина килеп сыҡты.

Исем һайлау тарихы бигерәк төрлө һәм ҡыҙыҡ икән. Мәҫәлән, 10-сы кластан *Илгиз* тигән информант былай тип һөйләне: *Илгиздең* атаһы *Фәрит*. Ул армияла бер *Илгиз* тигән егет менән шул тиклем дуҫ булған. Армиянан ҡайтҡас та бер-береһен онотмаҫҡа һәм, иң мөһиме — әгәр ҙә уларҙың улдары тыуһа, һәр береһе дуҫының исемен ҡушырға һүҙ биргән. Ысынлап та уларҙың икеһененең дә улы тыуған һәм уларҙың балаларының да исемдәре ике дуҫтыҡы кеүек *Илгиз* менән *Фәрит* икән.

Икенсе исем тарихы: уҡыусының исеме — *Ғайсар*. “Ай ҡыҙы” фильмының төп геройы *Ғайсар*. Шул герой оҡшаған һәм ата-әсәһе улдарына *Ғайсар* тип ҡушҡан.

*Таңһылыу, Зөһрә* исемле ҡыҙҙар таңда тыуған икән. Шуға ошо исемдәрҙе ҡушҡандар. Артабан уҡыусыларҙың исемдәрен (уларҙың нисәү булғанын күрһәтеп) бирәбеҙ.

*ҡыҙҙарҙың исемдәре*: Азалия(5), Азалина, Аделина, Айгизә(2), Айгөл, Айгүзәл, Айзилә(3), Айһылыу(2), Аҡйондоҙ, Алина(4), Алһыу(2), Альбина(2), Альмира, Гөлиә, Гөлйемеш, Гөлйөҙөм, Гөлкәй, Гөлназ(3), Гөлнара, Гөлнәзирә(2), Гөлсәсәк, Гөлшат, Гүзәл(2), Ғәлиә, Венера, Диана(4), Зәлифә, Зилиә(3), Зиниә, Зөлфиә, Илүзә(2), Ильмира, Камила(2), Ҡәҙриә, Лилиә(2), Ләйсән(3), Миләүшә, Мәрйәм, Наҙгөл, Нәилә, Нәргизә, Нәркәс, Нәфисә, Раушания, Регина(4), Резеда, Рузалина, Рәзилә, Рәйлә, Рәлиә, Сәлимә(2), Сәүиә, Таңсулпан, Фәниә, Шәүрә, Элина(2), Эльвина, Эльвира, Эльмира(2), Әҙилә, Әйшә, Әлиә, Әминә, Юлиә(2),

*малайҙарҙың исемдәре*: Азамат(3), Айгиз(5), Айбулат, Айҙар(8), Айназ, Айнур(3), Айрат, Айсыуаҡ, Айтуған, Альберт(2), Алмаз(4), Алсын, Арыҫлан(2), Баййегет, Булат, Вадим, Венер, Вилдан, Вәкил, Ғайсар(2), Ғәҙел, Ғәзинур, Денис, Динислам, Дим, Динар, Заһир, Ибраһим, Иҙел, Иҙрис, Ильмир(2), Илназ, Ильнар(2), Илхан, Илһам, Илшат, Ильяс, Инсаф(3), Искәндәр(2), Кәрим, Марат, Марсель, Мораҙым, Наил(2), Нуриман, Өлфәт, Радмир, Рамазан, Рөстәм(2), Руслан(4), Руфина, Рәсүл, Салауат(2), Солтан, Сыңғыҙ, Сәлим, Тамерлан, Таһир, Тимур(2), Урал(2), Фидан(2), Фәдис, Фәнил, Фәнис, Хәйбулла, Хәйҙәр, Юлай,

Мин уҡыусыларҙан ғына түгел, осраған бер кешенән, уңайы тура килгәндә, үҙҙәренең исемдәре, исем ҡушыу тураһында һорашып йөрөнөм.

Шуға иғтибар иттем, әлеге быуын йәш ғаиләләр, шулай уҡ урта быуынға ҡараған ата-әсәләр сабыйҙарына мәғәнәһе матур булған исемдәр ҡушырға тырыша икән. Мәҫәлән, *Латифа, Ҡәҙриә, Сәҙриә, Ирхан, Нурсолтан* һәм башҡалар. Минең дә ике ҡустым бар. Исемдәре *Нурислам* менән **Динислам**. Ә ағайымдың исеме — *Ильяс*.

Исем — яҙмыш, тиҙәр. Шуға ла бәпәйҙәргә һәйбәт мәғәнәле исемдәр ҡушырға кәрәк. Һораулыҡта “Исемеңдең мәғәнәһен беләһеңме?” — тигән һорауға барыһы ла ыңғай яуап бирә алманы. Тимәк, уларҙың мәғәнәһен һүҙлектәрҙән ҡарап, атай-әсәйҙән һорашып, белергә тырышырға кәрәк.

Был проект миңә оҡшаны. Эшемде артабан да дауам итермен, тип уйлайым.

**Королева Д.С.**
Фәнни етәксеһе: **Харрасова Э.Т.**

## ТОПОНИМДАР ИЛЕНДӘ — УЧАЛЫНЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

Һәр төбәктең үҙенә генә хас атамаһы, тарихы, риүәйәте бар. Уларҙың булыуы, ҡасандыр барлыҡҡа килеүе һәм һаманға тиклем халыҡ күңелендә ҙур урын алып тороуы, халыҡтың үҙенең тыуған ерен, тәбиғәтен, телен һөйөүен, ҡәҙер итеүен иҫбатлай. Уларҙың һәр ҡайһыһы ниндәйҙер тарихи ваҡиғаға, йә урындағы иҫтәлекле, кешегә бәйле шарттарҙа килеп сыҡҡан. Нисек кенә булмаһын, халыҡ хәтерендә әлеге көнгәсә һаҡланып килә, үҙенең тәү атамаһын юғалтмай, килеп сығышы тарихы онотолмай.

Уҡытыусыбыҙҙың ғилми түңәрәк барышында еребеҙгә бәйле һөйләгән төрлө ҡыҙыҡлы риүәйәттәре районыбыҙ топонимикаһына ҡыҙыҡһыныу уятты. Тәүҙә Учалы районының иң билдәле тәбиғәт ҡомартҡылары менән танышһаҡ, һуңынан опрос эше аша иң-иңдәрен билдәләнек.

Мин ғилми етәксем менән йыйған материалдарҙы һеҙгә лә тәҡдим итергә булдым.

Ономастика — яңғыҙлыҡ исемдәрен өйрәнеүсе тел белеменең бер бүлеге. Ул бер нисә тармаҡтан тора; *топонимика* (географик атамалар өйрәнә), *антропонимика* (кеше исемдәрен өйрәнә), *этнонимика* (этнонимдарҙың килеп сығышын өйрәнә), *зоонимика* (хайуан ҡушаматтарын өйрәнә), *астронимика* (күк есемдәрен өйрәнә), *теонимика* (мифологик персонаждарҙы өйрәнә), *прагматонимика* (әйбер атамаларын өйрәнә) һ.б.

Ономастика буйынса материалдарҙы йыйыу бөгөнгө көндә бик әһәмиәтле. Был эш ғилми эҙләнеүҙәргә нигеҙ булып тора. Сөнки ономастика халыҡ тарихын һөйләй, уның төбәккә, телгә, тәбиғәткә булған һөйөүен күрһәтә.

### Учалы районы тарихы

Учалы районы — республикабыҙҙың иң матур райондарының береһе. Ул Башҡортостандың көнсығыш өлөшөндә урынлашҡан. Күршеләрә булып көньяҡтан Әбйәлил районы, көнбайыштан — Белорет районы, төньяҡ-көнсығыштан һәм төньяҡ көнбайыштан — Силәбе өлкәһе һанала. Дөйөм майҙаны 4510 кв.км иҫәпләнә. Район үҙәге — Учалы ҡалаһы. Территорияһы буйынса республикабыҙҙа 4-се урынды биләй.

“Учалы” атамаһының килеп сығышы буйынса бер-нисә версия бар:

Ҡасандыр башҡорт ерҙәренә *Аҡсаҡ Тимер (Тамерлан)* исемле бер хан килгән дә берәй башҡорт ҡыҙына өйләндереүҙәрен һораған. Урындағы халыҡ башта ризалашҡан, хандан ҡыҙ өсөн аҡса алған. Бер аҙ ваҡыттан һуң *Аҡсаҡ Тимер* яңынан килгән быларға. Әммә халыҡ инде ҡаршы төшкәндәр. Хан бик асыуланған быларға. Халыҡтың тирмәләрен яндырып, малдарын туҙҙырып ҡайтып киткән. Ошо ваҡыттан башлап халыҡ был ерҙе "*үс алды*" (отомстил) тип йөрөтә башлаған. Тора-бара халыҡ телендә икенсе әйтелеш алып "*уч алды*" — "*учалы*" тип йөрөтөлә башлаған.

Икенсе легенда буйынса "*учалы*" — "*юшалы*" һүҙенән килеп сыҡҡан. Нимә тигәнде аңлата һуң "юша"? Юша — таулы һәм ҡомло ерҙәрҙең төҫтәр гаммаһының дөйөм атамаһы. Учалы буйлап Уралдың йәшмә таҫмаһы үтә. Халыҡ телендә был һүҙ үҙенсәлекле бер исем булып формалашып ҡалған: *"юша" — "яшма" — "ушалы" — "учалы"*.

Өсөнсө фараз буйынса, "*учалы*" атамаһы күл исеменән барлыҡҡа килгән. 18-се быуатта был ерҙәрҙә *Ачулы — Асулы* тигән күл булған. Ошо күл ҡороған, ә урынында *Учалы* ҡалаһы барлыҡҡа килгән ("*ачулы*" – "учулы" – "*учалы*").

**Учалы районының ете мөғжизәһе**

Башҡортостандың ете мөғжизәһе — башҡорт балы, ҡурай, "Урал батыр" эпосы, Шүлгәнташ мәмерйәһе, Янғантау, Красноусол минераль сығанаҡтары, Салауат Юлаев һәйкәле — тураһында барыбыҙ ҙа беләбеҙ, улар менән ғорурланабыҙ.

Элек электән Ете һаны баҡорт халҡының изге һаны булып һаналған. Башҡорт халҡының милли уйын ҡоралы ҡурай шул уҡ *ете таждан* тора, сәскәнең тажы ла *етәү*, аҙнаһына *ете көн, Етегән йондоҙ, Ете ҡыҙ* һ.б.

Беҙҙең ғилми эшебеҙҙең маҡсаты – Учалы районының ете мөғжизәһен билдәләү. Быны асыҡлар өсөн беҙ урындағы халыҡтан опрос үткәрҙек. Был эште беҙ ике төрлө рәүештә башҡарҙыҡ:

- Ирекле формала

Һорау: *Учалы районының ете мөғжизәһен билдәләгеҙ?*

- Һайлап алыу методы аша

Һорау: *Районыныбыҙҙың ете мөғжизәһен билдәләгеҙ?*

| | |
|---|---|
| Ирәмәл тауы | ? |
| Ворожеич күле (Карағайкүл) | ? |
| Әүлиә сығанағы | ? |
| Нәрәле һырты | ? |
| Шәрип ауылы шишмәһе | ? |
| Пирамидалар | ? |
| Ҡалҡан күле | ? |
| Уйташ ҡаяһы (Чёртов палец) | ? |
| Вознесенка сиркәүе | ? |
| Өргөн күле | ? |

| | |
|---|---|
| Ирәндек тауы | ? |
| Ахун менңгерҙәре | ? |
| Ҡаҙылма байлыҡтар | ? |

Барыһы 120 кеше ҡатнашты. 50-һе йәштәр, уҡыусылар түңәрәге, ҡалғаны — ололар. Һөҙөмтәлә түбәндәге һандар килеп сыҡты:

| | |
|---|---|
| Ирәмәл тауы | 43 |
| Ворожеич күле (Карағайкүл) | 35 |
| Әүлиә сығанағы | 24 |
| Нәрәле һырты | 38 |
| Шәрип ауылы шишмәһе | 11 |
| Пирамидалар | 18 |
| Ҡалҡан күле | 10 |
| Уйташ ҡаяһы (Чёртов палец) | 11 |
| Вознесенка сиркәүе | 19 |
| Өргөн күле | 6 |
| Ирәндек тауы | 27 |
| Ахун менңгерҙәре | 23 |
| Ҡаҙылма байлыҡтар | 6 |

Шулай итеп, *Ирәмәл тауы, Әүлиә сығанағы, Ворожеич күле (Ҡарағайкүл), Пирамидалар, Нәрәле һырты, Ахун меңгерҙәре* Учалы районының ете мөғжизәһе булып билдәләнде.

**Беренсе мөғжизә — “Ғорур Ирәмәл тауы”**



Учалы районының иң билдәле һәм иң йәмле урындарының береһе — *Ирәмәл тауы*. 1582 метр бейеклеге менән күккә барып тоташҡан мөһабәт тау – "ял итеүселәр мәккәһе". Йыл һайын Ирәмәл тауын күрергә меңләгән турист килә. Көньяҡ Уралдың иң күркәм тауҙарының береһе булған бейеклек итәгенән тиҫтәләгән йылға башлана (*Тығын, Синәк, Ҙур Аунар, Ҡарағайлы, Түләк* һ.б.), шул иҫәптән Башҡортостан символына әүерелгән Ағиҙел дә. Тауҙың тирә-яғын Уралдың ҡуйы урмандары уратып алған. Улар 3 дүңгәләк яһай: беренсеһе ҡатнаш урманлы, бында ҡышын аҡ шыршылар, йәйен боланут әрәмәлеге үҫә. Икенсеһе мәрмәр һарайҙар диуарына оҡшаған, шыршы һәм ҡарағастар менән ҡапланҡан. Өсөнсөһө бейегерәктә урынлашҡан, ниммәһемендер джунгли ерҙәренә оҡшаған. Бында ҡымыҙлыҡ һәм башҡа төрлө шифалы үҫемлектәр бик күп. Өсөнсө дүңгәләктән һуң Ирәмәл тауы матурлығына тап булаһың. Тау хаҡында легенда-риүәйәттәр әле лә йәшәй. Борон Ирәмәл ерҙәрен төрки халыҡ биләгән булған. Боронғо төрки телендә "ирәмәл" – "кешегә көс бирә торған урын" тигәнде аңлата. Шунан ҡалған да инде "ирәмәл" атамаһы. Ә Ирәмәл битләүендә урынлашҡан (200 йыл элек барлыҡҡа килгән) Түлек йылғаһы "теләк" тигәндән килеп сыҡҡан. Ошо риүәйәттәр нигеҙендә тағы бер легенда нигеҙ алған: тауҙың башында бар теләктәр ҡабул була тип и:эпләнә. Әммә кешенең күңеле саф, таҙа булырға тейеш, насар уйлы, йүнһеҙ кешеләрҙе тау йендәре ҡабул итмәй икән. [Информант].

Шулай итеп, бөйөк һәм бейек *Ирәмәл* — ҡеүәтле ыңғай энергия сығанағы, кем унда аяҡ баҫа — шул үҙенең тормошоноң яңы битен аса.

**Икенсе мөғжизә — "Изге Әүлиә сығанағы"**

*Әүеш ауылы* янында бер үҙенсәлекле шишмә бар. Ул йыл һайын май айында ғына урынынан килеп сыға ла, шунан ҡорой. Уны Әүлиә шишмәһе тип атайҙар. Шишмә *Әүеш тауының* итәгенән алып сыға, ә тауҙың башында боронғо әүлиә зыяраты бар. Ҡәбер эргәһендә ағас үҫеп ултыра. Ә башҡорттар әйтеүе буйынса, ҡәбер янында ағас үҫеүе — яҡшы билдә. Әлеге көндә ҡәберлеккә килгән кеше теләк әйтеп ағасҡа төҫлө таҫмалар, сепрәктәр бәйләп китә. Легенда буйынса бында *Беркә* исемле хан (Сыңғыҙхандың ейәне) Алтын Урҙа ваҡытында үҙ еренән айырылып үҙенә генә бер айырым ханлыҡ төҙөп ала. Был ханлыҡҡа *Беркәһарай* тип исем бирә. Тәхеткә ултырыу менән Ислам динен ҡабул итеүе хаҡында әйтә. Һүҙ менән генә түгел, ә рәсми рәүештә иҫбатлай. Шул ваҡыт исемен дә үҙгәртә. Ысын исеме уның *Бүркә* булған була. Ислам динен ҡабул иткәс *Беркәгә* әйләнә. Фараздар буйынса *Әүлиә тауында* ислам динен таратып йөрөгән сәйәхәтсе *Беркә хандың* илсеһе булған икән. Ул үлгәс, уны ошо ерҙә күмгәндәр. Шишмә борон-борондан изге булып һаналған. Бында кешеләр дауаланыу, төрлө ауырыу-сирҙәрҙән һаҡланыр өсөн килгәндәр. Ошоноң турала күренекле этнограф Лоссиевский үҙенең 1883 йылғы хеҙмәттәрендә яҙып ҡалдырған.

Йыл һайын шишмәне күрергә Башҡортостан эсендә йәшәгән халыҡ ҡына түгел, ә Ер шарнының төрлө төбәктәренән киләләр. Иманлы кешеләр бында доға ҡылып, һыуын тәмләр өсөн киләләр. Сөнки был изге һыу

бөйөрҙән ташты сығара, аллергияны бөтөрә, тын юлын яҡшырта, аш һеңдереү ағзалары сиренән дауалай тип иҫәпләнә. Урындағы халыҡ һөйләүе буйынса, шишмәгә һауа торошо, яуым-төшөм йоғонто яһамай. Һыуы йылдар буйына иҫкермәй һаҡлана. Элек халыҡ ҡәҙерләп ҡалаҡлап ҡына эскәндәр. Һыуҙы ғалимдар ҙа тикшереп ҡарағандар. Шунан уның составында кешегә файҙалы элементтар күп тигән һығымтаға килгәндәр.

Исеменең тарихына килгәндә инде, "әүлиә" ул ғәрәп теленән "вәли" һүҙенән килеп сыҡҡан тигән фараз бар. Башҡортсаға тәржемә иткәндә инде "тоғро, ғәҙел Алла ҡоло, яҡлаусы, һаҡлаусы, ҡурсалаусы һәм дөрөҫ, тура юлдан барыусы кеше" тигәнде аңлата.

Тағы бер риүәйәт бар: Борон заманда был ерҙә карауан үтеп барған. Халыҡ быны күреп "һуғыш" килә тип шау күтәргәндәр. Бар халыҡ ҡулдарына нимә тура килә алып быларға ҡаршы сыҡҡандар ҙа карауанды вис ҡырып бөтөргәндәр. Аҙаҡтан ғына карауан башлығы Рамаҙандың изге кеше булғанын, сәйәхәт ҡылырға сыҡҡанын белеп ҡалғандар. Уның кәүҙәһен тауҙың башына алып барып күмеп ҡуялар ҙа үҙҙәре лә ышанмаҫлыҡ мөғжизәгә тап булалар: тауҙан сылтырап тап-таҙа ғына шишмә ағып төшә. Халыҡ Ош ҡалаһынан булғанға тауға уның исемен биргәндәр: "ош" – "әүш" – "әүеш".

Өсөнсо версия буйынса үҙҙәренең ырыуҙарынана айырылып ер эҙләү маҡсаты менән бер төркөм кеше килеп сыға. Йөрөп-йөрөп бер күлгә тап булалар. Ҡараһалар, һыуы таҙа, мул, ере иркен, йәшәү өсөн бик уңайлы шарттар. Йыраҡ түгел тауы ла бар. Шунан тауҙы күргәс берәү ҡысҡырып евәрә: "Ниңә тауы бер яҡҡа йығылып барған һымаҡ ауыш ул?" Шунан халыҡ тауҙы "*ауыштау*" тип йөрөтә башлаә. Тора-бара телдә формалашып "әүештауға" әйләнә. Күлдең исеме лә шулай атала "*Әүешкүл*". Ауыл төҙөлгәс уға ла "*Әүеш*" исеме тағыла.

*Әүештауҙың* бейеклеге 645 метр. Юғарынан тирәүяҡ ус төбөндә генә күүренә. Әүеш күлендә ике утрау бар: береһе ҡанатын йәйгән ҡошто хәтерләтә, икенсеһе – йөрәккә оҡшаған.

Шулай уҡ шуны әйтергә лә кәрәктер: Учалы районы — әүлиәләр иле. Баттал ауылында *Байым әүлиә кәбере*, Һәйтәк ауылында *Хәсән суфый кәбере,* Ураҙ менән Ҡолош ауылдары араһында *Әүлиә зыяраты*, Мәҫкәү ауылында *Әүлиә зыяраты*, Кәрим ауылының тауында *Әүлиәләр ерлеге* бар.



**Өсөнсө мөғжизә — “Тылсымлы Ҡарағайкүл (Ворожеич)”**

Районыбыҙҙың ынйыларының береһе — Уй-таш итәгендә урынлашҡан Ҡарағай күле тәбиғәт ҡомартҡыларының береһе. Был күл Вознесенск ауылы эргәһендә урынлашҡан. Үҙенең формаһы буйынса дөп-дөрөҫ түңәрәк яһай. Диаметры — 2,5 километр, ә тәрәнлеге 6 метрға тиклем етә.

Күлдең матурлығы сикһеҙ. Бер ерҙә лә бындай урынды күреп булмай. Ҡарағай күленең тәбиғәте тик үҙенә генә хас, үҙенсәлекле. Бында үҫкән үҫемлектәр ҙә ғәҙәти түгел. Мәҫәлән, *йондоҙ сәскә* (альпийская астра), *күк сәскә* (василәк Маршала) һ.б.

Борон заманда күл буйында славян йолалары ойошторолған булған. Иң билдәле байрамдарының береһе — Иван Купала көнө булған. Ошо ваҡытта халыҡ бағымсы (ворожили) булғандар. Ошонан килеп сыҡҡан да инде “Ворожеич” атамаһы.



**Дүртенсе мөғжизә — “Үҙенсәлекле пирамидалар”**

Пирамида — өсмөйөш ҡырлы, объемлы геометрик фигура. Халыҡ әйтеүе буйынса пирамидалар дауалау һәм дәрт биреү сифаттарына эйә.

Районыбыҙҙа бик үҙенсәлекле 14 пирамида барлығы билдәле. Шуныһы ҡыҙыҡ: пирамидаларҙың һәр ҡайһыһының дүрт ҡыры туп-тура дүрт яҡҡа

ҡарай – Көньяҡҡа, Төньяҡҡа, Көнсығышҡа һәм Көнбайышҡа. Иң билдәле пирамидалар бөтәһе дүртәү: икәүһе Ураҙ ауылы янында табылған (береһе Тирлән яғына киткән яҡта ятып ҡала), Муса ауылында Ҡыҙылташта тағы ике пирамида барлығы билдәле, уларҙың аралары 2 километр, береһенең фундаментының бейеклеге 70 сантиметрғаса барып етә. Муса пирамидаларын Айрат Хисамутдинов тигән бер кеше тарафынан табылған. Айрат ағай үҙе һөйләүе буйынса еләккә тип сыҡҡан ваҡытында яңылыштан ғына осратҡан таш өйөмдәре был. Дүрт йыл буйына үҙенең тубышы хаҡында бер кемгә лә һөйләмәгән. Сөнки емереп, туҙҙырып бөтөрҙәр тип ҡурҡҡан. Шулай уҡ Ирәмәл итәгендә пирамида барлығы асыҡланған.

Бәләкәй пирамидалар *Миндәк, Кирәбе, Юлдаш, Күбәк, Ҡунаҡбай* ауылдарында ла табылған. Әммә улар хаҡында әле тик тикшеренеү эштәре бара. Бәлки, тора-бара улар тураһында ла киң мәғлүмәттәр табылыр.

Муса ауылы янында *Ҡыҙылташ* исемле һырт бар. 400 метр бейеклеккә күтәрелһәң пирамидаға тап булыһың да инде. Был пирамиданың нигеҙен 1 метрғаса киң, ауыр таш тәшкил итә. Пирамиданың башына етер саҡта таштар бәләкәсәйә. Пирамиданан *Рыстаҡташ тауына* бик матур йәйрәп ятҡан күренеш асыла. Ундағы икенсе пирамида беренсеһенән 400 метр алыҫлыҡта ята. Беренсе пирамиданан айырмалы рәүештә тау битләүендә түгел, ә урман эсендә яланда урынлашҡан. Шуға күрә бик үк күренеп, алыҫтан беленеп тормай. Ҙурлығы буйынса беренсеһенән күпкә киңерәк һәм яҫыраҡ.

Ҡасандыр *Кирәбе ауылы* янында ике пирамида табылған булған. Өс ир, үҙҙәренең хужалыҡ эштәре өсөн тип, пирамида таштарын өйҙәренә ташып бөткәндәр. Күп тә үтмәй өс ир ҙә билдәһеҙ рәүештә яҡты доньянан киткән. Тағы бер версия буйынса ҡыҙмаса рәүештә булған ике ир пирамидларҙы емереп киткән. Ярты йыл үтеүгә береһе аварияға осрап, икенсеһе эсеп үлгән. Урындағы халыҡ был хәлде ошолай тип аңлата: Боронғо ғөрөф-ғәҙәттәр буйынса изге таштарҙы, изге урындарҙы емергән кешене Аллаһы тәғәлә яратмай. Юлдаш ауылы менән Ҡунаҡбай ауылы араһында тағы бер пирамида барлығы билдәле.

Шуныһы ҡыҙыҡлы: пирамидаларҙың кәйефе бар. Пирамидаларҙы күргән кеше төрлөсә уйлана: кемдер үҙе һиҙмәҫтән ҡыуана башлай, кемдер ҡайғыра, илай, кемдер ҡайтҡыһы килмәй, кемдер шундуҡ китәһе килә башлай, ә кемделер пирамидалар бөтөнләй үҙенә яҡын ебәрмәй тей.

### Бишенсе мөғжизә — “Мәғрүр Нәрәле һырты”



**Нәрәле** (Нурали) 752 метр бейеклектәге көньяҡ Уралдағы һырт. Ул районыбыҙҙың Иҫке Байрамғол ауылы янында урынлашҡан. Тауҙың башы ағасһыҙ, йоморо формала. Битләүендә *Миәс йылғаһы, Шәрәмбәй һәм Уй йылғалары* ҡушылдыҡтары башлана. Оҙонлоғо 8 километр булһа, киңлеге 2 километр тәшкил итә. Болонло үҫемлектәр менән ҡапланған, тарлауыҡ ерҙәре ҡуйы урманлы. Нәрәле исеме "нур" һүҙенә барып тоташа. Урындағы халыҡтың һөйләүе буйынса тау известняк, туффит, гиппербаззит тау тоҡомдарынан тора. Һәм шулай уҡ тауҙа үҫемлектәрҙең аҙ булыуы "пеләш башты" хәтерләтә. Шуға ла инде был ерҙе "нурлы" (светлый, лысый мәғәнәһендә) тип атағандар. "Нурлы" — нурале" — "нәрәле" — "нурали".

Халыҡтың һөйләүе буйынса, бында Емельян Пугачев үҙенең ғәскәре менән йәшенеп ятҡан. Әлеге ваҡытта ла уларҙың ҡайһы бер әйберҙәрен табырға мөмкин: боронғо төймәләр, хужалыҡ әйберҙәре, уҡ остары һ.б.

Бында меңәрләгән туристар килә. Ял итер өсөн бик уңайлы урын булып иҫәпләнә. Джиптарҙа, квардрациклдарҙа, мотоциклдарҙа һәм велосипеттарҙа йөрөргә бында бик күп экстрим яратыуслылар йөрөй. *Нәрәле тауына* килгән ваҡытта баш кейемһеҙ килергә ярамай тигән ғәҙәт бар. Сөнки эҫе йәй айҙарында ҡояштан башҡаса һаҡланырлыҡ урын юҡ.

## Алтынсы мөғжизә — "Ахун меңгерҙәре, йәки Урал Стоунхенджы"



Тағы бер боронғо ҡомартҡыларҙың берәһе — "**Ахун меңгерҙәре**" комплексы (*Менгир* - (*кетьтск.*) "камень", "каменный перст") Халыҡта ул "*Урал стоунхенджы*" исеме менән киң таралған. Комплекс 1996 йылда Силәбе дәүләт университеты профессоры Андрей Александрович Рыбалко тарафынан ойошторолған этнографик экспедиция ваҡытында асыла. Уларға был меңгерҙәрҙе Ахун ауылында йәшәүсе Жәүәт Аитов күрһәтә. Комплекс Ахун ауылынан көньяҡ-көнбайышҡа табан 1 километр алыҫта уырнлашҡан.

Үҙ эсенә 13 меңгерҙе ала. Уларҙың ун икеһе ҙур түңәрәк яһай, ә икеһе түңәрәктең үҙәге булып тора. Комплекс беҙҙең эраға тиклем 15-13 быуаттарға ҡарай. Улар ҡеүәтле энергия туплаған һәр кем өсөн дәрт биргән урын. Риүәйәттәр буйынса алыҫ түгел төрмә булған. Ул үлһә лә тере булып иҫәпләнгән Алпамыша бәһлеүәндең ҡәбере.

*Ахун меңгерҙәре* комплексы мөғжизәүи көскә эйә. Улар бөтә теләктәрҙе бойомға ашыра тейҙәр. Шулай уҡ комплексты халыҡ араһында таш календарь тип тә йөрөтәләр. Ғалимдар *меңгерҙәрҙе* Бөйөк Британиелағы Стоунхендж менән сағыштыра. Тарихи сығанаҡтарға таянғанда Ахун ауылы 18-се быуатта барлыҡҡа килә. Уға башҡорт муллаһы нигеҙ һалған. Шуға күрә “ахун” исеме дини дәрәжәне белдерә. Ахун районыбыҙҙың иң матур ауылдарының береһе булып һанала. Бында Урал, уй, Әй, Миәс кеүек йылғалар башлана.

Был ҡомартҡы әлеге көндә туристарҙың яратҡан урындарының береһе булып тора. Беренсе ҡарамаҡҡа ябай ғына ҙур бер таш бағана, ә янында 12 бәләкәс таштар теҙмәһе. Әммә был таштар менән яҡындан таныша башлаһаң, бик ҡыҙыҡлы һәм әһәмиәтле асыштарға тап булаһың: беренсенән, таштар ҡояш әйләнәһен хәтерләтә. Ғалимдар асыҡлауы буйынса был таштар энеолит осоронан беҙҙең эраға тиклем өс мең быуат аҙағында барлыҡҡа килгән. Ләкин был фараз ғына. Федор Петровтың “Мегалитический комплекс Ахуново: древняя пригоризонтная обсерватория» монографияһында былай тип әйтелә: Боронғо кешеләр был урынды ниндәйҙер бер обсерватория рәүешендә ҡулланғандар. Уларбында планеталарҙың һәм башҡа күк есемдәренең хәрәкәтен күҙәткәндәр. Бында хатта ниндәйҙер һауаға осоп китеүсе ниндәйҙер билдәһеҙ объекттар күҙәтелеүе хаҡында фараздар бар. Урындағы халыҡ был комплекс, моғайын, борон һауанан төшкән объекттарҙың урыны булғандыр, тип иҫәпләй.

**Етенсе мөғжизә — “Йәмле Ағиҙел йылғаһы сығанағы”**



Ағиҙел йылғаһы — Башҡортостан Республикаһының иң ҙур йылғаларының береһе. Уның оҙонлоғо — 1430 километр, бассейнының майҙаны 142 мең квадрат километр. Учалы районы Яңы Хөсәйен ауылынан 4 километр алыҫлыҡта *Әүәлек һыртының* көнсығыш итәгендә башлана. Халыҡта йылға ике исем менән йөрөтөлә: Ағиҙел һәм Белая. Бер версия буйынса, йылға ҡояштан бире көньяҡтан ҡарай аҡҡанға "яҡты", "аҡ" исемен килеп сыҡҡан. Икенсе версия буйынса төҫөнә ҡарап ҡушылған. Аҡбур күп булғанға йылға шундай төҫкә ингән. Йылғаның башында Урал батырҙың ҡылысы тора. Был ҡылыс менән ҡасандыр Урал батырҙың улы тауҙарҙы емереп халыҡты таҙа һыу менән тәьмин иткән булған.

Шулай итеп, беҙ Учалы районының ете мөғжизәһен билдәләнек. Районыбыҙ тәбиғәт ҡомартҡыларына бик бай, уларҙың һәр ҡайһыһы әһәмиәтле. Шулайҙа ла опрос аша иң-иңдәрен билдәләргә тура килде. *Ирәмәл тауы, Әүлиә сығанағы, Ҡараҡай күле, Пирамидалар, Нәрәле тауы, Урал стоунхенджы* һәм *Ағиҙел йылғаһы* сығанағы районыбыҙҙың иң матур һәм иң киң таралған урындарының береһе булып танылды.

Тыуған ерҙең топонимдарын өйрәнеү бик әһәмиәтле. Беренсенән, өлкәндәр менән аралашырға өйрәнәбеҙ; икенсенән, яҙыу, яҙып алыу һәләтебеҙ үҫә. Өсөнсөнән, был эштәрҙең практик әһәмиәте лә бар: микротопонимдар юғалмаҫ өсөн теркәлә бара. Телебеҙгә ҡарата мөнәсәбәт үҙгәрә, фекерләү ҡеүәһе арта, ә ер-һыу атамаларын өйрәнеү ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, һүҙҙәргә иғтибарлылыҡ, тыуған яҡ тәбиғәтенә ихтирамлы ҡараш тәрбиәләй, атамаларҙың мәғәнәһен асырға ярҙам итә.

Ер-һыу атамаларын өйрәнеү-бер көнлөк кенә,бер кешенең генә эше түгел. Топонимик атамаларҙы, уларҙың аңлатмаһын төрлө ваҡытта, төрлө кешеләрҙән яҙып алдыҡ. Ә киләсәк быуын белһен өсөн уларҙы яҙып, мәғәнәһен аңлатыу иң кәрәгелер. Эҙләнеү эштәре дауам итә. Ә алға маҡсаттар, бурыстар ҡуйып йәшәү тормошобоҙҙо тағы ла йәмләй, ҡыҙыҡлыраҡ итә.

## Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Алтым бишегем — Учалы: Ҡала һәм районды кыҫкаса энциклопедияһы. Уфа: Китап, 2003.

2. Учалинский район: Энциклопедия. – Учалы (ООО «Энциклопедия», Уфа), 2008.)

3. Эй Яйыҡ йорт, Яйыҡ йорт. Башҡортостан тарихы буйынса өҫтәлмә мәғлүмәттәр. Өфө: "Китап" нәшриәте, 1998. – 264 бит.

**Информанттар:**

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Мәүлитов Алмас Вәли улы | 1936 | Ташҡыя ауылы | Хаҡлы ялда |
| 2 | Мәүлитова Ғәлиә Муллағәли ҡыҙы | 1938 | Ташҡыя ауылы | Хаҡлы ялда |
| 3 | Минниғәлиева Раушания | 1969 | Ахун ауылы | Хужабикә |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 4 | Хилажева Сәғиҙә Мәүлитбай ҡыҙы | 1949 | Уральск ҡасабаһы | Хаҡлы ялда |
| 5 | Мөхәмәҙиева Мәүлидә Әхәт ҡыҙы | 1959 | Мансур ауылы | Тәрбиәсе |
| 6 | Нәҙершина Лидиә Алмас ҡыҙы | 1957 | Мәсҡәү ауылы | Хаҡлы ялда |
| 7 | Дәминова Әлиә Урал ҡыҙы | 1983 | Учалы ҡалаһы | Китапханасы |
| 8 | Йәнбирҙина Гүзәл Ижбай ҡыҙы | 1971 | Балбыҡ ауылы | Клуб мөдире |
| 9 | Нурмөхәмәтов Айҙар Ижбай улы | 1967 | Учалы ҡалаһы | Үзилға руднигы (УГОК) |

**Ҡадиров Руслан**
Ғилми етәксеһе: **Кадирова Гөлнара Фәнис ҡыҙы**

## ТӨМӘНӘККӘЙЕМ — ТЫУҒАН ТӨЙӘККӘЙЕМ

Элек–электән кешене тарихҡа йәлеп итеүҙең иң актив һәм ижади формаларынан береһе булып тыуған яҡты өйрәнеү торған.

Үткәнен белмәгән халыҡтың киләсәге юҡ, тиҙәр. Беҙҙең бай тарихыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ, мәғарифыбыҙ, батыр, эшсән халҡыбыҙ бар. Ауылдар тарихы — халҡыбыҙ тарихының айырылғыһыҙ бер өлөшө, мөһим өлөшө ул. Уларҙы өйрәнеү, үҙең йәшәгән төбәк менән ғорурланыу хистәре тәрбиәләү — һәр беребеҙҙең бурысы.

Рухи ҡиммәттәребеҙ үҙ төҫөн юғалта, онотола барған был осорҙа тыуған яҡты өйрәнеү шул маҡсатҡа ирешеү юлы булып тора.

Һәр ауыл үҙенә генә хас иҫтәлекле урындары менән күңелгә яҡын. Киң, иркен туғайҙары, серле урмандары, бейек тауҙары, селтерәп аҡҡан шишмәләре... Тыуған яҡтың һәр һуҡмағы, кешеләре бик тә ҡәҙерле.

Бөгөлмә-Бәләбәй ҡалҡыулығында урынлашҡан Туймазы районы Башҡортостан картаһында сәсәктәр гөлләмәһен хәтерләтә. 1930 йылдың 20 август айында Туймазы районы барлыҡҡа килгән.

Төмәнәк ауылы – райондың иң ҙур һәм боронғо ауылдарынан береһе. Был ерҙәр, тарихсылар раҫлауынса, элек *кыр-йылан* ҡәбиләләренә ҡараған. Башҡорттар Рәсәйгә ҡушылғандан һуң, батша хөкүмәтенең ҡарары нигеҙендә, был төбәккә татарҙар күсеп килә башлаған. Ауылдың аҡһаҡалы *Әхмәҙиев Шахимансур Мөхәммәҙи* улы һөйләүе буйынса, Төмәнәк ауылы бынан 450-500 йылдар элек барлыҡҡа килгән булырға тейеш. Уға *Төмәнәк Күҙәймәтов* исемле кеше нигеҙ һалған.

Төмәнәк ауылы һаман зурая. Хәзерге көндә ауылда якынча 490 йорт, 1200ләп кеше йәшәй.

## Тау, шишмә, йылға, быуа, урман, ялан, аҡлан, баҫыу, соҡор атамалары

Өләсәйем, *Вәлишинә Вәсимә Шәғәҙәт ҡыҙы*, Төмәнәктең географик объекттары һәм уларҙың атамалары менән таныштырҙы.

Әйе, чынлап та ауылыбызда бейек таулар, куйы урманнар, чылтырап аккан чишмәләр, ялан кырлар бик күп.

Шаран ягынан ауылга кергәндә **Чалмалы тауы** бар. Йырак түгел *Чалмалы ауылы* бар, шуңа күрә бу тауны шулай атайлар.

Түбә урамын үткәч, амбар бар. Амбар артында куйы урман үсә. Шул урман эчендә бер бәләкәй тау бар. Анда балан күп үскән, шуңа **Балан тауы** диеп атаганнар.

Югары оч урамын чыккач тагы бер тау бар. Элек анда кыргый чиәләр күп үскән, шуңа халык аны **Чиәле тау** дип йөртә.

Зирек Каран урманы янында **Бурсык тауы** бар. Анда күп бурсыклар йәшәгән, оялары күп былган. Тауның исеме шуннан барлыкка килгән.

Югары оч урамының артында **Кызлар тауы** бар. Ул тау итәгенә кызлар һәм егетләр кичке уйынга җыйылганнар. Шуңа ул тауны *Кызлар тауы* диеп йөртәләр.

Комок урамының артында **Чишмәлетау** бар. Ул тауны шуңа Чишмәле дигәннәр, аның итәгеннән чишмә агып чыга.

**Үлекле Түбә.** Икенче төрлө исеме **Мәхүбә Түбәсе тауы** — Түбә урамы артында урнашкан. Гражданнар сугышы вакытында шул тау итәгендә бик күп кеше үлеп калган. Аларның арасында *Мәхүбә* исемне кеше дә былган. Тауның исеме шуннан барлыкка килгән. Чишмәле тау янында **Ак** һәм **Кызыл таулар** бар. Исемләре төсләренә карап кушылган.

Төмәнәк ауылында 18 чишмә бар. Кабак очо урамын чыккач, 500 метр баргач **“Чуакай чишмәсе”**.

Тимер исемле кеше үзенең биләмәсендә койо казыган. Ул үлгәч койога **“Тимер койосо”** дигән исем биргәннәр.

Тагы Түбә урамыннан йырак түгел бер чишмә бар. Ул **“Сәндрә чишмәсе”** диеп атала.

Чишмәле тау янында чишмә бар. Чишмәдән йырак түгел конюшня былган. Шул чишмәдә атларны эчергәннәр. Шуңа күрә аны **“Конюшнай чишмәсе”** диеп йөрөтәләр.

Ауылдан йырак түгел Югары очны чыккач **“Зирекле каран чишмәсе”** бар. Чишмәнең тирә-ягында бик күп *зирек* агачлары үсә. Шуңа бу чишмәне шулай атаганнар.

Югары очта йәшәгән Валишиннар гаиләсенең ындыр артында **“Нәкыя чишмәсе”** бар. Ул чишмәне *Накыя* исемле әби карап, чистартып торган. Шуңа күрә *Накыя чишмәсе* диеп йөртәләр.

Югары оч урамының башында таш арасыннан агып чыккан чишмә бар. Бу чишмәне элек **“Таш чишмә”** диеп атайлар иде. Борын-борыннан яңа туган сабыйның кендеген *Таш чишмәнең* шифалы суы белән юганнар. Йәш киленнәрне су юлын күрсәтергә дә шушы чишмәгә алып килгәннәр. Йәшләр бирегә кичке уйынга җыйылган. Гашыйклар тәмне судан ауыз иткән. Күптән

түгел ауылдашыбыз, композитор *Фәнир Галимов* әнисе Бибинур апага хөрмәт йөзөнән *Таш чишмәне* чистартырга һәм яңартып төзөкләндерергә карар итә: чишмә тибеп-бәреп чыккан җирне таш белән йөзләтә, басма-баскычлар ясата, утыргыч-эскәмиәләр куйдыра, йәнәшәдәге калкулыкка утыздан артык төп нарат-чыршы утырттыра һәм чишмәгә юл түшәтә. Бу тәмле сулы чишмә хәзер "**Инәки чишмәсе**" дип атала. Ауылдашлар тагын аны **"Бибинур чишмәсе"** һәм "**Фәнир чишмәсе**" дип тә йөртә.

Түбә урамын чыгып бер километр йыраклыкта *Кордон* урынлашкан. Урман эчендә урман карауылчылары бәләкәй генә йорт салганнар. Алар анда ашарга, ял итергә туктаганнар. Соңрак урман хуҗалыгы барлыкка килгәч тагын бер-ике йорт салып, йүкәдән капчыклар сукканнар, йүкә пумалалары да бәйләгәннәр. Шуннан бу урынны **Кордон** дип йөрөтәләр. Шул Кордон янында ике чишмә ага, икесе дә **"Кордон чишмәсе"** дип атала.

Мәктәп урамын чыгып, бер-ике километр үткәч **"Исән койосо" чишмәсе** бар. Бу чишмәнең исеме карауչының исеме белән бәйле.

Кабак очо янында ферма бар. Ферма янында маслозавод былган. Ауылда бер кешедә дә сепаратор былмаган. Ә маслозаводта былган. Бөтөн ауыл катын-кызлары шунда сөт айыртырга йөргәннәр. Шуның янында чишмә бар. Аны **"Маслозавод чишмәсе"** диеп атайлар.

Аннан йырак түгел тагы бер чишмә бар. Ул чишмәне *Тимербаев Баязит* абый караган, тазарткан, шуңа күрә **"Баязит чишмәсе"** диләр. *Баязит чишмәсенән* түбәнерәк

Кабак очоноң тагын бер чишмәсе бар. Аны *Хажҗинур абый* карап тордо, шуңа **"Хаҗинур чишмәсе"** дип йөртәләр иде. Ә ике йыл элек ауылдашыбыз Гәлләмов Мәсгүт үз көчө белән шул чишмәне тәртипкә китерде һәм аңа **"Йәшлек чишмәсе"** дигән исем бирелде. Сабан туенда бу исем бөтөн халыкка җиткерелде. Бу чишмә янына йәшләр өйләнешкәндә, киленгә су юлын күрсәткәндә киләләр һәм чишмәгә тәңкәләр ташлайлар, бәхет юрайлар.

Туган ауылыбызның сокландыргыч урыннары чыннан да бик күп. **Бурсык тауы** янындагы урманны **"Оло кул"** дип йөртәләр. Чынлап та тау башыннан караганда урман оло кулга ошаган, шуңа күрә "*Оло кул*" дип атаганнар.

Оло кулдан йырак түгел **"Нәзек кул"** урманы бар. Ул урман тар булган өчөн *"Нәзек кул"* дип йөртәләр.

Клуб урамын чыгып, сулга боролоп бер-ике чакрым баргач, **"Җәйләү яланы"** бар. Элек шул яланга техника булмаганлыктан, печән чабырга, җиләк җыйырга җәйәү йөрөгәннәр, шуңа яланны "*Җәйләү*" дип атаганнар.

"*Җәйләү*"дән йырак түгел **"Вышка акланы"** бар. Бу аклан ауылның иң бейек урыны. Анда вышка куйылган былган. Шуңа шундый исем биргәннәр.

Чиәле тауыннан йырак түгел тагы бер аклан бар. Бу акланны **"Фәрбизә аклан"**ы дип йөртәләр. Ул гел анда бер үзе җиләк җыйган, шуңа акланга шундый исем биргәннәр.

Төмәнәктән йырак түгел ике-өч чакрым йыраклыкта элек *Петровка ауылы* бар иде. Шул ауылның кырыйында колхоз бакчасы былган. Ул бакчаны **"Мәхәс бакчасы"** дип йөртәләр. *Мәхәсим* исемле кеше карауылчы

былып эшләгән. Ул анда төрлө җимеш агачлары утырткан, бакчаны шәп итеп караган.

Ауылны чыгып (Туймазы шәһәренә барганда), ике чакрым юл үткәч, уң якта **“Туң камыш”** дигән басу бар. Бу басу сазламак җирдә урнашкан. Элек җирләр ашланмаган, шуңа бу басуда ашлык уңмаган. Халык шуның өчөн басуны “*Туң камыш*” дип йөртә.

Элек анда ат молотилкасы былган. Ат белән барабанын әйләндергәннәр. Менә шулай ашлык тартканнар. **Ишбай төбәге** дип тигез яланны атайлар. Бер байның хезмәтчесе бу җирне саклаган. Шуңа яланны аның исеме белән йөртәләр.

Тигез басуны **Игенлек өстө** дип йөртәләр. Бу басуда иген үстергәннәр.

Тагы **Төпләү җире** бар. Ул Шаранга чыгып киткәндә уң якта кала. Элек шул урында урман былган. Шушы урында халыкка төпләп җир биргәннәр, алар иген үстергән. Бу урын шуңа шулай атала.

Ауылда кайсы бер чокорларның һәм юлларның да тарихы бар.

Кабак урамын чыккач бер чокор бар, аны **“Кыйык чокор”** дип йөртәләр. Бу чокор кыйык, шуңа шулай атаганнар.

“Исән койосо” чишмәсе янында да чокор бар. Ул чокорны **“Исән койосо чокоро”** диләр иде.

Клуб урамынан чыгып ярты чакрым баргач сул якта чокор бар. Ул чокорно **“Йәрәмкә чокоро”** дип йөртәләр. Чокордан дүрт-биш километр йыраклыкта Шаран районының *Йәрәмкә ауылы* урнашкан. Бу чокор шуңа күрә шулай атала.

Ауылның *Кабак урамыннан* Райман ауылына чыгып киткән туры юлны **“Бүләк юлы”** дип йөртәләр. Элек шул юл янындагы басулардан халыкка җир биләмәсе бүлеп биргәннәр. Шул юл буйлап, халык сөйөнөп җир биләмәсен алырга барган. Шуңа шул юлны шулай дип йөртәләр.

Урта җыйын урамыннан чыгып, Кордонга барган туры юлны **“Кордон юлы”** дип атайлар.

Тагы ауылыбызда **биш буа** һәм **бер йылга** бар.

Бер буа “Исән койосо” чишмәсе янында. Аны Галимов Фәнир будырды. Ул буада *Фәнир* балык үрчетә. Ә буа кырыйында умарталык бар. Умарталык Фәнир Галимовныкы. Өчөнчө йыл умарталык янында Фәнир Галимов тагы күңел ачу үзәге ачты. Ул **“Бабай утары”** дип исемләнде.

Икенче буа *Югары оч урамы* артында урнашкан. Аны *Калимуллин Айрат* будырды. Ул да буада балык үрчетә. Өчөнчө һәм дүртенче буалар “*Мәхәс бакчасы*” янында, аларны әлеге фермер *Галимов Фазыл* будырды. Ул да ике буасында да балык үрчетә.

Бишенче буа ферма янында, аны “**Ферма буасы”** дип йөртәләр. Ул элекеге буа. Җәй көнө ауыл халкы шул буада су керә, ял итә. Мәктәп урамын кисеп, Түбә урамы артыннан, Әгер ауылына таба кечкенә йылга ага. Аны **“Әгер йылгасы”** дип атайлар. Йылганың башы “Зирек Каран” чишмәсеннән башлана һәм “Өсән” йылгасына коя”.

## Урам атамалары

Годонимдар — урамдарҙың исемдәре.

Төмәнәк урамдары тарихы менән дә өләсәйем, Вәлишина Вәсимә Шәғәҙәт ҡыҙы, таныштырҙы. Төмәнәк ауылында сигез урам бар: *Мәктәп, Клуб, Йәшләр, Төньяк, Көньяк, Көнчыгыш, Тау, Җиңүгә 40 йыл*.

Элек *Мәктәп урамын "Урта җыйын"* дип йөрткәннәр.

*Тау урамын "Комак" урамы* дип, чөнки бу урамда 2-3 өй генә былган.

*Көнчыгыш урамын* элек "*Түбә*" дип атаганнар. Бу урам калкулыкта урнашкан.

Халык *Төньяк урамын "Югары оч"* дип атаган, ә

*Көньяк урамын — "Кабак очо*", чөнки элек бу урамда бер магазин былган. Шул магазин "*Кабак"* исемен йөрткән. Ауыл халкының ир-атлары бу магазинга кереп, сыра эчеп, сүләшеп утырыр былганнар. Шуңа бу урамны "*Кабак урамы*" дип йөрткәннәр.

"*Җиңүгә 40 йыл*" урамы Бөйөк Җиңүнең 40 йыллыгын бәйрәм иткән вакытта бу урамга өйләр салына башлай, шуңа урамга шундый исем бирелә.

*Клуб урамы* — урам башында клуб бар, шуңа шулай дип йөртәләр.

*Йәшләр урамы* — яңа өйләнешкән йәшләр шул урамнан урын алып, йортлар салган, шуңа шулай атала.

## Кеше исемдәре.

Төбәктә борондан килгән һәм һуңғы ваҡытта ҡулланылған кеше исемдәре

Һәр бер телдә кешегә өндәшеү, атап әйтеү, мөрәжәғәт итеү өсөн хеҙмәт итә торған бер антропонимик категориялар бар. Ата-әсәләр яңы тыуған сабыйға исем ҡушыуға ҙур яуаплылыҡ менән ҡараған. Һәр ата-әсә бөтә йолаһын тура килтереп уға мәғәнәле исем бирергә тырышҡан. Улар баланың бәхетле, яҡшы һәм игелекле, эшмәкәр кеше булыуын теләп исем ҡушҡан. Исем кешегә иң элек уға өндәшеү,мөрәжәғәт итеү, бер кешене икенсеһенән айырыу өсөн кәрәк.

Өләсәйем Төмәнәк ауылы кешеләренең исемдәренең тарихы һәм ҡушаматтарының килеп сығышы менән дә таныштырҙы.

Ул былай һөйләне: "Төмәнәк ауылында элегерәк түбәндәге боронго исемнәр кулланылган.

Хатын-кыз исемнәре: *Фатыйма, Рәхимә, Гөлфирә, Рәхилә, Рабига, Рауза, Сания, Мөкәддәсә, Мөзәгәрәфә, Мөнәздәхә, Шәмсениса, Гөлсөм, Гөлсара, Факия, Гөлҗан, Миниямал, Шамсинур, Рабига, Сәкинә, Маулиха, Мәрзиә, Сабира, Минзилә, Сәлимә.*

Ир-ат исемнәре*: Рим, Әнвәр, Габдулла, Миңлегали, Мансур, Миневәли, Мәхәсим, Әмирйән.*

Хәҙер ауылда йыш очрай торган ир-ат исемнәре: *Фәнил, Фәнис, Айрат, Рамил, Илдус, Альмир, Илнур, Альберт, Руслан, Әнәс, Филүс, Салауат, Зиннур, Мансур, Әсҡәт, Рифҡәт, Рафаэль.*

Хатын–кыз исемнәре: *Роза, Нурыя, Зөхрә, Гөлнара, Гөлназ, Гөлшат, Гүзәл, Гөлнур, Мәдинә, Нәргизә, Венира, Айгөл, Дамира, Альбина, Зәлиә, Фәниә, Зилә, Фәнирә, Әлфиә, Рәшидә, Флүрә.*

Исемнәрне кыскартып, үзгәртеп әйтү дә йыш очрай. Мәсәлән: *Вәли – Минневали, Салихҗан – Салих, Шахимансур – Мансур.*

Сирәк очрай торган фамилиялар да бар: *Ибраһимов, Кәримов,Равгутдинов, Мухаметгалиев.*

Тағы күп кенә татар исемнәре хатын-кыҙ һәм ир-ат исемнәре парларын тәьмин итәләр: *Әнис(ә), Дамир(а), Наил(ә), Рим(ма), Рәсим(ә), Илнар(а), Раил(ә), Нәсим(ә), Илгиз(ә), Раушан(ия), Фәнис(ә), Фәнил(ә), Венир(а), Динар(а), Рамил(ә), Элмир(а), Элвир(а).* Безнең ауылда да бу исемнәр бик күп кушыла.

**Кушаматтар.**

Һәр ауыл үзенчәлекле бит ул. Үзенчәлеге дә аның кешеләрнең кушаматлары, аларның ничек килеп чыгыуында. Кешегә кушамат йә бер кызык итеп әйткән сүзеннән, йә нинди кием киеп йөргәнлегеннән, йә кешенең характер сифатын тикшергәннән соң, йә сөйләменә карап кулланыла.

Төмәнәк авылында кушаматлы кешеләр бик күп, мәсәлән:

Ямгутдинов Рим — "*Җамык*" .Фамилиясынан чыгып шулай әйтәләр.

Галимов Динир — "*Мөтәукә*". Ул буйга бәләкәй булган һәм класларында гел азактан йөргән.

Хуснутдинов Хәмит — "*Хөсни*". Фамилиясыннан чыгып шулай әйтәләр.

Гайнанов Салауат — "*Мокот*". Танау белән сүләшкәне өчөн тагылган кушамат.

Габбасов Рим — "*Мортой*". Атасының исеме Мортаза былган, шуның исеменнән чыгып шундый кушамат биргәннәр.

Арсланов Рамил — "*Шәркәй*". Атасының исеме *Шарипйән* былган, шуның исеменнән чыгып ажада шундый кушамат биргәннәр.

Галиуллин Айрат — "*Татра*". Ауылда аның гына "Татра" машинасы бар. Шуңа "Татра" дип йөртәләр.

Ракипов Айрат — "*Траш*". Бу кушаматның тарихы кызык. Айратның атасы сакау былган. Элек машиналар юк бит инде. Ул ат белән йөк ташыган, ә атлары җончоу былган. Тау менгәндә:"Тырыш, малкай, тырыш!" – дигән. Бергә утрып барган иптәше шул көннән башлап, шундый кушамат таккан.

Сафиуллин Рәйес — "*Сәми Рәйесе*". Атасының исеме Сәмигулла былган. Атасының исеменнән чыгып шулай әйтәләр.

Валишин Фәнис — "*Башкорт*". Атасының бабасы башкорт былган, шуңа "Башкорт" кушаматы такканнар.

Ганиев Назиф — "*Зрә*". Назиф Мөсәвир абый белән Уфага барганнар. Уфадан кайтканда адашып таныш былмаган юлга кергәннәр. Назиф: "Мында зрә кердек", — дигән. Ауылга кайткач, Мөсәвир абый күршеләренә мыны кызык итеп сүләгән. Шуннан "*Зрә*" дигән кушамат йәбешеп калган.

Хайуан, җәнлек, кош-корт, бөҗәк исемнәре белән бәйле кушаматлар да очрай.

а) Йорт кошлары исеме белән аталган кушаматлар: Минибаев Назиф — "*Күркә*". Йәш чагында күркә кеүек кабарып, кешеләргә йәбешкән, сугышып йөргән. Шуның өчөн шулай дип йөртәләр.

Калимуллин Айрат — "*Бройлер*". Ул бик таза, шуга шундый кушаматлы.

б) Йорт хайуаны исеме белән аталган кушамат: Абдуллин Назиф — "*Кәзә*". Атасының тауышы нәзек былганга шундый кушамат биргәннәр. Малайы Назиф та шул кушаматны йөртә.

в) Кыргый кош исеме белән аталган кушамат: Яппаров Нурфаяз — "*Чыпчык*". Ул җиңел, очоп йөргәнгә,бик тиз йөргәнгә шулай дигәннәр.

г) Кыргый хайуан исеме белән аталган кушамат:

Яруллин Нигматулла — "*Бүре* Нигмәйе". Ул җүнсез кеше былган, ачлык вакытында кешеләрнең сарыкларын урлап, суйып ашаган. Шуның өчөн ауыл халкы аңа шундый кушамат биргән.

д) Бөҗәк исеме белән аталган кушамат:

Ганиев Илшат — "*Бет*". Аталарының бала чагынан килгән кушамат. Ике бер туган бала бала чакларында бер берсен шулай үртәгәннәр һәм бу кушамат гаиләләренә берегеп калган.

е) Халыкның кыланышына карап кушылган кушаматлар:

Галиев Мөҗәхит — "*Шыпый*". Астыртын кеше былганга, "Шыпый" дигәннәр.

Шайдуллин Рифкәт — "*Куптарай*". Ул бик мактанырга яраткан, шуның өчөн шулай дигәннәр.

Гарифуллин Алберт — "*Мәшкә*". Кешеләр белән җомшак сүләшкәне өчөн бирелгән кушамат.

Менә ауылдашларымның кушаматлары шундый кызык.

Мин ҡуйылған маҡсатҡа ирештем тип уйлайым. Төмәнәк ауылының ономастикаһын өйрәндем. Уның өлкән быуын кешеләре менән осрашыу күңелемде үҫтерҙе, рухи көс бирҙе. Бигерәк тә *Әхмәҙиев Шахимансур Мөхәммәҙи улының, Ғәлләмов Фәһим Әҙим улының* һәм өләсәйем, *Вәлишина Вәсимә Шәғәҙәт ҡыҙының* һөйләүҙәре ҡыҙыҡлы һәм фәһемле булды.

**Ҡулланылған әҙәбиәт**

1. Галимов Ф."Синеке бит без, Төмәнәккәем!.." Казан: "Сүз" нәшрияты, 2009.

2. Шиһапов И. "Кемнәр соң без, Төмәнәк бабай?!" Казан: Татарстан Республикасы Фәннәр академиясе "Фән" нәшрияты, 2013.

3. Район архивынан материалдар.

4. Төмәнәк ауылының өлкән быуын кешеләре (Әхмәҙиев Шахимансур Мөхәммәҙи улы, Ғәлләмов Фәһим Әҙим улы һәм Вәлишина Вәсимә Шәғәдәт ҡыҙы).

**Ҡаранаев Айназ Салауат улы**
Фәнни етәксеһе: **Сибәғәтуллина Миңзәлә Зәйнулла ҡыҙы**

# ҒАФУРИ РАЙОНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

## Ғафури районының ауылдары

**Абдулла.** Минең ауылымдым исеме — *Абдулла*. Русса бирелеше — *Абдуллино*. Ауыл 1923 йылда барлыҡҡа килгән. Тарих буйынса *Абдулла* тигән кеше ауылға нигеҙ һалған. Уны Еҙем-Ҡаран ауылынан Максютовтар менән килеп сыҡҡан бәхәстән һуң, ауылдан ҡыуып ебәрәләр. Еҙем йылғаһының яр буйына күсеп китергә мәжбүр булған. Тиҙҙән унын ғаиләһе ҙурайып, *Абдулла* ауылы барлыҡҡа килә. Ауылыбыҙҙы халыҡ телендә *Таштамаҡ* тигән исеме лә йәшәй. Ауыл эргәһендә *Таштамаҡ күле* булғанға ла шулай тип йөрөтөләр.

Ауылыбыҙ ярайһы уҡ һуң барлыҡҡа килгән. Был ваҡытта күп ауылдар күсмә тормош алып бармаған, Абдулла ла шул ауылдар исемлегенә инә. Бәлки, быға ауылды тирә-яҡтан уратып алған ҡуйы урмандар ҙа сәбәпсе булғандыр.

Ауыл халҡы *Табын ырыуының Ғәбделмән* араһына ҡарай.

**Сәйетбаба ауылы.** Ул мөһәбәт Урал тауының көнбайыш итәгендә урынлашҡан. Һуғыштан элек, 1940 йылдарҙа ауылда бөтәһе 251 хужалыҡ булып, 1400 самаһы кеше йәшәгән. Улар, крәҫтиән хужалыҡтарынан колхоздарға берләшкәнгә тиклем кәсеплек менән шөғөлләнгән: ер эшкәрткән, иген иккән, мал аҫыраған, ҡайһы бер хужалыҡтар бал ҡорттары үрсеткән.

Һуғышҡа тиклем *Сәйетбаба ауылы* үҙе бер колхоз була. Исеме ул саҡта ла "*Йондоҙ*" була.

**Сәйетбаба тарихы.** Борон-борон заманта Урал буйынта бер бабай менән әвей йәшәгән ти.Уларҙың әллә ней малдары ла,байлыҡтары ла бумаған. Ҡышын мал-тыуарын ҡурала, ә йәйен *Мәндем йылғаһы* буйында йөрөткәнләр.

Берҙән-бер көнтө әбей менән бабайҙың бер-бер артлы ике ир баллары донъяға тыуа. Әбей менән бабай бик шатланып, уларға *Сәйетбаба* һәм *Мырҙаҡай* тип исем ҡушҡандар.

Малайҙар ай үҫәһен көн үҫеп буй еткәнтәр. Ошо ваҡытта аталары ла үлеп китә. Ә аталары үлер алдынан балаларын янына саҡырып алып васыятын әйтеп ҡалтыра: "Ултарым, ир булып еттегеҙ инде. Бер-берегеҙгә терәк булып, ярҙамлашып йәшәгеҙ" — тигән.

Егеттәр башлы-күҙле булып донъя ҡора башлағандар. Береһе *Өйә йылғаһының* бер яғына, икенсеһе ярына урынлашҡан.

Бер көндө баҫҡынсылар килеп уларҙың мал-тыуарын әйҙәп алып китергә итәләр. *Мырҙаҡай* һәм Сәйетбаба уларға ҡаршы һуғыш башлайҙар Һуғыш өс көн өс төн бара.

Ахыр сиктә баҫҡынсыларҙы баҫтырып барып бөтөрәләр. Был һуғышта Мырҙаҡай яралана. Еңеүселәрҙе халыҡ ҡотлай, өс көн, өс төн ҡунаҡ итә.

Улар хөрмәтенә ошо ваҡиғанан һуң йылғаның һул яғын — *Мырҙаҡай*, уң яғын *Сәйетбаба* тип атап йөрөтөр булғандар.

Һуңынан йорттар һаны күбәйә, ике ауыл ҡушылып, ауыл халҡы телендә *Сәйетбаба* тип тә, *Мырҙаҡай* тип тә йөрөртөлә.

Ә бөгөн ауыл рәсми рәүештә *Сәйетбаба* тип йөрөртөлә. *Сәйетбаба* ауылына тәүге нигеҙ ташы 1704 йылда һалынған. Халыҡ хәтерләүе буйынса ауылдың 6-7 быуынлыҡ сал тарихы бар. Сөнки ауылдың боронғолоғон кешеләр ерләгән зыяраттар ҙа һөйләй. Ололар әйтеүенсә, ауылда 8 зыярат булған. Күп зыяраттар хәҙер ер менән тигеҙләшеп тә бөткән, һөрөлгән .Ә урындары әле лә билдәле. Әлеге көндә ауылдың ике осонда ике ҙур мосолман зыяраты бар.

Шулай булғас, *Сәйетбаба — Мырҙаҡай ауылының* сал тарихы быуаттар төпкөлөнә барып тоташа.

Бәлки ауылдың тик *Сәйетбаба* тип аталыуына ғына 300 йыл булыуы ла мөмкин,х әҙер тағы бер легендаға туҡталайыҡ. Ауылдың иң ярлы *Сәфиулла* тигән ҡарттың улы *Сәйет*, армияға алына. Батша армияһында 25 йыл хеҙмәт итеп ҡайта .*Сәйет* күпте күрә, күп һуғыштарҙа ҡатнаша. Рус телендә уҡырға, яҙырға өйрәнеп ҡайта, ғәрәпсә лә белә.

Һуғыштан һәм һалдат хеҙмәтенән ҡайтҡас, *Сәйет* ауылда донъя ҡороп евәрә. Ул балта эшенә лә оҫта була, үҙенә йорт һала. *Сәйет* заманына күрә бик белемле кеше була, ауыл халҡы уны ихтирам итә. Хат яҙһалар унан адрес яҙҙырғандар, ғариза яҙырға, сәфәр сығырға булһалар ҙа унан кәңәш һорағандар. Уны хөрмәтләп *Сәйет бабай* тип йөрөтәләр. Ул теремек, егәрле була. Ул дауалау эштәре менән дә шөғөлләнгән. Төрлө үләндәрҙән дарыу яһаған. Уға төрле яҡтан ярҙам һорап килгәндәр. Һәр береһенә ярҙам итеп, үҙе яһаған дарыуҙарр менән дауалаған. Донъяны куп кургән *Сәйет ағай* ҙа 100 йәшенә етеп вафат була. Ауыл халҡы уны хөрмәтләп, бөгөнгө *Сәйетбаба* ауылынң көнсығышында урынлашҡан *Ҡарауыл тауы* итәгенә ерләгән. Ә ауылды уньң хермәтенә *Сәйетбаба* тип йөрөтә башлайҙар. *Ҡарауыл тауының* атамаһы ла легенда буйынса халыҡтың тормошона бәйле. Унда ауылға килгән баҫҡынсыларҙы ҡарауыллап, күҙәтеп торғандар. Тау башында *“Ҡыҙҙар тауы”* тигән *ялан* да бар. Унда ҡыҙҙар-егеттәр төрлө уйындар уйнаған, күңел аскан.

Ауыл ер-һыу атамаларына бик бай. *Аҡбейек тауы* аҡбур, известь сығанағы менән данлы. Ауылдың икегә ярған *Өйә йылғаһы* аҡһа, ауыл ситенән тау йылғаһы *Мәндем аға*.

**Имәндәш.** Ауыл 1750-1751 йылдарҙа нигеҙләнкән. Исеме шул уҡ исемтәге тау атамаһынан алынҡан. *Имәнлиш* тип аталған йылға ла була.

Пынта *Һабайҙан* та байтаҡ кеше күсеп килә.

**Мораз.** Ауылты йылҡа исеме менән *Мәндем* тип тә атаҡанлар. Нигеҙ ташы һалҡан *Мораз Сөләймәнов* . Уллары *Юлдаш, Сәйет*.

**Ишембәт.** Ул *Имәндәштән* сыҡкан. Был ауыл әлеге көнтә *Толпар* исеме менән билтәле. Ул 1830-1834 йылларҙа барлыҡҡа килкән. Ауылты нигеҙләгән *Ишембәт Хоҙайғолов* 1770-1841 йылларҙа йәшәгән. Уның уллары

*Ҡормаҡай, Аҡъегет, Аҡҡуш, Аҡҡуштың* балалары *Фәхретдин, Кинйәабыҙ, Аҙнабай, Шәмсетдин, Зәйнетдин* (уллары *Сәйфетдин, Хәйретдин*).

**Ҡолҡан.** Ауылтың икенсе исеме – *Әлтәшле*. Уны *Ҡолҡан* исемле кеше нигеҙләгән. Уллары шул ауылта йәшәгән. Өлкәне *Әхмәр*, уның уллары *Баймөхәмәт, Килмөхәмәт, Мөхәмәтрәхим, Мөхәмәтйән*. Икенсе улы *Аҡбирҙе Ҡолҡанов*, өсөнсөһө *Айыткужа*, кесеһе — *Бураҡ*.

**Ҡаранйылға.** Ул *Кесе-табындар* тарафынан 1749 йылда нигеҙләнкән.

Ауыл *Алиш* менән *Ишсура Итҡоловтар* менән бәйле.

**Ишембәт** Имәндәштән сыҡкан ауыл. 1834-1850 йылдарҙа Имәндәштән пынта 50 ир күсеп килә.

**Үзбәк.** Йортлар һаны буйынса *Утәш* менән *Усмандан* ҡала өсөнсө урынта.

**Байымбәт.** 1896 йылда ауыл ике исем — *Байымбәт* һәм *Ҡунаҡбай* — менән теркәлгән. Икенсе исем күпкә һуңғараҡ ҡушылҡан. Ауылты *Байымбәт Илсеғолов* исемле кеше нигеҙләгән. Ул 18-се быуат урталарынта Кесе-Табын волосынта старшина булып хеҙмәт иткән.

**Тайыш ауылы.** Еҙем йылғаһы элек *Имәндәш ауылы* эргәһенән аҡкан. Ваҡыттар үтеү менән океан, диңгеҙ, йылға һыуҙары уң яҡка аға пашлағанта, Еҙем йылғаһы ла уң яҡка “йырҙа” йыра башлай. Һөҙөмтәлә Тайыш ауылының ярҙарын емерә. Еҙем йылғаһы *Тайыш ауылы* һәм *Имәндәш ауылы* эргәһенән ағып, икегә бүленә. Һөҙөмтәлә ике ауыл араһында утрау барлыҡка килә. Ни тиклем Еҙем йылғаһы *Тайыш ауылына* күскән һайын, Имәндәш ауылы ла Еҙем йылғаһын ҡыуа килә. Элекке Еҙем йылғаһы аҡкан ерҙәр (старица) Еҙем туғайлығына әйләнә. *Имәндәш ауылы* икегә пүленә: *Үр як, Түбән як*. Еҙем йылғаһының элекке аҡкан йырҙарында күл, ҙур йырын һаман та һаҡлана. Ул күл *Ғәббәс куле* тип атала.

**Йөҙимән.** Кесе-табынларҙың *Йөҙимән ауылы* Байымбәткә ҡарағанта күпкә һуңыраҡ парлыҡка килкән. Был ауылҡа 1795 йылда нигеҙ һалынҡан. Мынта ун биш йортта етмешкә яҡын кеше йәшәгән. Ауыл урынлашҡан ерҙә имән ағасы бик күп уҫкән. Ошо ағаслыҡ өсөн дә ауылты “*Йөҙимән*” тип атағантар инте, күрәһең.

**Яугилде.** Ауыл уны нигеҙләгән *Яугилде* исемен йөрөтә. Уның хаҡынта мәғлүмәттәр юҡ кимәлентә. Яугилдене *Самаш* тип тә йөрөтәләр. *Самаш* — бер хорунжий исеме.

**Ташбүкән.** Ғафури районында бер үк исемдәге ике *Ташбүкән* ауылы бар. Улар *Түбәнге* һәм *Үрге* тип атап йөрөтөлгәнтәр. 1795 йылта утыҙ туғыҙ йорттан торған бер генә ауыл була һәм *Илсектимер* түбәһенеке хисаплана, ә 1834 йылғы мәғлүмәттәр буйынса *Ҡарамыштыҡы* булып китә. Ун һигеҙенсе быуатта ауылты *Арыҫланбәк* тип тә йөрөткәнтәр. Һигеҙенсе ревизия алтынан, бер мең һигеҙ йөҙ утыҙ дүртенсе йылда, *Түбәнке Ташбукән* исемен алҡан ауыл айырылып сыҡкан. Үткән быуат аҙағында ул *Хәйбулла* тип тә аталған.

### Ғафури районының ер-һыу атамалары

**Һөт йылғаһы.** *Ташаҫты* ауылынан Еҙем йылғаһы буйлап юғарыға юл тотабыҙ. Машина менән тә пула, йәйәү “*Киндерле*” (*Победа*) мәмерйәһен

тиклем алты-ете километр. *Ҡолама тигеҙлеге*. Еҙемдең уң яғынын ҡапма-ҡаршы *"Суйын" төбө. Һары Таш ҡаяһына* килеп терәләбеҙ. Пынта шундай мөғжизәле ап-аҡ тауҙар араһынан үҙәндәр буйлап *Һөт йылғаһы* Еҙемгә килеп ҡоя. Йылғаның һыуы аҡ булыуы ла *Һөт йылғаһы* тигән исем бирә. Йылға йәй көнө бик һалҡын. Һөт, ҡаймаҡ-май һәм башҡа аҙыҡтар боҙолмаһын өсөн туристар һыуыткыс (холодильник) итеп файҙалана. *Һөт йылғаһы* ҡыш көнө туңмай. Ҡышҡы һалҡынтарҙа утын-бесән һәм пашҡа юлаусылар аттарына һыу эсереп китәләр.

**Һары таш.** Ысынлап та ул һары төҫтә. Ошоноң өсөн тә ул *Һары Таш ҡаяһы* исемен алған. Таш ҡаянан бик ҙур таштар уйылып төшөп, ҡайһылары ярҙа, ҡайһы перҙәре һыу эсентә ята. Һары таш "доломит" минерал ташы киләсәктә фосфор-фаянс эшләү өсөн бик яҡшы сеймал булып тора.

**Һөт йылғаһы** аҡ эзбисле һыу. Шифалы һыу минерал тоҙҙарға бик бай.

**Аҡ Таш ҡаяһы**. Юрмаш ауылы ҡаршыһында Еҙем йылғаһының уң яҡ ярында бик йыраҡтарҙан, йәғни, Имәнлек ауылы һыртынан уҡ *Аҡ Таш ҡаяһы* күренеп ята. Ул бик боронғо һәм үҙенсәлекле, боронғо Аҡбур осоронда барлыҡҡа килгән (меловый период). Был урындарҙа диңгеҙ төбө булған. Океан-диңгеҙ һыуҙары сигенә башлағас, бында бик күп диңгеҙ ылымлыҡтары тупланған (малюскалар-ҡусҡарҙар һ.б.), **Аҡ таш тауы** барлыҡҡа килгән.

**Аҡ Таш тауын** миллион йылдар Еҙем йылғаһы йыуа килгән. Ҡышҡы осорҙа ҡар-боҙ ҡатламлары ярыҡтар буйлап эскә кереп, яҙ көнө ҡояш яҡтыһынта иреп йомшаҡ аҡбур тоҡомдарын Еҙем һыуына ағыҙа. Һөҙөмтәлә, тәрән ярыҡтар хасил булып, Еҙем йылғаһына ҡолап төшәләр. Хәҙерге көндә лә был күренеш дауам итә. Был ташта бик күп бәләкәй һәм ҙур өңдәр бар. Был өңдәрҙе бурһыҡ, төлкө, бүреләр төбәк иткән. *Аҡ Таштың* аҡ буры хәҙерге ваҡытта ла халыҡ хужалығында файҙаһы бик күп. Йорттар һалғанда дурткел-яҫмаҡ таштары өй нигеҙҙәрен һалыу өсөн файҙалы (фундамент). Аҡ бурын борон-борондан мейестә яндырып, килелә онтап мейес, өй аҡлағандар. Әле лә был кәсеп бара. Мәктәптә яҙыр өсөн аҡбур булмағанда ошоноң менән яҙалар. Киләсәктә производство өсөн бик яҡшы сеймал булып тора.

**Аҡ таш ауылы** 1770–80 йылдарҙа барлыҡҡа килә. Ауылға нигеҙ һалыусылар *Иҫке Тайыш, Ҡауарҙы, Ибраһим* ауылы кешеләре була. Аҡ таш ауылы Аҡ Таш ҡаяһы исеменән алынған.

**Алып ҡара ҡаяһы.** Борон-борон *Алып-ҡара ташы* һалсыларҙың иң ҡурҡҡан урыны булған. Еҙем бында бик шәп аға, ҡалҡып торған эре-эре таштар кәмә һәм һалдар өсөн кәртә булып тора. Уларҙы бик оҫта һалсылар, кәмәселәр генә үтә ала. Яҙғы ташҡын һыуы бик шәп аға. Дүрт кәшмәле һал баш бирмәй ҡаяға тарта башлай. Артҡы ишкәктәге бабай алғы ишкәктәге егеткә: "Улым хәҙер боролош, алда ҡая, нык итеп уң яҡҡа һалдың башын ҡаяға тарта алып ҡара", — тип ҡысҡыра. Ләкин йәш егет ишкәкте бар көсө менән ишһә лә ҡаяға килеп бәреләләр. Һал тарала, бүрәнәләр төрлө яҡтарға аға башлай. Кем нисек бүрәнәләргә йәбешеп *Һары Таш ҡаяһына* килеп һуғыла. Иҫән-һау ярға үрмәләп менеп бер-аҙ ял алғас, егет: "Һин нимә тип ҡысҡыра инең?" — тип һорай. Бабай: "Мин һиңә һалыңдың башын нык итеп

алып ҡара, тинем”. Егет: “Һы, алап ҡара!”. Бына ошо һүҙ *Алып-ҡара ташы* булып ҡала ла инде.

**Уклы ҡая.** Уҡ-башаҡтар уның итәктәрентә бик күп табылған һәм әле лә табыла. Ташбыуат осоронан башлап бында башҡорттар һунарсылыҡ менән шөғөлләнгән. Таш, баҡыр, тимер уҡ-башаҡтары ошо турала һөйләй.

*Уклы-Ҡая* элек *Таш ҡая* исемен йөрөткән. Ошо *Уклы-ҡая* итәгентә Еҙем туғайлығында *Таш Аҫты ауылына* нигеҙ һалына башлай. Яңы ергә ауылына *Таиш, Имәндәш* ауылдарынан кешеләр күсеп ултыра башлай. Һөҙөмтәлә, *Таш-Аҫты ауылы* барлыҡҡа килә.

**Информант:** Мөхәмәтйәнова Хәлисә Йәүҙәт ҡыҙы, 52 йәш, Еҙем-Ҡаран ауылының уҡытыусыһы, китапханасы.

**Мамалимова Лиана Рим ҡыҙы**
Фәнни етәксеһе: **Нуриева Эльза Марат ҡыҙы**

## УЧАЛЫ — КҮЛДӘР ИЛЕ

Еребеҙҙә эсәр һыу кәмегән, шишмәләр ҡороған, йылғалар, күлдәр һайыға барған һайын кешелек донъяһы һыу тураһында күберәк уйлана. Борон: «Ахырызаман етһә, кешенән һыу ҡасыр», — тиер булғандар. Быйылғы ҡоролоҡ, күлдәрҙең кәмеүен, шишмәләрҙең юҡҡа сығыуы, ҙур йылғаларҙың кисеп сығырлыҡ булып һайығыуы боронғолар һүҙен раҫлай түгелме? Һыу!.. Беҙгә бирелггән иң ҙур хазина ул. Уйлап ҡараһаң, яп-ябай һүҙ, ә ниндәй оло көскә эйә! Ололар бит һыуҙы бик ҡәҙерләп, самалап ҡына тотонорға, һаҡларға ҡуша. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙ был эшкә бик битараф ҡарайбыҙ. Ни саҡлы теләйбеҙ, шул саҡлы эсәбеҙ, түгеп-сәсәбеҙ. Күҙ алдына килтерәйек — Ер йөҙөндә эсәр һыу ҡороп бөттө, ти. Ни булыр кешелек донъяһы менән? Кеше генә түгел, ер йөҙөндәге бөтә тереклектең йәшәүе — ул һыу. Оҙаҡламай тәбиғәттә иң ҡыйбаты һыу икәнен аңлай башларбыҙ түгелме? «Ҡулда саҡта ысын хазинаның ҡәҙерен белергә кәрәк.

Беҙгә ярай әле һыу бар. Йылға буйына барып һыу инәбеҙ, магазиндан һатып алып булһа ла шишмә һыуын эсәбеҙ. Киләсәк быуынға ошо йылға, күлдәр, шишмәләр ҡалырмы икән? Хәҙер иң ҙур тигән йылғаларыбыҙ ҙа, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һайыҡты. Әйткәндәй, Тәбиғәттең һыу, күлдәр темаһын тикшереү үҙенән-үҙе һорай. Шишмәләр, йылғалар, Ер шарының ҡан тамыры тип беҙгә өләсәйҙәребеҙ әйтә. Бөтә нәмәнең тамыры бар. Бер нимә тамырһыҙ донъяла юҡ.

Йылғалар, шишмә һыуҙары ла Ер тәне буйлап йөрөп, аҫтын да, өҫтөн дә саф һыу менән таҙарта.Кеше организмы һымаҡ. Сөсө күлдәр,шишмәләр — Ерҙең ҡаны. Шул сөсө һыу тураһында, дөрөҫөрәге күлдәр тураһында минең был эшем. Күлдәр тәү ҡарашҡа, тәбиғәттә тулып ятҡан һымаҡ тойола. Ысынында, был улай түгел. Йылдан-йыл улар кәмей, юҡҡа сыға. Ололар әйтеүенсә, тирә-яғын ләм, томбойоҡ баҫып алып, таштары мүкләнеп, ҡаны

бысрауҙан ауырыуға һабышҡан кешеләй булып, хәлһеҙләнеп ятҡан, ҡороған күлдәр күп. Күлдәр ҡорой, күлдәр менән бергә уларҙың исемдәре, тарихы юҡҡа сыға. Шуға ла беҙ, хәҙерге быуын балалары, тик ҙур күлдәрҙе генә beләбеҙ. Ә уҡытыусыбыҙ әткәнсә, беҙҙең Учалы күлдәргә бик бай район.

Быны бит раҫлауы бик еңел, сөнки ҡайҙа күлдәр бар, шунан йыраҡ түгел шишмә урғылып ята. Мәҫәлән, күп райондарҙа *Әүлиә тауы, Әүлиә шишмәһе* тип йөрөтөлгән урындар бихисап. Үҙебеҙҙең районыбыҙҙа *Рамаҙан әүлиә, Уау диуана (Вәхит) шишмәһе, Сәфәр, Әүешкүл, Кәрим, Ҡотой* ауылдарында әүлиәләре барлығы хәҙер һәр кемгә билдәле.

Учалы районын "Күлдәр иле" тип тә атарға була. Һәр бер дәрестә, уҡытыусыбыҙ, районды өйрәнер алдынан үҙеңдең торған урыныңды белергә кәрәк тип әйтә, ә беҙ Учалы -2-лә йәшәйбеҙ, унының үҙенең тарихы бик ярлы, үҙ һөйләше лә юҡ, сөнки бында күсеп килгән халыҡ йәшәй. Шуға ла мин хозур тәбиғәтебеҙҙең байлығын барлап сыҡҡандан һуң, һыу темаһын алырға булдым.

Күл, йылға, шишмәләрҙе, бөтә булған һыу атамаларын өйрәнгән фән ул — гидронимика.

**Учалы районының билдәле күлдәре:** улар 29: Бына улар:

| | | |
|---|---|---|
| 1. Өргөн күле. | 11. Ҡашкүл. | 21.Василевский |
| 2. Оҙон-күл | 12. Шырымбай | 22.Надежденский |
| 3. Бур Учалы | 13. Күрәс-күл | 23.Кумәскүл |
| 4. Ҡарағайлы | 14. Драга | 24.Һарыуһаҡкүл |
| 5.Ҡалҡан | 15. Ҡарағайкүл | 25.Нәрәлекүл |
| 6. Әүеш-күл | 16. Ҡарманкүл | 26.Серместекүл |
| 7. Аҡкүл | 17. Морспалинское | 27.Ялан-кул |
| 8. Сүпте-күл | 18. Елембәт | 28.Ҡулдыбай |
| 9. Ала-күл | 19. Ҡаскарҙы | 29.Ысыҡкүл |
| 10. Мишле | 20. Ҡара-балыҡ | |

**Бәләкәй, халыҡ өсөн билдәһеҙ күлдәр**

Учалы районында кешеләргә таныш булмаған күлдәр ҙә бик күп, улар майҙаны буйынса ғына бәләкәй, ә тәбиғәткә кәрәклеге буйынса берҙә генә ҙур күлдәрҙән ҡалышмайҙар.

| | Атамаһы | Ниндәй ауылда ята |
|---|---|---|
| | Өс-күл | Ҡобағош. |
| | Күкүль | |
| | Талышман. Икенсе исеме — Пушков | Ураҙ |
| | Алтын күл | Ҡотой |
| | Барал | Рысай |

| | | |
|---|---|---|
| | Ҡарасүл | Һөләймән |
| | Ағастыкүл | Һөйөндөк |
| | Ҡояшкүл | Ҡобағош |
| | Соңғор | Ҡобағош |
| 0 | Һыуыҡкүл | Түләк |
| 1 | Һөлөктөкүл | Әүешкүл |
| 2 | Артмасыҡ | Әүешкүл |
| 3 | Көл | Әүешкүл-Мулдаҡай |
| 4 | Һарысаҡ | Әүешкүл |
| 5 | Нәдежин | Әүешкүл-Мулдаҡай |
| 6 | Һарсар(ҡ) | Әүешкүл |
| 7 | Мәсекәй | Әүешкүл |
| 8 | Кастынский | Әүешкүл |
| 9 | Ләүәнтәй | Әүешкүл |
| 0 | Янсыҡты | |
| 1 | Көрәскүл | |
| 2 | Көмәс | Кәрим |
| 3 | Увалы | Көсөк |
| 4 | Юлмаш | Һөләймән |
| 5 | Кәрәсүл | Һөләймән |
| 6 | Һөйөндөк | Һөйөндөк |
| 7 | Ағышбай | Һөйөндөк |
| 8 | Миндәк | Миндәк |
| 9 | Саптыкүл | Ҡаҡан һәм Асыҡкүл араһында ята |

| | | |
|---|---|---|
| 0 | Федор күле | Сәфәр янында |
| 1 | Башмаков | Первомайка ауылында |
| 2 | Остотау | Сәфәр |
| 3 | Ҡурташ | Байрамғол |
| 4 | Усҫтыҡташ күл | Ҡужай яғында |

**Кастынский күле.** Әүешкүл ауылында. Был урында алтын күп булған. Шул алтын йыуыу арҡаһында килеп сыҡҡан күл. Кастынский — кеше фамилияһы.

**Алакүл.** Күрше ауылдан ике көтөүсе мал эҙләп килеп сыға. ял итергә тип бер түбәсектә туҡтайҙар. Шул түбәсектән күл күреп ҡалалар. Күлде урыны-урыны менән ҡамыш уратып алған була. йыраҡтан ҡарағанда ул ала булып күренә. Ауылға килеп еткәс, уларҙан бер кеше, ҡайҙан килгәндәрен һорай, былар *Алакүлдән* тип яуап бирәләр. Шул ваҡыттан был күл *Алакүл* тип атала.

Быйыл Башҡортостанда 2017 йыл — Экология һәм махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре йылы тип иғлан ителде. Ә киләсәктә таҙа һыу иң ҙур байлыҡ булып иҫәпләнәсәк. Өсөнсө Бөтә донъя һуғышы нефть, алтын өсөн дә түгел, ә таҙа һыу өсөн булыр һымаҡ. 2030 йылдарҙан таҙа һыу ныҡ кәмей башлай.



Ололар һүҙенә ҡайтһаҡ, "Ахырызаман еткәндә, кешеләр тоҡтарға алтын тейәп, өй беренсә йөрөп эҙләрҙәр — таба алмаҫтар. Һыу икән тип ялтырап ятҡан ергә барып сығып, эх түгел икән шул тип үкенерҙәр" — тип һөйләгәндәр. Мәҡәлдәр бар:

Күл тамсынан йыйыла.

Тамсы тамып, күл яһай, тин йыйылып, һум яһай.

Тамсы тама-тама — күл була.

Күленә ҡарап — ҡамышы.

Ил төкөрһә, күл булыр.

Мин был эшемде, кешеләр йөрәгендә ниндәйҙер сигнал бирәйем тип яҙҙым, сөнки беҙҙең күлдәребеҙ ҡороу, бысраныу, һаҙлыҡтарға әйләнеү өҫтөндә, шуның менән бергә уларҙың исемдәре лә юғала. Ер-һыу атамаларын өйрәнеү — бер көнлөк кенә, бер кешенең генә эше түгел. Күл аңлатмаһын төрлө ваҡытта, төрлө кешеләрҙән яҙып алдыҡ. Эҙләнеү эше дауам итә, сөнки исемдәренең килеп сығышын табыр өсөн эҙләнеү эше алып барырға кәрәк. Был эште беҙ үҙебеҙҙең "Вариҫ " түңәрәгенең төп маҡсаты итеп 2017-2018 уҡыу йылына алырға булдыҡ.

**Ҡулланылған материал:**

1. Фатҡуллин Р.А. "Край мой, Учалинский". Учалы "Панорама", 26-сы бит

2. Шәһиев Р. "Алтын бишегем-Учалы". Өфө: Китап, 2003.

3. Исмәғилов М.Х. Әүешкүл кешеһе. 80 йәш.

4. Батыр Фатҡулла улы. Бурансы. 70 йәш.

**Моратова Лиза Азамат ҡыҙы**

Фәнни етәксеһе: **Мостаева Вазифа Азат ҡыҙы**

## БАЙМАҠ РАЙОНЫ ӘБДЕЛКӘРИМ АУЫЛЫ ҺӨЙЛӘШЕ ҺӘМ АУЫЛ ХАЛҠЫНЫҢ ҠУШАМАТТАРЫ

**Лаҡаптар**

“Ауылда *Әхәт* исемле бер олатай булған. Кешеләрҙе гел дә шаяртып, көлдөрөп, алдаштырып, шаяртып йөрөгән ул. Йәйҙең эҫе, бесән ваҡытында һыу төшөргә Һаҡмар йылғаһына бара. Эҫе көн булғанға, һыу инергә күп кеше барған. Был олатай йөҙә белмәгән, һыуҙың тәрән еренә барып бата башлай. "Ҡотҡарығыҙ! Ҡотҡарығыҙ! Батам!" — тип ҡысҡыра, ләкин берәү ҙә иғтибар итмәй. Һаман да уны алдайҙыр, тип уйлап, ҡотҡарырға ашыҡмайҙар. Оҙаҡ ҡына ҡарап торғандан һуң алдамағанын аңлап ҡалалар ”(Инф. Моратова С.Х., 1972 йылғы)

*Ишмырҙа* тигән олатай һәр ваҡыт кешене шаярткан, йор һүҙле булған. Бер мәл йыйылышып торған ир-егеттәр, ҡабаланып китеп барған *Ишмырҙаға*: "Туҡта әле, алдаштырып кит әле!" — тип ҡысҡырғандар. "Ваҡытым юк, совхоз эшселәренә аҡса килгән", — тигән һүҙенә ышанып,

уның артынан эйәргәндәр. Хәҙер ҙә алдаштырып ебәрһәң: “Ишмырҙа булдыңмы әллә?” — тиҙәр. ”(Инф. Моратова С.Х., 1972 йылғы)

*Рәүел* тигән олатай көн һайын магазин яғында ҡаҙ бәпкәләрен көтә икән. Магазиндан алып үҙе һыра эсә. Яйлап-яйлап бәпкәләрен ҡарға сүпләй. Берәү генә ҡалғас "Нууу дәәә....Ошо берәүһен генә алып китһә, бәпкә көтөүҙән ҡотолор инем", — тигән. Бөгөн дә бәпкәләрен көткән кешеләрҙе күрһәләр: ”Тағы нисәү ҡалды?” — тип һорайҙар” (Инф. Моратова А.М., хаҡлы ялда, 1946 йылғы).

Әбделкәрим ауылында *Бикбулат* исемле олатай булған. Уның хәтере насарыраҡ булған. Баймаҡҡа паспорт юлларға барғанда, балаларының, ҡатынының исемен һорағандар. Үкенескә ҡаршы, ул ҡатынының исемен оноткан. Кискә генә өйөнә ҡайтһа, ишеге эстән эленгән. Ишеген төңкөлдәтә, ләкин берәү ҙә асмай. Оҙаҡ ишек шаҡып торғандан һуң, йәне көйөп: “Фәрзәнә! Ас ишекте! — тип ҡысҡырып ебәрә лә — Әәй, Фәрзәнә бит әле!” — тип ҡапыл иҫенә килеп төшә. Кемдеңдер исемен иҫләй алмай торғанда: “Фәрзәнә түгелме?” — тип шаярталар” (Инф. Мөхәмәдйәнов Х.И.).

Шул уҡ *Бикбулат* олатай менән булған хәл. Күгәрсендең нимә икәнен онотоп, хатынынан инеп “Тауыҡҡа ем һалһам, ниндәй ҡош әле ул, ҡыҙыл тәпей, гөр-гөр-гөр ашап бөтә лә ҡуя,” — тигән. Беҙҙең ауылда күгәрсендәрҙе “гөр-гөр” тиҙәр ҙә ҡуялар” (Инф.Мөхәмәдйәнов Х.И.)

*Әсҡәттең* хәтере насар була. Ҡом бушатырға күрше ауылға бара, бәләкәй малайын ултыртып ала. Ауылға барып ҡом бушата ла өйөнә ҡайтһа, малайы юҡ икәнен күреп ҡала. Килен күрмәҫ борон, табанын ялтырата. Һыпырта теге ауылға. Кире теге ауылға барып, малайын алып ҡайта”. (Инф. Моратова А.М.)

**Зоонимдар**

**Йылҡы малына:**

Кирсәй — кир ат булғаны өсөн;

Ҡашҡа — маңлайында аҡкашҡаһы булғаны өсөн;

Йондоҙ — йондоҙ кеүек тамғаһы булһа;

Ерәнсәй — төҫө ерән булғанға;

Саптар — юрға аттарға әйтәләр;

Мәргән — шәп сапҡан атҡа әйтәләр;

Аҡбуҙат — күк төҫтәге ат;

Бөркөт — бөркөт һымаҡ көслө,бирешмәҫ атҡа әтәләр;

Һарысай — һарыраҡ булған ат.

**Һыйырға:**

Ҡарагүҙ — күҙе эргәһендә ҡара булғанға;

Марта — март айында тыуғанға;

Алаҡай — төҫө ала булғанға;

Лунтик — әкиәт персонажына оҡшаған һыйырға әйтәләр;

Әлфиә — Әлфиә исемле ҡатындан һатып алған булғандар, шуға уның исемен ҡушҡандар;

Ҡарала — ҡара һәм аҡ төҫтә булғанға.

**Эткә:**
Аҡтырнаҡ — тәпәйе аҡ төҫтә булғанға;
Ҡарабай — ҡара төҫтә булғанға;
Алабай — төҫө ала булғанға;
Муйнаҡ— муйыны аҡ булғанға;
Һоробай — төҫөнә ҡарап ҡушҡандар;
Алғыр — һунар эттәренә күберәк ҡушылған;
Аҡтүш — түше аҡ булған өсөн.

**Бесәйҙәргә:**
Иркәбикә —иркә булғанға;
Төймә — бәләкәй булғанға;
Алабикә — төҫө ала булғанға;
Мыяубикә (урыҫса *Мурка* тип тә ҡушалар) — күп мыйылдағаны өсөн:
Һоросай — һоро төҫтә булғанға;
Ҡарасай — ҡара төҫтә булғанға;
Йәшелгүҙ (йәшел күҙ) — күҙе йәшел булғанға;
Ҡупшыбикә — ҡупшы булғанға.

## Ҡушаматтар

1. Күрше *Йомаш* ауылында һәр кешегә исем ҡушалар икән, ти. Беҙҙең ауылдан барған ағай, исем тағып ҡуймаһындар тип, өндәшмәй тик йөрөгән. Шуға ла уға "*Муму*" тип исем таҡҡандар. (Инф.Мөхәмәдйәнов Х.И.)

2. Шулай уҡ Йомашта булған хәл. Рәфҡәт ағайҙың тракторы тоҡанмай тик ултырған, шуға ла "*Тоҡанмай*" тигән исем таҡҡандар. (Инф.Мөхәмәдйәнов Х.И.)

3. "*Петух*" ҡушаматы — бер малай бәләкәй саҡта дуҫына барған да ҡысҡырып тик торған, ләкин тегеһе ишетмәгән. Дуҫының атаһы әйткән: "Әтәс булып ҡысҡыр, бәлки ишетер", — тигәндән һуң, көн һайын барған да әтәс булып ҡысҡырған. (Был ағайға хәҙер 33 йәш) (Инф.Мөхәмәдйәнов Х.И.)

4. "*Көт-көт" Ильдус* — гел яйлап, ығышланып йөрөй. Берәй ергә барырға булһа:" Көтөп тор, көтөп тор," — тип кешене көттөрә. (Инф.Моратова А.М.)

5. *Һоғалан Мәрйәм* — ҡабалан йөрөгән кеше. (Инф.Моратова А.М.)

6. Һайыҫҡан Фәриҙә-һәр ерҙә ҡыҫтырылып, шиҡырыҡлап йөрөгән. (Инф.Моратова А.М)

7. *Брежнев Ғирфан* — йөҙө, тауышы,ҡыланышы менән йырсы Брежневҡа оҡшаған. ( Инф.Моратова А.М.)

8. *Трамвай Фәүзиә* — иртә таңдан ҡар булһа ла, ямғыр яуһа ла урамда. Бер ҡараһаң икенсе урамда йәшәгән малайынан ҡайтып килә йә китеп бара, икенсе ҡараһаң, магазиндар яғынан килә ( Инф.Моратова А.М.)

**Ауылыбыҙҙа түбәндәге диалект һүҙҙәр бар:**

| Диалект | Әҙәби телдә(йә һүҙҙең аңлатмаһы) |
|---|---|
| Мөгәрәп | Баҙ |
| Өй икмәге | Әсе икмәк |
| Тамаҡ бешереү | Ашарға бешереү |
| Ишек алды | Урам эсе |
| Кейем тәкләү | Рәтләү |
| Көпө ыштан | Ҡалын салбар |
| Өгөрсө | Ҡыяр |
| Күнәк | Биҙрә |
| Ҡутарғанса | Күп итеп |
| Бәләкәй баҙар | Шәмбе көнө |
| Көнөгә | Көнөнә |
| Ҡашыҡ | Половник |
| Бәрәнге | Картуф |
| Ҡотоҡ | Ҡоҙоҡ |
| Күлмәк | Күлдәк |
| Сирләү | Ауырыу |
| Сепей | Себеш |
| Әлморон | Гөлйемеш |
| Балғалаҡ | Сәй ҡалағы |
| Апҡайтты | Алып ҡайтты |
| Апарыу | Алып барыу |
| Пыяла | Быяла |
| Башалтай | Йөн ойоҡ |
| Мунсаҡ | Муйынсаҡ |
| Кәлүш | Галош |
| Андый | Ундай |
| Шундый | Шундай |
| Һаңрау эсеү<br>Әндрей эсеү | Төшкө аш менән киске аш араһындағы сәй эсеү |
| Бөйән,ширлан | Тултырма |
| Юл һөрөү | Юлды таҙартыу<br>Һөрәп эттереү |
| Баҫмаҡлау | Күмәкләп килеү |
| Әрҙәнә теҙеү | Утын һалыу |
| Ҡыҙлар | Ҡыҙҙар |
| Малайлар | Малайҙар |
| Ҡашыяҡ | Һауыт-һаба |
| Ҡоштабаҡ,туҫтаҡ,алдыр | Табаҡ |
| Ситр | Өйрә (малға бешерелгән ярма) |
| Болант | Урам эсе |
| Аңдыу | Һағалау |

**Ер-һыу атамалары һәм уларҙың килеп сығышы**




**Үркә ташы** ауылдан 1-2 саҡрымда урынлашҡан. Боронғо заманда *Үркә ташындағы* бер ҡыуышта *Ғәлимйән* исемле бер егет һәм унын ҡарындашы *Маҡтым* йәшәгәндәр. Улар ата-әсәһенән бик иртә етем ҡалған. Бер ваҡыт был ерҙә ҡаҙаҡтар килеп сыға. Улар Ғәлимйән менән Маҡтымды эҙәрлекләй башлайҙар. *Маҡтымды* Тайсин исемле ҡаҙаҡ егете урлап китә. Ә Ғәлимйән бер таш аҫтына инеп йәшеренеп ҡалырға уйлай. Ләкин уны күреп ҡалалар ҙа:

“Яурын яғын белдеңме,

Таш аҫтына инеп яттыңмы?” — тип *Үркә* тигән ҡаҙаҡ уны шунда уҡ атып үлтереп китә. Шунан бирле был таш “*Үркә таш*” тип йөрөтөлә. *Үркә ташы* алыҫтан дөйәгә оҡшап тора. (Инф. Ғәбитов Ф.С)

**Мәрйен түбәһе.** Элек был түбәлә бер генә өй булған. Унда бик бай бер ҡаҙаҡ йәшәгән. Уның өйөр-өйөр йылҡы көтөүе булған. Бер ваҡыт ул ҡаҙаҡ далаларынан үҙе кеүек бер ҡаҙаҡтың ҡыҙын кәләш итеп алып ҡайтҡан. Ул ҡыҙ алтын-ебәккә төрөнөп, уҡалы ҡашмауҙарына биҙәнеп, тирә-йүндәге кешеләрҙе таң ҡалдырып, үҙенең һылыулығы менән бөтә тирә-яҡҡа йәм биреп килен булып төшкән көндө түбәгә килеп баҫып тора. Ошо көндән башлап был түбәне "*Мәрйен түбәһе*" тип атайҙар. (Инф. Ғәбитов Ф.С.)

**Аслай тауы** итәгендә *Аслай* тигән кеше йәшәгән. Ул бер үҙе генә торған. Уның төп һөнәре арпа сәсеү булған. Арпанан өс төрлө ярма ярҙырған. Ярманан көнөнә өс тапҡыр өйрә бешереп эскән. Уның исеменә ҡарата был тауҙы "*Аслау тауы*" тип йөрөткәндәр. (Инф. Ғәбитова С.И)

**Ҡалмаҡ яткан ер.** Ҡыуат ауылынан Исҡужа ауылына бара торған ерҙә. Был ергә элекке ваҡытта ситтән килгән ун ике өйлө ҡалмаҡтар йәшәгән. Улар донъялар бағара башлағас был ерҙән ҡасып киткәндәр.

Ҡырҙа,урмандарҙа, тау-таш араһында бик оҙаҡҡасып йөрөйҙәр. Улар йәшәп киткән ерҙе "*Ҡалмаҡ ятҡан ер*" тип атағандар. Улар урмандарҙа ҡасып йөрөгәндә йыуа, әтмәкәс кеүек нәмәләр менән туҡланғандар. Шуға күрә шул ерҙәге йыуаларҙы "*калмаҡ йыуаһы*" тип атағандар.(Инф. Ғәбитова С.И.)

**Кәрәкәй тауы** тип ауыл осондағы тауға әйтәләр. Ул тауҙа бер генә ҡайын ағасы үҫә. Ҡасандыр был тауҙа ауылымдың тарихына бәйле *Гәрәкәй* исемле батыр ҡаҙаҡ батыры Үркә менән осрашып алыша һәм үлә. Ул үлгән тауҙы уның исеме менән атайҙар. Ауыл халҡы телендә боҙоп әйтелеп хәҙерге көндә *Кәрәкәй* тауы тип йөрөтөлә. Армия сафына киткән егеттәр тауҙағы ҡайын ағасына йондоҙ эшләп ҡуйып китәләр (Инф. Ғәбитова С.И.).

**Мәҙинә осҡан ҡаяһы.** Бынан күп йылдар элек Вәли ауылында (*ул Әбделкәрим ауылы эргәһендә булған,хәҙерге көндә ул бөткән ауылдарҙан һанала*) ирле-ҡатынлы бер ярлы ғына ғаилә йәшәгән. Уларҙың *Мәҙинә* исемле ҡыҙы булған. Ул ҡыҙ бәләкәйҙән ауылын,уның тәбиғәтен бик яратҡан, бормаланып-бомаланып ауыл эргәһенән аҡҡан Һаҡмар йылғаһының ағышын күҙәткән, һандуғастарҙың моңло тауышын тыңлаған. Мәҙинәнең шат бала сағы оҙаҡҡа бармай, уға 11-12 йәштәр самаһы булғас, әсәһе донъя ҡуя. Уның өсөн ауыр, михнәтле тормош башлана.13 йәше тулғанда уҡкара ҡыйғас ҡашлы, алһыу йөҙлө, зәңгәр күҙле, тал кеүек зифа буйлы Мәҙинәнең матурлығы, уңғанлығы тураһында хәбәр күп ерҙәргә таралып өлгөр була. Уға тирә-яҡтан яусылар килә башлай. Мәҙинәне Һаҡмар түбәндәге Үҫәргән волосынан 50-60 йәштәрҙәге бер бай кешегә өсөнсө ҡатынлыҡҡа бирәләр. Кейәү булған кеше ҡайтыр алдынан Мәҙинәгә бер-ике йыл атаһы ҡулында йәшәргә рөхсәт бирә.

"Ҡартлас ҡосағына бирелгәнсе, Ҡайнар тәнемде тулҡын ҡосһасы", — тип ҡайғырып йырлап, илап ултырған булған.

Мәҙинә көндән-көн һарғая. Ауыл халҡы уны йәлләп, ҡаты күңелле атаны ҡәһәрләй. Атаһы, Мәҙинәне тиҙ көндәрҙә килеп алырға ҡушып, кейәүгә сәләм ебәрә.

Сит ерҙә Мәҙинә ауылын һағына. Кейәүенә үҙен ауылдарына алып барыуын үтенә. Ауылдарына ҡайтыу менән Мәҙинә элек илап-йырлап ултырған ҡая ташына килә,бер яңғыратып йырлай ҙа Һаҡмарға ташланып үлә. Шунан бирле был таш "*Мәҙинәосҡан ҡаяһы*" тип йөрөтөлә.

Эйе, Мәҙинәосҡан тирәһенең тәбиғәте үҙе бер мөғжизә (Инф.ҒәбитоваС.И.)

**Ҡабракай** — "Ҡабра" — текә, түмәләс тигән һүҙҙе аңлата. Ул тауҙа йәштәр уйындар ҡорор булғандар, егеттәрҙе гармун уйнап әрмегә оҙатҡандар, яулыҡ болғап ҡаршы алғандар.

**Һаҡмар йылғаһы.** Атамаһының килеп сығышына ҡағылышлы өс фараз бар; 1) *Һаҡ бар* — абай бар; 2) *Һакма* — бейек үлән араһынан йырып үткән эҙ, һуҡмаҡ; 3) *Һайык* — һай йылға (инф. Урманова Ғ.Ғ., 1936)



**Информанттар**:
Урманова Ғәлиә Ғәлимйән ҡыҙы,
Моратова Асия Мөхәмәтҡол ҡыҙы.

**Мослахова Илһөйәр**
Ғилми етәксеһе: **Миңлевәлиева Гөлсинә Шәрипйән ҡыҙы**

## ШАРАН РАЙОНЫ САЛМАЛЫ АУЫЛЫ ТАРИХЫ ҺӘМ ТӘБИҒИ ҠОМАРТҠЫЛАРЫ

### Инеш

Ҡайҙа ғына йәшәһә лә һәр кемдең үҙенә генә яҡын, ҡәҙерле ере була. Был ер —тыуған төйәк тип атала. Кемгәлер тыуған төйәге — шаулап торған ҙур ҡала, үҙәк өлөшө. Кемгәлер ул борғаланып аҡкан инеш буйындағы бәләкәй генә ауыл.

Һәр ауылдың үҙенә генә хас матурлығы, ғәҙәттәре булған кеүек ошо төбәктә йәшәгән кешеләр генә белә торған серҙәре лә бар. Минең тыуған ауылым *Салмалыла* ла бар ундай серле урындар, ғәҙәти булмаған атамалар. Мәҫәлән: «*Башҡорт баҫыуы», «Торна кыуағы», «Атнаҡай соҡоро», «Ғәптел соҡоро», «Фәрит ҡойроғо», «Ҡайраклы тауы», «Бикмәт соҡоро*» һ.б.

Мин йыш ҡына үҙ алдыма: «Был атамалар ҡайҙан барлыҡҡа килгән икән?» — тигән һорауҙар бирәм. Ә бына башҡорт теле дәресендә Ноғман Мусин, Рауил Бикбаев әҫәрҙәрендә экология темаһын асыҡлау һөҙөмтәһендә, бының бигерәк тә тәбиғәт һәм шунда йәшәгән кешеләр менән бәйле икәненә ныҡлап инандым. Шуның өсөн тикшеренеү темамды ла: «Салмалы ауылы тарихы һәм уның тәбиғи ҡомартҡылары» тип атаным.

### Чалмалы ауылы тарихы

Мәктәптә башҡорт телен ятатып өйрәнһәк тә, дәрестә тик әҙәби телдә генә һөйләшергә тырышһаҡ та, урамға сығыу менән беҙ үҙебеҙҙең төньяҡ-көнбайыш диалект телендә һөйләшә башлайбыҙ. Быны мин, беренсенән,

тарихсылар әйткәнсә, Шаран районының Татарстан менән сиктәш булыуы, икенсенән, татарҙарҙың ошо ерҙәргә күпләп күсеп килеүе йоғонтоһолор тип уйлайым.

Ә Салмалы ауылының тарихын һәм тәбиғи ҡомартҡыларын өйрәнер өсөн мин сәфәремде туҡһан ике йәшлек *Кәлимуллина Ғәүһәрямал Кәшбулла* ҡыҙынан башланым. Бына ул ауылдың килеп сығышы тураһында былай һөйләне:

— Күп җыллар элек бу җирләр ҡалын урманнар белән ҡапланған былған. Безнең әткәйләр сүләүе буйынча, мыннан ике мең җыллар элек хәзерге Чалмалы ауылыннан төньяҡта, ике чаҡырым чамасы җыраҡлыҡта башҡырт ауылы былған. Шул ауылда башҡыртлар җәшәгәннәр. Әлеге уаҡытта бу ауыл урынында зыярат ҡына ҡалған, шуңа күрә аны *Чалмалы* халҡы “*башкырт зыяраты*” диеп җөртә.

Шушы ауылдан *Йәркәй* исемле кеше хәҙер Чалмалы былған җирләргә килгән. *Йәркәй* үзенең ун ике улы белән мында төпләнеп, җирләрен эшкәртеп, ағачларҙан таҙартып, боҙай чәчеп игеннәр үстереп, маллар асырап җәшәгән. Күп тә үтмәгән мында башҡырт ауылы кешеләре дә килеп урнаша башлаған. Ауылда барысы да чалма бәйләп җөргәннәр. Чалма бәйләгән балта осталары бура бурайлар икән, шул уаҡытта чит кешеләр китеп баралар икән. Быларҙан: «Бу ҡайсы ауыл, ағайлар?» — дип сорайлар икән. Былар ишетмәйләр икән. Тегеләр: “Күрмәйсеңмени, чалмалылар бит былар!” — тип үз жуллары белән киткәннәр. Шуннан сың ауылны «*Чалмалы*» диеп җөртә башлағаннар да инде. Икенче төрлө итеп тә сүләйләр инде. Ә мин мынсын ғына беләм.

**Башҡорт басыуы тарихы**

1. «*Башҡорт баҫыуы*», ауылыбыҙҙың төньяғында, Шаран-Туймазы юлы өҫтө һәм Салмалы-Бурһыҡ юл сатының уң яғында урынлашҡан. Ике яҡлап урман полосасы китә. Баҫыуҙың аҫты яғында соҡор буйлап шишмә һыуы ағып ята. Бормаланып аҡҡан һыу үҙәнлеккә килеп сығып Сөн йылғаһына барып тоташа. Йылдың йылында «Марс» колхозы был уңдырышлы баҫыуҙа иген үҫтереп, ҙур уңыштарға ирешә.

Ни өсөн һуң был баҫыуҙы «*Башҡорт баҫыуы*» тип атағандар? Был турала быуындан быуынға тапшырылып, беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән сал тарихыбыҙға күҙ һалайыҡ. Ауылыбыҙҙың хөрмәтле кешеһе Әфидә Шәмсивәли ҡыҙының «Это надо живым» китабынан алынған мәғлүмәттәргә ҡарайыҡ. Унда быхдай юлдар бар:

1752-1754 елларда Григорий Семенович Красильников Шаран елгасы буенда Архангел бакыр эретү заводы төзи. Шул вакытларда Кыр-елан волосына күпләп урыс крепостнойлары, дворяннар килә башлый. Бигрәк тә Тәфкилевлар — җир биләүчеләр өлгеррәк була.

Шул вакытларда башкорт җирендә феодаль мөнәсәбәт киңәя, тирәнәя. Бу процесс мөлкәт тигезсезлеге үсешенә, хезмәт халкын изүенә китерә. Аларның баш-баштаклыгына каршы гади башкорт общинниклары, припущинниклары баш күтәргәннәр.

Район территориясындагылар  восстаниеларда актив катнашкан . 1773 елның 17 ноябрендә баш күтәрүчеләргә каршы генерал-майор Фрейман җитәкчелегендәге команда килеп җитә. Заводның хәрби көчләре аз булуы сәбәпле каршылык күрсәтмәгәннәр. Эшчеләрнең күбесе Казанга җибәрелгән, калганнары өйләренә кайтарылган.

Берничә көннән Пугачевчылар билән ала. Баш күтәрүчеләргә крепостной эшчеләр, ялланып эшләүчеләр дә кушыла.

1773 ноябрь-декабрендә баш күтәрүчеләр документлар сакланган концелярияне яндыралар, завод хуҗасы һәм Казанга киткән кешеләрнең мөлкәтенә хуҗа булалар. Безнең территория Пугачев отрядлары хәрби хәрәкәтенең төп аренасы булмаса да, баш күтәрүчеләргә кушылмаган авыл калмый.

Моның турында Уфа провинция канцеляриясы ведомосты раслый.Восстаниеда катнашкан рус булмаган халык турындагы ведомость Оренбург канцеляриясына җибәрелгән.

Бу ведомоста Чалмалы һәм Дүрмән(күрше авыл) авылларының 88 кешесе старшина Исмаил Уразмәтов командасында катнашкан дип күрсәтелә.

Декабрь башында Нугайбәк округының старшинасы Ишкилде Ишмурзинның отряды Шарандагы «Архангель» бакыр эретү заводын кулга ала. Үз отрядына тагын казаклар җыеп, башка заводларны кулга алыр өчен юлга чыга.

Ишкилде Ишмурзин тамгасы....Туймазы районы Бишкурай авылы кешесе, ул Пугачевның полковнигы була.

(Салават Таймасовның «Башкортостанда 1773-1775 елларда крестьяннар баш күтәрүе», Пугачев явының Шаран җирләреннән үтүе турындагы тарихи материаллардан алынган өзек).

2. Ауылыбыҙҙың иң өлкән кешеләренең береһе, һуғыш ветераны Ғәлләмов Фатҡылбаян  хәтерендә һаҡланған ошо легенда ла бар :

1773-1775 жылларда Пугач жаулары чоронда былған бу хәл. Салауат батыр ғәскәрләре әҙерәк хәл жыярға, жараларын жамаштырырға диеп, Чалмалы ауылы жанындағы бер ачыҡлыҡта туҡтайлар. Шул урыннан жыраҡ та түгел бәләкәй  генә жылға ла аҡкан, чишмәседә былған. Алға таба барырға оло юл да мына дигән. Ничаҡлы ял иткәннәрҙер алар, мынысы турында берсе дә белмәй.Алар туҡтап жал иткән урында бәләкәй генә зыярат барлыҡҡа килгән. Ауыр жараларҙан терелә алмайынча үлгән жауғирларны шунда күмеп ҡалдырғаннар. Бу урынны башта «*Башҡорт зыяраты*» диеп жөрөткәннәр, әжыллар үтеүбелән аның исеме «*Башҡорт басыуына*» әйләнгән. Хәҙер мында игеннәр үсә торған бу басыуны ауыл халҡы ана шулай атай. Жәш чаҡларҙа беҙ гел Исәмәт буйына балыҡ тотарға, жиләк-жимеш жыярға жөрөйдөриек. Ул уаҡытларҙа зыярат ташлары бар иде әле. Ташларҙа ғәрәпчә сүзләр жазылғаные. Тора-бара ул жирләрне дә сөрөп бетерҙеләр. Белергә теләсәк тә төгәл генә әйтеүче былмады ул заманда.

Шулай да ике юрама җәшәй. Беренчесе, шул җирҙә батырлар сөйәге ята. Ә икенчесе, күчмә тормош алып барған башҡыртлар җәшәгән, соңыннан алар күченеп киткәннәр .

Мәктәп директоры булып эшләгән Фәнзир Нурислам улы Сәғҙиев һөйләгәндәрҙән :

— Без бәләкәй чаҡларҙа (бу 1965-1970 йыллар тирәсе) Исәмәт буйы әрәмәсенә шоморт җыярға шул басыу аша турыға барадырыйыҡ. Әле дә хәтеремдә, анда ташлар бар иде. Күрәсең, алар зыярат ташлары былғандыр.

3. Эйе, «*Башкорт баҫыуы*» тыуған республикабыҙҙың бер кескенә нөктәһе, ә ошо нөктә беҙҙе үткән тарих менән бәйләй. Унын тураһында шиғыр ҙа ижад ителгән.

**Башкорт басуы**

Туган авылымнан ерак түгел
Җәелеп ята «*Башкорт басуы*».
Бу исемне нигә икән сиңа
Биргәннәр соң, ғәзиз басуым.
Ишетелгән кебек була шул чаҡ
Чал тарихның миңа тауышы:
— Бик күп авырлыҡлар күрде басу,
Авыр булды аның язмышы.
Бик күп еллар нәҡ менә шунда
Ҡаты суғыш алып бардылар,
Күпләре бит ятып ҡалдылар.
Үз ҡуенына алды барысын басыу
Ҡалҡып чыҡты ҡәбер ташлары,
Дошманнарны тар-мар иткән чаҡта,
Салды алар ғәзиз башларын
Беләсе иде кемнең ғәзизләре
Ятып ҡалған икән басуда
Һәр җәй саен чәчәк бәйләмнәре
Алып киләм шушы басуға.
Хәзер инде «Башҡорт басуында»
Иген үсә, шаулай башаҡлар,
Әйтерсең дә шулай серләшәләр
Ятып ҡалған батыр солдатлар.
Йәш буынға алар батырлығын
Без сөйлибез әле бүген дә,
Мәңгелеккә сүнмәс йолдыз булып

Янар алар хәтер күгендә, — тип яҙҙы Салмалы ауылында йәшәгән Шәйхетдинова Зөлфиә Нәжметдин ҡыҙы был тарихи ер тураһында.

Ә быуаттар төпкөлөнә ҡараһаҡ, ысынлап та, яҡташ шағирәбеҙ Лилиә Сәғиҙуллина «Туган ягыма» исемле шиғырында яҙғанса килеп сыға.

«Монда һәрбер кабер ташы иман сакларга өнди.

Ташларга уелган хәтер маңкортлыкны кичерми».

**Торна ҡыуағы**

Ғәүһәр апай һөйләгәндәрҙән:

— Бу җир Чалмалы ауылының арҗағында, иң матур җирҙә, басыу уртасында урнашҡан. Тирә-җағы ҡыуаҡлыҡлар белән уратып алынған уйсыу җир. Элгәре мында суы күп булған. Торналар ҙа җөзгәннәр. Беҙ торна җоморҡалары җыярға барадырыйыҡ. Суы чистайы. Аяҡ сауытлары, кер җуарға да менәдериек. Хәҙер инде мында үлән, тал, җирек ағачлары ғына үсә.

**Атнаҡай чоҡоро**

Бу чоҡор ауылның арҗағында булып ике урам очон бүлеп тора. Анда *Атнағол* дигән кеше җәшәгән. Шуннан аның өйөн җир йотҡан. Әлеге уаҡытта шул чоҡорораҡ җирне ”*Атнаҡай чоҡоро*” диеп җөрөтәләр. Яз көнө өстән ағып төшкән су җырынтысы аша чығыуы ауыр былайы.

**Ғәптел чоҡоро. Вәрәк чоҡоро**

Чалмалының үзәк урамындағы чоҡор. Ғәптелүәлиләр янында. Элгәре ул тирәдәге өч җортны йотҡан чоҡор. Әлеге уаҡытта уйсыуыраҡ җир булып тора. “*Ғәптел чоҡоро*” диеп тә, “*Вәрәк чоҡоро*”диеп тә җөрөтәләр.

**Фәрит ҡойроғо. Фәрит басмасы**

Ғиниәтуллина Нәсимә апай һөйләгәндәрҙән (Ғиниәтуллин Фәриттең ҡатыны):

— Арҗаҡтағы урамнан басмаға төшә торған урын. Безнең бәрәңге баҡчасы артыннан суҡмаҡ үтә. *Фәрит* абыйыгыз җылға аша чыға торған басманы үзе эшләтте. Кешеләр рәхмәт әйтә-әйтә шул басмадан Үзәк урамға чығалар. Шуннан тағылып ҡалған да инде ул атамалар.

**Ҡайраҡлы тауы. Мөнирҗан быуасы**

Кәлимуллина Ғәүһәрҗамал апай һөйләгәндәрҙән:

— *Ҡайраҡлы тауы* ауылдан ике чаҡырым җыраҡлыҡтағы бәләкәй генә тау. Элгәре заманда кешеләр мыннан асыл ташлар, чаҡма ташлар, тоҙ, кирәк-җараҡ әйберләр эзләгәннәр. Ҡайраҡ белән җирне аҡтарғаннар. Шунда беҙ җыуа, ҡуҙғалаҡ, ҡаҡы, җиләк җыя идек җәш чаҡларҙа. Көтөү ҙә көтәиек. Тау астыннан ғына *Ҡайраҡлы җылғасы* ағып ята. Хәзер шул җылғаны Мөнирҗан быуып балыҡ үрчетә. Быуаны ”*Мөнирҗан быуасы* “ диеп җөртә башладылар. Мында җәй буйына балалар да, ололар да су кереп, балыҡ тотоп җал итәләр.

**Бикмәт чоҡоро**

*Бикмәт* микән, *Бикмәтулла* микән, шундый кеше җәшәгән. Бай былған. Шул кешенең өйө җир убылып чоҡорға төшөп киткән. Кешеләре күченеп киткәннәрдерме, үлгәннәрдерме, белмәйем инде. Исеме генә ҡалған. Хәзер бу җир чүп түгә торған урынға әйләнгән.

## Чалмалы ауылындағы кеше исемнәре, фамилиялары, ҡушаматлары

Миңлевәлиев Мөжәһиттән язып алынды:

— Чалмалы ауылында күберәк таралған кеше фамилиялары *Мостафиннар, Мөхәмәтовлар, Сабировлар, Миңлевәлиевлар, Кәлимуллиннар, Ғилфановлар, Әделгәрәевлар, Ғәлиевлар*.

Кеше исемнәреннән элгәрерәк *Нурислам, Мөҗәһит, Сабирҗан, Шәрифҗан, Фәтҡылбаян, Әлһәметдин, Мәмдүрә, Асима, Җәүһәрә, Рәйсә, Рәзинә, Фәниә, Сәриә, Фатима* кеүек исемнәр күп быладырыйы.

Мәктәбебеҙҙә *Руслан, Ринат, Динар, Данил, Данис, Артур, Альберт, Ралина, Азалина, Аделина, Эвилина, Эльвина исемнәре янында Илнар, Илназ, Илһам, Алмаз, Азат, Азамат, Алсу, Айсылу, Гөлназ, Гөлшат* исемнәре дә урын алған.

Яңы тыуған балалар араһында *Кәрим, Ислам, Нурислам, Арыслан, Әминә, Кәримә, Кәмилә, Әмир* исемнәре дә бар.

### Кеше ҡушаматлары

Әхмәҙиева Нәзимә Фатих ҡыҙы һөйләгәндәрҙән:

— Ауыл җирендә ҡушаматсыз кеше юҡтыр ул. Электән үк кешенең холҡона, шөғөлөнә, сифатына ҡарап ҡушаматлар тағылған. Ул атасыннан баласына күчә килгән.

**Мулла**. Мостафин Маратны *мулла Мараты* дип җөрөтәләр. Ул җәшәгән җирҙә мулла торған.

**Вәрәк**. Ғәптелвәлинең атасы флотта хезмәт иткән. Аның ҡушаматы «*Варяг*» дигән сүздән алынған.

**Ҡандала**. Низамов Җәмғетдинны «*Ҡандала*» диеп үртәгәннәр, чөнки ул кешегә ҡандала кеүек җәбешергә, ҡазалырға ғына торған.

**Шәүәк**. Миңлевәлиев Мөжәһитнең бабасы элек бригадир булып җөрөгән. Бик шома, төрлө хәлдән дә шыуып ҡына чыҡҡан. *Шәүәк-шустрый*.

**Зәңгәр**. Ғәзизов Ғәлимҗанның күзләре зәңгәр былған. Шуңа аны «*Зәңгәр*» диеп җөрөткәннәр.

**Шаҡмаҡ**. Мөхтәсипов Флүрне зур күзле, шаҡмаҡ чаҡлы булғаны өчөн әйткәннәр.

**Ҡауын. Ҡабаҡ**. Мостафин Шәйсолтанның атасы элгәре калхузның җәшелчә баҡчасында ҡауын үстергән. Ҡауыннары бик уңған былған. Халыҡҡа да тараҡкан. Башта “*Ҡауын*” диеп, соңыраҡ “*Ҡабаҡ*” дип җөртә башлағаннар.

**Иван**. Сабиров Фәхрисламнар иптәшләре белән җиләк җыярға барғаннар икән. Әгәр җиләк күп булса, “*Иван*” диеп бер-берсен чаҡырырға сүз ҡуйышҡаннар. Шуннан Фәхрислам “Иван да Иван” диеп аҡыра икән. Ҡызлар мыны ишетеп ҡалғаннар да «*Иван*» дип үртәй башлағаннар.

**Кәкми**. Мусин Әлһәмнең атасы берәр эш эшләсә: “Как мы эшләргә кирәк!” — дигән. Шуннан «*Кәкми*» булып тағылып ҡалған .

**Таз**. Разетдинов Муллаянның башында чәч үсмәгән урыны булған. Шуңа да бу ҡушамат тағылған.

**Тауыҡ**. Базғетдинов Мәүли абзыйның тиз-тиз сүләгән тауышы аңлашылмай, тауыҡ ҡыткылдаған кеүек чыға икән. Ҡушаматы да шуннан килеп чыҡҡан.

Хәҙерге ваҡытта ла балалар араһында ҡушаматтар барлыҡҡа килеп тора:

Артур — Турик; Нәфис — Әпеч; Альбина — Албан, албинос; Гөлшат — Гөлшатай; Илдус — Пирдус; Илшат — Киш-миш; Марлен — Мармелад; Ләйсән — лейка һ.б.”

## Урам исемнәре

Кәлимуллина Ғәүһәр апай һөйләгәндәрҙән:

Чалмалы ауылында әлеге уаҡытта дүрт урам.

**Үзәк урам**. Бу урам электән үк былып иң оҙон урам булып санала.

**Арҗаҡ урамы**. Үзәк урамнан су аша чығып төзөлгән урам. Элгәрерәк бу урамны «**Мөғҗизә**» урамы диеп тә җөрткәннәр. Мында йәшеллек күп былған. Урам бик матурые. Малларны, бигерәк тә арбалы атларны баҡча артыннан ғына җөртәләрие. Урамдағы үлән арасыннан җаланаяҡ җөрөүе җиңел, рәхәтие.

**Мәктәп урамы**. Бу урамда берничә генә өй бар. Мәктәп булғанға урамны шулай атағаннар.

**Җәшләр урамы**. Бу урам соңыраҡ барлыҡҡа килгән. Башлы-күзле былған җәшләргә берничә йорт салып бирҙе калхуз. Шулар җанына башҡа җәшләр дә үзләре йортлар салып чыға башладылар. Бу урамны халыҡ арасында «*Котолдык урамы*» диеп тә җөртәләр. Әлеге исем җәшләрнең бианаларыннан ҡотолоп башҡа чығып китеүеннән килеп чыҡҡан.

Бәләкәй төйәгемдең тарихын, ҡомартҡыларын өйрәнеү бик ҙур әһәмиәткә эйә: тыуған ерҙе, уның халҡын, һөйләшен тикшереү белемебеҙҙе тағы ла арттыра, тәбиғәткә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Уның һәр бер өлөшөн һаҡларға, байлығын арттырырға өйрәтә.

Тыуған еремдең ҡабатланмаҫ гүзәллеге бөтәһен дә үҙенә ылыҡтыра. Ошондай ерҙәрҙә генә талантлы кешеләр тыуа. Шундайҙарҙың береһе - Мөдәрис Мөхтәсипов.Ул Салмалы ауылында тыуып үҫкән. Үҙенең йырҙары менән тыуған төйәгенең гүзәллегенә дан йырлай. Мин үҙемдең сығышымды Мөдәрис Мөхтәсиповтың «Чалмалым, Дүрмәнем» йыры менән тамамлайһым килә.

## Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Афида Гиниятова. Это надо живым.Туймазы, 2009. 319стр.

2. Ишбулатов Н.Х. Башҡорт теле һәм уның диалекттары. Өфө: «Китап», 2000. 212 бит.

3. Һөйләүселәр исемлеге:

3.1 Кәлимуллина Ғәүһәрямал Кәшбулла ҡыҙы, 92йәш.

3.2 Ғәлләмов Фатҡылбаян, 96 йәш.

3.3 Сәғҙиев Фәнзир Нурислам улы, 59 йәш.

3.4 Ғиниәтуллина Нәсимә Шәймулла ҡыҙы, 82 йәш.

3.5 Миңлевәлиев Мөжәһит Миңлевәли улы, 89 йәш.

3.6 Кашапова Индия, 71 йәш.

**Мостаева Таңсулпан Рәфид ҡыҙы**
Ғилми етәксеһе: **Мостаева Вазифа Азат ҡыҙы**

# БАЙМАҠ РАЙОНЫ ШҮЛКӘ АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

*Шүлкә ауылы* Башҡортостандың матур бер төбәге. Ундағы урман-тауҙар,йылғалар бик матур. Исемдәре лә ҡолаҡҡа ятышлы ғына.

*Шүлкә ауылы* Баймаҡ районында урынлашҡан. Ҡасандыр бында “Коммунар” колхозы булған. Ул *Сыңғыҙ, Ташкүпер, Шүлкә, Шырмай* һәм *Ямаш* утарҙарын берләштергән. Үҙәге Ямаш утарында урынлашҡан. Һуғыштан һуң утарҙарҙы, киләсәге юҡ тип, тарҡатҡандар. Ямаш утары халҡы Шүлкәгә күскән. Колхозды башта урман бүлексәһенә үҙгәрткәндәр. Һуңыраҡ Ишбирҙе леспромхозына ҡушҡандар.  Халыҡ ағас эше менән шөғөлләнә.

З.Г.Әминев билдәләүенсә “*шүлкә*” һүҙе боронғо башҡорт телендә “*һул*” тигәнде аңлатҡан. Шуға күрә Йылайыр йылғаһына һул яҡтан ҡойған *Шүлкә йылғаһы* ауылға исем биргән тип әйтергә була.

Ауылда халыҡ телендә дүрт урам бар: *Мамыҡ, Балғалаҡ, Кәкере* һәм *Аръяҡ*, ә документтарҙа был урамдар *З.Аҡназаров, Суйынсы* һәм *Ямаш* урамы тип йөрөтөлә. Бөгөнгө көндә ауылда 42 йортта 197 кеше йәшәй. Үкенескә күрә, һуңғы ике йылда ауыл мәктәбен һәм балалар баҡсаһын яптылар. Халыҡ һаман да урман эш менән шөғөлләнә.

Бөгөнгө көндә ауылда *Кейекбирҙиндар, Раевтар, Сәғәҙәтовтар, Байтуриндар, Усмановтар, Ҡасҡыновтар, Кейекҡужиндар, Ҡормашевтар, Мортазиндар, Хәсәновтар, Йәноҙаковтар, Салауатовтар, Мырҙаҡаевтар, Моталлаповтар, Фәйзуллиндар, Мерәҫовтар, Ғәҙелбаевтар* йәшәй.

**Әбесҡан.** “Октябрь революцияһына тиклем ярлылыҡтың, аслыҡтың сигенә еткән яңғыҙ әбей хәлле генә бер ғаиләнең тауығын урлап бешереп ашай. Ә хужа быны белеп ҡала ла асыулана, үлтереү менән янауын ишетеп, әвей урманға ҡаса. Нимә етте шуның менән тамаҡланып йәйҙе үткәрһә лә, ҡар һыуыҡлары башланғас, ашарына тапмай, ауыл тирәһенә килә. Ә теге ир уны ат эҙләп ҡайтып килгәндә күрә һәм һывай баҫтыра. Әбей ҡасып бара ла, арып, бер үҙәккә тәгәрәп төшә. Ә үҙәктә бер йылға ағып ятҡан. Әбей йылғаның сыҡҡан ерендәге һаҙамыҡ урынға тәгәрәп төшөп үлә икән. Шуға ла шишмәне *Әбей осҡан* һүҙенән *Әбесҡан* тип атайҙар. Был шишмә бөгөн бик һай ғына. Ауылды икегә бүлеп тора. Ана шул бүленгән ерҙән һул яғын *Мамыҡ урамы*, уң яғын *Балғалаҡ* урамы тип йөрөтәләр. Документ буйынса был ике урам *Зекерейә Аҡназаров* исемен йөрөтә. *Әбесҡан Кәкере урамда* башланғыс ала.”

**Мамыҡ урамы.** Бер ваҡыт магазинға мамыҡ килгән. Уны, башҡалар белгәнсе ошо урам кешеләре үҙ-ара бүлешеп алып бөткәндәр. Шуға был урамды *Мамыҡ урамы* тип әйтәләр.

**Кәкере урам**. Был урам ауылға арҡыры ултыра. Шуға ла ошондай исем алғандыр инде.” (Информант СәғәҙәтоваМ.М., хаҡлы ялда)

**Әптеразаҡүлгән**. “Шүлкә ауылы урман араһында, башҡа ауылдарҙан алыҫта урынлашҡанға юл өҙәрем. Ямғырлы гөндәрҙә трактор йә ат менән генә юлға сыға торғайны кеше. Шулай бер Буранбай ауылындағы бер әбейҙең берҙән-бер *Әптеразаҡ* тигән улы Шүлкә ауылы һылыуына ғашиҡ була. Ул “Беларусь”тракторы менән барып йөрөй. Өйләнешәләр. Бер ваҡыт ҡайныларына бара ятҡанда (юл бик бысыраҡ була) “Беларус”тың ишеге асылып китеп, Әптеразаҡ ҡолап төшә һәм тапалып ҡала. Хәҙер был урынды *Әптеразағүлгән* тип йөрөтәләр” (Инф. Моталлапова Рәйсә Ғоссам ҡыҙы).

**Ямаш утары. “**Хәҙерге Беренсе Эткол ауылы борон *Ямаш* тип аталған. *Ямаш ауылына* бик борон нигеҙ һалынған. Революциянан алда *Ямаш ауылы* байлары йәй айларында йәйләүгә сығыр булғаннар. Һәм улар үҙләренә Йылайыр буйындағы һәҙерге *Ямаш утары* тип аталған бик матур урынды һайлағандар. *Ямаш утарына* йәйләргә килгән байҙың ялсылары шул утарҙа байҙың малдарын көтөп ҡыш көнө лә ҡышлар булғаннар .Ә революциянан һуң,байлар бөткәс, *Ямаш утарында* йәшәгән ярлы халыҡ шунда төпләнеп ҡалған, ағас эшенә бәйләнеп киткән. Ошо уҡ юл менән хәҙерге *Ғәҙелбай* ауылының “Шырмай утары”, Таулыҡай ауылының “Ҡушкүпер *утары*”, Сыңғыҙ ауылының “*Сыңғыҙ утары*”, Буранбай ауылының “*Буранбай утары”* булған. Аҙаҡ был утар халҡы *Буранбай утары* урынына күсеп килгән. Ә утар урындары һаман исемдәрен һаҡлай. Ә *Буранбай утары* Шүлкә йылғаһын һыулағанға ауылға Шүлкә исемен биргәннәр. Тәүлә “Коммунар” колхозы булғанға *Камунар* тип тә әйтәләр был ауылды.” (Инф. Байтурина Йәмилә Ғилметдин ҡыҙы.)



**Тайышбаткан һаҙлығы.** Шүлкә ауылына алыҫ түгел *Тайышбаткан* исемле *һаҙлыҡ* бар. Был исемдең килеп сығыуы тураһында былай һөйләйләр: бер ваҡыт *тайыш табан айыуға* ошо һаҙлыҡты үтергә кәрәк буған. Ул һаҙлыҡ аша сығып барғанда сығып етә алмайса батып үлгән. Шунан башлап

был һаҙлыҡ *Тайышбатҡан һаҙлығы* булып аталып йөрөтөлә башлаған. (Инф. Моталлапова Рәйсә Ғоссам ҡыҙы).

**Табыр.** *Йылайыр туғайын* шулай атайлар. Йылайыр районының "*Заря*" совхозы һауынсылары һәр йәй ошо туғайға йәйләүгә сыҡҡаннар. Һәҙер кимәйҙәр, ләкин *Табыр* (*Табор* һүҙенән) исеме ҡалған (Инф. Моталлапова Рәйсә Ғоссам ҡыҙы).

**Ҡылғантүш**. Ҡылғантүш-Һарыһаҙ йылғаһынан урманға тиклем буған иңкеү урын. Анда беҙҙең урман яғына хас булмаған ҡылған үҫкән. Шуға халыҡ *Ҡылғантүш* тигән (Инф. Моталлапова Рәйсә Ғоссам ҡыҙы).

**Алтынбай.** Йылайырҙың арғы түшендә түңәрәк кенә аҡлан бар. Ул аҡланға *Алтынбай* тип исем биргәннәр. Унда элек *Алтынбай* менән әбейе йәшәгән. Уларҙың өс улы буған. Һунарсылыҡ менән шөғөлләнгән алар. Ҡыш ҡуян,ҡош атҡан, йәй балыҡ тотҡан. Мал көткәннәр, бесән сапҡаннар. Был урынды һәҙер ҙә Алтынбай тип йөрөтәләр. (Инф. Усманова Хәбирә Рысмөхәммәт ҡыҙы).

**Сәбилә тауы**. Шүлкә йылғаһының һул яҡ яры буйлап ауыл тапҡырында оҙон ғына һуҙылған бейек тау бар. Ни өсөндөр йәшеллеккә төрөнгән, сәскәле Шүлкә туғайларынан өҫтөн күреп элек *Аллаяр* тигән кеше ғаиләһе менән ошо тау башына сыҡҡан. Өс улы киленнәре менән буғаннар. Аллаяр почта сапҡан. Улдары мал көткән. Ике өйөр йылҡыһы, утыҙ быҙаулы һыйыры буған. Дүрт тирмөй-дүрт ғаиләгә һәм бер ҡунағөй. Почта эше менән кеше күп килгән, өҙөлмәгән кеше уларҙан. Ҡышҡы өйҙәре лә алыҫ бумаған. Тау башы булһа ла, картуфы уңған, бейәләренең ҡымыҙын да маҡлап эскәннәр. Шуғамылыр халыҡ был тауға Аллаярҙың исемен түгел, ә ҡатыны *Сәбиләнең* исемен ҡулай күргән." (Инф.Байтурин Р.Д.)

**Ынйы тауы.** Элек йәшәгән, ти, *Әхмәтғәле* тигән бай. Был бабайҙың *Ишбулды* тигән улы һәм *Ынйыбикә* тигән ҡыҙы буған. Әсәләре — Ҡарлуғас әбей. Өйҙәренең эргәһендә генә тауы буған. Ул тауҙа ҡарағайлар үҫкән. Ҡарағайҙың ботағына әүһәләк һалып өйгәннәр, ташы менән көннәр буйы уйнағаннар. Бала уаҡытын шул тауҙа үткәргән. Шуға был тауҙы бөгөн *Ынйытау* тип әйтә лә ҡуялар. Аҙаҡ анда леспромхоздың канторы булды.

**Күрәнбесән.** Күрәнбесән Шүлкә йылғаһы буйындағы ҙур ғына аҡлан. Унда элек һаҙлыҡ буған һәм күрән бесән үһкән. Һәҙер ул һаҙлыҡтар кипкән, күрән бесәне лә юҡ, әммә исем ҡалған. Бында ауыл халҡы төрлө байрамнарын үткәрә яланы матур буғанға. (Инф.Моталлапов А.Х.)

**Атйөҙгөс.** Элек Шүлкә йылғаһында мул һыулы тәрән ятыу буған. Ятыуҙа кешеләр һыу ингән, ат йөҙҙөргәннәр, ат йыуғаннар. Аҙаҡ ат йөҙгөстө ҡарамағаннар, ләм,ҡом ҡаплаған һәм бик ныҡ һайыҡҡан. Һәҙер ат түгел кеше йөҙөрлөк түгел бит. Шулай ҙа ишетер ҡолаҡҡа сәйер булып *Атйөҙгөс* тигән исеме ғалған. (Инф.Байтурин Р.Д.)

**Боецтал** – *Байстал* граждандар һуғышы ваҡытында бер бәләкәй генә шишмә эргәһендә ике боецты үлтереп киткәндәр. Шуға ошо шишмәне *Боецтал* — халыҡ телендә *Байстал* тип йөрөтәләр.

**Ҡаскын яланы**. Борон ҡаҙаҡтар менән башҡорттар араһындағы барымта-ҡарымта ваҡытында бер башҡорт ҡатынын ҡаҙаҡтар урлап китә. Ул

ҡатын ҡасып ҡайта, гөманлы була. Шунан тыуған яҡтарына еткәс, бер урманда бер ир бала таба. Хәҙер ул ерҙе *Ҡаскын яланы* тиҙәр, шул ир баланан таралып киткән беҙҙең яҡтағы *Ҡаскыновтар*.

**Туғыҙбай.** (I вариант). *Исәкәй карт* староста ваҡытында Ирәндек буйында уның биләмәһе була. Батша ҡыҫа башлағас, дүрт урында йәшерен кузня эшләйҙәр. Һәр бер кузняға хужа теркәлә. *Туғыҙбай утарында Туғыҙбай* исемле кеше етәкселек итә. *Сыңғыҙ утарында — Сыңғыҙ* хужа, *Имәнйәр утарында — Имәнйәр* исемле кешене ҡуя, *Шырмай утарында — Шырмайҙы* ҡуя. Ана шул кешеләрҙең исемдәренән килеп сыҡҡан инде был ерҙәрҙең атамаһы, — тип һөйләне ауылдың имам-хатибы Юламан олатай Раев. — Минең әҡрәбәм *Ҡотлояр* ҡартатайымдың атаһы *Мәхмүт* эшләгән *Имәнйәр кузнецтә*. Ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡ эшләп, Орскийҙың баҙарына алып барып һатыу итәләр. Батша һалдаттары тикшереү үткәрә тигән хәбәрҙе бер-береһенә сапҡын ебәреп хәбәр иткәндәр. Шунан күзнәләрҙе тиҙ генә йәшергәндәр. Шулайтып йәшенеп кенә эшләгәндәр.

Күзнәләргә үҙ кешеләр генә йөрөгән. Шундайҙар араһында *Сейем Ҡаскынов* тигән кеше буған. *Сейем Ҡаскынов* Йылайыр йылғаһын бер урындан ғына кисеп сығыр булған, сөнки башҡа ерҙәрҙән бер ярҙан икенсеһенә сығыу бик ауыр буған. Ана шул кисеү хәҙер *Сейем кисеүе* тип атала. (Информант Раев Юламан,ауылдың имам-хатибы).

**Туғыҙбай** (II вариант). *Ҡалмаҡ* (Шүлкә ауылынан 12 километр алыҫлыҡта бөгөнгө Йылайыр районына ингән *Надеждинск* тигән сыуаш ауылы бар. Был ауылды *Ҡалмаҡ* тип йөрөтә шүлкәләр) яғына барғанда *Туғыҙбай буйынан* үтәһең. Элек бер байҙың туғыҙ малайы буған. Улдары үҫеп, өйләнә торған, бай һәр береһенә бер ялан биреп, шунда өй һалып сығара торған. Һәр береһе бай буған. Шуға ла был ерҙәрҙе *Туғыҙбай* тип атағандар. (Инф. Моталлапов А.Х.)

**Ауылымдың лаҡаптары**

Ауылда *Әхмәтүәлей* тигән бер олатай була торғайны. Күршеһендә генә һеңлеһе *Хәбирә* йәшәне. Көн һайын инә лә теләһә нимә һорап ҡаңғырта икән. Бер кигәнендә *Хәбирә* һыйырына бешергән балтушканы ҡутарып торған ҡаҙандан. Ағаһының һөйләнеүенән арып, балтушкаһын һибеп евәргән. Шунан олатай: ”Ишетмәйем, Хәбирә ҡолаҡҡа өйрә ҡойҙо”, — тип әйтер буған. Һөйләгән хәбәрҙе ишетмәйерәк торған кешегә: “Һинең ҡолағыңа ла өйрә индеме?” — тип әйтер буғандар.” (Инф. Сәғәҙәтова М.М., хаҡлы ялда)

Бәләкәй сағында гел һарай башына менә лә тауыҡ булып ҡыҡкылдай ҙа ултыра торғайны. Шуға ул **Тауыҡ** булып китте. Хәҙер **Типкә** ти ҙә ҡуялар. Йырына ҡарап әйтәләр инде. ”*Типкә, типкә, типкәләрем*”, — тигән һүҙҙәрҙе генә йырлай ҙа йөрөй. Бөгөн ул олатайға 41 йәш. Исеме менән өндәшеүсе һирәк уға. Хатта балалар ҙа *Типкә олатай*, ти ҙә ҡуя.

Әхмәтвәли олатай элек яҙғы ташҡында ла ялан аяҡ һыу кискән дә йөрөгән. Әсәһе, өлкәнәйгән улына ҡарап: “Иий, бәпәйемде, бала сағын хәтерләп шулайтып йөрөйҙөр инде. Бәләкәй сағында алай йөрөү эләкмәне

бит”, — тигән. Хәҙер берәй оло кешенең балаларса ҡыланғанын күрһәләр,бала сағын хәтерләп йөрөй,тип әйтәләр.

## Ауыл халҡының ҡушаматтары

Ауылда өс *Азат* булды. Хәҙер береһе лә юҡ инде. Бер Азатты — **Ҡорһаҡ** (ҙур ҡорһаҡлы булғанғалыр инде), береһен **Чурбан** (тыныс ҡына була торғайны), береһе —**Арьяҡ Азат** ине (йылғаның арьяғында йәшәгән өсөн).

*Афзал* исемле олатайҙы **Дәд**, ти торғайнылар. Ғүмер буйы почта ташыусы булды. “Олатай, нишләп беҙгә гәзит юҡ?” — тип һораһаң, “Ана, Гөлсирә инәйегеҙгә күлдәк тегеп кейҙерҙем”, — тип әйтә торғайны.

Бер олатай бәләкәй сағында тиктормаҫ, шуҡ булған. Бер кеше үтеп барғанда: ”Кем бында шайтан?“ — тип һораған. Теге олатай ҡойма башына менеп: ”Мин!” — тип ҡысҡырған. Шунан уға **Шайтан** ҡушаматы йәбешеп ҡалған. Бөгөн ул олатай ауылда йәшәй, дин тота.

**Өйрәк** ҡушаматын *Марат* исемле ағайға таҡҡандар. Әбүбәкер олатайҙарҙың аҫтында батҡаҡ була торғайны элек. Бер ағай ҡайтып барғанда шул ҡойоға төшөп китеп, бысранған. Олатай күреп ҡалған да: “Өйрәк булдың бит”, — тигән. Шунан алып уға был ҡушамат йәбешеп ҡалған.

*Рысҡужа* олатай Бөйөк Ватан һуғышында әсирҙән ҡайтҡас, иң бәләкәй малайына башҡорт исеме ҡушһа ла *Петр* тип өндәшкән. Шунан уға *Петрович* тип әйткән дә ҡуйғандар.

**Спутник**. Бер Сәлимә исемле апай һауаны ҡарап барып ҡолап киткән. Элек урамдар соҡор ҙа саҡыр буған бит инде. Ҡайным мәрхүм быны күреп ултырған. “Сәлимә ҡарындаш спутник булды”, — тип әйткән. Исем үҙенә бик килешә, сөнки өйҙә ултырһа ла күпте белә, күпте күрә. Атлап китеп барғанда ла аяҡ аҫтына ҡарамай, шәл бәйләп китеп бара торғайны.

*Гөлнәзирә* инәй Ғәҙелбай ауылынан килен булып төшкән. Һуғыштан һуңғы йылдар булған. Баяғы инәй: “Күккә караһаң, күк күренә, ергә ҡараһаң, ер күренә. Ере ерме — соҡор ҙа саҡыр, ире ирме — аҫҡаҡ та һуҡыр”, — тигән. Ысынлап та шулай булган. Күршеһендәге Наур олатай аяҡһыҙ, Шәйхислам олатайҙың күҙе күрмәгән. (Инф.Сәғәҙәтова М.М.)

## Зоонимдар

**Һыйыр малы ҡушаматтары:** *Зойка, Алаҡай, Билдәш, Марта, Майка, Мишка, Малай, Йондоҙ.*

**Эттәрҙең ҡушаматтары:** *Кетмер, Һиҙгер, Һорлан, Аҡбай, Шоңкар, Ҡашкар, Джек, Йәзит, Моряк, Дүрткүҙ, Аҡтырнаҡ.*

**Йылҡы малының ҡушаматтары:**

*Ҡыптыр* — ҡыптырлап ҡына атлап йөрөгәнгә
*Бөркөт* — Һунар атына ҡушылған
*Бәләкәс* — иркәләп,яратып ҡушылған
*Аҡтояҡ* — тояғы аҡ булғанға
*Буян* — ҡолон сағынан бик шәп булған
*Йондоҙ*

*Ерәнсәй*

Шулай итеп, тыуған яғымды өйрәнеп бик күп тарихи урындар менән таныштым. Ауылым тирәһендәге бик күп матур ерҙәрҙең тарихын белеп ҡалдым. Өләсәйем һөйләгәндәрҙе ҡағыҙға теркәп барыуҙы артабан да дауам итергә, бөтөп барған ауылдарҙың тарихын булһа ла һаҡлап ҡалырға тигән теләгем бар.

**Мөхәмәтйәрова Нурия**
Фәнни етәксеһе**: Йылҡыбаева Гөлсөм Урал ҡыҙы**

## БЕЛОРЕТ РАЙОНЫ ШЫҒАЙ АУЫЛЫ ТАРИХЫ

Ырыуым – *Тамъян*
Тамғам – *Әүернә*
Ағасым – *Ҡарағас*
Ҡошом – *Ҡарсыға*
Ораным – *Тутыя*
Ауылым – *Шығай*
Эскән һыуым – *Иҙел*

*Шығай ауылының* барлыҡҡа килеү тарихы. Ауылдың шәжәрәһе *тамъян* ырыуынан булған *Шәғәли Шаҡманға* барып тоташа. Шуға күрә лә улар тамъян ырыуынан.

Шығайҙар ата-бабаларының тамъян ырыуынан булыуы менән ғорурлана.

### Инйәр-ҡатай һөйләше менән Тамъян һөйләшен сағыштырыу. Шығай ауылына хас үҙенсәлектәр

Инйәр-ҡатай һөйләше менән беҙҙең ауыл диалекты ялғауҙар, һүҙҙәре менән айырылалар. Мәҫәлән:

**-лар, -ләр; -тар, -тәр; -ҙар, ҙәр:** малайлар — малайҙар, ҡыҙлар — ҡыҙҙар),

**б, п, т** өндәре ныҡ әйтелә: анта — мынты, анда — бында.

**Л , т, ҙ** өндәре араһында күҙгә ныҡ салына. Мәҫәлән,

эшләй — һөйләй, йоҡтай — Инйәр-ҡатай.

Эштәй, һөйҙәй, йоҡтай — Шығай

Шығай ауылында 70-80-се йылдарҙа халыҡ һүҙен һөйләп бөткәс, гел генә “*шик*” тип әйтер булған. Уны беҙҙә, йәғни “Шаяртам — илап ҡуйма”, “Шығайҙың илаҡ ҡыҙҙары”, — тип әйткәндәр “*Шик*” һүҙе һүҙгә, һөйләмгә биҙәк кеүек булып йөрөгән. Әлбиттә, хәҙерге көндә был һүҙҙе әллә ни ҡулланмайҙар. Онотолоп бара. Өлкән быуын кешеләре ҡайһы саҡ әйтеп ҡуя.

Диалект тикшереү эшемде өс бағанаға бүлеп сығыр инем. Мәҫәлән, Инйәр ҡатай, Шығай, әҙәби телдә әйтелешен билдәләү.

| Инйәр-ҡатай һөйләше | Шығай һөйләше | Әҙәби тел |
| --- | --- | --- |

## Үҫемлектәр донъяһына ҡараған һүҙҙәр

| | | |
|---|---|---|
| яңғыҙаяҡ | турғай еләге | ер еләге |
| тупар | ер еләге | ҡайын еләге |
| мышар | миләш | миләш |
| ағас еләге | эберсә | ҡурай еләге |
| бәрәңге, | кәртүк | картуф |
| бүреңге | энәде | энәлек |
| энәлек | бешмәк | бәшмәк |
| бәшмәк | әгүрсә | ҡыяр |
| ҡыяр | әлморон | гөлйемеш |
| гөлйемеш | өй йыһаздары | |
| йорт- ҡаралты | аҙбар | һарай |
| һарай | синәк | келәт |
| кәбәркә | шипше | ҡыҫҡыс |
| йәмкә | | |
| кейем-һалым | галош | калуш |
| калуш | ойоҡбаш | ойоҡ |
| башалтай | күлдәк | күлдәк |
| күлмәк | һауыт- һаба | һауыт- һаба |
| ҡашығаяҡ | | |

## Туғанлыкты белдергән һүҙҙәр

| | | |
|---|---|---|
| Инәй | Әсәй | Әсәй |
| Әбей | Инәй | Инәй – оло кеше, |
| Бабай | Апа | ата-әсәйҙән дә оло кеше |

*Әсәйҙе* һәм *өләсәйҙе* икенсе төрлө *әпсә, өләпсә* тип тә атайҙар.

Күп осраҡта “*юк*” һүҙен “*як*” тип әйтергә күнеккәнбеҙ. Ике яҡта ла шулай әйтәләр.

Инйәр яғында “*сәй яҫайым*” тиҙәр. Ул беҙҙеңсә “*сәй яһау*” тигәнде аңлата. Мәҫәлән, “*кунактарға сәй яһап эсерҙем*”.

Алмаш һүҙ төркөмө менән диалект һүҙҙәр йыш ҡулланыла. Шығай ауылында “*уға*”тигәнде “*уныға*”, “*аныға*” тип һөйләйҙәр. “*Ны*” өндәре ҡушыла.

Телмәрҙә йыш ҡына *балалар* һүҙе “*балдар*” тип әйтелә. Шулай күнегелгән. Мәҫәлән, “*Бөгөн балдар уйнарға сыкманылар*”.

Ауылда “*хәжәт*” тигән һүҙ “*бурыс*” тигәнде аңлата. Мәҫәлән, “*Хәжәткә акса биреп тор әле”.*

Матурлыҡҡа һоҡланыу, иҫте китерлек хәлгә ҡарата “*Çен катҡыс*” тип әйтәләр. Был һүҙ *әй буйы* һөйләштәренә оҡшап китә. Әҙәбиәтсә “*һын катҡыс*” тигәнгә тура киләлер, моғайын.

*Ризыҡланыу, туҡланыу* менән бәйле һүҙҙәргә туҡталып киткем килә.

Инйәр яғы башҡорттарында ҡылымдарҙың *–мәгә, -маға* ялғауҙары беҙҙеңсә уртаҡ ҡылымдың *–рға, -ргә*...ялғауҙары менән әйтелә. Мәçәлән,

*сәй эсмәгә* — сәй эсергә, *аш ашамаға* — аш ашарға.

*Көскә, саҡ* тигән һүҙҙе беҙҙә “*нәслә*” тип ҡулланалар. Миçал, “

*Тауҙан нәслә төшөп еттем.*

Һөйләштә борондан килгән рәүештәр булыу менән бер рәттән, бүтән һүҙ төркөмөнән булған һүҙҙәр ҙә, теге йәки был ялғау менән ҡатып ҡалып, рәүешкә күсәләр. Миçалдар:

*тыпа* — бөтөнләй, тигенгә — буштан-бушҡа,

*ҡутарғанса* йәки *ҡутарып* — күп итеп,

*тәүгә* — тәү тапҡыр.

Көслө тойғо менән әйтелгәндә, ҡайһы бер өндәр ҙур үҙгәреш кисерә: һүҙ башындағы **й** өнө **ж** өнөнә, **һ** өнө **ç** өнөнә күсеүе мөмкин. Мәçәлән,

*жиндәнеп киттем* — ендәнеп киттем;

*кәһәр çуҡҡыры* — ҡәһәр һуҡҡыры.

Диалекттарҙы һәм һөйләштәрҙе өйрәнеү өсөн иң элек диалектологик материалды йыйыу эшен юлға һалыу, уның ғилми нигеҙле методикаһын булдырыу мөһим роль уйнай.

Мин үҙ эшемдә Белорет районының *Инйәр-катай* һәм *Тамъян* башҡорттары булған *Шығай* ауылы халҡының һөйләштәрен сағыштырҙым.

Бер районда ике һөйләш барлығын иçбат иттем.

Эшемдең яңылығы — башҡорт телендә башҡа һөйләш һүҙҙәрҙең күплегенә инаныу.

Башҡорт диалектологияһы, башҡорт тел белеменең айырым бер тармағы булараҡ, артабан үçә, тәрәнәйә бара. Киләсәктә был эште дауам итермен, тағын да тулыландырырмын, тип уйлайым. Был эшемдең башланғысы ғына.

**Ҡулланылған әҙәбиәт**

1. Шәкүр Р. Башҡорт диалектологияһы. Өфө: Китап, 2012.

2. Ишбулатов Н. Х. Башҡорт теле һәм уның диалекттары. Өфө: Китап, 2000.

3. Аҙнағолов Р. Ерле һөйләш шарттарында башҡорт телен өйрәтеү методикаһы. Өфө: Китап, 2006.

4. Янғужин Р. Башҡорт ҡәбиләләре. Өфө: Китап, 1991.

**Мәжитов Алмаз Ришат улы**
Фәнни етәксеһе**: Баширова А.Х.**

# КҮГӘРСЕН РАЙОНЫ ЕРЕКЛЕ АУЫЛЫ — БЕҘҘЕҢ КЕСЕ ВАТАНЫБЫҘ

*Ерекле* — Күгәрсен районының иң боронго ауылдарының береһе. Хәҙерге исеме *Ерекле*, ә башта *Бәләкәй Абыз* тип йөрөтәләр. Бәләкәй-Абыздың барлыҡҡа килеүе 17-се быуатҡа барып тоташа. Был ауыл Ҡара ҡыпсаҡ волосының төп ауылдарының береһе булып тора, сағыштырмаса күп халыҡ йәшәгән. 1795 йылда 40 ихатала 220 ир һәм 191ҡатын-ҡыҙ иҫәпләнгән.

Шул замандарҙа Бәләкәй-Абыз тигән өс ихатанан торған утары булған.64 йылдан һуң был ауылда 149 ихатала 870 кеше йәшәгән. 1842 йылда Ерекле ауылында 723 кешегә 228 сирек,йәки 1824 бот иген сәселгән. Ерекле ауылы халҡы башҡа ауыл биләмәләре барлыҡҡа килеүҙә ҡатнашҡандар.

Күгәрсен районы ауылдарының ҡайһы береһенең икешәр исеме бар. Мәҫәлән: *Ерекле — Бәләкәй-Абыз, Байауылы — Туйымбәт, Мәксүт — Ҡолшай* һ.б.

Ерекле ауылында бөтәһе 37 хужалыҡ, йорт бар.

## Топонимдар

**Ауылдың тирә-яғындағы йылғалар**: *Эйек, Ерекле йылғалары.*

**Тауҙар:** *Ҡоҙоҡ, Яу сапҡан тауҙары* ауылды уратып алған.

**Сабынлыҡ, бесәнлек:** *Ҡайынлы үҙәк, Тумарлы, Рәхим уяҙы, Оҙон тирәк.*

**Йылға, кисеү исемдәре**: *Ерекле йылғаһы, Таш кисеүе, Әсегүл шишмәһе.*

**Күрше ауылдар:** *Мәксүт, Бөркөт, Түбәнге Һаҙ, Үрге Һаҙ, Үрген, Сембер.*

**Райондағы бөткән ауылдар:** *Алексеевка, Сембер.*

## Антропонимдар

**Ир-ат исемдәре**: *Наил, Ғәйсәр, Салих, Нурислам, Исмәғил, Марсель, Рәйес, Мөнир, Салауат, Нәғим, Дәмин, Хәмит, Рәшит, Азат, Йәүҙәт, Фәйез, Урал, Ратмир, Рәфис, Мөхтәр, Зиннәт, Кәрим, Әсҡәт, Рәүеф, Әхмәт, Динис, Илгиз.*

**Ҡатын-ҡыҙ исемдәре:** *Роза, Гөлниса, Зөһрә, Рәзилә, Фәйрүзә, Мәрфуға, Тәнзилә, Филүзә, Гөлшат, Алһыу, Райхана, Венера, Рәмзиә, Светлана, Гөлнара, Насиба, Гөлфиә, Файза, Йәнбикә, Нурия, Рәмилә, Басира, Мәзинә, Зифа, Әлфинә.*

## Ҡушаматтар

Марсель — **«Ағай».** Ауылдағы мәктәп мөдире булып эшләгәндә, балаларға эйәреп, ауыл халкы ла «Ағай» — тип йөрөтә башлаған.

Илгиз — **«Кулак».** Илгиз, бер нәмәгә лә ҡарамай, ҡорт тотоп, ағас һатып, мал аҫырап үҙ көсө менән йәшәгән ауылдағы берҙән-бер кеше.

Зиннур — **«Маҡар».** Был кеше: «Беҙ Маҡар районы, Маҡар ауылы кешеләре» — тип, йәшерәк сағында һөйләп йөрөгән тиҙәр.

Нәғим — **«Золотой».** Был кеше үҙенсә бик оҫта булған. Әгәр ҙә берәйһе мактаһа: «Недаром нас золотыми зовут» тип маҡтанған икән.

Сергей — **«Хохол».** Атаһы украин милләтенән булғанға *хохол* ҡушаматы бәләкәйҙән йәбешеп ҡалған.

## Годонимдар

*Ерекле ауылы* ике урамдан тора.*Үҙәк урам Сөләймән* исемен йөрөтә, 34 йорттан тора.

**Сөләймән урамы**: *Сөләймән Мостафа улы Мәжитовтың* яҡты иҫтәлегенә бирелгән. *Сөләймән Мәжитов* Совет һалдаты, эскерһеҙ һәм ҡыйыу патриот булып күҙ алдына баҫа. Бик күп батырлыҡтарын, ҡыйыулыҡтарын халыҡ хәтерләп иҫкә ала. Шуларҙың береһе 1941 йылда 53 уңышлы хәрби осош өсөн Ҡыҙыл йондоҙ менән бүләкләнә. 1945 йылдың 5 февралендә Кенигсберг ҡалаһындағы дошман нығытмаларын юҡ итергә һауаға күтәрелгән самолеттың осоусы кабинаһына снаряд тейә, быяла ярсыҡтары летчиктың күҙҙәрен зарарлай. Шул саҡ *Сөләймән Мостафа* улы юғалып ҡалмай, летчиктың яраһын бәйләй һәм командованиены үҙ өҫтөнә ала. Бомбаларҙы сәпкә ташлай, летчикка йүнәлеш, күрһәтмәләр биреп тора, һөҙөмтәлә самолет аэродромда уңышлы посадка яһай. Ошо Батырлығы өсөн 2-се дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнә.

**Ғөбәйҙулла урамы:** Ерекле ауылының икенсе урамы 3 кенә ихатанан тора. Ә заманында ауыл халкы һөйләп, иҫкә алыуҙары буйынса унлап ғаилә йәшәгән булған. Ошо урамда Темәс уҡыу йортонда белем алып, мөғәллим исемен яулап *Ғөбәйҙулла Аллабирҙе улы Уразаев* ауылға ҡайтҡан. Башта төрлө ауылдарға йөрөп уҡытҡан. Ҡатын алып, ғаилә ҡорғас, ауылда төпләнеп ҡалған. Ауыл халҡы араһында бик абруйлы кеше булған. Олоһо ла, кесеһе лә хөрмәт иткән, ҙурлаған *Ғөбәйҙулла* ағайҙы. *Ғөбәйҙулла* ағайҙың яҡты иҫтәлегенә бағышлап, ауыл халҡы урамға ошондай исем биргән дә инде.

## Географик атамалар

### Сабынлыҡтар

**Рәхим уяҙы**. Колхоз башланғас та, ошо урынға ашлыҡты бушатҡандар, имеш. Ошо ашлыҡлы ырҙынды *Рәхим* исемле ҡартҡа ҡарауылларға ҡушҡандар. Әлеге көндә был ерҙәр бесәнлек булып һанала, ә халыҡ телендә *Рәхим уяҙы* тип йөрөтөлә.

**Ҡайынлы үҙәк**. Ҡайынлы үҙәктең ике яғында ла матур бесәнлек, ниндәй генә төр сәскәләр юҡ бында, ә ер-еләге түшәлеп ята. Ошо бесәнлек уртаһында өйкөм-өйкөм булып ҡайын үҫкәнгә «*Ҡайынлы үҙәк*» исемен яулаған да инде.

**Тумарлы.** Был ерҙәр тигеҙ түгел, тумар-тумар булып ята, шуға ла *Тумарлы* тип атайҙар.

**Оҙон тирәк**. Ошо урында ағастар үҫкән, ағастар араһында бер генә оҙон *Тирәк* ағасы үҫкән булған. Шунлыҡтан был урынды «*Оҙон тирәк*» тип ҡушҡандар.

### Йылғалар, кисеүлектәр

**Әсегүл шишмәһе** *Әсегүл* тигән урында бәләкәс кенә күл бар. Унының һыуы тоҙло. Был күлдән ағып сыҡҡан шишмә *Ерекле йылғаһына* ҡоя. Шуға *Ерекле йылғаһы* һыуы ла тоҙло, татырлы. Хатта ситтән килгән аттар был йылғаның һыуын эсмәй.

**Ерекле йылғаһы**. Ауылдың эргәһенән бәләкәс кенә йылға аға. Йылғаның буйынан-буйына ҡара ерек үҫә. Шунлыҡтан йылғаға *Ерекле йылғаһы* тип исем биргәндәр. *Ерекле йылғаһы* Оло Эйеккә ҡоя. Эҫе йәй көндәрендә йылғаның һыуы Эйеккә барып етә алмай ҡорой.

**Таш кисеү**. Был кисеүҙең төбөнә эре-эре таштар түшәлгән боронғо кисеү.Был кисеү аша ныҡ бысыраҡ саҡтарҙала кисеп сығып йөрөп була.Ошо ерҙә йылға ҡыш көндәрендә лә туңмай.Таш кисеү аша сыҡһаң Ейәнсура районы башлана Үрген ауылына барып сығаһың.

### Тауҙар

**Яу сапҡан тауы**. Тауҙың аҫҡы итәгенән 1918 йылда Ҡыҙылдар ғәскәре менән Аҡтар ғәскәре осрашҡан урынды, *Яу сапҡан* тип атағандар.

**Ҡоҙоҡ тауы**. Ерекле йылғаһы тоҙло булғанлыҡтан, ауылдан бер саҡрым алыҫ ятҡан тау итәгендә таш ҡоҙоҡ ҡаҙыйҙар. Борон ошо *Ҡоҙоҡ тауынан* йәш ҡатын-ҡыҙҙар, бала-саға көйәнтәләп һыу ташыған.

### Информанттар

Бәширова Рәмзиә, Бәширов Азат, Батталова Таңһылыу,
Рафиҡова Мәҙинә, Мәжитов Кәрим, Мәжитова Тәнзилә.

**Ниғәмәтова Зөлфиә**
Фәнни етәксеһе: **Ғәниева Әлиә Рәфил ҡыҙы**

## БЕЛОРЕТ РАЙОНЫ АСЫ АУЫЛЫНДАҒЫ АРАЛАР

Бейек-бейек Бәләкүр, Берҡат, Иген тауҙары ҡамауында, Инйәр йылғаһының уң ярында шаулап-гөрләп Юрмаш, Тоҙ йылғалары ҡушылып аҡҡан ерҙә урынлашҡан Асы ауылы. Был урында ауыл 18-се быуаттың икенсе яртыһында барлыҡҡа килгән. Уға тиклем ул хәҙерге Катав-Ивановск ҡалаһы урынында урынлашҡан булған.Заводчиктар ҡыуғандан һуң, тау-таш араһына килеп урынлашҡан. Асы ауылының барлыҡҡа килеү тураһындағы риүәйәт-легендалар ҙа һөйләй. “Тыуған төйәк тарихы” китабында Р. Г. Шәйбәков уның варианттарын яҙып китә (67-68-се б.). Беҙҙең ауыл халҡы ҡатай ырыуына ҡарай. Этнограф Р.Янғужин яҙыуынса, беҙҙең ырыу халҡы этник яҡтан ҡара-ҡытайҙарға барып тоташа. Ҡатай ҡәбиләһе төп алты ырыуҙан тора: *инйәр-, иҙел-, ҡоҙғон ҡатайҙар* көнбайыш ҡатайҙары, *ялан-,оло-, балакатайҙарға* инәләр.

Башҡорт ырыуҙары башта туғандаш ғаиләләр төркөмдәренән торған һәм улар ырыуҙар бер ата-бабанан таралған тип иҫәпләнә. П. С. Паллас яҙыуынса, башкорттар үҙҙәрен тау, йылғалар буйлап үҙ сиктәрен белгән ниндәйҙер йәмғиәткә бүлә, ә һәр йәмғиәт ниндәйҙер билдәләр менән тағы ла бәләкәйерәк йәмғиәттәргә бүленә.

Көнбайыш ҡатайҙарында түбәләргә, аймактарға бүленеү булмаған. Ырыуҙар бәләкәйерәк ырыу бүлексәһе — араларға бүленгәндәр.

Аралар башҡорт ауылдарында 17-се быуат аҙағына тиклем бер-нисә генә булһа, 19-сы быуатта төп араларҙан бәләкәйерәк аралар айырылып сығыу арҡаһында уларҙың һаны күбәйеп китә. Мәҫәлән, Асы ауылында *сыскан, мәшкәк, тубал, зәкрәү, ярты урам, ҡалак, сепрәк, бурҙай, тусакай, үннек* исемле аралар бар. Был араларҙың барлыкка килеүенә ниндәйҙер сәйер яктары өсөн эләккән лаҡап исем нәҫелгә ҡушыла, ниндәйҙер эштәре, ҡылыктары сәбәпсе булған.

Ә хәҙер ауылымдағы аралар тураһында йыйған мәғлүмәттәр менән таныштырам.

**Бурҙай араһы.** Борон бер һунарсы йәшәгән. Уның *Бурҙай* исемле эте булған. Бер көн ул эте менән һунарға сыҡкан. Аңғармаҫтан һунарсыға яралы айыу ташланған. Ярҙамға *Бурҙай* килгән. Айыу үкереп ебәргән. Шул вакыт һунарсы ҡулын айыу ауыҙына тығып телен нык тартҡан. Айыу көсө телдә тиҙәр бит, уның хәле бөтөп йығылып киткән, һунарсыға шул ғына етә, хәнйәрен алып айыуҙың йөрәгенә ҡаҙап ебәргән. Был бауайҙың араһы Бурҙай эте исеме хөрмәтенә *Бурҙай* тип атала башлаған. Бурҙай араһынан булған Ғарипова Фәнүзә Исмәғил ҡыҙынан яҙып алынды (хаклы ялдағы уҡытыусы)

**Бәймәш араһы.** Элек ауыл халкы Ҡытау заводына (Катавск - Ивановск) эш һорап барған. Завод хужаһы урыҫ булған. Урыҫ уларға эш биргән. Нимә эшләргә икәнен аңлатып бөткәс, «*Понимаешь*» тигән. Эйәреп килгән иптәше урыҫса белмәгәс, «понимаешь» тигән һүҙҙе *Пәймәш* тип аңлаған, ана шунан киткән инде *Бәймәш араһы*. Уларҙың биләмәһе *Ашығыс шишмәһенән алып Кеҙәле шишмәһе тамағына* тиклем. Был араға *Шариповтар, Набиуллиндар, Абдрашитовтар* инә. (Тайыпов Әүзәр бауайҙан яҙып алынды)

**Үннек араһы.** Был ара бик тырыш, егәрле булған. Бигерәк тә төнөн эшләргә ятраҡкандар. Башлаған эштәрен аҙағынаса еткермәйенсә туҡтамағандар йәки *үннек* һаҫымайынса туҡтамағандар. Шуның өсөн уларҙы *Үннек араһы* тип йөрөткәндәр. Уларҙың биләмәһе *Осорма шишмәһенән Ямаш бейәһенә* тиклем булған.

**Мәшкәкләр араһы**. *Мәшкәк араһы* башлаған эштәрен бер вакытта ла еренә еткереп, аҙағынаса эшләп бөтөрмәгән. Мәҫәлән, бура бурайҙар икән, *бәшмәк* уҫмәйенсә ҡабат тотонмағандар, шуға ла уларҙы *мәшкәк* (*бәшмәк*) тип атағандар. Уларҙың биләмәһе *Ялпы итәгенән* (салғыйынан) *Бикәш* (Бик

йәш) йылғаһы тамағына тиклем булған. Уларға *Ғайфуллиндар, Ниғәмәтовтар* инә.

**Зәкрәү араһы**. Зәкрәү (ҡыңғырау) буш хәбәр, дөрөҫ булмағанды һөйләп, ҡыңғырлап йөрөгәндәре өсөн атағандар. *Насиповтар* ошо араға инә.

**Сусаҡай араһы**. Сусаҡайҙар күктә Сусаҡ йондоҙо ҡалҡмайынса эштәрен ташламағандар, тимәк, тырыш ара булған. *Давлетбаевтар, Саҙретдиновтар* инә.

**Сепрәктәр**. Был аралағы бауайҙың ҡорһағы бик ҙур булғанға *сепрәк* менән бәйләп йөрөткән, шунан киткән инде ара исеме.

**Сыскандар араһы**. Сысҡан кеүек йылғыр, йөрөгән ерҙәрендә ут сәсрәтеп, ҡыйыу булғандары, бер ҡайҙа ла юғалып ҡалмауҙары өсөн шундай ара исемен ҡушҡандар.

**Таҙлар**. Баштары таҙҙан арынмаған, шуның өсөн *Таҙ араһы* тип йөрөткәндәр. Таҙ - башҡа сыға торған сей яра, уны борон һигеҙ йыл ҡолонламаған бейә һейҙеге менән дауалағандар.

**Төркмәндәр.** Төркмәндәр. Ык буйынан күсеп килгәндәр, унда улар *Төркмән* тигән ауылда йәшәгәндәр, шуның өсөн *төркмән* тигән дә ҡуйғандар.

## Ауылдағы ҡушаматтар

Ҡушаматтар ауыл кешеләренең ҡылыктарына, холоҡтарына, эшләгән эштәренә ҡарап әйтелгән.

**Ҡалаҡ**. Урманға ағас үҫентеләре ултыртырға барғандар. Ашарға ултырғас, араларынан берәү дөйөм табаҡтан ашамай, үҙе айырым ашаған. Уға *калак* ҡушаматы тағылған да ҡуйған.

**Таптыгин**. Бөтә ергә лә өлгөргәне өсөн.

**Сыбыртҡы осо**. Сыбыртҡы осо ныҡ тейә бит, ҡыҙыу, ярһыу булған, аҙағын уйламай, ауыҙын үлсәп асмағаны өсөн.

**Шамбы**. Йылмаяҡ, төрлө хәл-вакиғаларҙан сығыу юлын йәһәт кенә тапҡан.

**Кукуруз**. Колхоздан беренсе тапҡыр *кукуруз* алып ҡайтып сәскән. Көҙөн баксаһында һап-һары тумалак нәмә үҫеп сыккас, һорағандар «Нимә ул?» — тип. «*Кукуруз*», — тип яуап биргән. Шунан ошо ҡушамат тағылған да ҡуйған.

**Сепрәк**. Бисәләре ҡушмайынса, ирҙәре тупҫа аша атламаған.

**Тышау**. Бик яй, бер аяғын алға баҫҡансы, икенсе аяғын эт ашар тигәндәр.

**Айыу Рәхмәт**. Шәп һунарсы булған. Үҙ ғүмерендә алтмыш өс айыу аулаған. Уның һөңгөһө Йөйәк мәктәбенең музейында һаҡлана.

**Ҡарға**. Кеше менән һөйләшкән ваҡытта бот сабып һәйләшкән. Ҡулдарын ҡарға ҡанаттары кеүек ҡаҡас, *карға* тигәндәр ҙә ҡуйғандар.

Шулай итеп, мин ошо эҙләнеү эшемдә ауыл тарихы, нәҫел-аралары, ҡушаматтар тураһында йыйған мәғлүмәттәр менән таныштырҙым. Артабан да дауам итермен, иптәштәремә, ауылдаштарыма еткерермен, сөнки беҙ тарихыбыҙҙы белергә бурыслыбыҙ.

**Сәхибгәрәева Элена**
Фәнни етәксеhе**: Сәхибгәрәева Лариса Рәмил ҡыҙы**

## ИСӘМӘТ АУЫЛЫНЫҢ ТОПОНИМДАРЫ ҺӘМ ДИАЛЕКТ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Борон-борондан кешеләр тыуған яғының матурлығына дан йырлаған, гүзәллеген hәр кешегә еткерергә тырышҡан. Тыуған йортон, ауылын, тыуған яғын ысын күңелдән яратҡан кеше генә ысын патриот була.

Минең тыуған яғым – Илеш, ауылым – Исәмәт. Беҙҙең яҡта бөркөт осорҙай бейек ҡаялы тауҙар, ҡалын-ҡалын ҡара урмандар юҡ. Ә шулай ҙа минең өсөн иң матур ул Исәмәтем. Сал ҡылғанлы битләүҙәре, күкрәп үҫкән үләндәре, хуш еҫле сәскәләре, еләк-емешкә бай туғайҙары, күп төрлө йәнлектәре hәм балыҡҡа бай йылғалары менән күркәм.

*Исәмәт ауылы тураһында тәүге мәғлүмәттәр. Ауылдың барлыҡҡа килеүе*

Ауылдың иң оло йәштәге Ҡазыханов Ғафурйән, Авзалов Әхийәр ағайҙарҙың тағы ла бер нисә кешенең hөйләүҙәре буйынса, тәбиғәттең гүзәл урынына иң элек мари милләте кешеләре(уларҙы икенсе төрлө *чирмешләр* тип йөрөткәндәр) урнашып йәшәгән. Был осорҙа әле улар ырыулыҡ йәмғиәтенә оҡшаш булған ырыуҙарға бүленеп, ике ырыуҙан торған. Бер ырыу *Әүеште йылғаһының* Ҡарабаш ауылына сыға торған күпер тирәhенә,икенсе ырыу хәҙере Совет урамының магазин урнашҡан ерҙә йәшәгән икән. Артыҡ үрсеп-таралып китмәгәндәр күрәhең,уларҙың тормош-көнкүрештәре, йолалары тураhында бер мәғлүмәт тә билгеле түгел,бары ҡәберлектәре булыуын күп кенә оло йәштәгеләр hөйләп ҡалдырғандар. Казыханов Ғафурйән, Авзалов Ғиләжетдин бабайҙар әйтүенсә, береhе Совет урамында йәшәүсе Кашапова Сайранагөлдөң картуф баҡсаhы артында, икесеhе Тау баҫыуы ҡапҡаhы төбөндә булған.



*Ауылдан сығып Юғары Йәркәйгә бара торған юл. Элек Әбей батша юлы тип тә йөрөтөлгән (был фото шулай ук сама менән 1960 йылдарҙа төшөрөлгән)*

Хәҙерге Аҡтаныш районы Чалманарат ауылында йәшәүсе Сабанчы ҡарт улы Туҡтамышҡа ошо ерҙәрҙән файҙаланыу өсөн батша хөкүмәте тарафынан грамота бирелеп, ул элеке мариҙар йәшәгән ергә килеп ултыра. Был 1776 йылдар тирәһендә була. Туҡтамыштың улының улы Исәммәт ата-бабайҙары тарафынан ҡыҫырыҡланған мариҙарҙы бөтөнләйгә көс ҡулланып ҡыуып ебәрә һәм ошо ерҙәргә хужа була. Исәммәттең ерҙәре,урман һәм болондар күп була, ул үҙенең биләмәләренән артҡан ерҙе һатыу, арендаға биреү эштәрен алып бара. Ошо осорҙа Ыҡ йылғаһы буйында йәшәгән ҡабиләләрҙең ергә мохтажлығы ҙур була һәм уларҙың бер төркөмө Күҙәкәй ауылынан Исәмәткә киләләр. Унан килгән халыҡтарҙың хәҙерге көндә Диниевтар нәҫеле. Ыҡтың икенсе икенсе яғынан Адай ауылынан күсеп килеп, ер һатып алғандар, йәиһә арендаға алып эшкәртеп йәшәгәндәр. Уларҙы “адайлылар” тип йөрөткәндәр. Уларҙың вәкилдәре – Шәриповтар, Мирзаяновтар нәҫелдәре. Ауыл милли яҡтан ике төрлө-исәмәтлеләр – башҡорттар, күзәкәйлеләр һәм адайлылыр- татарлар булғандар. Һөҙөмтәлә,ауыл Исәмәт ҡарт исемендә булып, уның юғары осона типтәрҙәр, түбән осона башҡорттар, ауылдың юғары осона типтәрҙәр, арғы яғына мишәрҙәр урнашҡан. Улар хәҙерге Исәмәт еренә ағаслыҡтарға хужа булып, үҙҙәре саҡырып килтергән типтәр һәм мишәрҙәргә ерҙе арендаға биргәндәр. Улар, үҙ сиратында, ер хужаһына оброк формаһында аренда хаҡын түләү ваҡытында түләй алмаһа, ул еренән мәхрүм ителгән. Бер үк ваҡытта казнаға ла ер налогы түләгән.

Ер бүлгәндә Исәмәттең туғаны Салманаратта ҡала, уға ағаслыҡ ерҙәре беркетелә. Исәмәттең тау яғы урманы Салманарат тип атала башлаған. Ерҙең иң яҡшы һәм уңдырышлы ерҙәрен башҡорттар биләгән. Улар типтәр һәм мишәрҙәргә насар, һаҙлыҡлы, таулы-соҡорло ерҙәрҙе бирәндәр, шуға ла ауылда йыш ҡына ыҙғыштар булған. Был ыҙғыштар айырыуса ер бүлгәндә күҙәтелгән. Күп осраҡта кешеләрҙең үлеме менән тамамланған.

Ер биләүҙә иң күп файһа башҡорттарға булған. Уларҙың юғары ҡатламы батша властеның хеҙмәтселәре тарафынан яҡлау тапҡан.

Революцияга тиклем Исәмәт ауылы Ҡазан юлы өлкәһе Минзәлә өйәҙе тип йөрөтөлгән. Унан һуң ауыл Өфө губернияһы Бөрө өйәҙе Илеш волосына ҡараған. Ер тоташ дәүләттеке була, ерҙән файҙаланыу өсөн крәҫтиәндәр дәүләткә оброк түләгәндәр.Ерҙе эшкәртеүҙә төп эш ҡоралдары ағас һуҡа, ағас тырма, иген йыйыуҙа ураҡ, салғы, ашлыҡты чабағач менән һуҡҡандар. Агрономия фәнен белеүсе лә булмаған, шуға ла уңыш бик түбән булған.Ауылдың байтаҡ крәҫтиәндәре үҙҙәре ер киҫәге тота алмау сәбәпле, хәллерәктәренә көнлөккә ялланып эшләгәндәр. Шуға ла уларҙың тормош-көнкүреш шарттары бик насар булған, һәр йылды алдан бурысҡа алып ашап, эш сезонында шул бурыс өсөн эшләп түләргә мәжбүр булғандар. Ә был хәл ул крәҫтиәндең алдағы тормошноң тағын да ауыр хәлгә төшрөгән. Столыпин реформаһына тиклем ер Исәмәт ауылында ир йәне башына башҡорттарға ғына бүленгән. Ҡатын-ҡыҙҙарға ер бирелмәгән. Ер бүлгән осор ревизия осоро тип аталған, ревизияләр араһында тыуған ир балалар ҙа икенсе ревизиягә (ер бүлеүгә) тиклем ерһеҙ ҡалғандар. Ҡатын-ҡыҙҙарға ер бирелмәү сәбәпле ауылдың хәлендә күп кенә аяныс хәлдәр килтереп сығарған. Донъяға ҡыҙ бала тыуһа, ата-әсәгә ҡайғы булып иҫәпләнгән, сөнки ул ерһеҙ ғаилә, уның йәшәүе өсөн мөмкинлектәр булмаған. Ер бүленеүҙең билдәле генә ваҡыты булмаған. Шул осор эсендә ерһеҙ кешеләр ерлеләргә көн-төн ялланып йә батраҡ булып эшләргә мәжбүр булғандар.

1880 йылға ауылда өс хутор була, Яҡуп, Йосоп, Канафи хуторҙары тип йөрөткәндәр. 1893 йылда Йосоп ҡартты ауыл халҡы һөргөнгә ебәрә.

Октябрь революцияһына тиклем ауылда 360 хужалыҡ булған. 1921 йылда ауылға землемер килеп халыҡҡа ер бүлә. 1929 йылда колхоз төҙөлә башлай. Уға “Сабанчы” исеме бирелә. Һуғыш осоронда өскә бүленә. Аръяҡтар – Салҡын чишмә, юғары ос – Аҡлан, түбән ос – Сабанчы тип йөрөтөлгән.

Исәмәт ауылы өс мәхәлләгә бүленә. Өс мәсет була Түбән ос мәсетен революциянан һуң һүтеп мәктәп итеп һалалар. Аръяҡтағы мәсет клубҡа әйләндерелә. 1937 йылда мәсет манараһы киҫелә.

1918 – 1919 йылдарҙа, граждандар һуғышы осоронда, ауыл бер нисә тапҡыр ҡулдан ҡулға күсә. Йәйләү аулыны янында ҡаты бәрелеш була. Исәмәт яғында – аҡтар, Йәйләүҙең теге яғында – ҡыҙылдар бер ай самаһы оборонада торғандар. Аҡтар йыш ҡына иҫерек көйөнсә халыҡтан продукция йыйып йөрөгәндәр. Каҙ, тауыҡ, аттарына аҙыҡ алғандар (Насыртдинова Мәликә һөйләүе буйынса). Улар оборонада торғанда Байсар яғынан бер ҡыҙыл разведчик килә, тик аҡтар уны тоталар, ике көн буйы һорау алһалар ҙа ул бир нимә лә әйтмәй. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы исем–шәрифтәре билдәле түгел. Аҡтар атып үлтергәс, халыҡ уның кәүҙәһен Исәмәт зыяратына күмә, хәҙергә ҡәбере билдәле түгел. Икенсе тапҡыр аҡтар 1916 йыдың көҙөндә оло юл буйында һәм Тау баҫыуы янында тупланған була. Бер ике аҙна самаһы торғандан һуң ҡапыл Байсар ауылы яғынан ҡыҙылдар килеп сығып аҡтарҙы Иҫке Куктау һәм Йәркәйгә ҡыуып китәләр. Был Азин дивизияһы була.

1918 йылда ауылда мәктәп асыла. Бында уҡыу түләүһеҙ һәм ир балалар менән бер рәттән ҡыҙҙарға ла уҡырға мөмкин була.

1936 йылды Кәрәмулланан башҡа бөтәһе лә колхозға инеп бөтә. Ошо йылда шәхси тегермәндәр бөтә. Государственныйға әйләнә. Гәрцене хөкүмәткә биргәндәр. Бары тик 1965 йылда ғына Хатмулла исемле кеше күпер янына сәмәндән яһап двигатель алып ҡайтып эшләтә башлайҙар.



*Беренсе хөкүмәт тегермәне (1965 йыл)*

Бөйөк Ватан һуғышына 700 артыҡ ир – егет һәм өс ҡатын-ҡыҙ (Ғатауллина Нүрҙиҙә, Шакурова Кифая, Миркәева Мөхлисә) китәләр. Шуларҙың 360 кире әйләнеп ҡайтмай, яу ҡырҙарында ятып ҡалған. Улар иҫтәлегенә ауыл уртаһында обелиск ҡуйылған, уның тирә-яғын мәктәп уҡыусылары ҡарай.

## Исәмәт ауылы ер-һыу атамалары

### Күперҙәр

**Ҡырғыз күпере** – бик борон замандарҙа ҡырғыҙҙар ауыл янындағы тау башына килеп урнашҡандар.Тау **Ҡырғыз тауы** тигән исем алған, Оҙаҡ ваҡыт шунда йәшәп киткәндәр. Тау аҫтында шишмә булған, уға **Ҡырғыз чишмәсе** тип исем ҡушҡанда. Ә янындағы күпергә **Ҡырғыз күпере** тигәндәр.

**Ҡарабаш күпере** – Ҡарабаш ауылына табан барған юлда урылашҡан.

**Бетле күпер** – беҙҙең ауыл аша М-7 трассаһы үтә, элек был юлдан Екатерина икенсе үткәнлектән **Әби патша юлы** тип аталған. Ҡайберәүҙәр **Катаржан юлы** тип тә әйтә. Аттарға атланған конвойҙарҙың каторжандарҙы ҡыуалап алып киткәнде ауыл халҡы ҡыҙғаныс менән ҡарап ҡалған. Ас, бысраҡ булғандар улар, өҫтәүенә аяҡтарын саҡ һөйрәп барғандар. Ике ҡул, ике аяҡ тимер боғау менән нығытып бәйләнгән. Уларға икмәк киҫәге бирергә тырышҡан кешеләрҙе сыбырҡы менән ҡыуғандар. Ырғытҡан икмәк һыныҡтары һанаулы аторжандар ғына алып каба алған. Ауылды сығып, бер һигеҙ саҡрым самаһы үткәс, күпер янында атлы конвойҙар каторжандарҙы бер аҙ ял иттерергә туҡталғандар. Бер нисә кис шунда ҡунғандар. Һыу эсерткәндәр. Йыуынмағанлыҡтан бөтәһе лә бетләп бөткәндәр, ти улар.

“Ғиләжетдин бабай, хәйерле булһын инде, был юлға бигерәк күп йәш тамсыһы тамған, ҡарғышлы юл бит ул, балам, киләсәктә нимә булыр инде был юлда”, – тип йыш әйтә торғайни Ғиләжетдин ҡарт, – тип һөйләне өләсәйем. Уйлап ҡараһаң, авариялар бик йыш була был юлда, өҫтәүене *Бетле күпер* тирәһендә айырыуса күп....

Ә граждандар һуғышы осоронда ошо уҡ күпер янында ҡасҡындар (беглые) ҡасып ятҡан.Үтеп барыусы һәр кемде талай торған булғандар, бер ваҡыт был күпер янынан үтеп йөрөүселәр бөтөнләй ҙә ҡалмаған.

**Таш күпер** (Әбей батша күпере) – борон замандара батшабикә Екатерина II ҡушыуы буйынса һалдырылған күпер. Күпер тәбиғи таштарҙан өйөлгән булған. Аҫтынан *Әүештә йылғаһы* аҡҡан. Күп йылдар үткәс, яңы юл төҙөгәндә ул емерелә. Хәҙер беҙ яңы күпер аша йөрөйбөҙ. “Әбей батша күпере хан заманында уҡ аҫта ҡалды инде, - тиҙәр өлкәндәр.

Шулай уҡ *Ҡырлыған күпере, Ямансаз күпере, Шарлы күпере, Нәфис күпере, Тарлау күперҙәре* бар.

**Һаҙҙар**

**Черексаз** – бул һаҙ бер ҡасан да кипмәгән.

**Торнасаз** – был һаҙға йәйен бик күп торналар ҡайтҡан.

**Ямансаз** – был һаҙ кеше үтмәҫлек булған, малдар ҙа йыш батҡан. Элек бер кеше апрель айында күҙ асҡыһыҙ буранда аҙашып шунда батып үлгән.

**Ҡушҡуаҡ** – ике һаҙ булған, уларҙы ошо ҡуш ҡыуаҡ ҡушып торған

**Түгәрәк саз** – формаһы менән түңәрәккә оҡшағанға әйткәндәр.

**Эт басмассаз** – “кеше түгел, эт тә басмас бу сазға” – тигәшдәр боронғолар был һаҙ тураһында.

**Шишмә, ҡойолар**

**Әүлиә чишмәсе – Тегермән тау итәгендәге** был шишмәне ысынлап та шифалы, хатта изге тиһәң дә була. Саҙертдинова Зәлифә әбей “Ауырлы чағымда күңелем болғанып, ҡосоп (токсикоз) бик ныҡ яфаландым. Әллә нәмәләр эчеп, ашап та ҡарадым, файдасы булмады. Шушы чишмәдән бер генә йотом су ҡапҡан идем – миң зууур дауа булды, башҡача хәлем начарланмады, күңелем боғануның нәмәкәй икәнен дә белмәдем”, – тип һөйләне.

**Әүмәкче чишмәсе** – Әүмәксе исемле кеше таҙартып, беренсе тапҡыр ошо урындан һыу эскән.

**Ибәт шишмәһе** – Ибәтулла тигән кеше был шишмәне гел таҙартып, ҡарап торған.

**Ҡарағатлы ҡойо** – бында бик күп булып ҡарағат ҡыуаҡтары үҫкән, шул урында бер шишмә лә булған.

**Шифалы шишмә**, **Бану чишмәсе**, **Ягүр чишмәсе.**

**Әнкәйләр чишмәсен -** Марат ағай Гәрәев яңынан уратып алып матурлап ҡапҡаларын эшләп ҡуйҙы. Йәй көнө еләккә барыусылар бында туҡтап, тәмле һыуҙы эсеп ял итеп китәләр.

**Яшьлек чишмәсенең** дә тирә-яғын ҡарап, үләнен сабып торалар.

**Күлдә, йылғалар**

**Әдил күле**, **Ябалаҡ күле**, **Чирмеш йылғасы**

**Төпсез ҡойо күле** – Ҡыҙыл күс яғындағы баҫыуҙа урнашҡан.

**Әвеште йылғасы** – ике йылға бер-береһенә ауышып аҡҡанға әйткәндәр.

**Тауҙар**

**Тегермән тауы** – был тау аҫтында һыу тегермәне булған.

**Бырсыҡ тауы** – элек был тауҙа бурһыҡтар төркөмө йәшәгән.

**Кибән тауы**, **Аҡчарлаҡ тауы**, **Иж тауы**, **Чишмә тауы**, **Ҡызылъяр тауҙары** бар.

**Чағыл тауы**ның үҙенә айырым тарихы. Был тау Илеш районының иң бейек тауҙарының береһе. Уның түбәһенә ағастан яһалған бейек баҫҡыс (халыҡ телендә вышка) ҡуйғандар. Шуның осона уҡ менеп баҫҡан кеше тирә-йүндәге йөҙгә яҡын ауылын күргәндәр. Минең оләсәйем дә йәш сағында ошонда менгәнен һөйләне.Элек Аҡкүҙ, Ҡыпсаҡ, Исәмәт, Турасы, Йәйләү, Калигин ауылы йәштәре ҡар ирей башлау менән ошо тау башында осрашып уйындар ойоштороғандар икән. Осрашыу иҫтәлеге итеп ҡағыҙға исемдәрен, осрашыу көнөн яҙып, һауытҡа һалып ҡалдыра торған булғандар. Үткән көҙҙә беҙ ҙә бер төркөм мәктәп уҡыусылар менән тауға мендек, әлбиттә, арыныҡ. Сонки ул ауылдан бик йыраҡ урнашҡан. Беҙ ҙә исемдәребеҙҙе яҙып, ҡалай һауытҡа һалып ҡалдырҙыҡ. 1990 йылдарҙа менгәндәр үҙҙәре тураһында ҡайынға яҙып ҡалдырғандар икән, шул фамилияларҙы уҡыныҡ.

**Яландар**

**Ягур яланы** – Татарстандың Пучы ауылы кешеһе Егор Атаманов ер һатып алып бында күсеп килгән.Халыҡ телендә Ягүр тип әйткәндәр. Үҙе сауҙа иткән. Үҙе һатып алған ерҙәрҙе арендаға биреп торған. Яланға **Ягүр яланы** исеме, ундағы шишмәгә **Ягүр шишмәһе** тигәндәр. Егор Атамановтың Тамара, Татьяна,Аза, Виталий исемле балалары булған. Граждандар һуғышы барғанда Ягур үҙенең улы менән аҡтарға эйәреп ауылдан ҡаса. Аза Ҡазанда уҡып сығып юрист була.

**Аҡлан (Олы Аҡлан, Бәләкәй Аҡлан) -**

**Мәдин яланы** – был яланда Мәдин исемле кеше йәшәгән.

**Сеңгрән яланы** – сеңгрән ауылына барған юлда урнашҡан.

**Жыйын яланы** – борон ваҡыттарҙа был яланда халыҡ жыйылыш (йыйын) үткәргән, һабантуйҙар ҙа ошонда ойоштороғандар.

**Жылҡыя** – йылҡы хайуандары күп булып ошо урында йөрөгән.

**Торна яланы** – был урынға торналар йыш төшә торған булған.

**Хөсәен яланы**, **Тарлау** бар.

**Ҡулдар (балкалар)**

**Ҡабыҡ ҡул –** элек йүкәнән ҡабыҡ һыҙырғандар, шунан кәрәк нәмәләр эшләгәндәр.

**Сатырлы (Чатырлы) ҡул** – бесән сабып алыу өсөн үтеп инмәҫлек булған, гел һынған сыбыҡ – сабыҡтан ғына торған ер.

**Киртә ҡул --** гел кәртә менән уратылып алынған.

**Йүкәле ҡул** – ул урында йүкә ағастары үҫкән.

**Бүләк ҡул** – Йүкәле ҡул өҫтөндә урынлашҡан,төрлө емеш-еләк үҫкән.

**Ҡашҡа алаша ҡулы** – Ҡашҡа алаша тигән атты бүреләр ошо ерҙә ашағандар.

**Ҡышҡы сана ҡулы** – элек был урынға ҡышын ҡар һалмаған,гел ат менән йөрөргә еңел булған.

**Баланлы ҡул** – был ерҙә балан бик уңа торған булған.

**Умарталы ҡул** – шул урынға кешеләр буш умарталарын илтеп ҡуя торған булғандар.

Шулау уҡ **Уразай ҡул, Үркә ҡул, Төнтә ҡул, Сафа ҡулы, Кәкре усаҡ ҡулы, Айыу ҡачҡан кыуаҡ ҡулы, Әрдәнә ҡул, Ястыҡ ҡулы, Ҡыска ҡулдар бар.**

**Икмәк уты ҡулы (1970 йылдар) Икмәк уты ҡулы (бөгөнгө көндә).**

## Баҫыуҙар

**Илле тинлек баҫыу (Палтинник) –** ауылға землемер килгәс, ерҙәрҙе үлсәп бүлеп һатыу ойошторолған.Кемдең аҡсаһы бар, шулар ер алған. Ситтән килеүсегә булмаһын тип ауыл халҡы был баҫыуҙы 50 (илле) тингә һатып алып ҡалған.

Шулай уҡ Аҡлан басыуы, Сазра басыуы, Тау басыуы, Чатра басыуы, Яңа баҫыу, Ҡырлыған басыуы, Түбән басыу, Тарлау баҫыуы, Байсар баҫыуы, Ғатай тау баҫыуы, Мәчет саҡлауы баҫыуҙары бар.

**Сталин юлы, Сталин юлы буйы басыуы –** был юлға һәм уның янындағы баҫыуға Сталин шәхесен мәңгеләштереү өсөн ҡушҡандар.

Күрше-тирәлә бөткән ауылдар: Марс ауылы. Исәмәт сельсоветы ерлегендә булған Төкәй – Тамаҡ ауылына бара торған юл янында булған.

## Исәмәт халҡының теле: үҙенсәлектәре

Ғалимдар Башҡортостан Республикаһының төньяҡ–көнбайыш һәм көнбайыш төбәгендә урнашҡан районДарындағы башҡорт ауылдары халҡының һөйләм теле төньяҡ-көнбайыш диалекты тип билдәләйҙәр. Беҙҙең Илеш районы,шулай уҡ күрше Баҡалы, Саҡмағош, Дүртөйлө районДарында йәшәүселәрҙең һөйләү теле ошо группаға ҡарай.

Диалектология буйынса яҙылған китаптар менән танышып сыҡҡас, ғалим С.Ф.Миржанова был диалектты тәрәнтен өйрәнгәнен, төрлө хеҙмәттәр яҙғанын белдем. (Миржанова С.Ф. Северо-западный диалект башкирского языка. Уфа, 1991г.) Илеш районының Ҡыпсаҡ, Һеңрән, Иҫке Ҡырғыҙ ауылдары исемендә территорияны биләгән бүләр, ҡыпсаҡ ырыу ҡәбиләләренең йәнле һөйләү теле булып төньяҡ-көнбайыш диалекты ағиҙел-ыҡ һөйләше тора. Был диалект өсөн характерлы үҙенсәлектәр бик күп. Шуларға миҫалдарҙы йыйҙыҡ.

**Ауылдың һүҙлек составы**

| Ауыл һөйләшендәге һүҙҙәр (диалект) | Әҙәби телдә (йә уның аңлатмаһы) | Рус телендә |
|---|---|---|
| **Туғанлыҡ, кәрҙәшлек териндары** | | |
| Әни | әсәй | мама |
| Дәүәти<br>Йыраҡ бабай | әсәйҙең атаһы | дедушка |
| Ҡартәтәй | атайҙың атаһы | дедушка |
| Дәүәни<br>Нәнәй<br>Йырағәби<br>Йыраҡай | әсәйҙең әсәһе | Бабушка по линии матери |
| Ҡартый<br>Ҡартинәй | атайҙың әсәһе | Бабушка по линии отца |
| Дүрнәй<br>Абзинәй | әсәйҙең, атайҙың апайы | тетя |
| Дүрәтәй,зурәтәй | әсәйҙең, атайҙың ағаһы | дядя |
| Оноҡ | әсәй, атайҙың ҡыҙы (2-се быуын) | внучка |
| Килен | улының ҡатыны – **килен** | невестка |
| Кийәү | ҡыҙының ире – **кейәү** | жених |
| Бианай | ирҙең әсәһе – **ҡәйнәм** | свекровь |
| Биатай | Ирҙең атаһы-ҡайны | свекрь |
| Әби | ҡатындың әсәһе – **ҡәйнәм** | теща |
| Бабай | Ҡатындың атаһы | тесть |
| Ир,ирем,тормош иптәшем | | Муж, супруг |
| Апа | иренең апайы | тетя |
| Абый | иренең ағаһы | дядя |
| Ҡайнаға | ҡатының ағаһы | деверь |
| Килендәш | бер туған ағалы-ҡустының ҡатындары бер-береһенә ҡарата | |
| Бәбәйләгән | Ҡатын кеше бәпес тапҡас әйтелә | родила |
| Ҡыз сорау<br>Ҡыз сөйләшеү | Кейәүгә сығыу, өйләнеүгә ҡараған һүҙҙәр(ҡылымдар) | |
| **Ботаникаға ҡараған териндар** | | |
| Тупыл | | тополь |
| Әпипапа | бәпембә | одуванчик |
| Сәрби ағасы | | акация |
| Ҡамырлыҡ | энәлек | боярышник |
| Тигәнәк | дегәнәк | репей |

| | | |
|---|---|---|
| **Йорт-кура, ҡаралды терминдары** | | |
| Чиннек<br>Келәт | | склад |
| Муча | мунса | баня |
| Бәләкәй өй | | летник |
| Кисәүғач(кисағач<br>) | тәртешкә | кочерыжка |
| Тупса | тупһа | порог |
| Диңгез | нигез | фундамент дома |
| әбрәкәй | бәҙрәф | туалет |
| Мөржә,мич | мейес | печка |
| Табағач | | ухват |
| | | |
| **Йылға, күл, ландшафт (географик терминдар)** | | |
| | | |
| чишмә | шишмә | родник |
| Чоҡор | соҡор | яма |
| **Транспорт терминдары** | | |
| Бәләкәй арба | | тачка |
| Матай | | мотоцикль |
| Бәләкәй чана | | детские сани |
| Виләй<br>Сәпит | | велосипед |
| Бәллү | бишек | колыбелька |
| **Йөн, дебет эшкәртеү** | | |
| Арҡа жылысы | | жилетка |
| | | |
| **Кейем-һалым терминдары** | | |
| | | |
| | | |
| Сочинка | | валенки с голошами |
| Айаҡ сауыты | аяҡ кейеме | обувь |
| Чолғау | солғау | портянка |
| Ыштан | | рейтузы |
| Сырма | | пальто |
| Куфәйке | | фуфайка |
| Пима | быйма | валенки |
| | **Ашамлыҡ-эсемлек терминдары** | |
| Эпи | икмәк | хлеб |
| Төш | Сәк-сәк | Чак-чак |
| Тәкә<br>Ишмә | | пирог |

| | | |
|---|---|---|
| Пирүк | | |
| Төплөкәй | | картофельный пирог |
| Көлчә | | |
| Сөт өстө | һөт өҫтө | сметана |
| Үрә | өйрә | похлебка |
| | **Ҡашығаяҡ, һауыт-һаба** | |
| Бал ҡашығы,бал ҡалағы | балғалаҡ | чайная ложка |
| Жомайаҡ | | кружка |
| Ужау | | половник |
| Жулпыч | | Деревянная посуда в форме подноса |
| Бәлүдә | | блюдце |
| Күкәй | йомортҡа | яйцо |
| Чәшке | сынаяҡ | кружка |
| Йолдоз | йондоҙ | звезда |
| Азғын | аҙман | беспутный |
| Ҡапчыҡ | тоҡсай | мешок |
| Кәнтүш | | самка |
| Жәмәнжә йауы | | Много людей |
| Адаш | аҙаш | тезка |
| Чибәр | сибәр | красивый |
| Жылау | илау | плакать |
| Дүртенче | дүртенсе | четвертый |
| Ботау | бутау | путать |
| Йөгөрөү | йүгереү | бежать |
| Сыйыҡ | шыйыҡ | жидкий |
| Төйәү | тейәү | грузить |
| Борын | Борон | давно |
| Пумала | бумала | помело |
| Кебек | кеүек | похожий |
| Йемелтәү | емелдәү | Мерцать |
| Дөбөртәү | дөбөрләү | Греметь |
| Атынғыч | таған | качели |
| Жилҡуар | елғыуар | ветреный |
| Пычҡы | бысҡы | пила |
| Биби | бәбкә | гусенок |
| Песи | бесәй | кошка |
| Писүк | шәкәр | сахар |
| Маймул | маймыл | обезьяна |
| Тез | тубыҡ | колено |

**Кешеләрҙең торлө сифаттарына ҡарап әйтелгән,**
**эш-хәрәкәттәренә бәйле һүҙҙәр**

| **Ерле һөйләм телендә** | **Мәғәнәһе** |
|---|---|
| Дегет чиләге | Иренә гел эйәреп йөрөгән ҡатынға әйтәләр |
| Килмешәк, керген | Ситтән килеп йәшәгән кеше |
| Пырдымсыз | Уйлап бетермәй һөйләгән, әҙәпеҙ кеше |
| Нигудин | Армияға бармай ҡалған ир-егет |
| Чихут | Йүткереп ауырыған кеше |
| Чатан | Аҡһаҡ кеше |
| Чулаҡ | Бер ҡулы ғәрип, ҡулы йөрөмәгән кеше |
| Чуҡраҡ | Ҡолағы ишетмәгән кеше |
| Арҡасына уа чыҡҡан,бөкере | Горбатый человек |
| Миңгерәүләнгән | Тиз генә уйлап, аңлап бетермәгән кеше |
| Сәлберәгән, бәлтерәгән, бөкшәйгән | Туҙған, иҫкергән |
| Күшеккән | Ямғырҙа сыланып өшөгән кеше |
| | |
| Чүмерү(сөтнө чүмердем) | эстем |
| Ботканы состом ғына | ашаным |
| Чуҡынып йөрөмә | яфалама |

**Урам исемдәре (годонимдар)**

Исәмәт ауылында Совет, Шоссе, Чапай, Киров, Йәштәр, Мәктәп урамдары бар. Октябрь революцияһынан һуң үҙәк урамға Совет, унан тағы икеһенә Киров, Чапаев исемдәре ҡушылған. Халыҡ теледә ошо урамдар шулай уҡ икенсе төрлө лә әйтелә – Аръяҡ (йылғаның икенсе яғына урнашҡан өсөн Киров урамы Совет урамында йәшәүселәр Киров урамына), Түбән, Юғары остар (Совет урамы), Асҡы урам, Ҡашлаҡ (Чапаев урамы).

**Ауылда йәшәгән кешеләрҙең исемдәре**

**Ир–ат исемдәре:** Рамил, Рауил, Рөстәм, Рафаил, Заһир**,** Марат, Алмаз, Илдар, Ильяс, Наил, Ринат, Рифат, Ринат, Рәүдәт, Камил, Ришат, Булат, Тимур, Азамат, Руслан, Фәрит, Роберт, Шамил, Айнур, Айбулат, Илгиз, Илназ, Илсур, Илдус, Алмаз.

**Ҡатын-ҡыҙ исемдәре:** Айһылыу, Алһыу, Гөлназ, Әлфиә, Гөлфиә, Лилиә, Әнисә, Альбина, Фаягөл, Рәмзилә, Фәниә, Гөлбикә, Гөлйәүһәр, Анфиса, Гөлсинә, Зарима, Рима, Фәйрүзә, Гөлбүләк, Тәүсинә, Светлана, Зәһинә, Фәнүзә.

***Ҡушаматтар***: Улар айырым бер кешенең холҡона ҡарап ҡушылған
*Жәпәй –* һәр кемгә лә яраған кеше
*Ҡуян –* ҡурҡаҡ кеше.

*Күркә* – маҡтанып йөргән.
*Төлкө* – хәйләкәр кеше.
*Айыу* – ауыр йөрөгән кеше.
*Сарыҡ* – аңғыра.
*Чикерткә* – бер урында ғына тора алмаған,түҙемһеҙ.
*Ата ҡаҙ* – муйынын һуҙып йөрөгән кеше.
*Ҡупырый* – маҡтансыҡ.
*Кутуз* – Кутузовҡа оҡшаған (бер күҙе йәрәһәтләнгән).
*Түмәр* – йыуан,тәпәш буйлы.
*Шүрәле* – оҙон тырнаҡлы.
*Мырый* – Мират исеменән килеп сыҡҡан.

**Пшәкә Тәчтил** – Тәмзил исемле малай күршеләренә кергән дә “Әни ҡоймаҡ пешәкә, таба биреп торогоз әле”, — дигән. “Пешерә” һүҙен әйтә белмәгәнгә күрә “Пшәкә” дигән һәм был һүҙ ҡушамат булып ҡалған.

**Сипай Миңлекәй** — ауылда Миңлекәевтар заты бар. Элек, аслыҡ заманында, Рәхимйән ҡарттың олатаһы урамға сығып, мыйығын һыйпап тора икән. “Бына, апағыз ҡоймаҡ пешерде, шуны майлаған ҡанат белән мыйығымны майладым, хәтәр килешеп ҡалды,” – тип һөйләнә-һөйләнә мыйыҡ остарын тәмләп кенә һыпыра, ти. Өйҙән уға уҡ эйәреп сыҡҡан кесе улы ҡапыл “Әтииии, ниндәй ҡоймаҡ? песи әллә ҡачан ул ҡанатны ашаған иде бит инде!!!!”, — тигән. Рәхимйән ҡарт үҙенең ас икәнен һиҙҙермәҫ өсөн шулай һөйләгән булған икән дә, тик килеп сыҡмаған.

Шунан башлап Сипай ҡушаматы тағылған, әле лә шулай тип халыҡ телендә уларға өндәшәләр.

**Жомға** — ике ағай эҫе көндө йылға буйына төшөп утырған. Бер өҙ кәйефләнеп алғас, һыу аҫтында кем оҙағыраҡ тора-шуны билдәләргә уйлағандар. Беренсеһе сисенеп һыуға һикергәнсе, имеш икенсеһе йоҡлап киткән, ти. Ярай әле яр буйынан көтөүсе үтеп барған, ул һыуҙа бата башлағанды ҡотҡарған. Бул хәл йома көндә булған икән. Иҫән ҡалған ағайҙы Жомға тип йөөрткәндәр.

**Ҡабачтыр Рәүфәт** – Рәүфәт исемле малай гел генә тайына “Ҡабачтыр бир әле”, – тип һорай торған була. “Ҡабачтыр”-кабарткыч, рус телендә “надувной шарик”.

**Фамилияға ҡарап әйтелгәндәре:** Исмагиловтар – Исмай, Камалтдиновтар – Камаш,Насртдиновтар – Насрый, Шәйхелмәрҙәновтар – Шәйхел һ.б.

*Айырым кешегә бирелгән ҡушаматтар (айырыу өсөн*): оҙон Фәрит, ҡыҫҡа Зәйтүнә, уҫал Әнүсә.

### Фонетик үҙенсәлектәр

1. Ҡайһы бер һүҙҙәр әҙәби телдәге **с** өнө урынына **т** тартынҡыһы менән башлана: *төчө-сөсө, тычкан-сыскан*

Һүҙ һәм ижек башында **й-ж** өндәренең сиратлашыуы:
Жәй - йәй
Жил – ел

Жылы- йылы

**2.** ***А*** өнө ныҡ иренләшкән, ***о***-ға яҡынайтып әйтелгән осраҡтар ҙа бар:
Киласы йылға – киләһе йылға (на следующий год).

**Морфологик үҙенсәлектәр**

1. Килеш ялғауҙары-эйәлек, төшөм килеш ялғауҙары **н** тартынҡыһы менән башлана: *балның, атның, ашны.*

2. Күплек төшөнсәһе **-н,-л** тартыҡтарынан башлана**:** *урманнар, китаплар, дәфтәрләр, ҡызлар, ҡарғалар, үләннәр.*

3. Алмаштар***:*** *син, без, алар, былар, тегеләр*.

4. Хайуан, ҡоштарҙы саҡырыу:

а) чеп-чеп, теп-теп — себеш,тауыҡтар саҡырыу;

б) бибиби, лиль-лиль,гәҙ-гәҙ — ҡаҙ бибиҙәрен саҡырыу;

в) бәрәбәрә,тәч-төч,тәч-төч — һарыҡ саҡырыу.

5. Иркәләү төшөнсәһе һөйләштә *-әччәйем,- әйем,-аччайым* ялғауҙыры ярҙамында яһала: *бәбекәччәйем, апҡаччайым, ускәнкәйем.*

Шулай итеп, боронғоһоҙ киләсәк булмай, тиҙәр. Үткән тарихыбыҙҙы, тамырҙарыбыҙҙы белеү киләсәк өсөн кәрәк.

**Ҡулланылған әҙәбиәт.**

1. Асфандияров. История сел и деревень Башкортостана.

2. Кейекбаев Ж.Ғ. Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыҫҡаса инеш // Ғилми яҙмалар.

3. Миржанова С.Ф. Северо-западный диалект башкирского языка. Уфа, 1991г.

4. Р.Шәкүр. Башҡорт диалектологияһы: Өфө, 2012.

**Информанттар:**

Даръялова Нәфисә Мөхәммәҙулла ҡыҙы, 65 йәш,хеҙмәт ветераны

Насртдинова Фаягөл Шәмсетдин ҡыҙы,62 йәш, хеҙмәт ветераны.

Назирова Фаягөл әбей, 78 йәш, пенсионер.

Шәмсемова Әнүсә әбей, 77 йәш.

**Фазлыева Диана Радик ҡыҙы**

Фәнни етәксеһе: **Мөфтиева Мәүлимә Саҙритдин ҡыҙы**

## ДҮРТӨЙЛӨ РАЙОНЫ ИҪКЕ БАЙЫШ АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

Минең тыуған ауылым — Дүртөйлө районы Иҫке Байыш ауылы. Беҙҙең ауылға 1739 йылда Башҡортостандың Бөрө өйәҙе Шәмшәде олоҫо Әкәнәй ауылынан Байыш Рәсмәкәев исемле башҡорт старшинаһы күсеп килеп нигеҙ һалған. Ауыл Йәүбәзе йылғаһы буйында Әүлиә тауы итәгендә урынлашҡан. Ауыл башта Байыш исеме менән йөрөгән. Һуңынан ауылдан Бөрө районы ерҙәренә күсеп ултырыусылар тарафынан яңы ауыл барлыҡҡа килгәс, беҙҙең

ауыл Иҫке Байыш тип йөрөтөлә башлаған. Бөгөнгө көндә ауылыбыҙҙа 442 башҡорт, 118 татар, 42 урыҫ, 10 мари, һәм 5 башҡа милләттән булған кешеләр дуҫ, татыу ғүмер итә. Ауыл 8 урамдан тора: Совет, Октябрь, Йәштәр, Спорт, Мәктәп, Баҡса һәм күптән түгел генә төҙөлә башлаған Ҡырым һәм Сочи урамдары. Элек был урамдар Аръяҡ, Түбәнос,Ҡарман төбәге, Мишәр осо тип кенә йөрөтөлгән. Ауылда урта мәктәп, балалар баҡсаһы, мәҙәниәт йорто, амбулатория, почта бүлексәһе, ҡарттар һәм инвалидтар өсөн йорт-интернат, дүрт магазин бар, “Россия” ауыл хужалығы тоҡомсолоҡ заводы эшләй. Күрше Гөлөк, Иҫке Уртай, Яңы Уртай, Илдус ауылдары беҙҙең ауыл биләмәһенә ҡарай. Уларҙан тыш Ляпустино исемле урыҫ ауылы ла булған. Ул 70-се йылдарҙа таралған.

Ырыуыбыҙ — иҙел ҡаңлы. Ишмәй, әрсәкәй, ҡолбат, ҡорман, ғүмәр нәҫелдәре йәшәй.

Ауылыбыҙ янындағы һәр тауҙың, һәр соҡорҙоң атамаһы бар һәм ул атамалар ниндәйҙер бер тарихи ваҡиға менән бәйләнгән.

Географик атамаларҙың килеп сығышын, ҡулланышын, мәғәнәһен **топонимика** фәне өйрәнә һәм тикшерә. Билдәле ғалимдәр Т.Г. Баишев, Ж.Ғ. Кейекбаев, А.А. Камалов, М.Ғ. Усманова, Р.З. Шәкүров, Ф.Ғ. Хисаметдинова һәм башҡалар оҙаҡ йылдар дауамында беҙҙең республикабыҙҙың топонимикаһын өйрәнеү менән шөғөлләнәләр.

**Микротопонимика** – топонимика фәненең айырым төбәк кешеләре өсөн генә билдәле булған атамалар йыйылмаһын өйрәнә торған бер бүлеге. Уларҙың барлыҡҡа килеүе бик йыраҡҡа, боронғо тарихҡа барып тоташа. Йылдар үтеү менән ҡайһы бер атамаларҙың баштағы исемдәре онотола, халыҡ яңы исемдәр ҡуша.

Мин кескәй саҡтан уҡ олатайым ауыҙынан баҫыу, соҡор, тау атамаларын ишетеп үҫтем. Уларҙың исемдәре серле һәм ҡыҙыҡлы булып тойола ине. Аталыу тарихы менән ҡыҙыҡһына башлағас, олатайыма һәм ауылыбыҙҙың аҡһаҡалы, ғүмере буйы хужалыҡта агроном булып эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан, Рауил бабайға мөрәжәғәт иттем, уларҙың һөйләгәндәрен яҙып алдым.

## Тау атамалары

**Әүлиә тауы.** Ауылыбыҙ янындағы иң бейек тау. 1935 йылда колхоздың идара йортон һалғанда тау башынан таш сығарғандар. Шунда бер метр самаһындағы иҫкесә яҙылған ҡәбер ташы һәм кеше һөйәктәре сыҡҡан. Ул ваҡытта ғәрәп телен яҡшы белеүселәр булған, ләкин яҙыуҙы уҡый алмағандар. Йә фарсый, йә боронғо болғар телендәлер, тип фаразлағандар.Һөйәктәрҙе сыҡҡан урынында күмеп, ҡәберлекте кәртәләп ҡуйғандар. Был изге кеше-әүлиә зыяраты булғандыр, тигәндәр. Оҙаҡ ваҡыт ямғырҙар булмай торһа, ҡатын-ҡыҙҙар әле лә тауға менеп теләк теләйҙәр һәм ниндәйҙер мөғжизә менән шул көндә үк ямғыр яуа.

**Исламғәле тауы.** Ауылдан йыраҡ түгел урынлашҡан бейек текә тау.Элек күп кенә кешенең сабынлығы шунда булған. Тауҙың бейеклеге утын-бесән алып ҡайтырға ҡыйынлыҡ тыуҙырған. Исләмғәле исемле кеше, әгәр ҙә ауылдаштары тауҙы киртләсләндереп, йөрөрлөк юл яһаһалар,ындыр

артына һалынған мәсетте урамға күсереп һаласағын әйткән. Тауҙы 1850 йылдарҙа өс бүлеккә бүлеп йөрөрлөк яһағандар..Шунан башлап уны Исламғәле исеме менән йөрөтә башлағандар. Исләмғәле олатай үҙ һүҙендә торған-мәсетте урамға күсереп һалған.

**Бүләктау.** Революцияға тиклем халыҡҡа сәсеүлек ер бүлгәндә тау башында бер бәләкәй генә ер ҡалған. Шуны, балаларының күплеген иҫәпкә алып, ауылдың мәзиненә бүләк итеп биргәндәр.

## Йылға, күлдәр, шишмәләр

**Йәүбәзе йылғаһы.**Районыбыҙҙың Урманаҫты ауылынан йыраҡ түгел башланып, Ағиҙел йылғаһына ҡоя.Элек уның ярҙары ҡуйы таллыҡ, ереклек менән ҡапланған булған. Тирә-яғы ҡош-ҡорт,бөжәк, ваҡ йәнлектәрҙән яу кеүек мыжғып торған. Шуға “Яу базаһы” – Йәүбәзе, тип аталып киткән. Ә Камалов А.А. һәм Шәкүров Р.З. һәм башҡалар редакциялығындағы “Башҡортостан республикаһының топонимдар һүҙлегендә” [2; 92-се бит] Йәүбәзе йәү – яу “сражение”, бәзе – баҙ “овраг, котловина” тип аңлатыла.

**Үрдәк күле.** Был күлде иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем өйрәктәр төйәк иткән. Улар бик күп булған. Хәҙер был күл дә юҡ һыуы кипкән. Ә урыны халыҡ телендә һаман Үрдәк күле булып йөрөй.

**Көрәккүл.** Күл формаһы менән көрәккә оҡшаған булған.

**Оло күл.** Күлдәр араһында иң ҙуры булғанға шулай атағандар.

**Мүкле күл.** Күл кибеп мүкләнеп бөткән. Бер ваҡыт кипкән мүккә ут та ҡаба. Тирә-яҡ ауылдарҙа йәшәүселәрҙең көсө менән һүндерелә.

**Йомро күл.** Бында етен сылатҡандар, киптереп килеләә төйгәндәр.

**Ташҡойо.** Йәүбәзе йылғаһының ситендә ҡойоға оҡшаған бер түңәрәк бар. Унан һыу урғылып ҡом-ташты аҡтарып сығара. Таш һәм ҡом ситкә китеп ултыра. Шуға был шишмәне Ташҡойо тип атағандар. Был урында һыу ҡышын да туңмай, йылға ситенән ағып ята.

**Хәмәй ҡойоһо.** Исламғәле тауы аҫтында ағып ятҡан. Ауыл халҡы шунан һыу эскән. Хәҙерге ваҡытта шишмә һыуы әҙәйгән. Ул йылғаға ла барып етмәй юғала.

**Шифалы шишмә.** Улаҡ буйлап көньяҡҡа табан аҡҡан. Бында тирә-яҡ ауылдарҙан да килеп һыуын эскәндәр, күҙҙәрен йыуғандар. Һыуы төрлө ауырыуҙарҙан дауалаған, күреү һәләтен яҡшыртҡан. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был шишмә лә юҡҡа сыҡҡан.

## Соҡорҙар

**Бүршиле соҡоро.** Бик тәрән, ҡара урман менән ҡапланған соҡор булған. Бында күпләп бүреләр йәшәгән. ”Бүре иле” һүҙенән килеп сыҡҡан. Хәҙерге ваҡытта соҡор янында бер ағас та ҡалмаған, бүреләр ҙә юҡ.

**Ҡарман соҡоро.** Ҡарама урманлы, урғылып аҡҡан шишмәле ҙур соҡорло ер булған. Колхоздың еләк-емеш баҡсаһы ла шунда булған. Ағас булмағанлыҡтан урманын киҫеп бөтөргәндәр. Шишмәһе әле лә ағып ята.

**Сатышлы.** Конакраттар(ат урлаусылар) ошо соҡорҙа урланған аттарҙы килтереп һатҡандар. Күрше Кушнаренко, Ҡараса-йылға ауылдарында тирә-яҡҡа билдәле ат ҡараҡтары булған.

**Тәкәрлек соҡоро.** Тәкәрлек (рус.чибис) исемле ҡоштар күпләп оя ҡорған.

Быларҙан башҡа кеше исемдәре менән аталған **Хәсән, Әйүп, Ғәбделәхәт, Шәйбәк, Муса, Хәким соҡорҙары** бар. **Хәким соҡоронда** ҡуйы ағаслыҡ булған. Шунда ҡасҡылар ҙа йәшеренеп ятҡан.

## Ялан, болон атамалары

**Биштирәк болоно.** Ҙур 5 тирәк ағасы үҫеп ултырған.

**Кесе ялан, оло ялан** — бәләкәйлеге-ҙурлығына ҡарап бирелгән атамалар.

**Ҡормой болоно** – Ҡормой исемле кешенең бесәнлеге булған.

**Ҡомсиле** – яҙ көнө Иҙел һыуы ташҡанда ҡом кереп ҡала торған болон.

**Үлиҙел** – Ағиҙел йылғаһынан 200 метрлап ятҡан ер.Элек йылға шунан аҡҡан булған.”Үле Иҙел” һүҙенән алынған.

Нараттар (ҡарағайҙар) утрау булып үҫкән яланды – **Нарат атауы,** ҡайын урманы үҫкәнен – **Ҡайын атауы** (утрауы) тип атағандар.

**Тоба** (йылға, күл һәм башҡа һыулыҡтарҙа тәрән урын, упҡын, соңғол) Ағиҙел йылғаһының үҙәнендә урынлашҡан. Ундағы үтеп сыға алмаҫлыҡ әрәмәлектәр тиҫтәләрсә саҡрымға һуҙылған. Тау битендә сәтләүек, имән, ҡайын, тирәк, йүкә, муйыл ағастары үҫә, ҡара бөрлөгән күп. Был ерҙәр ауыл халҡын күп йылдар утын менән тәэмин иткән. Йәйҙәрен бесән сапҡандар, еләк йыйғандар.

**Табр.** Бөгөнгө көндә муйыл,ҡура еләге, ҡара бөрлөгән,ер еләгенә бай булған бик үк ҙур булмаған әрәмәлек. 1934 йылдарҙа бында колхоздың йәйге лагеры төҙөлгән. Исеме бәлки “Сиған табор”ынан килеп сыҡҡандыр, сөнки бында сәсеү башланғандан алып урып-йыйыу эштәре бөткәнсе эшсе халыҡ ауылдан күсеп килеп йәшәгән. Идара йорто, клуб, спорт майҙансығы, иген складтары,ҡарауыл йорто булған. Радио ла үткәрелгән,үҙҙәренең ҡойоһо, икмәк бешерә торған будкалары ла булған. Һуғыш башланғас таралған.

## Анкета нәтижәләре

Мине беҙҙең мәктәп уҡыусыларының үҙебеҙ йәшәгән төбәктең ер-һыу атамаларын күпме дәрәжәлә белеүҙәре лә ҡыҙыҡһындырҙы. Мин һораулыҡ менән уларға мөрәжәғәт иттем. Башланғыс кластарҙағы 35 уҡыусының 12 һе Әүлиә тауын, 18 е Йәүбәзе йылғаһын, 1уҡыусы Кәшүән соҡорон атаны. Ә ни өсөн йылға-тауҙарға шундай атама бирелеүен аңлата алманылар. 5-9 кластарҙағы 33 уҡыусының барыһы ла Әүлиә тауын һәм Йәүбәзе йылғаһын атанылар, 10 уҡыусы Әүлиә тауының тарихын белә. Шулай уҡ уҡыусылар араһынан 6 кеше Ҡарман соҡорон, 15 кеше Табрҙы белә, әммә аталыу тарихын белмәйҙәр. 10-11 кластарҙағы 9 уҡыусының бөтәһе лә Әүлиә тауы менән Йәүбәзе йылғаһын атанылар, бишеһе Ҡарман соҡорон, етеһе Табрҙы белә. Әммә ер-һыу атамаларының килеп сығышы менән уларҙың да ҡыҙыҡһынмағанлығы күренә.

Тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, беҙҙең ауылдың топонимикаһы төрлө хәл-ваҡиғаларға нигеҙләнеп бирелгән. Уларҙың күбеһе кеше исемдәре менән

бәйле: *Исламғәле тауы, Әүлиә тауы, Ҡормой болоно, Хәмәй ҡойоһо, Хәсән, Әйүп, Ғәбделәхәт, Шәйбәк, Муса, Хәким соҡорҙары.*

Хайуан, ҡош-ҡорт атамаларына нигеҙләнгәндәре: *Үрдәк күле, Бүршиле, Тәкәрлек соҡорҙары. Үҫемлектәр менән бәйле атамалар: Нарат атауы, Ҡайын атауы, Имәнлекүл, Биштирәк болоно. Сағыштырыу аша исемләнгәндәре:Кесе ялан, Оло ялан, Оло күл. Оҡшатыу аша:Көрәккүл, Йомро күл, Үлиҙел болоно, Йәүбәзе йылғаһы, Табр, Ташҡойо.Ниндәйҙер ваҡиғаға бәйле атамалар: Буләктау, Сатышлы соҡоро.*

Мин артабан да тыуған ауылымдың, районымдың топонимикаһын өйрәнеүҙе дауам итәсәкмен. Сөнки был бик ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс, шул уҡ ваҡытта файҙалы ла шөғөл. Минең был эшем үҙебеҙҙең мәктәп уҡыусыларында ла ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыр һәм улар ҙа ер-һыуыбыҙҙың тарихына иғтибар итер, уға һаҡсылыраҡ ҡарай башлар, тип уйлайым.

**Информанттар**

1. Сатиҡов Рауил Зәки улы, 88 йәш, хаҡлы ялда.
2. Фазлыев Ревнер Ғилем улы, 60 йәш, хаҡлы ялда.
3. Ханнанова Әлфирә Ғаяз ҡыҙы, 55 йәш, тарих уҡытыусыһы.

**Файҙаланылған әҙәбиәт**

1. Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана. – Уфа: Китап, 1995.
2. Камалов А.А., Шәкүров Р.З. Башҡортостан Республикаһының топонимдар һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2002.
3. Тимерханов И.Х. “Юлдаш” газетаһы, №101, 2007 .

**Фазылханов Радим Валериевич**
Фәнни етәксеһе: **Кабиров Раиль Рамилевич**

## БАШҠОРТОСТАНЫМДЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ ТАРИХЫ

Бөрйән районың иң бейек тауы – Мәсем тауы. Был тау Бөрйән районының уртаһында урынлашҡан. Башҡорт халыҡ эпостарында телгә алынған, 1040 метрға түбәһе күкккә ашҡан Мәсем тауы – Урал тауҙарының иң – иң көньяҡтағы бер саҡрымлыҡ бейеклеге. Ул яланғас “Ҡыҙҙар ташы” менән ослана.

Күренекле этнограф Сергей Рыбаков был тау тураһында 1897 йылда сыҡҡан китабында ла түбәндәгеләрҙе яҙып ҡалдырған: “В ожидании приезда песенников мы предприняли поездку на самую вершину Масима, которую составлял четырёхгранный, довольно высокий и несколько сжатый камень. Сверху камня – выше которого уже не виднелось ни одной точки в пространстве – раскрылся величественный и широчайший вид: на беспредельное пространство, во все стороны тянулись и пересекались хребты, один другого выше, как молчаливые и угрюмые гиганты, покрытые,

точно мелкой травою, лесами, усеянными долинами и полянами, точно маленькими лужайками, на которых едва заметными чёрными точками виднелись башкирские деревни…” (“Аманат “журналынан).

### Сыңғырлауыҡ мәмерйәһе

Бөрйән районының Кейекбай ауылы янында урынлашҡан был мөғжизәне Башҡортостанда оҙонлоғо буйынса дүртенсе мәмерйә тип һанайҙар. Әммә уның сере оҙонлоғонда түгел. Ағиҙел йылғаһының бик бейек ярында, тип-тигеҙ ерҙә ул кеше һыйырлыҡ ҡына тишек булып күренеп ята, дөрөҫөрәге – яҡын уҡ килеп етмәйенсә, күренмәй ҙә. Шунан аҫҡа табан 90 метрлыҡ упҡын – ҡоҙоҡ төшөп китә. Эскә ташланған таш бик оҙаҡ ҡаҡлыға-һуғыла төшкәнен ишетергә мөмөкин: тап шул сәбәпле мәмерйә Сыңғырлауыҡ тигән исем алған. Туристар уны “Пропащая яма” тип йөрөтә, спелеологтар белешмәләренә ул шул исем менән кергән. Ерҙән 78 метр тәрәнлектәбыл шахтанан ҡабырғаға ҡарай тикшерелгән оҙонлоҡтары 4 саҡырымдан ашҡан горизонталь юлдар китә. Был мәмерйәнең икенсе тишеге лә бар, ул сыҡҡан урын “Айыу ҡоҙоғо” — “Медвежий колодец” исемен йөрөтә.

Шүлгән мәмерйәһенән йыраҡ булмау сәбәпле, Сыңғырлауыҡта туристар күп була. Тик ул тиклем тәрәнлеккә төшөү өсөн махсус әҙерлек талап ителгәнгә күрә, бында тик оҫта спелеологтар ғына килә, улар девон ҡатламында һыу яһаған юлдарҙың мөғжизәләренә һоҡланып,әллә нисә көндәр дауамында түбәндә, ер ҡуйынында йәшәп яталар.Ҡыш көндәре йөрөүе уңайлыраҡ һанала (“Аманат “журналынан).

### Елмерҙәк һырт

Елмерҙәк һырты Белорет районында көньяҡта Егәҙе йылғаһының Еҙемгә ҡойған еренән алып, төньяҡта инйәр йылғаһына тиклем 70 сыҡырымға һуҙыла. Уның көнсығыш яғынан Оло Инйәр йылғаһы ,көнбайышынан Еҙем йылғаһы аға. Иң бейек түбәһе 909 метр.

Елмерҙәк аша Өфө — Белорет машина юлы артыла. Шоферҙар телендә “Ҡәйнә теле” тигән исем алған серпантин, бигерәк тә ҡыш көндәре, барлыҡ юлсыларҙың бәләһенә әйләнә. Елмерҙәктең көньяҡ үренән армыт-армыт Урал тауҙарына хозур күренештәр асыла. Иң башындағы таш карьерында барлыҡҡа килгән яһалма күлдә хатта балыҡ үрсегән (“Аманат “журналынан).

### Уралтау

Уралтау-Көньяҡ Уралдың иң төп һәм иң оҙон һыу бүлгес һырты булып ята. Ул Башҡортостандың Баймаҡ районынан алып, Бөрйән, Әбйәлил, Белорет, Учалы райондары аша һуҙылып, Силәбе өлкәһенә сығып китә. Дөйөм оҙонлоғо 290 саҡрымға һуҙылған был һырттың көнсығышына аҡҡан һыуҙар Яйыҡ йылғаһы бассейнына ҡарай, ә көнбайыш итәгенән аҡҡандары Ағиҙел йылғаһын туйындыра. Уралтауҙың иң юғары нөктәһе — Әрүәкрәз тауы (1068 м) Белорет районының Рысыҡай ауылы эргәһендә урынлашҡан (“Аманат “журналынан.)

## Бөрйән районының Мәһәҙей ауылы эргәһендәге Оролоҡарағай яланы

Был ерҙәрҙә элек ҡарағайлыҡ урманы булған. Ағастарында ҡош-ҡорттар һайраған, бала сығарған. Урман хужалары – айыуҙар йөрөгән, төлкө, ҡуян, терпе һәм башҡа бик күп урман йәнлектәре йәшәгән. Әкренләп һомғол ҡарағайҙарҙы ҡырҡып бөткәндәр. Йәнлектәре, ҡоштары ла икенсе ерҙәрҙе төбәк итеп ташлап киткәндәр.Тик, нисектер, бер нисә ағас араһында ороһо булған мөһабәт ҡарағай ултырып ҡалған. Шуғалыр инде был ялан Оролоҡарағай исеме менән йөрөтөлә башлаған.

1991 йылдың июнендә 1918 йылғы Сәйәхова Хәйривафа Әҡсән ҡыҙынан Сәйәхова Сәйҙә Ғәбдинур ҡыҙы яҙып алған.

2017 йылдың 11 мартында 1967 йылғы Сәйәхова Сәйҙә Ғәбдинур ҡыҙынан һорашып яҙып алынды.

## Бөрйән районының Мәһәҙей ауылы эргәһендәге ҡараңғы Ҡарагисеү буйы

Ырыуҙың ике һунарсыһы һунарҙа бик оҙаҡ йөрөп, арып-талып ял итергә туҡтағандар. Әҙерәк хәл алғас, етмәһә уңышлы һунарҙан һуң, күңелдәре күтәрелеп, тағы ла бер аҙ йөрөп әйләнмәксе булалар һәм табыштарын йөкмәп йөрөгәнсе, ҡалдырып торорға булалар. Үҙҙәре көнбайышҡараҡ юл тота. Үҙәк ярайһы уҡ һуҙымлы ике яҡлап бейек-бейек тауҙар теҙмәһе китә. Урман ҡуйы, шырлыҡ, Мәмбәтһыпы йылғаһының Бешәкег йылғаһына етәрәк бер кисеүе аша икенсе яҡҡа сығалар һәматылған бер төлкө ятҡанын күрәләр.

– Бына, бирәм тигән ҡолона, сығарып һалыр юлына тигән һымаҡ, анһат табыш, әйҙә алайыҡ, — ти, араларынан береһе.

– Юҡ, теймәйек, беҙҙең һымаҡ берәй һунарсы ҡалдырып торғандыр, – тип ары китәләр, бире китәләр, үҙҙәре бая ҡалдырып киткән табышты таба алмай, ти, былар.

Әлеге төлкө ятҡан тирәләге кисеүгә тағы киләләр ҙә был яғына сыҡһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр. Бая үҙҙәре ял итеп, нәмәләрен йыйып киткән урын икән, теге төлкөләрен бүре-фәләнме, башҡа ҡош-ҡортмо, урынынан шылдырып өлгөргән икән.

Төнгә ҡалып ҡайта һунарсылар. Ҡайтҡас:

— Ҡара ғына кисеү булды бит, ҡараңғыға ҡалдырҙы, — тип һөйләгән береһе. Шул мәлдән был кисеү Ҡарагисеү атамаһы менән йөрөй.

## Информанттар:

1991 йылдың июнендә 1918 йылғы Сәйәхова Хәйривафа Әҡсән ҡыҙынан Сәйәхова Сәйҙә Ғәбдинур ҡыҙы яҙып алған.

2017 йылдың 11 мартында 1967 йылғы Сәйәхова Сәйҙә Ғәбдинур ҡыҙынан һорашып яҙып алынды.

**Цупикова Ангелина Федор ҡыҙы**
Фәнни етәксеһе**: Нуриева Эльза Марат ҡыҙы**

# ЙӨҘ ЙЫЛЫҠҠА — ЙӨҘ БЕСӘНЛЕК

Күп кенә ауылдарға һәм улар тирәһендәге ҡыр – баҫыу, йылға – инеш, күл – соҡор, тау, урман, юл – һуҡмаҡ, бесәнлек һ.б. ерле физик–географик объекттарға әүәл замандарҙа уҡ исем бирелгән. Ауыл исемдәре, барлыҡ төр ерле географик атамалар кеүек, халыҡ һәм тел тарихы, география, тәбиғәт һәм башҡа фәндәр өсөн ғаят мөһим фәнни мәғлүмәттәр хәбәр итәләр.

Мәҫәлән, районыбыҙҙың тирә-яғы киң яландарға бай. Улар халыҡҡа бесәнлек булып хеҙмәт итә. Бесәнлек һүҙе, беҙ йәш быуынға бер нимәлә әйтмәй, сөнки беҙ бесән эшләмәйбеҙ. Ә бына өләсәйемә, бесәнлектәр тураһында һорау биргән инем, дәртләнеп һөйләп алып китте.

"Йәйге матур көндәрҙә, бигерәк тә иртә менән ысыҡ төшкәс, ҡолас йәйеп бесән сабыуҙары — күңелле бер мәл ине. Ә икенсе яҡтан бик мәшәҡәтле, тынғыһыҙ осор. Мин үҙем иһә бесән өҫтөн бала саҡтан уҡ түҙемһеҙлек менән көттөм.

Аттарға, күберәге йөк машиналарына ултырып, колхоз бесәнен әҙерләргә бара инек. Ауылдың ике бригадаһынан ике-өс йөк машинаһында бесәнселәрҙе яланға илтеп ҡуя торғайнылар. 8 — 12 километр араны барғанда ла, ҡайтҡанда ла йырлап ҡайтабыҙ. Ә төшкө ашҡа туҡтағанда, малайҙар сабыша-сабыша аттарҙы һыу эсерергә алып барҙы. Урман буйҙарын, үлән ҡалын үҫкән бесәнлектәр сабыу ҡул көсө менән башҡарылды. Өмәләр ойоштороу, ҡаҙандар аҫып ит бешереү, үлән сәйҙәре менән һыйланыу — былар бөтәһе лә күңелле бер байрам шауҡымы кеүек иҫтә ҡалған. Халыҡ башта бесәнде колхоз өсөн, һуңынан үҙҙәренә әҙерләй ине. Хәҙер инде былар бөтәһе лә төш кеүек кенә. Нимә эшләйһең, донъялар үҙгәреп китте шул. Заман башҡа, заң башҡа, тиҙәрме әле? Былтыр Тау һыртында бесән шул тиклем үҫкән, ә сабыусы бер кеше юҡ. Йөрәгем әрнеп ҡайтты", — тип өләсәйем һүҙен бүлде.

Учалы районында малсылыҡ алғы рәттә килгән, шуға ла бесәнлектәр ҙә бик күп булған. Әлеге ваҡытта малсылыҡ менән шөғөлләнеүселәр һаны аҙ. Шуға ла бесәнлектәр ҙә бөтөү өҫтөндә. Учалының төньяғында бесәнлек тип әйтһәләр, көньяғында сабынлыҡ тип йөрөтәләр.

## Микротопонимдар

Бесәнлектәр микротопонимдар рәтенә инә. *Микротопонимдар* (микро грекса — «бәләкәй») — ҙур булмаған географик объект йә сағыштырмаса аҙ кешеләр даирәһенә (мәҫәлән, бер ауыл йәки бер нисә ҡасаба халҡына) билдәле булған атамалар. Микротопонимдарға көтөүлек, сәсеүлек, һыулау, төбәк, соҡор-саҡыр, шишмә, ҡойо , бесәнлек һәм башка микрообъекттарҙың исемдәре инә.

**Бесәнлектәр (сабынлыҡтар) атамаһы**

| | Бесәнлек (сабынлыҡ) исемдәре | Урынлашҡан ауылы |
|---|---|---|
| | Кәжән | Кәрим ауылының бесәнлектәре |
| | Асы | |
| | Һайыҫҡан | |
| | Күмәс бите | |
| | Яңы тау арты | |
| | Ҡараһыу | |
| | Увалы | |
| | Ҡырҡынды | |
| | Буранбай | |
| 0 | Үмәр | |
| 1 | Совхоз балаганы | |
| 2 | Әсәй | |
| | | |
| 3 | Ирәндек | Ильинка ауылында |
| 4 | Ҡуралы | |
| | | |
| 5 | Юламан | Сәфәр ауылы |
| 6 | Кесәгер | |
| 7 | Теркәле | |
| 8 | Остотау | |
| 9 | Баҡты | |
| 0 | Муртыҡты | |
| 1 | Кирбейә | |
| 2 | Ҡарағужа | |
| 3 | Фантанка | |
| | Умарта | |

| | | |
|---|---|---|
| 4 | | |
| | | |
| 5 | Йәшелтүбә | Аҡҡужа |
| 6 | Үлектәр | |
| 7 | Аҡтүбә | |
| | | |
| 8 | Йәлембәк | Һөләймән ауылы |
| 9 | Әбләй | |
| 0 | Туғайһаҙ | |
| 1 | Ҡаҡсырҙы | |
| 2 | Оҙонҡыр | |
| 3 | Мулла игене | |
| 4 | Петровский бесәнлеге | |
| 5 | Зеленский бесәнлеге | |
| | | |
| 6 | Шәгәр | Ҡотой, Ҡолош һәм Ураҙ ауылдары араһындағы сабынлыҡтар. |
| 7 | Ялтырҡойроҡ | |
| 8 | Аҡбалсыҡ | |
| 9 | Үгеҙһуйған | |
| 0 | Бәрәнбаш | |
| 1 | Аншаҡ | |
| 2 | Аҙнаҡай | |
| 3 | Кейәү йылға | |
| 4 | Һөрөнһаҙ | |

| | | |
|---|---|---|
| 5 | Талдыүҙәк | |
| 6 | Байышморон | |
| 7 | Тимерһуҡҡан | |
| 8 | Ҡушташ | |
| 9 | Сәкәнә | |
| 0 | Аҡташ | |
| 1 | Тәпелембил | |
| 2 | Ураҙ ҡалҡыулығы | |
| 3 | Ҡырҡтояҡ | |
| 4 | Сөрәгәй | |
| | | |
| 5 | Айғыр дуғайы | Ҡужай |
| 6 | Аҡйылға | |
| 7 | Арҡырыйылға | |
| | | |
| 8 | Анденский (Лоҡман, Сәғит, Шәшәрип) | Әүешкүл -Балбыҡ-Ялсығол ауылдары тирәһендәге бесәнлектәр |
| | | |
| 9 | Артмасыҡ | |
| 0 | Боланбикәташ | |
| 1 | Мухавай | |
| 2 | Йыланлы | |
| 3 | Ахун сабыны | |
| 4 | Юлай | |
| | Әғелә | |

| | | |
|---|---|---|
| 5 | | |
| 6 | РАПКОБ | |
| 7 | Йәмил төбө | |
| 8 | Ямаҙы | |
| 9 | Яҙғыйорт | |
| 0 | Сафа | |
| 1 | Әсән ташы | |
| 2 | Мөтөш | |
| 3 | Ләүәнтәй | |
| 4 | Сыстымаҫты | |
| 5 | Әүеш һаҙы | |
| 6 | Янүҙәк | |
| 7 | Ҡараташ | |
| 8 | Мәсет ташы | |
| 9 | Андрей Ивановский | |
| Көл, ҡыҙыл таш, | | |
| | | |
| 0 | Кирәбе сабынлығы | Кирәбе ауылы |
| 1 | Шимешкә | |
| 2 | Алмағас | |
| 3 | Дәим | |
| 4 | Юхабай | |
| 5 | Ерек буйы | |
| | Ағуна | |

| | | |
|---|---|---|
| 6 | | |
| | | |
| 7 | Иҫке йорт | Мәҫкәү ауылы тирәһендәге |
| 8 | Кирәү | |
| 9 | Аратүбә | |
| 0 | Бил аҫты | |
| 1 | Суҫаҡ аҫты | |
| 2 | Боғасты | |
| 3 | Арҡа | |
| 4 | Мөкөш | |
| 5 | Түңәрәккүл | |
| 6 | Дельфит | |
| 7 | Ҡараташ | |
| 8 | Яңғыҙ ҡайын | |
| 9 | Әнүәр күпере | Рысай ауылы |
| 00 | Һәптән | |

**Боланбикәташ**

Әүешкүл ауылында. Бер көндө Боланбикә тигән ҡатын үҙе генә бесәнгә китә. Бесәнде йыйып йөрөгәндә ул бүре күреп ҡала һәм бер бейек ташҡа менеп ултыра.Таңға тклем ултыра. Шунан исеме был бесәнлектең.

**Аҡсыра-** кеше исеменән алынған бесәнлек.

**Анденский**

Бер урыҫ кешеһе һатып ала. Хәҙер был ялан кире башҡорт исеменә ҡайтып өс исем менән йөрөтөлә: Лоҡман, Сәғит, Шәшәрип.

**Күмәс бите**

Тауы күмәс кеүек ҙур, түңәрәк. Шуға ла тауын күмәс тигәндәр, бесәнлеген Күмәс бите тип әйткәндәр.

**Фантанка**

Скважина бурить иткән ваҡытта ер аҫтынан урғылып фантан кеүек һыу сыҡҡан. Унан йылға ағып киткән, янындағы бесәнлекте фантан һүҙенән алғандар.

**Кесәгер**

Бәләкәй генә йылға. Шуға ҡарамаҫтан бәләкәй генә күпере бар. Исеме бәләкәй йылға булыуынан алынған.

**Остотау**

Бик осто тау. Шул исемдән килеп сыҡҡан был бесәнлек.

**Кирбейә**

Бер байҙың аттары күп булған. Бер көнө яңы ат алып, егеп йөрөтөргә өйрәтергә ҡушҡан. Был бейә ҡаршы төшкән. Киреләнгән. Кеше ҡулына төшмәгән. Көнө буйы был бейәне ыҙалатҡандар. Шунда ул үлгән шул көндө. Шуға Кирбейә тип атағандар.

**Ҡуралы**

Был тау башында бик күп ҡурай үләне үҫеп ултыра, шуға ла ошо исем менән әйткәндәр.

**Социаль тикшереү**

Ошо эш менән булғанда таныштарҙан һорау алдым. Кем бесәнлек, сабынлыҡ исемдәрен беләә тип. 30 кешенән 8 кеше генә яуап бирә алды. Был беҙҙең ер атамаларына иғтибар бөтөүен, юғалыуын әйтә түгелме.

Һәр бер географик атама — ул бик ҙур байлыҡ. Шуның өсөн дә булған атамаларҙы беҙ юғалтмайынса ҙып алырға тейешбеҙ. Топонимия мираҫыбыҙҙы өйрәнәйек, тикшерәйек, ҡәҙерләп һаҡлайыҡ! Был эшемде яҙғанда,мин тормошобоҙҙоң торошо үҙгәреүен, кеше күпләп ҡалаларға күсеп, бесәнлектәрҙең юҡҡа сығыуын күҙәттем. Ләкин ололар әйтеүенсә, Уральск тирәһендә был күренеш кире яҡҡа үҙгәрә башлаған. Йәғни йәштәр яйлап ауылға ҡайтып мал тотоуҙары йышайған, был бесәнлектәр таҙартылып, һаҡланып ҡалыуҙары тураһында әйтә түгелме икән.

**Ҡулланылған материал:**


1. Р.А. Фатҡуллин "Край мой, Учалинский". Учалы "Панорама", 32-се бит.

2. Р. Шәһиев "Алтын бишегем – Учалы": — Өфө: Китап, 2003.

3. Әхтәмов Ғәзизйән Миржанович, 1948 йылда Сәфәр ауылында тыуған.

4. Лоҡманова Фатима Ғиззәтовна, 1938 йылда Балбыҡ ауылында тыуған.

**Шаһивәлиев Рәмис Йәмил улы**
Фәнни етәксеһе: **Сибәғәтуллина Миңзәлә Зәйнулла ҡыҙы**

# ӘБЙӘЛИЛ РАЙОНЫ ИШКИЛДЕ АУЫЛЫНЫҢ ҺӨЙЛӘШЕ ҺӘМ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

## Ишкилде ауылы

Ишкилде ауылы Әбйәлил районының көньяғында урынлашҡан. Күрше ауылдар: Һәйетҡол, Үтәгән, Буранғол, Амангилде. Русса рәсми исеме – Ишкильдино. Ауыл Ҡолама һәм Бәләкәй тау буйында урынлашҡан. Ауылдан Сума, Көрәк, Ҡыҙыл йылғалары аға.

Беҙҙең ауыл бер сығанаҡ буйынса 1795 йылдарҙа килеп сыҡҡан, ә икенсе сығанаҡ буйынса 1830 йылдарҙа барлыҡҡа килгән тигән ҡараш йәшәй. Беҙҙең ауылға Юлдаш тигән ауылдан айырылып күсеп сыҡҡан Ишкилде исемле ҡарт нигеҙ һалған. Уның фамилияһы - Юнаев булған. Ғаиләһенең ҙурайып китеүе Юлдаштан күсеүгә төп сәбәпсе булып торған тип иҫәпләнә. Улы Ялмырҙа, уның улы Халмырҙа исемле булған. Шулай итеп, беҙҙең ауыл ҙурайып, таралып китә. Быны ауылымдың шәжәрәһенән дә күрергә була. Ауылдың күпселек өлөшөндә Шаһивәлиевтар йәшәй, йәғни 60 йорттоң 18 улар тәшкил итә. Хисмәтуллиндар, Хәкимовтар, Усмановтар тағы ла Вәлиәхмәтовтар бар. Был фамилиялар барыһы ла Ишкилде ҡарттың улдарының исеменән килеп сыҡҡан. Шағәле Шаҡман тоҡомо тип һаналабыҙ. Ырыуыбыҙ — Тамъян.

Ауылда элек дүрт ара булған: ҡыпсаҡ-тамъян, көлисә, ҡарасман, ҡарабалтыр. Ҡыпсаҡ-тамъян һәм ҡарабалтыр аралары кешеләре ваҡыт үтеү менән беҙҙең ауылдан күсеп киткәндәр. Хәҙерге көндә был араның вәкилдәре Ишкилделә юҡ. Беҙҙең ауыл шартлы рәүештә икегә бүленгән, бер ос кешеләре көлисә араһына, икенсе осо — *ҡарасман*. Көлисә араһына Шаһивәлиевтар, Вәлиевтар инһә, ҡарасман араһына Йәнбирҙиндар, Зариповтар ҡарай.

Ишкилде ҡарттын Теүәлтәй тигән тағы ла бер улы була. Ул башлап йәшәгән ерҙе Теүәлтәй тиҙәр. Ул ер ауыл булып ҙурайып китә алмаған.

Ишкилде ауылында, әйтеп үтеүебеҙсә, 60-лап йорт, ауыл халҡы һаны яҡынса өс йөҙ кеше, тик башҡорттар ғына йәшәй. Салауат Юлаев урамын ауыл кешеләре үр яҡ тип, Зәки Вәлиди урамын аръяҡ тип йөрөтәләр. Тағы ла Еңеүгә 65 йыл, Таһир Күсимов урамдары бар.

Ауылымдың тәбиғәте иҫ киткес матур. Уны тирә-яғынан төрлө бейек-бейек тауҙар уратып алған, тау биттәрендә ҡуйы-ҡара урмандар урынлашҡан, ауылым тирәләй һәм ауылымды уртаға бүлеп йылға ағып ята, торғаны менән сәхрә инде! Бәлки, шуғалыр ҙа Ишкилде халҡы тәбиғәт йәнле. Улар элек-электән күсмә тормош алып барған. Йәйләгән урындары Соҡор Йорт һәм Ҡырын йорт булған. *Соҡор* Йорт тип тауҙар араһындағы соҡорҙа урынлашҡаны өсөн әйткәндәр, ә ҡырын тау битендә булғанға, икенсе йәйләүҙе Ҡырын Йорт тип атағандар. Беҙҙең ауыл халҡы күсмә тормош алып барыуҙан 30 йыл тирәһе элек кенә туҡтаған.

Халыҡ телендә ауылдың икенсе исеме лә йәшәп килә — *Көрәк*. Ни өсөн тигәндә, ауылым эргәһендә Көрәк исемле мул һыулы, ҙур йылға аға. Ошо йылғаның исеме менән ҡайһы ваҡыт ауылды ла атайҙар.




Ауылыбыҙҙа ир-аттар араһында Рәил, Илнур, Рәмис, Ришат, Рифат исемдәре киң таралған. Гүзәлиә, Гөлсинә, Гөлсиә, Альбина, Алһыу кеүек исемдәр ҡатын-ҡыҙҙар араһында йыш осрай.  Был исемдәрҙең мәғәнәһен беҙ Т. Күсимова, С. Биҡколованың “Башҡорт исемдәре” тигән китабы ярҙамында асыҡланыҡ: Рәил — нигеҙ һалыусы; Илнур — илгә нур сәсеүсе, яҡтылыҡ; Рәмис — ғәрәп теленән билдә, тамға, үрнәк; Ришат — тура юлдан барыусы, зирәк, аҡыллы; Рифат — юғарыға олғашыу, күтәрелеү; Гүзәлиә — гүзәл, матур, һылыу, Гөлсинә —– гөл йыйыусы, Алһыу — алһыу йөҙлө тигәнде аңлата.

Һәр ауылдағы кеүек минең ауылымда ла төрлө ҡыҙыҡ ҡушаматтар йөрөткән кешеләр бар.Бер нисәүһенә туҡталып киткем килә. Мәҫәлән:

*сума морягы* — армияла хеҙмәт итмәгән. Үҙе Сума йылғаһы буйында йәшәй, шуға күрә лә уны шаяртып Сума морягы тип йөрөтәләр;

*кукарач* — бер киноны ҡарап, үҙе шундағы актер булып ҡыланып йөрөгән кеше;

тулай — Юлай исемлеләрҙе тулай тип йөрөтәләр һ.б.

## Минең шәжәрәм




**Әбйәлил районы Ишкилде ауылының ер-һыу атамалары**

**Сума йылғаһы**

Ауылым тирә-яғынан урман тауҙар уратып алған. Тәбиғәт бик матур. Ауылды икегә бүлеп Сума йылғаһы аға (өҫкө фотоһүрәттә күрергә мөмкин). Элек ул йылға буйы һаҙлыҡ булған, кешеләр бата-сума йөрөгән. Шунан бирле уның исеме Сума булып калған. Хәҙер ҙә был йылға һай ғына, унда һыу инеп булмай, әммә балыҡ тоторға мөмкин.



## Торна ташы

Ауылымдан йыраҡ түгел бейек ҡаялы тау бар. Уны Торна ташы тип йөрөтәләр. Йыл һайын торналар йылы яҡтан шул тау буйындағы йылға янына ҡайталар. Шуның өсөн дә уны Торна ташы тип йөрөтәләр. Был тау бик бейек. Уға менеүе еңел түгел.Түбәндәге фото Торна ташынан төшөрөлгән.

## Бүре кисеүе

Ауыл эргәһендә ҙур булмаған кисеү бар. Шул кисеү эргәһендә кешеләр йыш ҡына бүреләр осраҡкан. Бүреләрҙән күп мал зыян күргән. Шул кисеү аша бер яҡ ярҙан икенсе яҡ ярға сығып йөрөгәндәр был хайуандар.Шуға күрә бүре кисеүе тип атала. Хәҙер ҙә унда ҡыш көнө бүреләр осрауы мөмкин.

## Ҡолама тауы

Ауылыбыҙҙы бейек тауҙар уратып алған, ә шуларҙың иң яҡыны – Ҡолама тауы. Фотоһүрәткә ҡараһаң, ауылыбыҙҙың уға һыйынып ҡына ултырғанын күрергә мөмкин. Ҡолама тауына менһәң, ҡолап төшөрлөк, текә. Шуға күрә лә, халыҡ “ҡолап ҡитмә” тигән мәғәнәлә шундай исем биргән, йәнәһе: “ул тауға менһәң, иплəп, ҡолама!” тигәнде аңлата.



**Ҡаншал тауы**

Ауылыбыҙ эргәһендә тағы ла бер бейек матур тау бар. Ул Ҡаншал тауы. Ни өсөн шундай исем бирелгән һуң уға? Легенда буйынса борон, тап ошо тау тирәһендә һуғыштар булған, һәм үлгән кешеләрһең ҡаны ошо тауҙа шал (буяу, краска) кеүек ағып ятҡан. Шуға күрә лә был тау хәҙер ошо исемде йөрөтә.

**Тирмән тауы**

Был тау бик бейек түгел, ауылдың эргәһендә генә урынлашҡан. Тауҙың төньяҡ битендә ҡарағай, ҡарағас, ҡайын ағастары үҫеп ултыра. Элек тәүге күсеп килгән халыҡтың бәләкәй генә тирмәне шул тауҙа урынлашҡан булған. Шуның өсөн дә был тау Тирмән тауы тип йөрөтөлә.

**Ауылдың һүҙлек составы**

| | Ауыл һөйләшендәге һүҙҙәр | әҙәби телдә (йә уның аңлатмаһы) | русса |
|---|---|---|---|
| 1. | **Туғанлыҡ, кәрҙәшлек терминдары** | | |
| | Әсәй | әсәй | мама |
| | Олатай | әсәйҙең атаһы | дедушка |
| | Олатай | атайҙың атаһы | дедушка |
| | Өләсәй | әсәйҙең әсәһе | бабушка |
| | Өләсәй | атайҙың әсәһе | бабушка |
| | Инәй | әсәйҙең, атайҙың апайы | тётя |
| | Апа | әсәйҙең, атайҙың ағаһы | дядя |
| | һеңле | әсәй, атайҙың ҡыҙы (2-се быуын) | сестренка |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | ҡусты | әсәй, атайҙың улы (2-се быуын) | братишка |
| | ҡыҙым | әсәй, атайҙың балаһының ҡыҙы (3-сө быуын) | племяница |
| | улым | әсәй, атайҙың балаһының улы (3-сө быуын) | племянник |
| | Килен | улының ҡатыны – **килен** | невестка |
| | Кейәү | ҡыҙының ире – **кейәү** | зят ь |
| | Ҡәйнә | ирҙең әсәһе – **ҡәйнәм** | свекровь |
| | Ҡәйнә | ҡатындың әсәһе – **ҡәйнәм** | теща |
| | Исеме менән | Һеҙҙең яҡта ҡатын кеше иренә ҡайһылай тип өндәшә? | |
| | Кейәүегеҙ | Һеҙҙең яҡта ҡатын кеше ире тураһында һөйләгәндә уны кем тип әйтә? (Миҫал: минең ирем, хәләл ефетем, кейәүегеҙ ...һ.б.) | |
| | ҡайынбикә | иренең апайы уға кем була? | |
| | ҡайынбикә | ҡатының апайы уға кем була? | |
| | ҡайнаға | иренең ағаһы уға кем була? | |
| | ҡайнаға | ҡатының ағаһы уға кем була? | |
| | апһындар | бер туған ағалы-ҡустының ҡатындары бер-береһенә ҡарата кем була? | |
| | | һ.б. (артабан үҙегеҙ тултырығыҙ) | |
| | бикәс | Ирҙең һеңлеһе | |
| | балдыҙ | Ҡатындың | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | һеңлеһе | |
| | ҡәйнеш | Ирҙең дә ҡатындың да ҡустыһы | |
| | бәпәй | Бәләкәс балаға кем тип әйтәләр? (бәпес, сабый, тәнәй) Әллә уларҙың һәр береһенең айырым мәғәнәһе бармы? | |
| | Бала тапҡан | Ҡатын кеше бәпес тапһа, ул ... (нимә тиҙәр?) | родила |
| | буйҙаҡ | Өйләнмәгән егет | |
| | ижәб | никах | |
| 2 | **Ботаникаға ҡараған терминдар** | | |
| | ҡайын | ҡайын | береза |
| | ҡарағас | | лиственница |
| | ҡарағай | ҡарағай | сосна |
| | шыршы | шыршы | елка |
| | тал | тал | ива |
| | ерек | ерек | ольха |
| | муйыл | муйыл | черемуха |
| | алмағас | алмағас | яблоня |
| | ҡарағат | ҡарағат | смородина |
| | әберсә | ҡурай еләге | малина |
| | көртмәле | | черника |
| | бүре емеше | ҡыуаҡлыҡ, ҡара емештәр була. Уларҙы ашарға ярамай. | |
| | уһаҡ | уҫаҡ | осина |
| | йүкә | йүкә | липа |
| | балан | балан | калина |
| | бөрлөгән | бөрлөгән | ежевика |
| | Турғай еләге | Ҡайын еләге | |
| | Ер еләге | | земляника |
| | Ҡымыҙлыҡ | балтырған һымаҡ | |
| | ҡуҙғалаҡ | ҡуҙғалаҡ | щавель |
| | Ҡарға | ҡуян тырнағы | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | буҡкаһы | | |
| | кәртүк | картуф | картошка |
| | әгүрсә | ҡыяр | |
| | Кәбеҫтә | кәбеҫтә | капуста |
| 3 | **Йорт-кура, ҡаралды терминдары** | | |
| | тартма | тартма | ящик |
| | ҡапҡа | ҡапҡа | забор |
| | ишек алды | ишек алды | двор |
| | яҫтыҡ | мендәр | подушка |
| | юрған | юрған | одеало |
| | һарай | һарай | сарай |
| | түбәлек аҫты | көндөҙ мал тора торған урын | |
| | баҡса | баҡса | сад |
| | Огорот (картуф баҡсаһы) | картуфлыҡ | огород |
| | утынлыҡ | утын һаҡлана торған урын | |
| | мунса | мунса | баня |
| | Эләүкә | | |
| | түбә | түбә | потолок |
| | кәрниз | Ҡыйыҡ аҫты | карниз |
| 4 | **Йылға, күл, ландшафт (географик терминдар** | | |
| | кисеү | кисеү | брод |
| | һаҙ | һаҙ | болото |
| | шишмә | шишмә | шишма |
| | тау итәге | | подножье горы |
| | һөҙәк | бейек булмаған урын | |
| | күпер | күпер | мост |
| | сауҡалыҡ | сауҡалыҡ | березняк |
| | сабынлыҡ | бесәнлек | покос |
| | үҙәк | | |
| | ялан | | поле |
| | туғай | болон, йылға буйындағы урын | луг |
| | баҫыу | баҫыу | поле |
| 5 | **Транспорт терминдары** | | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | ат арбаһы | | |
| | күреп | Ат санаһына муйылдан үреп, ышыҡ булһын өсөн ултырталар. (Видеояҙма бар) | |
| | машина | машина | автомобиль |
| | матай | мотоцикл | мотоцикл |
| | виләсәпид | велосипед | велосипед |
| | | | |
| 6 | **Йөн, дебет эшкәртеү** | | |
| | кейеҙ | кейеҙ | войлок |
| | дебет | кәзә йөнө | |
| | орсоҡ | Йөн иләгес | веретено |
| | ҡабанан тарттырыу | Йөнгә форма биреү | |
| | йөн сиратыу | Иләнгән йөндө ике ҡат итеп уратыу | |
| | аяҡтау | иләнгән йөндө аяҡҡа урау | |
| | йөн тетеү | | |
| 7 | **Кейем-һалым терминдары** | | |
| | кәпәс | башлыҡ | шапка |
| | шарф | шарф | шарф |
| | теүәтәй | түбәтәй | |
| | күлдәк | күлдәк | мужская рубашка |
| | күлдәк | күлдәк | женское платье |
| | салбар | салбар | брюки |
| | яулыҡ | яулыҡ | платок |
| | тун | тун | шуба |
| | сабата | сабата | |
| | итек | итек | сапоги |
| | калуш | калуш | галоши |
| 8 | **Ашамлыҡ-эсемлек терминдары** | | |
| | ҡорот | ҡорот | курут |
| | ҡымыҙ | ҡымыҙ | кумыс |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | айран | ҡоротто һыуға иҙеп эсеү | |
| | эремсек | эремсек | творог |
| | тултырма | тултырма | колбаса |
| | ҡаҙы | ҡаҙы | |
| | йыуаса | | лепешка |
| | сәк-сәк | сәк-сәк | Чак-чак |
| | бәлеш | бәлеш | пирог |
| | белмән | билмән | пельмени |
| | һалма | ромб формаһында ҡырҡылған | |
| | бишбармаҡ | | |
| | туҡмас | оҙонса ҡырҡылған һалма | лапша |
| | ыумас | | |
| | өйрә | | |
| 9 | | **Ҡашығаяҡ, һауыт-һаба** | |
| | батман | Ҡымыҙ бешер өсөн һауыт | |
| | ижау | сүмес | ковшик |
| | туҡмас таяҡ | уҡлау | скалка |
| | тәрилкә | тәрилкә | тарелка |
| | сеүәтә | тәрән тәрилкә | |
| | сынаяҡ | | чашка |
| | кәсә | | чашка |
| | самауыр | | самовар |
| | ҡомған | сәйнүк | чайник |
| | табаҡ | | |
| | кәстрүл | | кастрюля |

Ауылдың һүҙлек составын тикшереп сыҡҡандан һуң, ауыл теленең әҙәби телдән әллә ни айырылмай икәнен күҙәтеп була. Әммә шулай ҙа, айырма күрергә мөмкин: мәҫәлән: ҡурай еләген беҙҙә *әберсә* тип йөрөтәләр, сәйнүк –*комған* уҫаҡ ағасы – *уһак*, *огорот* – картуф баҡсаһы, *кәрниз* – ҡыйыҡ аҫты, *әләүкә, әгүрсә* һ.б.

Ҡайһы бер туғанлыҡ терминдарына килгәндә лә әҙәби телдән айырмалыҡтар күрергә мөмкин. Мәҫәлән: әсәйҙең, атайҙың ағаһын беҙҙә ***апа*** тип йөрөтәләр.

Тағы ла әҙәби телдә бөтөнләй осрамаған һәм башҡа халыҡ ҡулланмаған бер һүҙ бар. Ул – **күреп**. *Ат санаһына муйылдан үреп, ышыҡ булһын өсөн ултырталар.* **Күреп** *ауыл халкының алмаштырғыһыҙ ярҙамсыһы.*

**Фонетик үҙенсәлектәр:**

**А** өнө тамаҡ төбө менән, ҡаты итеп әйтелә: *аҡ, атлай, ағас* һ.б.

Ҡайһы ваҡыт өндәр араһында сиратлашыу осрай:

Мәҫәлән: Һ-ҫ: *уһаҡ-уҫаҡ*; Б-Ү: *түбәтәй-теүәтәй.*

Урыҫ теленән үҙләштерелеп, калькалаштырып әйтелгән һүҙҙәр ҙә осрай: *огорот* – картуф баҡсаһы, *кәрниз*-ҡыйыҡ аҫты, *әгүрсә*-ҡыяр.

Протеза куренеше: Ләүкә – *эләүкә*

Элизия күренеше лә бик йыш осрай: бара алмайым-баралмайым, килә алам – *килалам*, алып кил – *апкил*, алып сыҡ –*апсыҡ* һ.б.

Ҡайһы бер ижектәрҙең төшөп ҡалыуын күҙәтергә мөмкин: ҡайһылай – *ҡалай*, киткәнһең-*киткәнең*

**Морфологик үҙенсәлектәр:**

Күплек төшөнсәһе *лар-лар, ҙар-ҙәр, тар-тәр, дар-дәр* ялғауҙары буталып бирелә: *кыҙлар* – ҡыҙҙар, *малайлар* – малайҙар, *баллар* –балалар, *әбейләр*-әбейҙәр, *бабайлар* – бабайҙар.

Иркәләүҙе, кесерәйтеүҙе белдереү өсөн *ҡай-кәй* ялғауҙарын ҡулланалар: *әсәкәйем,атаҡайым, балаҡай, малкай* һ.б.

Алмаштар: *мин, һин, ул, беҙ, һеҙ, улар.*

**Хайуандарҙы саҡырған ымлыҡтар:** Һыйыр: һәү-һәү; Быҙау: зәб-зәү-зәү; Һарыҡ: бәр-бәр; Кәзә: кезе-кезе-кезе; Тауыҡ: тип-тип-тип; Ҡаҙ: геле-геле; Өйрәк: утю-утю-утю.

Хайуандарға беҙҙең ауылда түбәндәге исемдәрҙе бирәләр:

**Һыйыр малы:** *Зойка*-урыҫ исеме Зоянан ҡыҫҡартып алып ҡушылған исем; *Майка* – май айында тыуған һыйыр малына ҡушыла; *Мартик* – март айында тыуған һыйыр малына ҡушыла; *Мишка* – урыҫ исеме Михаилдан ҡыҫҡартып алынған исем Үгеҙ малына ҡушалар; *Күбәләк* – бер нисә төҫтә булған һыйыр малына ҡушалар һ.б.

Һыйыр малына күберәк урыҫ теленән ҡыҫҡартып алынған исемдәр бик күп осрай. Шулай уҡ ниндәй айҙа тыуына ҡарап иркәләү-кесерәйтеү ялғауҙары ҡушылып килеп сыҡҡан исемдәр ҙә күп.

**Аттар:** *Толпарат* – аттың тоҡомона ҡарап ҡушалар; *Ҡашка* – төҫөнә ҡарап кушалар; *Йондоҙ* – маңлайында йондоҙға оҡшаған һүрәт булғаны өсөн; *Турат*-төҫөнә ҡарап ҡушалар.

**Эттәр:** *Аҡтуш* –түше аҡ булған өсөн; *Аҡтырнаҡ* – тырнаҡтары аҡ төҫтә булған өсөн; *Муйнаҡ* – муйыны аҡ; *Алабай* – ала төҫтә булған өсөн; *Тузик* – эттәр араһында иң киң таралған ҡушамат. Кәрт исеменән, йәғни туз һүҙенә иркәләү-кесерәйтеү ялғауы ҡушылған.

**Бесәйҙәр:** *Мурка* – урыҫ теленән “мур-мур” тигән һүҙҙән килеп сыҡҡан. *Мыраубикә* – иркәләтеп бирелгән ҡушамат, мырау + бикә.

Хайуандарға бирелгән ҡушаматтарҙы күҙәтеп сыҡҡандан һуң улар араһында урыҫ теленән килеп ингән исемдәрҙең күп икәнен белдек. Шулай уҡ һәр исемгә тиерлек иркәләү ялғауҙары ҡушыла. Был халыҡтың мал йәнле булыуын, уларға хөрмәт менән ҡарауын күрһәтә. Ысынлап та, мал элек-электән кешене туйындырыусы ла, кейендереүсе лә булған

**Текст өлгөһө**

**Мәктәп ишеге алдында**

– Һаумы, Әлфийә, һине йәй буйы күрмәнем, һағынып киттем.

– Сәләм, Гөлдәр. Ҡалай ҙурайып, матурайып киткәнең. Йә, Гөлдәр нисек ял итеп ҡайттың? Һайрап ебәр әле!

– О-о-о! Миңә йәйге ял шул тиклем оҡшаны, ҡала ситендәге лагерҙа булдым. Һин нисек ял иттең?

– Мин ней шуууул, өләсәйемә ауылға барҙым инде, бүтән нимәшләйем. Күңелле булды былай. Аръяҡ ҡыҙлары менән еләккә йөрөнөк, Ағиҙелгә һыу төшөргә йөрөнөк. Өләсәйемә баҡса үҫтерештем. Туйғансы әберсә, сейә, әгүрсә ашаным. Агарутҡа сығып өләсәй менән кәртүк утаныҡ. Кисен, мал ҡайтҡас ҡыҙлар, малайлар ҡырға сығып усаҡ яға торғайныҡ. Һиңә тегендә оҡшанымы?

– Ғәләмәт оҡшаны. Беҙ унда рәхәтләнеп һыу төштөк, ҡояшта ҡыҙындыҡ, яңы дуҫтар таптым.

– Ҡалай икебеҙҙең дә йәйге каникул шәп үткән икәндәбаһа. Улай булғас, беҙгә “4”, “5” генә уҡырға ҡала инде.

– Шулай шул, Ана, ҡыңғырау мәктәпкә саҡыра, киттекме?

– Киттек.

Шулай итеп, үҙен башҡорт тип иҫәпләгән һәр кеше үҙе тыуып үҫкән ерҙең тарихын белергә һәм киләсәк быуынға еткерергә тейеш.

**Информанттар:**

1. Шаһивәлиев Исмәғил Мөхтәр улы, 61 йәш, пенсионер, ауылдың элекке депутаты (ауыл тарихын һөйләне);
2. Шаһивәлиев Йәмил Мөхтәр улы, 56 йәш, ауыл депутаты (Ер-һыу атамаларының тарихын һөйләне);
3. Шаһивәлиева Әминә Әхмәт ҡыҙы, 50 йәш, клуб мөдире (Һүҙҙәр).

**Әбделмәнов Филүз Илмир улы**

Фәнни етәксеһе: **Таһирова Зөлфирә Рауил ҡыҙы**

## ЙЫЛАЙЫР РАЙОНЫ СӘЛӘХ АУЫЛЫ ҺӨЙЛӘШЕ

Бөтә кешегә лә үҙ тыуған ере ғәзиз, ҡәҙерле. Ҡайҙа ғына йөрөһә лә, йәшәһә лә ул бер ҡасан да телен, ғөрөф- ғәҙәттәрен, йолаларын онотмай. Әммә иҫләп, күңел түрендә яҡты хәтирәләр һаҡлау ғына туған телде киләсәк быуынға еткереү тигән һүҙ түгел. Әгәр һинең балаларың икенсе телдә уҡыһа, өйҙә, мәктәптә бөтөнләй башҡорт телендә аралышыу юҡ икән һинең тамырың, шәжәрәң ҡорорға ла күп ҡалмай, телебеҙ генә түгел, йолаларыбыҙ, тарихыбыҙ юҡҡа сығасаҡ. Икенсе быуынға телебеҙҙе нисек бар шулай еткереү – беҙҙең иңдә ятҡан изге бурыстарҙың береһе.

Йылайыр районы Сәләх ауылы Башҡортостан Республикаһының көньяғында урынлашҡан. Уға Сәләх Мортаев исемле кеше нигеҙ һалған. Сәләх ҡарттың йорто бөгөнгө көндә лә бар. Ауылда ни бары ике урам, оло урам-“Мортаев урамы”, икенсеһе – “Йәштәр урамы”. Ауылға нигеҙ һалыныуға 91 йыл.

Ауылыбыҙҙы Аҡбейек, Ҡаршытау тауҙары уратып алған. Ҡараһаҙ, Базыҡай йылғалары аға. Шағир Мотал Рәмов беҙҙең ауылға арнап “Ауылыма”тигән йыр яҙҙы.

Ауыл халҡының һөйләше Көньяҡ диалектҡа ҡарай. Үрҙә әйтелгән диалект Эйек- Һаҡмар, Дим һәм Урта һөйләштәрҙе үҙ эсенә ала. Беҙҙең райондан тыш Хәйбулла, Ейәнсура, Күгәрсен, Көйөргәҙе, Мәләүез, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Баймаҡ, Бөрйән, Стәрлебаш райондарының көньяҡ өлөштәрендә һәм Ырымбур, Куйбышев өлкәләрендә йәшәгән башҡорттарҙың теле ошо һөйләшкә ҡарай. Күренеүенсә, һөйләш бик ҙур территорияға таралған һәм ул Һаҡмар-Һүрәм, Эйек-Ашҡаҙар, Көйөргәҙе-Юшатыр һөйләшсәләренә бүленә. Сәләх ауылы халҡының һөйләше Һаҡмар-Һүрәм һөйләшсәһенә ҡарай.

## Фонетик үҙенсәлектәре

Сәләх ауылында тик башҡорттар ғына йәшәй. Урындағы һөйләш әҙәби телгә яҡын, әммә тап килеп бөтмәй. Мәҫәлән, беҙҙең ауыл халҡының телендә һүҙҙең башында тамаҡ төбө менән әйтелә торған **а** өнө бар, шулай уҡ **ҡ** өнө лә тамаҡ төбө менән ҡаты итеп әйтелә, мәҫәлән: ҡ(ъ)айнаға, а(ъ)лыҫта, а(ъ)птырай, ҡ(ъ)арындаш һ.б

Тағы ла уртала килгән **б** өнө **в** өнөнә, **ҙ** өнө **һ** өнөнә әйләнеп киткән осраҡтар бар: *бавай, әвей, аравыҙ, баравыҙ, ҙур-һур, ҙурайған- һурайған.*

## Морфологик үҙенсәлектәр

**–дар, -ҙар, -тар** кеүек күплек ялғауҙарында ла **л** өнө һаҡлана:

Талдар – таллар

Аттар – атлар

Һыйырҙар – һыйырлар

Тауҙар – таулар

Ҡыҙҙар – ҡыҙлар

Малайҙар – малайлар һ.б

*Атайың, әсәйең, ҡәртәсәйең, ҡартатайың* кеүек ҡәрҙәшлек терминдары ла ҡыҫҡартылып, *атаң, әсәң, ҡартаң, ҡәрсәң* тип әйтелә.

Раҫлауҙы белдергән ***бит*** бәйләүесе лә ***баһа*** тип алмаштырыла:

барҙым бит – барҙым да баһа

күрҙем бит – күрҙем дә баһа

ҡайттым бит – ҡайттым да баһа

килдем битү килдем дә баһа

әйттем бит – әйттем дә баһа һ.б

***Алып*** ҡылымының күп осраҡта ҡыҫҡартып әйтелеүе лә күҙәтелә:

Алып килде – әпкилде

Алып китте – әпкитте

Алып инде- әвинде
Алып бирҙе – әпирҙе
Алып ҡайтты – апҡайтты
Алып ташланы – апташланы
Алып барҙы – апарҙы

**-айыҡлар, -әйекләр, - дыҡлармы, - текләрме** ялғауҙары ла йыш ҡулланыла: *барайыҡлар, ҡайтайыҡлар, әйтәйекләр, ҡуҙғалайыҡлар, бешерәйекләр, ҡатнашайыҡлар, киттекләрме, ҡуҙғалдыҡлармы* һ.б

**Һөйләштең һүҙлек составы**

| ***Туғанлыҡ, ҡәрҙәшлек терминдары*** | | |
|---|---|---|
| Сәләх ауылы һөйләшендә | Әҙәби телдә (йә уның аңлатмаһы) | Рус телендә |
| Әсәй | Әсәй | Мама |
| Атай | Атай | Папа |
| Апай | Апай | Сестра |
| Ағай | Ағай | Брат |
| Һеңле | Һеңле | Младшая сестра |
| ҡусты | ҡусты | Младший брат |
| Ҡәртәсәй | Атайҙың әсәһе | Бабушка по линии отца |
| Өләсәй | Әсәйҙең әсәһе | Бабаушка по линии мамы |
| Ҡартатай | Ҡартатай (атайҙың, әсәйҙең атаһы) | Дедушка |
| Олатай | Атайҙан, әсәйҙән оло кеше | Дядя |
| Инәй | Атайҙан, әсәйҙән оло кеше | Тетя |
| Кейәү | Ҡыҙының ире | Жених |
| Килен | Улының ҡатыны | Невестка |
| Еҙнәй | Еҙнә. Апайҙың ире | Зять |
| Еңгәй | Еңгә. Ағайҙың ҡатыны | Сноха |
| Бейем | Ирҙең әсәһе | Свекровь |
| Ҡәйнә | Ҡатындың әсәһе | Теща |
| Ҡайны | Ирҙең, ҡатындың атаһы | Свекровь |
| Ҡайынбикә | Ҡәйенбикә (ҡатындың апаһы ) | Сестра мужа |
| Ҡайнаға | Ҡайнаға (ирҙең, ҡатындың ағаһы) | Брат жены или мужа |
| Бикәм | Ирҙең апаһы | Сестра мужа |
| Апһын, | Ағай-ененең | Жены братьев |

| | | |
|---|---|---|
| килендәш | ҡатындарыбер-береһенә | |
| Ҡәйнеш | Ирҙең, ҡатындың ҡустыһы | Младший брат мужа, жены |
| Бикәс | Ирҙең һеңлеһе | Младшая сестра мужа |
| Балдыҙ | Ҡатындың һеңлеһе | Младшая сестра жены |
| Ейәнсәр, ейән | Ейәнсәр, ейән | Внук, внучка |
| Бүләсәр | Бүләсәр | Правнучка |
| Кейәү үңгәре | Кейәү егетенең яҡын дуҫы, иптәше | Друг жениха |

| **Йорт- ҡура, һауыт- һаба терминдары** | | |
|---|---|---|
| Сәләх ауылы һөйләшендә | Әҙәби телдә (йә унық аңлатмаһы) | Рус телендә |
| Усаҡлыҡ | Аласыҡ (йәй көнө йәшәй торған өй) | Летник |
| Кәртә | Һарай (мал- тыуар тора торған йорт ) | Сарай |
| Келәт | Келәт (иген, аҙыҡ-түлек тота торған йорт) | Клеть |
| Ишек алды | Ихата | Двор |
| Ҡапҡа | Ҡапҡа | Ворота |
| Кетәк | Кетәк, тауыҡтар торған йорт | Курятник |
| Туфалта | Күтәрмә | Лестница |
| Утынлыҡ | Утын һала торған урын | Дровник |
| Атлыҡса | Утлыҡса. Малға бесән һала торған урын | Сарай для лошадей |
| Аяҡ | Табаҡ | Большой таз |
| Бәләкәй сәйнүк | Баҡырса | Чайник для заварки |
| Бәләкәй ҡалаҡ (бәләкәйғалаҡ) | Балғалаҡ | Чайная ложка |
| ҙур ҡалаҡ (ҙурғалаҡ) | Аш ҡалағы | Большая ложка |
| Балауник | Аш һала торған ҙур ҡалаҡ | Паловник |
| Уклау | Туҡмас таяғы | |
| **Аш- һыу терминдары** | | |
| Ойотмос | Ойотҡо | Кефир |

| | | |
|---|---|---|
| Икмәк башы | Әсетке (икмәк әсетеү өсөн) | Дрожжи |
| Май бешеү | Май яҙыу | |
| Ҡаҙы | йылҡы малының эс, ҡабырға ите өҫтөнә үргән майын эсәктәргә тултырып әҙерләнгән ашамлыҡ | Домашняя кониная колбаса |
| тултырма | үпкә, бауырҙы (*ит үткәргес аша үткәрелә*) эсәккә тултырып эшләнгән ашамлыҡ | Домашняя говяжая колбаса |
| **Кейем-һалым терминдары** | | |
| йөнойоҡ | ойоҡбаш | Шерстяные носки |
| Көртөй | Еңһеҙ, яғаһыҙ кейем | Безрукавка |
| бутый | Балалар өсөн аяҡ кейеме | Детская обувь |
| Сүсиңкә | Калуш кейҙерелгән быйма | Валенки с голошами |
| Һырыған салбар | Мамыҡ ыштан | Ватные штаны |

**Хайуан, ҡош-ҡортто саҡырыу:**

Тип-тип-тип – тауыҡтарҙы саҡырыу
Гил-гил-гил – ҡаҙҙарҙы саҡырыу
Зәб-зәб-зәү – быҙауҙырҙы саҡырыу
Кәз-кәз-кәз – кәзәләрҙе саҡырыу
Бәр-бәр-бәр – һарыҡтарҙы саҡырыу
Һәү-һәү-һәү – һыйырҙарҙы саҡырыу

## Лексик үҙенсәлектәр

Ваҡыт үтеп, заманалар үҙгәрә бара. Беҙҙең ерлегебеҙгә генә хас ауыл һөйләше, йолаларыбыҙҙа яйлап юҡка сыға бара. Күп кенә йолалар ябайлаштырып, ҡыҫҡартылып, урыҫсалаштырып үткәрелә башланы. Беҙ үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, телебеҙҙе, тарихыбыҙҙы юҡка сығарабыҙ. Был эҙләнеү эшен атҡарған ваҡытта, ауыл ағинәйе Ғәлиә инәй Таһированан (1948 й.), Мәүзиә инәй Таймаҫованан (1933й. ) таҡмаҡтар, йолалар яҙып алынды, ҡара һағыҙ ҡайнатыу тәртибе видео яҙмаға төшөрөлдө. Ауылым һөйләшен яҡшыраҡ күҙаллар өсөн яҙмаларыбыҙҙы һөйләш формаһында бирәбеҙ.

## Туй йолаһы тураһында

1. **Һоратыу йолаһы**. Егеттең яҡын ағайы менән еңгәйе ҡыҙ яғына бөтә булған нескәлекләр тураһында кәңәшләшергә бара. Бата, туй көнө билдәләнә, ике яҡтан да нисә пар ҡунаҡ саҡырылыуы, туйҙың нисә көн дауам ителеүе, ниндәй йолалар атҡарыласағы тураһында һөйләшелә.

2. **Әйттереү, бата (никах) йолаһы.** Егеттең ата-әсәһе, яҡын туғанлары ҡыҙ яғына бара. Никах уҡыла. Беҙҙең яҡта ҡоҙа-ҡоҙағыйлар менән күлдәк кейҙерешеү, бүләкләр бирешеү йолалары һаҡланып ҡалған. Ҡыҙҙың яҡын ике еңгәйе ҡатнаша. Еңгәйләр буласаҡ киленде береһенең йортона йәшерәләр. Кейәү егет, кейәү үңгәре, туғанлары менән ҡыҙҙы эҙләйләр. Махсус әҙерләнгән, икенсе еңгәйҙең йортона барып, йыртыш йыртыу, кейәү менән киленде ҡушыу йолаһы атҡарыла. Иртәгеһенә ауыл ҡатын-ҡыҙлары өсөн кейәү сәйе эсереү ойошторола, унда кейәү яулығы, балаларға еҙнәй бүләге өләшелә.

3. **Туй йолаһы.** Иң беренсе ҡыҙ яғында үтә. Уларҙы законлы теркәү ойошторола. Кейәү егете ҡыҙҙы оҙатып ала. Ауылдан сыҡҡанда кейәү тинлекләр, кәнфитләр һивеп китә.

Ҡаршы алғанда киленде аҡ яҫтыҡҡа уң аяғы менән төшөрөп алалар, буласаҡ бейем килененә: “Телең майҙай йомшаҡ, һүҙең балдай татлы булһын,” – тип май һәм бал ҡаптыра. Иң яҡын бикәс еңгәнең билен сисә. Килен кеше алдынан оло берәү бойҙай һибеп, теләкләр теләп бара. Егет яғында килендең һандығын һатывалыу, һыу юлы күрһәтеү (иң оло бикәсе һыу башлай), килен һыуы һатыу, килен һөйөү кеүек йолалар атҡарыла. Туй тамамланғас, ауылдың ҡатынларын, әбейләрҙе йыйып килен сәйе эсерелә, килен яулығы, еңгәй бүләге өләшелә.

4. **Балаға исем ҡушыу.** Бала оҙаҡ ваҡыт исемһеҙ ятырға тейеш түгел. Әсә менән бала өйгә ҡайтып, аҙна-ун көн ял итеп нығынғас, яҡын туғанлар, күрше- күлән саҡырыла. Йәш бәпәйҙе буш ҡул менән күреү тыйыла. Мулла тейешле аятты уҡығандан һуң, йомшаҡ яҫтыҡ өҫтөндә ятҡан балаға ата- әсәһе һайлаған исемде ҡолағына өс тапҡыр ҡысҡыра. Ҡәртәсәй, өләсәйҙәр бәпәй бүләге өләшәләр. Аҙаҡтан байрам табыны ҡорола.

5. **Әйенсеңәү.** Ураҙа айының иң һуңғы, йәғни Айыт көнөндә ауылдың бәләкәс кенә балалары күрше-күләнгә инеп байрам менән ҡотлап, һаулыҡ, байлыҡ, муллыҡ кеүек изге теләктәр теләй. Ә ололар үҙ йәһәтенән, балаларға тәмлекәс тоттора. Был йола беҙҙең ауылда бөгөнгө көндә лә дауам итә.

6. **Урам таҙартыу.** Был эш яҙлы-көҙлө генә түгел, ә ҡара яҙҙан, һалҡын көҙгә тиклем көн һайын башҡарыла. Был күренеш башҡа бер ауылда ла күҙәтелгәне юҡ. Һарыҡ, һыйыр көтөүен оҙатҡас, ауыл ҡатынлары, ирләре һур һеперткеләр, көрәк менән сығып асфальт түшәлгән оло юлды һепереп, ҡырып таҙалайлар. Ә ҡыш көнө ир-егеттәр ҡапҡа алдарын иркен, яҫы итеп көрәп ҡуялар. Был тик беҙҙең ауылдың ғына ғәҙәтенә ингән шөғөл.

Сәләхләрҙә ҡаҙ өмәһе, һуғым һуйыу, ҡарға бутҡаһы, кәкүк сәйе кеүек йолалар, ғөрөф- ғәҙәтләр бөгөнгө көндә лә үтәлеп килә. Ауылывыҙ күрке булған ысын самолет янында 1 май көнө йыл һайын йәрминкә ойошторола.

Ауылда мәйет булған йортҡа, ҡыҙ бирә торған ғаиләгә ауылдашлар ярҙам йөҙөнән яулыҡ, ҡулъяулыҡ, күҙ һавыны кеүек әйберләр апаралар.

**Әҙәби телдәге варианты**

**Туй йолаһы тураһында**

1. **Һоратыу йолаһы.** Егеттең яҡын ағаһы менән еңгәһе ҡыҙ яғына бөтә булған нескәлектәр тураһында кәңәшләшергә бара. Бата, туй көнө билдәләнә, ике яҡтан да нисә пар ҡунаҡ саҡырылыуы, туйҙың нисә көн дауам ителеүе, ниндәй йолалар атҡарыласағы тураһында һөйләшелә.

2. **Әйттереү, бата (никах) йолаһы.** Егеттең ата- әсәһе, яҡын туғандары ҡыҙ яғына бара. Никах уҡыла. Беҙҙең яҡта ҡоҙа- ҡоҙағыйҙар менән күлдәк кейҙерешеү, бүләктәр бирешеү йолалары һаҡланып ҡалған. Ҡыҙҙың яҡын ике еңгәһе ҡатнаша. Еңгәләр буласаҡ киленде береһенең йортона йәшерәләр. Кейәү егет, кейәү үңгәре, туғандары менән ҡыҙҙы эҙләйҙәр. Махсус әҙерләнгән, икенсе еңгәнең йортона барып, йыртыш йыртыу, кейәү менән киленде ҡушыу йолаһы атҡарыла. Иртәгеһенә ауыл ҡатын- ҡыҙҙары өсөн кейәү сәйе эсереү ойошторола, унда кейәү яулығы, балаларға еҙнәй бүләге өләшелә.

3. **Туй йолаһы.** Иң беренсе ҡыҙ яғында үтә. Уларҙы законлы теркәү ойошторола. Кейәү егете ҡыҙҙы оҙатып ала. Ауылдан сыҡҡанда кейәү тинлектәр, кәнфиттәр һибеп китә.

Ҡаршы алғанда киленде аҡ яҫтыҡҡа уң аяғы менән төшөрөп алалар, буласаҡ бейем килененә: “Телең майҙай йомшаҡ, һүҙең балдай татлы булһын,”-тип май һәм бал ҡаптыра. Иң яҡын бикәс еңгәнең билен сисә. Килен кеше алдынан оло берәү бойҙай һибеп, теләктәр теләп бара. Егет яғында килендең һандығын һатып алыу, һыу юлы күрһәтеү (иң оло бикәсе һыу башлай), килен һыуы һатыу, килен һөйөү кеүек йолалар атҡарыла. Туй тамамланғас, ауылдың ҡатындарын, әбейҙәрҙе йыйып килен сәйе эсерелә, килен яулығы, еңгәй бүләге өләшелә.

4. **Балаға исем ҡушыу.** Бала оҙаҡ ваҡыт исемһеҙ ятырға тейеш түгел. Әсә менән бала өйгә ҡайтып, аҙна-ун көн ял итеп ныҒынғас, яҡын туғандар, күрше- күлән саҡырыла. Йәш бәпәйҙе буш ҡул менән күреү тыйыла. Мулла тейешле аятты уҡығандан һуң, йомшаҡ яҫтыҡ өҫтөндә ятҡан балаға ата- әсәһе һайлаған исемде ҡолағына өс тапҡыр ҡысҡыра. Ҡәртәсәй, өләсәйҙәр бәпәй бүләге өләшәләр. Аҙаҡтан байрам табыны ҡорола.

5. **Әйенселәү.** Ураҙа айының иң һуңғы, йәғни Айыт көнөндә ауылдың бәләкәс кенә балалары күрше- күләнгә инеп байрам менән ҡотлап, һаулыҡ, байлыҡ, муллыҡ кеүек изге теләктәр теләй. Ә ололар үҙ йәһәтенән, балаларға тәмлекәс тотторa. Был йола беҙҙең ауылда бөгөнгө көндә лә дауам итә.

6. **Урам таҙартыу.** Был эш яҙлы- көҙлө генә түгел, ә ҡара яҙҙан, һалҡын көҙгә тиклем көн һайын башҡарыла. Был күренеш башҡа бер ауылда ла күҙәтелгәне юҡ. Һарыҡ, һыйыр көтөүен оҙатҡас, ауыл ҡатындары, ирҙәре ҙур һеперткеләр, көрәк менән сығып асфальт түшәлгән оло юлды һепереп,

ҡырып таҙалайҙар. Ә ҡыш көнө ир- егеттәр ҡапҡа алдарын иркен, яҫы итеп көрәп ҡуялар. Был тик беҙҙең ауылдың ғына ғәҙәтенә ингән шөғөл.

**Таҡмаҡтар**

(Һуғыштан һуңғы аслыҡ йылдарында сығарылған).

Ал да була, гөл дә була
Кәрешкәнең сәсәге.
Һис бер кемгә күренеп килмәй,
Бәндәнең киләсәге.

Ал булғансы гөлдәр булһам,
Һыулар һиверләр ине.
Сабый саҡта үлгән булһам,
Һағынып һөйләрләр ине.
Уйыл диңгеҙ, уйыл диңгеҙ
Уйыл диңгеҙ мин төшәм.
Тормош ауыр йәшәп булмай,
Лутсы ағыулар эсәм.

**Мөхәббәт таҡмаҡтары**

Һандуғасым һайра әле,
Талларыңды киҫәләр.
Һикереп уттарға төшәрһең,
Һөйәгеңде һөйһәләр.

Һандуғас булалманым,
Талдарға ҡуналманым.
Йәйҙең матур көндәрендә
Яныңда булаламаным.

Өҫтәлдәге һары лимон
Һары май тейһең мәллә?
Үҙем шулай йөрөһәм дә,
Һағынмай тейһең мәллә?!

Алма бит ул матур була
Өҙөп алғанда ғына.
Дуҫың бит ул яҡын була
Сереӊ алғанда ғына.
Уфа тауы,Уфа тауы,
Уфа тауы юғары.
Маҡтанып хәлемде алма,
Артыҡ ереӊ юғәле.

**Шулай итеп,** беҙҙең ауыл һөйләше әҙәби һөйләшкә яҡын, тик айырмалар ярайһы ғына. Әлбиттә, һәр кемгә үҙ һөйләше яҡын, ҡәҙерле. Ошо эҙләнеү эшен башҡарғанда, миңә бигерәк тә оло быуын менән аралашыу оҡшаны. Сөнки, бер ауылда йәшәһәк тә, йәш быуын менән оло быуын

араһындағы һөйләштә лә айырма күҙәтелә. Мин был эшем киләсәк быуында ауылыбыҙ һөйләшенә, тарихыбыҙға, ҡәртәсәй, ҡартатайҙарыбыҙға ҡарата иғтибар, ихтирам тәрбиәләргә ҡарата йүнәлтелгән.

**Информанттар:**

Таһирова Ғәлиә Кинйәғәле ҡыҙы, 69 йәш, хеҙмәт ветераны.

Таймаҫова Мәүәзиә, 84 йәш, хеҙмәт ветераны.

**Ҡулланылған әҙәбиәт:**


1. Ишбулатов Н.Х. Башҡорт теле һәм уның диалекттары. – Өфө: “Китап”, 2000 й.
2. Максютова Н.Х. Башкирские говоры, находящиеся в иноязычном окружении. – Уфа: Башкирское издательство “Китап”, 1996 г.
3. Башҡорт теленең һүҙлеге: Ике томда / Россия Фәндәр Академияһы. Башҡортостан ғилми үҙәге.тар., тел һәм әҙ.институты. – М.:Рус.яз.,1993 й. (том I-II.)



**Әҙиәтов Илнар**

Фәнни етәксеһе: **Кайбышева Альбина Хәсән ҡыҙы**


## ЙЫЛҒА-КҮЛДӘР ҘӘ СЕР ҺАҠЛАЙ

Нуриман районы Ҡариҙел йылғаһының һул яҡ яры буйлап түбәнге ағымында урынлашҡан. Был район күлдәргә һәм йылғаларға, ҡуйы урмандарға, төрлө йәнлектәргә бай яҡ.

Ҙур йылғалар, ғәҙәттә, бәләкәй инештән хасил була. Әммә Нуриман районындағы Һарыуа (Саруа, Сәреүә) шишмәһе, киреһенсә, киң булып башлана. Ул башта Һалдыбаш, артабан Ҡариҙел йылғаһына ҡоя. Уның тәрәнлеге 45 метрлыҡ карст ҡойоһонан баш ала. Өҫтәүенә күлдә мәмерйә бар. Уның иң осонда ер аҫты шишмәһе сыға. Бындағы һыу температураһы ни бары 5 градус ҡына, 12 метр тәрәнлектә хатта таштар күренә. Башҡортостандың тәбиғәт ҡомарткыһы тип иғлан ителгән был күлде бигерәк тә һыу аҫтына сумыусылар, аквалангистар үҙ итә.

Шулай уҡ Нуриман районында урынлашҡан Ҡыҙыл шишмә федераль кимәлдә тәбиғәт ҡомарткыһы тип иғлан ителгән. Уның һыуы төрлө микроэлементтарға бай. Йылдың ниндәй генә миҙгеле булмаһын, бындағы һыу температураһы 5 градус йылылыҡта. Күптәр бында йәй көндәре барыуҙы яҡшыраҡ тип иҫәпләй, сөнки был миҙгелдә тәбиғәт бигерәк матур.

Һалдыбаш йылғаһы тураһында риүәйәт бар. Бик борон булған был хәл. Бер ауылда ярлы бер егет йәшәгән. Икенсе ауылда, шишмә күле ярында йәшәгән, ти, Һарыуа (Саруа, Сәреүә) исемле һылыуҡай. Көндөң бер көнөндә улар уйламаҫтан осрашалар һәм бер-береһенә ғашиҡ булалар. Улар өйләнешергә булалар. Әммә кәләштең яҡындары ярлы егет менән туғанлашырға теләмәйҙәр. Һәм ҡыҙҙы көсләп ауылдағы бер ҡарт, әммә бай

бабайға кейәүгә бирергә булалар. Һөйгәненә хыянат итмәҫ өсөн, ҡыҙ күлгә ташлана һәм батып үлә. Был хәлде ишетеп, егет һөйгәнен




эҙләп, йылға ағышы буйынса китә. Ике йылға ҡушылған ерҙә ул һөйгәнен таба. Ауыр юғалтыуға сыҙамай, егет үҙе һыуыҡ йылғаға ташлана һәм һөйгәнен ҡосаҡлап бата. Шулай итеп улар бергә мәңгелеккә ҡалалар. Хәҙер был йылғалар Һарыуа (Сәреүә) һәм Һалдыбаш (Башын һалды ) тип атала.

**Һарыуа**

Нуриман районы күлдәргә бик бай яҡ. Күл һыуын эсеп үҫкәнгәме, һәр кеше уны изге тип иҫәпләй. Нимесләр ауылы эргәһендә Оло күл дә, Упҡан күл дә Ҡаризел йылғаһының иҫке үҙәне. Оло күлдең  һыуы бик йомшаҡ. Оло күл, Упҡан күл, Мәсет-күл дә бер-береһе менән тоташҡандар, тиҙәр. Бер риүәйәт буйынса, Оло күлдә батҡан ат, күпмелер ваҡыт үткәс, Мәсет-күлендә килеп сыҡҡан, тиҙәр.

**Упҡанкүл**

Ҡамышлы күл – иң ҡурҡыныс, баһадир, шомло күл тип иҫәпләнә. Ҡамышлы күл тауыш сығара. Ололар әйтеүе буйынса, был күлдә бер үгеҙ батҡан. Күлдән һәр ваҡыт ниндәйҙер тауыш  сыға. Бала-сағаларҙы ата-әсәләре был күлгә ебәрмәйҙәр.

Ауыл халҡы һыу менән бәйле ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлай: һыу менән шаярмайҙар, һыуҙы ирештермәйҙәр, һыуға төкөрөү – ғөнаһ, һыуҙы алғанда, эйәһенән һорап алыу кәрәк, тип ышаналар. Күл  тураһында матур йырҙар ҙа сығарған халыҡ. Улар: «Күл буйына килһәң ине”, “ Һыу буйында усаҡ яна”, “ Их, дуҫҡайым кил әле”, “Түңәрәк күл”  һәм башҡа.

Мин Баймаҡ районында тыуһам да, Нуриман районына ҡайтып йөрөгәнгә күрә, ошо ике райондың һөйләшендәге айырмаларҙы йыш күҙәтәм. Көньяҡ диалектҡа Эйек-Һаҡмар һөйләше (Ейәнсура, Мәләүез, Баймаҡ районының көньяғы, Күгәрсен, Хәйбулла, Көйөргәҙе райондарында йәшәгән үҫәргән, ҡыпсаҡ, тамъян, түңгәүер ырыуы башҡорттары инә), бөрйән һөйләше (бөрйән ырыуы башҡорттары — Бөрйән районы), урта һөйләш

(Архангел, Ҡырмыҫҡалы, Белорет, Ишембай, Ғафури, Нуриман райондарына ҡараған табын, ҡатай, юрматы, тәлтем ырыуы башҡорттары инә), Дим һөйләше (Ауырғазы, Дәүләкән, Миәкә, Әлшәй, Бишбүләк, Нуриман райондарының көнбайышы, Федоровка, Стәрлебаш, Шишмә, Иглин райондарындағы мөңле, илкәй меңе, субы меңе, ҡырҡөйлө меңе һ. б. ырыу башҡорттары инә). Был диалектҡа Башҡортостандан ситтә Ырымбур өлкәһендә Александр, Гай, Красногвардейский, Ҡыуандыҡ, Новосергиевский, Октябрь, Переволоцк, Һарыҡташ, Төйләгән райондарында, Һамар өлкәһенән Большечерниговский, Большеглушицкий, Һарытау өлкәһенән Перелюб һәм Пугачев райондарындағы Һайылмыш, Һаҡмар, Туҡ, Соран, Ырғыҙ, Кәрәлек һәм Кәмәлек йылғалары буйында йәшәгән башҡорттарҙың һөйләштәре инә.

| Баймаҡ районындағы һөйләш | Нуриман районындағы һөйләш |
|---|---|
| әсәй | инәй |
| атай | әтей |
| өләсәй | нәнәй |
| олатай | бабай |
| апай | апа |
| ағай | абый |
| картуф | бәрәнге |
| һарай | аҙбар |
| икмәк | әпәй |
| һырға | алҡа |
| биҙрә | күнәк |
| ҡорған | пәрҙә |

Шулай итеп, йәшәгән ереңдең һөйләшен, йылға-күлдәренең, тау-таш атамаларының килеп сығышын өйрәнеү Тыуған ереңде яратырға өйрәтә, уның тарихына ҡыҙыҡһыныу уята.

**2017 йылда үткән конференцияның фотолары**






Ишкилде ауылы




ДИПЛОМ
СЕРТИФИКАТ
ДИПЛОМ



ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**Баш һүҙ** ........................................................................................................ 3
**Атауллина Лилиә Флюр ҡыҙы.** Белорет районы Йөйәк ауылының топонимдары........................................................................................... 4

**Батталов Батталов Айбулат Илгиз улы.** Бәндәбикә кәшәнәһе............................................................................................................. 11

**Боҫконова Юлиә Венер ҡыҙы.** Йылайыр районы Матрай ауылының урам исемдәре ………………………………………………… 14

**Вайсеева Карина** Илеш районы Баҙытамаҡ ауылының микротопонимдары……………………………………………………….. 18

**Ғарифуллина Наҙгөл.** Бөрйән районы Мәһәҙей ауылы тарихы,топонимдары................................................................................ 21

**Ғәлләмов Нурислам.** Белорет районының Асы ауылы — беҙҙең ғорурлыҡ............................................................................................................ 34

**Дауытова Гөлиә Ирек ҡыҙы. А**уырғазы районы Түрҫәгәҙе ауылы халҡының йәнле һөйләү теле............................................................... 39

**Ишмөхәмәтов Ғаян.** Бөрйән районы Ғәлиәкбәр ауылының ер-һыу атамалары……………………………………………………………….. 42
**Йомағолова Рәлиә, Ғәбдрәшитова Айһылыу.** Әҙәби тел менән Яңы Яуыш ауылы халҡы һөйләше араһындағы ҡайһы бер айырмалар........................................................................................... 46

**Кинйәғолова Сәлимә Фәнил ҡыҙы.** Исемең ни һөйләй?................................................................................................ 56

**Королева Д.С**. Топонимдар илендә — Учалының ете мөғжизәһе........................................................................................... 59

**Ҡадиров Руслан.** Төмәнәккәйем — тыуған төйәккәйем.................. 69

**Ҡаранаев Айназ Салауат улы.** Ғафури районының ер-һыу атамалары........................................................................................... 76

**Мамалимова Лиана Рим ҡыҙы.** Учалы — күлдәр иле....................... 80

**Моратова Лиза Азамат ҡыҙы.** Әбделкәрим ауылы һөйләше һәм ауыл халҡының ҡушаматтар…………………………..…………….. 84

**Мослахова Илһөйәр.** Шаран районы Салмалы ауылы тарихы һәм тәбиғи ҡомарҭҡылары.................................................................. 90

**Мостаева Таңсулпан Рәфид ҡыҙы.** Баймаҡ районы Шүлкә ауылының ер-һыу атамалары…………………………………………… 97

**Мөхәмәтйәрова Нурия.** Белорет районы Шығай ауылы тарихы...... 102

**Мәжитов Алмаз Ришат улы.** Күгәрсен районы Ерекле ауылы — беҙҙең кесе ватаныбыҙ.................................................................... 105

**Ниғәмәтова Зөлфиә.** Белорет районы Асы ауылындағы аралар……….. 107

**Сәхибгәрәева Элена.** Илеш районы Исәмәт ауылының топонимдары һәм диалект үҙенсәлектәре.......................................... 110

**Фазлыева Диана Радик ҡыҙы.** Дүртөйлө районы Иҫке Байыш ауылының ер-һыу атамалары................................................................ 122

**Фазылханов Радим Валериевич**. Башҡортостандағы ҡайһы бер ер-һыу атамалары тураһында................................................................ 126

**Цупикова Ангелина Федоровна**. Йөҙ йылыҡҡа — йөҙ бесәнлек............................................................................................. 129

**Шаһивәлиев Рәмис Йәмил улы**. Әбйәлил районы Ишкилде ауылының һөйләше ......................................................................... 136

**Әбделмәнов Филүз Илмир улы**. Йылайыр районы Сәләх ауылы һөйләше.......................................................................................... 147

**Әҙиәтов Илнар**. Йылға-күлдәр ҙә сер һаҡлай (*Нуриман районы миҫалында*) ........................................................................................ 155

ТЫУҒАН ЯҠ: ТОПОНИМДАР ҺӘМ
ҺӨЙЛӘҮ ТЕЛЕ

Диалектология һәм ономастика буйынса һәләтле уҡыусылар  ың
III Республика ғилми-ғәмәли конференция материалдары
23 март 2017 йыл

3-се йыйынтыҡ

РОДНОЙ КРАЙ: ТОПОНИМЫ И
РАЗГОВОРНЫЙ ЯЗЫК

Материалы III Республиканской научно-практической
конференции одарённых школьников
по диалектологии и ономастике
23 марта 2017 г.

Сборник № 3

Подписано в печать 26.09.17. Формат 60x84 $^{1}/_{16}$. Усл. п.л. 9,53.
Тираж 130 экз. Заказ № 170937.

Отпечатано в КП РБ Издательство «Мир печати»
450076, г.Уфа, Аксакова, 45
Тел.: 8 (347) 251-72-95